Министерство просвещения Российской Федерации
Федеральное государственное бюджетное образовательное учреждение
высшего образования
«Башкирский государственный педагогический университет
им. М. Акмуллы»
Министерство культуры Республики Башкортостан
Дом дружбы народов Республики Башкортостан

# ФОЛЬКЛОР И ФОЛЬКЛОРИСТИКА XXI В.: АКТУАЛЬНЫЕ НАПРАВЛЕНИЯ И ПЕРСПЕКТИВЫ ИССЛЕДОВАТЕЛЬСКИХ ПРАКТИК

**Материалы III Международной научно-практической конференции, посвященной 85-летию профессора А.М. Сулейманова**

(8 июня 2024 г., Уфа)

**Часть 2**

Уфа, 2024

УДК 398
ББК 82

Ф 75 ФОЛЬКЛОР И ФОЛЬКЛОРИСТИКА XXI В.: АКТУАЛЬНЫЕ НАПРАВЛЕНИЯ И ПЕРСПЕКТИВЫ ИССЛЕДОВАТЕЛЬСКИХ ПРАКТИК. Материалы III Международной научно-практической конференции (8 июня 2024 г., г. Уфа), посвященной 85-летию профессора БГПУ им. М. Акмуллы Сулейманова Ахмета Мухаметвалеевича (1939-2016). Ч.2. / ответ. ред. Р.А. Султангареева, сост. Г.Х. Бухарова, Н.А. Хуббитдинова, Л.И. Шарафитдинова, З.С. Аманбаева. – Уфа: Издательство БГПУ, 2024. –146 с. – ISBN 978-5-907730-80-9

Во вторую часть сборника вошли статьи учителей, студентов вузов Республики Башкортостан, а также учащихся муниципальных общеобразовательных школ – участников «Сулеймановских чтений» (Бурзянский район, 2024 г.). В сборник также включены методические разработки и конспекты образцов уроков учителей по башкирскому языку и литературе.

*Рекомендовано к изданию*
*Редакционно-издательским советом БГПУ им. М. Акмуллы*

Рецензенты
Л.А. Иткулова, доктор философских наук (УУНиТ)
Г.Р. Шагапова, кандидат исторических наук (БГПУ им. М. Акмуллы)

ISBN 978-5-907730-80-9

УДК 398
ББК 82

©Коллектив авторов, 2024

УДК 37.01.39

***Ғүмәрова Р. Ш.,***
*Әхмәт Сөләймәнов музейы директоры,*
*Бөрйән районы муниципаль*
*ресурс үҙәге ет.*
***Гумерова Р. Ш.,***
*директор музея Ахмета Сулейманова,*
*рук. Муниципального ресурсного центра*
*Бурзянского района*

# ИЗГЕ БӨРЙӘН ЕРЕНЕҢ ДАНЛЫ УЛЫ ӘХМӘТ СӨЛӘЙМӘНОВ ХЕҘМӘТЕ МӘҢГЕЛЕК

# БУДУТ ВЕЧНЫМИ ТРУДЫ СЛАВНОГО СЫНА СВЯЩЕННОЙ БУРЗЯНСКОЙ ЗЕМЛИ АХМЕТА СУЛЕЙМАНОВА

**Аннотация.** Выходец из Бурзянского района известный ученый-фольклорист Ахмет Сулейманов (1939-2016) многое сделал не только для отечественной науки, был известным общественным деятелем, но и всегда оставался предан своей малой родине – священной Бурзянской земле. Автором проводится мысль о том, что только такая богатая устно-поэтическому творчеству земля, как Бурзян, где родился эпос «Урал-батыр», связан с Акбузатом и другими эпическими героями могла дать таких фольклористов и видных ученых, как Мухтар Сагитов и Ахмет Сулейманов. Сегодня в районе поистине наследниками А.Сулейманова ведется большая работа по развитию, совершенствованию дел, связанных с сохранением фольклора, сказительского искусства. В этом деле самое активное участие принимают муниципальные районные школы.

**Ключевые слова:** Ахмет Сулейманов, видный ученый-фольклорист, наусное наследие, память, воспитание, школа, фольклор, эпос, патриотизм.

Йәш быуынға рухи, әхләҡи, илһөйәрлек кеүек юғары граждандлыҡ һыҙаттарын, халҡыбыҙҙың тарихын, мәҙәниәтен, көнкүрешен һәм халыҡ йолаларын, ауыҙ-тел ижадын белгән шәхес тәрбиәләү – бөгөнгө заман мәғариф һәм мәҙәниәт усаҡтарының иң мөһим бурысы. Бөрйән районында мәктәптәрҙә, тәрбиәүи усаҡтарҙа тыуған яҡты өйрәнеү иң алғы планға ҡуйыла. Оло быуын кешеләре менән бер рәттән, балалар, тыуған яҡ тарихын, унда йәшәгән халыҡтың үткәнен, тамырҙарын, үҙ ғаиләләренең, халҡының шәжәрәһен һәм йолаларын тәрәнтен өйрәнә.

Был тәңгәлдә, үрҙә әйтелгән эштәрҙе тормошҡа ашырыуҙа үҙебеҙҙең арҙаҡлы райондашыбыҙ Әхмәт Мөхәмәтвәли улы Сөләймәновтың шәхесе, унын күп һанлы хеҙмәттәре өлгө булып тора.

Халҡыбыҙҙың олуғ улы, башҡорт әҙәбиәте, мәҙәниәте белгесе, фольклорсы-ғалим, йәмәғәт эшмәкәре, башҡорт һәм, ғөмүмән, төрки донъяһы фольклористикаһында күренекле урын яулаған филология фәндәре докторы, М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты профессоры, Рәсәйҙең Гуманитар фәндәр академияһыһының тулы хоҡуҡлы ағзаһы, академик, Салауат Юлаев премияһы лауреаты, Салауат Юлаев ордены кавалеры, БР Фәндәр академияһының Почетлы академигы Башҡортостандың һәм Рәсәйҙең яҙыусылар Союзы ағзаһы Әхмәт Мөхәмәтвәли улы Сөләймәновтың тыуыуына март айында 85 йыл булыр ине.

Халыҡ ижадын, уны ғилми яҡтан өйрәнеүҙә Әхмәт Сөләймәновтың башҡарған эше сикһеҙ. Һәр саҡ эҙләнеүсән, баҫалҡы ғалим, изге күңелле, халҡыбыҙҙың аҫыл улы, алтынға бәрәбәр замандашыбыҙ, арҙаҡлы ғалимыбыҙ Әхмәт Сөләймәновтың яҡты иҫтәлеге беҙҙең йөрәктәрҙә мәңге һаҡланыр.

Районыбыҙҙа уҡыусылар менән тыуған яҡтың фольклорын өйрәнеү буйынса эш программаһы бар. Ошо программаны тормошҡа ашырыуҙа районда Әхмәт Сөләймәнов исемендәге музей янында ойошторолған “Урал батыр” мәктәбендә шәхесте үҫтереү маҡсатында күп яҡлы эш алып барыла: әңгәмәләр, дәрестәр, оҫталыҡ дәрестәре, экскурсиялар үткәрелә.

Бөгөнгө көндә республика кимәлендә танылыу алған райондағы күп яҡлы яҡшы эштәр алып барыусы Әхмәт Сөләймәнов исемендәге музей йәш быуынды тәрбиәләүҙә һәм оло быуын кешеләренең дә иғтибарын йәлеп итеп, уларҙың рухиәтен байытыусы булып тора. Музейҙар хәҙерге заман шарттарында яңы шәхес – XXI быуат кешеһен тәрбиәләүҙә ҙур роль уйнай.

Шулай уҡ нәшер ителгән райондың ҙур күләмле китап-энциклопедияһы һәм һәр бер ауылдың “Минең ауылым һәм уның арҙаҡлы шәхестәре” исемле китаптары бар. “Минең ғаиләм” бәләкәй энциклопедияларында балаларҙың ата-әсәһенең, олатай-өләсәләренең тормош юлын, тыуған урыны, Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашһа, ил алдындағы күрһәткән батырлыҡтары, яу юлдары, хәрби часы, ниндәй госпиталдә булғанлығы, наградалары тураһында мәғлүмәттәр бирелгән.

Районыбыҙ үҙәге – Иҫке Собханғол ауылында урынлашҡан Әхмәт Сөләймәнов исемендәге музей күп һанлы халыҡты үҙенә йәлеп итә.

Мәктәптәрҙә Әхмәт Мөхәмәтвәли улының тормошон, ижадын, эшмәкәрлеген өйрәнеү, уны яҡтыртыу буйынса күләмле эш алып барыла.

Әлбиттә, бындай эш йәш быуындың күңелендә илһөйәрлек тәрбиәләүҙә ҙур роль уйнай, халҡыбыҙ үткәне менән ғорурланыу тойғоһо уята.

Үткәнде өйрәнеү – киләсәкте төҙөү ул. Был тәңгәлдә районыбыҙҙа эштәр яҡшы ҡуйылған тип, ғорурланып әйтә алам.

Бөрйән – легендалар, эпостар, ҡобайырҙар төбәге. Ошо байлығыбыҙҙы, ҡомартҡыларыбыҙҙы һаҡлау, тәрәнәйтеп өйрәнеү һәм киләсәк быуындарға еткереү – беҙҙең төп бурыс. Киләсәктә Мөхтәр Сәғитов, Әхмәт Сөләймәнов кеүек шәхестәребеҙҙең эшмәкәрлектәрен дауам итерлек иманлы киләсәк булырына иманым камил. Бөрйәнебеҙҙә халҡыбыҙҙың бай, изге ҡомартҡылары һаҡланһын, артһын өсөн бөтә көсөбөҙҙө һалабыҙ.

Әхмәт Мөхәмәтвәли улының изге эше республикабыҙҙа дауам ителә. Кешенең күңел донъяһын тәшкил иткән ошо төшөнсәләр хаҡында беҙҙең тиңе булмаған бөйөк рухи ҡомартҡыбыҙ – “Урал батыр” эпосында:

Яҡшылыҡ булһын атығыҙ,<br>
Кеше булһын затығыҙ!<br>
Яманға юл ҡуймағыҙ,<br>
Яҡшынан баш тартмағыҙ! – тигән юлдар Урал батырыбыҙҙың һәр беребеҙ үтәһен өсөн әйткән васыяты яңғырап, өс көн дауамында мул һыулы Ағиҙелебеҙҙе сайҡалдырып, ҡаяларыбыҙҙы шаңғыратып, Башҡортостаныбыҙҙың йөҙөк ҡашы һаналған, сал тарихлы, гүзәл ерҙә, халыҡ ижады ынйыларын үҙендә туплаған, иң боронғо эпик ҡомартҡыларыбыҙҙың береһе – тәбиғәттең һәм кешелектең мәңгелеген данлаусы, халҡыбыҙҙың рухи хазинаһын, әҙәби мираҫын тәшкил иткән үлемһеҙ эпосыбыҙ батырының тәүтөйәге булған мөғжизәле, изге Бөрйән ерендә күңелдәргә үтеп инеүе быға асыҡ дәлил.

XXVII Төбәк-ара конкурсҡа ныҡлы әҙерлекле аяҡ баҫты конкурста ҡатнашыусы балаларыбыҙ.

Сара рухы менән һуғарылған киске ял программалары ҡатнашыусылар күңелендә иҫ киткес шәп тәьҫораттар ҡалдырҙы.

Ысынлап та, һәр һуҡмағы, һәр ташы тарих һөйләүе менән билдәле еребеҙ “Урал батыр”, “Аҡбуҙат”, “Бабсаҡ менән Күсәк” кеүек күп эпостарҙы тыуҙырған һәм батырҙарыбыҙҙың изге эҙен һаҡлаусы төбәгебеҙҙә бөгөн беҙ, билдәле шәхесебеҙ Әхмәт Мөхәмәтвәли улы Сөләймәновтың олуғ эшен дауам итеп, халҡыбыҙҙың милли мираҫын һаҡлап ҡалырға тырышып йәшәйбеҙ. Ә бит иң күп башҡорттар йәшәгән беҙҙең районыбыҙ демографик яҡтан

ҡарағанда ла республикабыҙҙа тәбиғи үҫеш яғынан милләтебеҙҙең һанын һаҡлаған районлар иҫәбендә һанала. Башҡа милләт вәкилдәре лә районыбыҙҙа башҡортса матур һөйләшә.

XXV тапҡыр үткәрелгән “Урал батыр” эпосын башҡарыусы йәш сәсәндәрҙең республика конкурсы халҡыбыҙҙың мәҙәниәтен һәм рухи мираҫыбыҙҙы үҫтереүҙә артабан да ҙур үҫешкә яңынан-яңы ҡанат ҡуйыр, ошо олуғ ҡиммәттәребеҙҙе һаҡлап ҡалыуға ныҡ булышлыҡ итер, ҡатнашыусылар һанын арттырыр, уларға яңынан-яңы мөмкинлектәр асыр, туризмды үҫтерер.

Шуныһы ҡыуаныслы: “Урал батыр вариҫтары” хәрәкәте, иң тәүгеләрҙән булып, Бөрйәндән баш алды. Әлеге көндә эпосты пропагандалау буйынса балалар белһен, өйрәнһен, күңеленә һеңдерһен өсөн ҙур өҙлөкһөҙ эштәр алып барыла. Ошоға үрелеп, “Урал батыр мәктәбе”, “Тәнәй Урал батырҙар”, “Өмөтлө киләсәк” проекттары уңышлы тормошҡа ашырыла, йылда ла “Беҙ – Урал батыр вариҫтары”, “Тамырым – башҡорт”, “Тәнәй Урал батырҙар” конкурстары даими ерлектә һөҙөмтәле үтә һәм балалар бик әүҙем ҡатнашалар, таратыу буйынса район – ҡалалар менән дә бәйләнешебеҙ көслө. Был олуғ эште ойоштороуҙа һәр ваҡыт ҡатнашыусыларҙы күтәрмәләп, иғтибар итеп, яҡлап, күҙ уңынан ысҡындырмайынса, матди яҡтан да, һүҙ менән дә үҫтереүгә дәртләндереп торған, ынтылыш биреүсе – районда үткән тәрбиәүи олуғ эштәргә йән өрөүсе райондың бшҡорт теле һәм әҙәбиәте укытыусылары, район хакимиәтенең, мәғариф бүлегенең ярҙамы баһалап бөткөһөҙ.

Балалар һәм йәштәр араһында Бөтә Рәсәй сәсәндәр конкурсында Әтек мәктәбенән Илмир Күжабаев лауреат исеме яуланы.

Халыҡ-ара фольклориада район өсөн яңылыҡ булманы. Фольклорҙың төйәге булараҡ, районлаштар ҙур әҙерлек менән был сараны ла ихлас ҡаршы алғайны. Балалар араһында йәш сәсәндәр Айназ Ғиззәтуллин, Шәүрә һәм Сулпан Манаповалар ошо мөһим сарала ҙур уңышҡа өлгәштеләр.

Хатта ике йәшлек балалар сәхнәлә сығыш яһап, юғары уңыштарға лайыҡ булдылар. Быға миҫал итеп, эпостан өҙөктәрҙе, апаһына эйәреп, матур ятлаусы еңеүсе – Ҡурғашлы балалар баҡсаһынан Фаягөл Аҫҡарованың исемен телгә алыу ҙа етә. Быйылғы төбәк-ара конкурста беренсе урын яулаусы Иҫке Монасип мәктәбе укыусыһы Исмәғил Йыһануров, билдәле сәсәниәбеҙ Розалиә Әсфәндиәр ҡыҙы Солтангәрәеваның оҫталыҡ дәрестәренән отоп алып, килешле итеп, хас эпос геройы булып, оҡшатып сығыш яһаны. Бында инде республика конкурсына әҙерлеккә алдан ук нигеҙ һалыуыбыҙ сәбәпсе булмай ҡалмағандыр, тип иҫәпләйем. Республикабыҙҙың сәхнә оҫталарын йәлеп итеп, районға саҡырып, оҫталыҡ кластары, балалар менән осрашыуҙар үткәреүҙең, уларҙы сығыш яһау оҫталығына өйрәтеүҙәрҙең был тәңгәлдә әһәмиәте бик тә ҙур икәнлеген билдәләп үтеү кәрәктер, бындай сараларҙың, әлбиттә, еңеүгә алып килеүенә ышаныс та ҙур була.

Һуңғы ваҡытта эпостың мәғәнәһен балалар тулыһынса аңлаһындар һәм Урал батырҙың батырлыҡ юлы этаптарын уларға тулыһынса күрһәтер өсөн, эпосты 6 өлөшкә бүлеп, сәхнәләштереүгә тотондоҡ. Ә бы алым иң отошлоһо. Быйыл был конкурс республикала 26-сы тапҡырға үтһә, ә беҙҙең Бөрйән районында 28-се тапҡырға үтте. Был башланғыс тәүҙә билдәле укытыусы Марат Ғизетдин улы Муллағолов идеяһы менән беҙҙең райондан, эпостың тәүтөйәгенән башланып, бөгөн ул ҙур кимәлгә сыҡты. Хәҙер йылдың-йылы алып барылыуы республикала ҡыуаныслы. Эпоста булған ваҡиғалар тап Бөрйән ерендә – Шүлгәнташ ерендә булғанын балалар төшөндө.

Ә инде 30 октябрь көнө Өфө ҡалаһында Республика халыҡ ижады үҙәгенең "Атайсал" мәҙәниәт һарайында барыбыҙҙы хайран иткән Бөрйән укыусыларының үлемһеҙ “Урал батыр” эпосы буйынса театрлаштырылған һоҡланғыс, мәртәбәле тамашаһы быға асыҡ миҫал. Уҡыусы – әртистәребеҙ – бәләкәс кенәләренән алып өлкән класта укыған, тырыш 60 бала юғары кимәлдә, матур сығыш яһанылар һәм үлемһеҙ эпостың төп мәғәнәһен тамашасыларға еткерә алдылар. Төп ролдә башлап йөрөүсе Иҫке Собханғол урта дөйөм белем биреү мәктәбе укыусылары Илтимер Мырҙағолов һәм Алик Хәкимовтар уйнаны (етәкселәре – Фирүзә Фәрит ҡыҙы Кинйәбулатова). Был конкурста һәр даим беҙҙең уҡыусылар алдынғылыҡты бирмәне. Белоретта үткән зона конкурсында

ла эпосты башҡарыусылр араһында яңы исемдәр асылды. Иҫке Собханғол мәктәбенең 10 клсс уҡыусыһы Илтимер Мырҙағолов иң яҡшы ирҙәр ролен башҡарыусы булып танылды.

Бөрйәнебеҙҙә был эш бер бөгөн генә башланмаған, бик оҙаҡ йылдар дауамында балалар баҡсаһының “Тәнәй Урал батырҙары”нан алып оло кластарғаса бәйләнешле алып барылған бик ҙур файҙалы эштең ҙур тарафҡа алып килеүе маҡтауға лайыҡ. Республикала “Урал батыр” эпосы буйынса йәш башҡарыусылар конкурсы быйыл август айында XXV тапҡыр үтте. Ә районыбыҙҙа был конкурс апрель айында XXVII тапҡыр үткәрелде лә инде. Быйылғы йылда сәхнәләштереүҙе районыбыҙҙа ныҡлы әҙерлек менән спектакль-лекторий форматында ойоштороуға өлгәштек.

Тап бына ошо үлемһеҙ эпосыбыҙҙы йәш быуындың ғына түгел, үҙебеҙҙең дә күңелебеҙгә һеңдергәнлегебеҙ, илһөйәрлек һәм башҡа иң гүзәл сифаттар менән тулы тормош – бөгөн йәшәйешебеҙҙә лә өҫтөнлөк алды һәм артабан да был эште дауам итеү – беҙҙең бурысыбыҙ.

Мөхтәр Сәғитов яҙыуынса, Урал батыр – эпостың баш ҡаһарманы. Урал – халыҡ күрергә теләгән идеал – йыйылма образ. Эпоста батыр һәм халыҡ мөнәсәбәте – төп темаларҙың береһе. Унда яҙылған батырлыҡ, ҡыйыулыҡ сифаттары, бер-береһенә ярҙамсыл булыу тәрбиәнән килә. Донъяла һәр кеше бәхетле йәшәргә тейеш! Уға ҡурҡыныс янай икән, илдең батыр улдары дошманды юҡ итергә тейеш. “Урал батыр” эпосының мөһим законы – ул батырҙың халыҡ өсөн көрәше. Ил улы үҙ иле, ере өсөн йәнен, тәнен аямаҫҡа, уның бәхете өсөн яу сабырға бурыслы. Бөгөн ысын батырлыҡ – ул яуызлыҡҡа юл ҡуймау.

Быны бөгөн беҙ Донецк, Луганск ерендә барған махсус хәрби операция барышында үҙебеҙҙең егеттәребеҙҙең ҡаһарманлыҡтары, берҙәмлеге, сослоғонда, илһөйәрлегендә асыҡ күрәбеҙ. Был сағыу миҫал булып тора.

Йомғаҡлап шуны әйтке килә: бөйөк шәхесебеҙ Әхмәт ағай Сөләймәнов һалған эҙҙәр, ҙур күләмле эштәр, уның беҙгә һыҙып ҡалдырған юлдары беҙгә һәр саҡ маяҡ буласаҡ.

Беҙ, ысын мәғәнәһендә, Әхмәт ағай вариҫтары!

©Гумероваа Р.Ш., 2024

## БӨРЙӘН, БЕЛОРЕТ ҺӘМ САЛАУАТ РАЙОНДАРЫ МУНИЦИПАЛЬ ДӨЙӨМ БЕЛЕМ БИРЕҮ МӘКТӘПТӘРЕ УҠЫТЫУСЫЛАРЫНЫҢ СЫҒЫШТАРЫ

## ВЫСТУПЛЕНИЯ УЧИТЕЛЕЙ МУНИЦИПАЛЬНЫХ ОБЩЕОБРАЗОВАТЕЛЬНЫХ ШКОЛ БУРЗЯНСКОГО, БЕЛОРЕЦКОГО, САЛАВАТСКОГО РАЙОНОВ

УДК 008; 793

***Баязитова Р.Р.,***
*башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусы,*
*Байназар УДББ мәктәбе*
***Баязитова Р.Р.,***
*учитель башкирского языка и литературы,*
*Байназаровская СОШ*

### «ИЛ ҺАҠЛАҒАН ИР ӨСӨН, ТАТЛЫНАН ТАТЛЫ НИ ТАТЛЫ?»

(Әхмәт Сөләймәновтың “Һәр мөғжизә – миңә хәҡиҡәт” йыйынтығын уҡығас)

### «ДЛЯ МУЖЧИНЫ, ОХРАНИТЕЛЯ ИЛЯ, ЧТО СЛАЩЕ СЛАДКОГО?»

(После прочтения сборника Ахмета Сулейманова «Каждое чудо для меня – истина»)

**Аннотация.** В статье анализируются стихи учного-фольклориста Ахмета Сулейманова, который кроме научных трудов оставил после себя сборник стихотворений «Каждое чудо – для меня истина» (Уфа, 2007). Автор раскрывает идейно-эстетические особенности стихотворений, своеобразие поэтических средств изображения.

**Ключевые слова:** Ахмет Сулейманов, ученый, поэт, стихи, лирика, образы, идея, форма, содержание.

Әхмәт Сөләймәнов үҙ уҡыусыларын башҡорт халыҡ ижадында, фольклористикала тапҡан күренекле ғалим. Күптәр уны тик фольклорсы булараҡ белә, ә мин уны оло йөрәкле, оҫта телле шағир булараҡ астым. Сәсән телле, ижади һәләтле ғаиләлә тыуған Әхмәт Мөхәмәтвәли улы өсөн шиғриәт сит өлкә түгел.

«Һәр мөғжизә – үҙе хәҡиҡәт» (Өфө: Китап, 2007) поэтик йыйынтығын шиғыр һөйгән уҡыусылар йылы ҡаршыланы. Китаптың инеш һүҙен яҙыусы яҡташ шағир Самат Ғәбиҙуллин былай тигәйне: «Әхмәт ғилми эшкә бирелеп, шиғриәткә бер ваҡытта ла хыянат итмәне, тоғро ҡалды». Был һүҙҙәр Әхмәт Мөхәмәтвәли улының шиғриәттә үҙ һүҙе, үҙ юлы булыуы хаҡында әйтә лә инде.

Йыйынтыҡта һөйөү һәм мөхәббәт, тыуған ер һәм тыуған ил, тәбиғәт һәм илһөйәрлек, туғанлыҡ һәм дуҫлыҡ темаларына өҫтөнлөк бирелә.

Әхмәт Мөхәмәтвәли улы әҫәрҙәре үҙенсәлекле художестволы алымдары менән күңелде арбай, образлы фекерләүҙәргә, һүрәтләү сараларына бай булыуы менән иҫтә ҡала. «Көрәгә», «Мин – сарсауҙан сатнаған ер», «Тәбиғәт тә беҙҙең ише лә..», «Әкиәт батыры»... Береһенән-береһе сағыу образдар менән яҙылған шиғырҙарҙын ҡат-ҡат уҡып, уларҙан яңынан-яңы мәғәнәүи биҙәктәр табып була, ошо юлдарҙағы матур-матур табыштар һоҡландыра.

Мәҫәлән, “Мин – сарсауҙан сатнаған ер” шиғыры аналитик сағыштырыуҙарҙан тора:

Мин – сарсауҙан сатнаған ер,
Ямғыр булып яусы!

Мин – сәскәмен, һин – бал ҡорто,
Балды һурып алсы!
Мин – үҙәнмен һыуы кипкән,
Даръя булып аҡсы!
Һарыларға һабышҡанмын,
Баҡсы булып баҡсы!

Әхмәт Мөхәмәтвәли улы тормошта һәр саҡ ҡатын-ҡыҙ затына ғашиҡ булып йәшәне. Уның Бөрйән ҡарағайҙарылай олпат һәм мөһабәт кәүҙәле, һәр саҡ башын ғорур һәм юғары тотоп йөрөүе бер ҡатын-ҡыҙҙы ла иғтибарһыҙ ҡалдырманы.

Мәҫәлән, “Гүзәлдәргә һәр саҡ әсирмен” шиғырында ул хоҙай биргән һылыулыҡты күрмәү, уға һоҡланмау – иң ҙур гонаһ, ти.

Тик бер генә һүҙҙе ҡабатлармын:
“Гүзәлдәргә һәр саҡ әсирмен,
Улар арҡаһында ыу-ағыуҙы
Туҫтаҡ-туҫтаҡ эсһәм-эсермен!”

Уның мөхәббәт лирикаһы символик-метафоралы образдарға, сағыштырыуҙарға бай: тик ғашиҡ кеше генә һөйөү даръяларына суртан һымаҡ сумалыр («Йә селләлә боҙға әйләнермен»), тик һөйгән кешеңдең һүҙҙәре һиңә һары майҙай ягылалыр («Һинең хатың»), һөйөүгә сарсап, сабырлыҡ менән болоҡһоп йәшәгәндә, һөйгәне уға офоҡтан үткән болот кеүек тойолдо («Ҡыуан еле, болот һәм һин»)... Мәҫәлән, «Ҡайтсы, төшөм!» шиғырынан ошо юлдарҙы ғына алайыҡ:

Ҡуш ҡанаттай ҡолас киргәйнем,
Ҡосағыма килеп кергәйнең,
Өнөм күреп татлы төшөмдө,
Шыбырланым һинең исемде.

Әхмәт Мөхәвәтвәли улы дуҫтарына, әҙәбиәт һәм сәнғәт өлкәһе әһелдәренә, яҡташтарына, студенттарына бик күп бағышлауҙар ижад иткән. Һәр бер бағышлау уның кеше күңелле, кешегә иғтибарлы, дуҫтарының күп булыуы тураһында һөйләй төҫлө. Шағир Самат Ғәбиҙуллинға бағышлауҙа уның зыянһыҙ, бар кешегә миһырбанлы, сәйер ҙә, кемгәлер ғәм уятыусы ла, дан өсөн эшләмәүе, ә һәр саҡ туған тел, тыуған яҡ һәм тыуған ерем, тип яныуы тураһында әйтә:

Сәйерһенде һине бик күп кеше,
Сәйерһенде хатта дуҫтарың.
Сәйерһенгәндәргә сер сисмәнең,
Дуҫ булыуҙан ғына туҡтаның.
Юҡ әйтмәнең, бер минеке хаҡ, тип,
Үҙ тукһаным ғына – туҡһаным.
Үҙең ише сәйерҙәрҙе тапһаң,
Сәйерһенмәй генә, хупланың.

Ә.Сөләймәновтың “Һәр мөғжизә – миңә хәҡиҡәт” исемле шиғырҙар йыйынтығын ихлас күңелдән, оло бер кинәнес менән укып сыҡтым. Уның тормошо, ижады, хеҙмәте – барыһы ла үрнәк булырлыҡ.

© Баязитова Р.Р., 2024

УДК 37.373

***Ғәбделхаева З. Ғ.***
*башҡорт теле һәм әҙәбиәте укытыусыһы,*
*Байназар ДББУ мәктәбенең Яуымбай филиалы*
***Габдельхаева З.Г.,***
*учитель башкирского языка и литературы,*
*Яумбаевский филиал Байназаровской СОШ*

## “ҠОРҠОТ АТА КИТАБЫ” ДАСТАНЫ ГЕРОЙҘАРЫН ӨЙРӘНЕҮ АША БАЛАЛАРҘА ИЗГЕЛЕКЛЕЛЕК СИФАТТАРЫН ТӘРБИӘЛӘҮ: ӘХМӘТ СӨЛӘЙМӘНОВ ТӘРЖЕМӘҺЕ МИҪАЛЫНДА (7 КЛАСТАР ӨСӨН КЛАСТАН ТЫШ ДӘРЕС ӨЛГӨҺӨ)

## ВОСПИТАНИЕ В ДЕТЯХ КАЧЕСТВА ДОБРОТЫ ПРИ ИЗУЧЕНИИ ГЕРОЕВ ДАСТАНА «КНИГА МОЕГО ДЕДА КОРКУТА»: НА ПРИМЕРЕ ПЕРЕВОДА АХМЕТА СУЛЕЙМАНОВА (ОБРАЗЕЦ ВНЕКЛАССНОГО УРОКА ДЛЯ 7 КЛАССА)

**Аннотация.** Данный урок посвящен изучению героев песен о Дамруле и Газраиле, вошедших в известный в тюркском мире дастане «Книга моего деда Коркута» на внеклассном уроке. Эти части были переведены известным ученым Ахметом Сулеймановым на башкирский язык и подготовлены для внеклассных уроков в общеобразовательных школах. Изучение этих образов позволит воспитанию добра и спреведоивости в обучающихся.

**Ключевые слова:** Ахмет Сулейманов, дастане «Книга моего деда Коркута» дастане «Книга моего деда Коркута», песни о Дамруле, честность, добро и зло, воспитание.

**Тема:** “Ҡорҡот ата китабы” аша балаларҙа изгелеклелек сифаттарын тәрбиәләү.

(Төрки халыҡтары араһында киң таралған дастандың 5-се йырынан Әхмәт Сөләймәновтың ирекле тәржемһенән 7 кластар өсөн кластан тыш дәрес).

**Маҡсат:**

I. Ә.Сөләймәновтың тормош юлы һәм хеҙмәттәре менән таныштырыу;

II. «Дәли Дәмрүл» эпосының йөкмәткеһен үҙләштереү;

III. Халыҡ ижадына, тарихына ихтирам тәрбиәләү, яҙыу һәм телмәр мәҙәниәтен үҫтереү.

**Йыһазландырыу**: Ә.Сөләймәновтың тормош юлын сағылдырған слайд, мультимедиялы проектор.

**Дәрес барышы**

**Ойоштороу өлөшө**.

**I.** Халыҡ ижады өлгөләре тураһында һорау-әңгәмә.

(Бер-ике уҡыусынан һорап кителә).

**II.** Әңгәмә.

– Уҡыусылар, һеҙ үткән дәрестә ниндәй темалар менән таныштығыҙ? **(башҡорт халыҡ ижады)**

Халыҡ ижадының ниндәй жанрҙары бар?

**(йырҙар, бәйеттәр, сеңләүҙәр. эпостар, ҡобайырҙар, экиәттәр һ.б)**

– Беҙҙең төбәктә халыҡ ижады байлыҡтарын һаҡлаған, уларҙы артабан байытыуға өлөш индергән кешеләр бармы?

**(Мөхтәр Сәғитов һәм Әхмәт Сөләймәнов)**

Әхмәт Мөхәмәтвәли улы Сөләймәновтың тормош юлы, эшмәкәрлеге менән бөгөнгө дәрестә танышырбыҙ.

**III.**Яңы тема менән танышыу.

**1.** Слайд буйынса биографияһы һөйләнә.

Сөләймәнов Әхмәт Мөхәмәтвәли улы (15 март 1939 йыл – 21 ноябрь 2016 йыл) – башҡорт әҙәбиәт ғилеме белгесе, фольклорсы, юғары мәктәп уҡытыусыһы, йәмәғәт эшмәкәре. Рәсәй Гуманитар Фәндәр академияһының тулы хоҡуҡлы ағзаһы (академик, 1995), Башҡортостан Республикаһы Фәндәр академияһының почетлы ағзаһы (2016), филология фәндәре докторы( 1991), профессор (1995). 1995 йылдан Башҡортостандың һәм Рәсәйҙең Яҙыусылар союзы ағзаһы. Рәсәй Федерацияһының (2006) һәм Башҡортостан Республикаһының (1997) атҡаҙанған фән эшмәкәре, Башҡорт АССР-ының атҡаҙанған

мәҙәниәт хеҙмәткәре (1991) Башҡортостандың мәғариф отличниғы (1999). Салауат Юлаев исемендәге премия лауреаты (1987) һәм Салауат Юлаев ордены кавалеры.

Бөрйән районы почетлы гражданины Әхмәт Мөхәмәтвәли улы Сөләймәнов 1939 йылдың 15 мартында Бөрйән районы Нәби ауылында тыуған.

**2.** Эпос өҫтөндә эшләү.

– Уҡыусылар, беҙ һеҙҙең менән «Ҡорҡот ата китабы»нан Ғазраил һәм Домрул эпосы менән танышырбыҙ. Был эпосты һеҙ өйҙә уҡып килергә тейеш инегеҙ. Дәрес барышында эпостың йөкмәткеһе яғынан фекер алышыуҙар булыр.

– Ни өсөн был эпосты өйрәнер алдынан Әхмәт Мөхәмәтвәли улын телгә алдыҡ?

– Бөгөнгө дәрестә Әхмәт Сөләймәновтың эпосты ирекле рәүештә тәржемә иткән хеҙмәте менән танышабыҙ һәм файҙаланабыҙ.

Беҙҙең дәреслектә эпос, проза менән яҙылһа ла, шиғри юллыларын да табып була. Ә бына "Ағиҙел" журналында бирелгән Әхмәт Мөхәмәтвәли улының тәржемәһе тулыһынса тейерлек, шиғри формала бирелгән һәм уны уҡыуы күпкә еңелерәк. Әхмәт Сөләймәнов башҡорт халыҡ ижады менән генә түгел, төрки әҙәбиәте менән дә ҡыҙыҡһынған һәм өйрәнгән.

**3. Һүҙлек эше.**

**Ғәүер** – кафыр – кафырҙар – мосолман диненән булмаған кешеләр.

**Дәхи** – тағы.

Ҡолдарынан, таш тумыртып,
Һалдырған юл,
**Дәхи –** күпер йылғаһы юҡ
Үҙәнгә ул.

**Рум –** Византия**, Шама** – Сирия.

"Мин бәһлеүән! – тип маһая
Гел маҡтана. –
Минең даным Румдан алып – Шамағаса".

**Ғазраил –** кешенең йәнен алыусы.

**4.** Һорауҙар ярҙамында уҡыусыларҙың эпосты үҙләштереүҙәрен белеү.

– Эпос ҡайһы осорҙа ижад ителгән?

(**Урта быуаттарҙа)**

– Төп герой был эпоста кем?

**Домрул** – ул бер кем менән дә иҫәпләшмәй, самаһыҙ шашҡан бәндә булған.Хатта Аллаһтан да ҡурҡмамыш булып ҡыланған.

**Ғазраил** – Домрулға ҡаршы Аллаһтың фармандарын үтәп йөрөй.

**Ә.Сөләймәнов тәржемә иткән «Дәли Дәмрүл» эпосының йөкмәткеһе менән таныштырыу** (Тулыһынса уҡыу).

**Уҡыусылар менән әңгәмә.**

– Ни өсөн Дәмрүлде кире образға ҡуйып ҡарайбыҙ?

(Дәли Дәмрүл хәтәр яман
Бәндә булған,
Уйлағаны- кешеләргә
Этлек булған
Шул маҡсаттан көнө-төнө
Хәйлә ҡорған.
Тик йома көн был кәсебен
Ҡуйып торған:
Йәнәһе ул – **ғәүер** түгел,
Хаҡ мосолман,
Гонаһы юҡ, бара, гүйә,
Дөрөҫ юлдан.

– Ысынлап та, Дәмрүлдә кешеләргә ҡарата бер ниндәй ҙә изгелек булмай.

Сит кешеләргә генә түгел, ата-әсәһенә лә мәрхәмәтлелек күрһәтмәй.

Үҙен был донъяға мәңгелеккә тыуғандай хис итеп йәшәп ятҡанда, Хаҡ Тәғәлә Ғазраилға унын ғүмерен алырға фарман бирә.

Ул фармандың асылы шулай ине, ти: ”Үҙ йәненә алмашҡа йән тапһа, уны имен ҡалдырырға!”.

Дәмүл бик ауыр хәлдә ҡала. Кем үҙ йәнен бирергә риза булыр икән, тип ҡайғыра. Күптәрҙән алғыш түгел, ҡарғыш алғас, ни хәл итһен. Шуны уйлап, иң әүәл ҡылған яманлыҡтары, гонаһтары өсөн Хаҡ Тәғәлә алдында ҡат-ҡат тәүбәгә ҡайтты, ти.

Бына ошо эпостағы Дәмрүл кеүек кешеләргә ҡарата мәрхәмәтһеҙ, игелекһеҙ булыу, аҙаҡ ҙур үкенестәргә килтереүе мөмкин. Һәр саҡ эргә-тирәләгеләргә иғтибарлы, изгелекле булырға кәрәк. Әлбиттә, Дәмрүл үҙ хатаһын һуңлап булһа ла таный, Хаҡ Тәғәлә уға үҙ фатихаһын бирә.

Шулай итеп, эшләгән эштәреңә үкенерлек булмаһын өсөн, яңылыш аҙымдар яһауҙан һаҡланыуың, күпкә яҡшыраҡ булалыр, тип уйлайбыҙ.

**Ҡорҡот алғышы.**

Фатихамды бирәм һиңә,
Эй, Дәмрүл,
Яҙыҡ юлға баҫма бер ҙә,
Тоғро бул!
Фатихамды бирәм һиңә,
Оло хан!
Еңелеүҙе белмә бер ҙә,
Оло хан!
Емерелеү белмәһендәр
Тауҙарың!
Бөтә донъя белһен һиндә
Тау барын!
Балта нимә-ағастарың
Белмәһен!
Дошман улар араһына
Кермәһен!
Йылғаларың ғүмерҙә лә
Шиңмәһен!
Афәт килеп,ҡоротмаһын
Шишмәһен!

Дәмрүл үҙ хаталарынан ваҡытында танып тәүбәгә килгәс, Аллаһы Тәғәлә тоғро ир менән ҡатынға йөҙ ҙә ҡырҡар йыл ғүмер өҫтәп, фатиха бирә.

**5. Йомғаҡлау**.

Шулай итеп, беҙ һеҙҙең менән кемдең хеҙмәте менән таныштыҡ? (Ә.Сөләймәновтың). Кем ул Ә .Сөләймәнов?

Әхмәт Сөләймәновтың хеҙмәттәре баһалап бөткөһөҙ.

Ошондай данлы яҡташыбыҙ булыуы менән һәр саҡ ғорурланабыҙ. Уның хеҙмәттәрен әленән әле файҙаланып торорбоҙ, тигән теләк менән дәресебеҙҙе тамамлайбыҙ.

**Әҙәбиәт**

1. Башҡорт әҙәбиәте. 7 кл.
2. Ағиҙел. 2014. №3.

©Габдельхаева З.Г., 2024

УДК 37.373

***Ишбулдина А.И.,***
*Янғантау урта мәктәбе,*
*башҡорт теле уҡытыусыһы,*
*Янғантау ау., Салауат р-ны*
***Ишбулдина А.И.,***
*СОШ Янган-тау,*
*учитель башкирского языка,*
*дер. Янган-тау, Салаватский р-н*

## “УРАЛ БАТЫР” ЭПОСЫНДА ҒАИЛӘ ҠИММӘТТӘРЕ

## СЕМЕЙНЫЕ ЦЕННОСТИ В ЭПОСЕ «УРАЛ-БАТЫР»

**Аннотация.** В статье раскрываются общечеловеческие ценности, семейные в частности. Рассматриваются способы исполнения заповедей эпического героя Урал-батыра, заключающиеся в организации акций и движений в образовательно-воспитательной среде СОШ дер. Янган-тау: экологическое движение, поддержка и помощь людям преклонного возраста, членам семьи воинов СВО и т.д.

**Ключевые слова:** эпос «Урал-батыр», А.М. Сулейманов, М.С. Буракаева, природа, охрана, поддержка, семья, воспитание, молодое поколение, ценности.

«Урал батыр» эпосы – башҡорт халҡының бөйөк ҡомартҡыһы, ата-бабаларыбыҙ быуындан быуынға тапшырған бай хазина – ауыҙ-тел ижадының һоҡланғыс өлгөһө. Эпоста халҡыбыҙ асылы, тарихы, мәҙәниәте, ғөрөф-ғәҙәттәре, йәшәү мәғәнәһе, изгелек һәм яуызлыҡ, яҡшылыҡ менән яуызлыҡ, тыуым, үлем һәм үлемһеҙлек кеүек мәңгелек төшөнсәләр үҙенсәлекле итеп сағылдырылған. Был әҫәр Ер йөҙөндә иң боронғо ҡомартҡы, унда йәшәйешебеҙҙең төп принциптары һалынған. Башҡорт дәүләт университетында уҡығанда, беҙҙең төркөмдөң етәксеһе Ә.М. Сөләймәнов менән эпосты өйрәнеү буйынса экспедициялар үткәрҙек. Республика буйынса эпосты яттан һөйләү конкурстарында уҡыусылар әүҙем ҡатнашты.

Хәҙерге көндә М. С. Бураҡаева төҙөгән принциптарҙы тәрбиәүи эштә ҡулланабыҙ.

1. **Тау буйҙары йәшәрһен,**
**Мәңге үлмәҫ төҫ алһын.**

Ер-һыуҙарҙы, урмандарҙы һаҡлау буйынса даими рәүештә экологик өмәләр үткәрәбеҙ. Салауат Юлаевтың тыуған ауылы Тәкәй яғындағы Салауат шишмәһен таҙартыу, кәртәләү буйынса өмәләр үткәрҙек.

Көньяҡ Урал тауҙарының төньяғындағы районыбыҙҙың иң бейек нөктәһе Ҡаратауға йыл һайын менеп, ҡороған ағастарҙы йыябыҙ. Яҙ һайын “Йәшә, шишмә!” акцияһы сиктәрендә Ҡорғаҙаҡ, Илтәй, Мөсәт ауылы шишмәләрен таҙартабыҙ.

2. **Еҫерҙәрҙең алдында**
**Күҙенә керпек булығыҙ.**

Өлкән йәштәгеләргә, ҡараусыһыҙ ҡалған ғаиләләргә, улдары йәки аталары махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙың ғаиләләренә ярҙам ойошторғанбыҙ.

3. **Ил ынйыһын йәшереп**
**Ергә күмеп ҡуймаҫҡа!**

Аталары, балалары хәрби операцияла булған ғаиләләргә, ҡараусыһыҙ ҡалған оло йәштәгеләргә эшҡыуарҙар һәм ауылдаштар даими рәүештә матди ярҙам итә. Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға ылау әҙерләгәндә, уҡыусылар ҙа, ауыл халҡы ла әүҙем ҡатнаша. Янғантау ауыл биләмәһенән мунса әҙерләнек, район халҡы исеменән 20 ялан мунсаһы ебәрелде.

4. **Яҡшының эскәне – һыу булыр,**
**Ямандын эскәне – ыу булыр.**

Яман ҡылыҡтар: эскелек, тәмәке тартыу, наркотиктар ҡуланыуҙың эҙемтәләре тураһында аңлатыу эше алып барабыҙ. Был темаға класс сәғәттәрендә фельдшер әңгәмә үткәрҙе. Даими рәүештә наркотиктарҙың зыяны тураһында саралар ойошторола. Уларҙың кеше организмына, киләсәк быуындарға зыяны тураһында аңлатыу эше алып барабыҙ.

**5. Ил күрергә сыҡтым мин,**
**Ер ҡошонан түгелмен, -**
**Йәшәй торған илем бар,**
**Илһеҙ етем түгелмен.**

"Һомай һылыу мәктәбе" һәм "Урал батыр ҡоро" ойошторҙоҡ.

Мәктәптә йыл һайын "Һомай һылыуы", "Урал батыр тоҡомо" бәйгеләре үткәрәбеҙ. Уҡыусылар ҙур теләк менән ихлас ҡатнаша. "Ҡасан үткәрәбеҙ?", – тип түҙемһеҙлек менән көтөп ала. Ҡатнашыусыларға спонсорҙар ярҙамында бүләктәр әҙерләйбеҙ. Ҡыҙҙар төньяҡ-көнсығыш төбәге милли кейемендә сығыш яһай. Эпостан өҙөк һөйләү – төп шарт, үҙҙәре менән таныштыралар, йыр-моңға һәләттәрен күрһәтәләр, милли кейем кейгән ҡурсаҡтарына сәңгелдәк йыры башҡаралар. Әсәләре, өләсәләре менән әҙерләнеп, бергә сығыш яһаусылар ҙа бар.

Ҡатын-ҡыҙҙар Советы рәйесе булараҡ район күләмендә Башҡортостан Республикаһының граждандар йәмғиәтенә булышлыҡ итеүгә Башҡортостан башлығы гранты һәм Президент гранттары фондына финанслашыу саралары ярҙамында "Һомай йондоҙлоғо" форумын ойошторҙом. Республика кимәлендә үткән был сараны "Урал батыр" эпосындағы Һомай менән бәйләп, ҡатын-ҡыҙҙың барлыҡ сифаттарын асып, Һомай образын пропагандалау ине.

**6. Атамдын хаҡы өсөн,**
**Әсәмдең хәтере өсөн,**
**Тағы ла бер һынайым...**

Башҡорт халҡында туғанлыҡ тойғоһонoң мөһимлеген өлгөлө ғаиләләрҙең тормошо аша күрһәтеү маҡсатынды ошо Форумда күп балалы һәм инвалид балалар ҡараусы әсәләр эш тәжрибәһе менән уртаҡлашты. Күп балалы ғаиләләр иғтибар үҙегендә, уларға һәр яҡлап ярҙам итергә тырышабыҙ. Өлгөлө әсәйҙәрҙе ҡотлап, төрлө сараларға саҡырып, маҡтау хаттары, ғөлләмәләр бирәбеҙ. Уларға ярҙам итәбеҙ.

**7. Күккә менер баҫкысһыҙ,**
**Ерҙе асыр аскысһыҙ...**

Туған телебеҙҙе белеү һәм һөйләшеү, ғөрөф-ғәҙәттәребеҙгә, йолаларыбыҙға ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү маҡсатында төрлө сараларҙа күберәк башҡорт телен ҡулланабыҙ. Йолаларҙы күрһәтергә ағинәйҙәрҙе саҡырабыҙ, музейға, этно үҙәктәргә экскурсиялар ойошторабыҙ.

Арҙаҡлы шәхестәр өлгөһөндә тәрбиәләү маҡсатында юғары уҡыу йорттарында уҡыған, мәктәпте тамамлаған уҡыусыларыбыҙ менән даими осрашыуҙар үткәрәбеҙ. Был уҡыу йылында Башҡорт дәүләт аграр университетына 9-11 кластар өсөн профориентацииoн экскурсиялар ойошторҙоҡ.

Ошо көндәрҙә генә хәрби һөнәрен һайлаған, Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусылар менән осрашыу ойошторҙоҡ. Уҡыусылар уларҙың һөйләгәнен, кәңәштәрен тын да алмай тыңлауҙарын күреп, быңдай осрашыуҙарҙан йәш быуындың фәһем алыуҙарына шатландыҡ. Ҡыҙғаныҫҡа күрә, бер уҡыусыбыҙ Чечен һуғышында, ике уҡыусыбыҙ Махсус хәрби операцияла һәләк булдылды. Уларҙың ғаиләләренә ярҙам итәбеҙ. Мәктәп бинаһында мемориаль таҡта һәм кабинеттарҙа Герой партаһы булдырҙыҡ.

8. **Яҡшылыҡҡа яҡшылыҡ**
**Ҡыла торған йола бар...**

Был йүнәлештә яҡшылыҡты аңлау, кешеләргә тик яҡшылыҡ эшләү тураһында әңгәмәләр үткәрәбеҙ, рәхмәтле булырға өйрәтәбеҙ. Бәләкәй генә яҡшылығың үҙҙәренә ғүр сауап булып ҡайтырын аңлатабыҙ. Оло йәштәгеләргә, Махсус операцияла ҡатнашыусыларҙың ғаиләләренә даими ярҙам итеп торабыҙ.

9. **Олоно оло итегеҙ,**
**Кәңәш алып йөрөгөҙ,**
**Кесене кесе итегеҙ,**
**Кәңәш биреп йөрөгөҙ!**

“Өләсәйҙәр мәктәбе” ойошторҙоҡ, мәктәптә үткән һәр сарала әүҙем ҡатнашалар: ағинәйҙәр беҙгә йыш киләләп, тәрбиәүи темаға әңгәмәләр, әкиәт һөйләү бәйгеләре, башҡорт халыҡ музыка ҡоралдарында уйнарға, аш-һыу әҙерләү, ҡул эштәре серҙәренә өйрәтәләр. Йәмле Йүрүҙән буйында йыл һайын “Кәкүк сәйе” байрамын тергеҙеп, йоланы үткәреүҙе юлға һалдыҡ.

10.**Йәншишмәнән һыу алып,**
**Үләндәрҙе терелтеү**
**Өсөн тыуған батырмын...**

Тормошта үҙҙәренең йәшәү рәүеше, эштәре менән билдәле арҙаҡлы шәхестәр менән йыш ҡына осрашыуҙар үткәрәбеҙ. Билдәле шағирҙар, яҙыусылар, фән эшмәкәрҙәре, спортсылар, хатта ҡорал эшләү конструкторы М.Т. Калашников, Параолимпия уйындары чемпионы Ирек Зарипов менән осрашыу ойошторҙоҡ. Яҙғы каникулда маскировка өсөн, шлемға кейә торған сетка үреүҙә ауыл халҡы менән бергә уҡытыусылар ҡатнашты.

Тәрбиә эшендә шулай уҡ милли батырыбыҙ Салауат Юлаевтың бала сағы, үҫмер йылдары, ғаиләһе, сәсәнлек оҫталығы, тыуған ерен һаҡлап яуға ҡушылыуы тураһында һөйләйбеҙ; Тәкәй ауылына, музейына, уның исеме менән бәйле тарихи урындарға экскурсиялар ойошторабыҙ. Шиғырҙарын һөйләү бәйгеләрендә ҡатнашабыҙ. Әҙәби түңәрәктә ҡатнашыусылар менән уның шиғырҙарын, иҫтәлекле урындарҙы туплап йыйынтыҡ сығарҙыҡ.

© Ишбулдина А.И., 2024

УДК 37.373

***Ҡаһарманова С.М.,***
филол. ф. к., Я. Хамматов ис. башҡорт гимназияһы,
башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы,
Белорет ҡ.
***Кагарманова С.М.,***
к. филол. н., учитель башкирского
языка и литературы,
Башкирская гимназия им. Я. Хамматова,
г. Белорецк

## БАШҠОРТ ХАЛЫҠ ЭПОСЫ “УРАЛ БАТЫР” ҺӘМ ҺАНДАР (6-СЫ КЛАСТА БАШҠОРТ ТЕЛЕНӘН ДӘРЕС ӨЛГӨҺӨ)

## БАШКИРСКИЙ НАРОДНЫЙ ЭПОС «УРАЛ-БАТЫР» И ЧИСЛА (ОБРАЗЕЦ УРОКА БАШКИРСКОГО ЯЗЫКА ДЛЯ 6 КЛАССА)

**Аннотация.** Данный образец урока башкирского языка способствует закреплению и расширению, обогащению знаний о числах у обучающихся 6 класса. Целью урока является расширение диапазона использования числа в общении, в жизни в целом. Учитель достигает этой цели путем использования башкирского народного эпоса «Урал-батыр», а также пословиц и поговорок.

**Ключевые слова:** эпос «Урал-батыр», числа, язык, обогащение, углубление, расширение знаний, урок, 6 класс, пословицы и поговорки.

**Тема: Башҡорт халыҡ эпосы “Урал батыр” һәм һандар берелеше.**
**Дәрес тибы:** йомғаҡлау.

**Маҡсат:** уҡыусыларҙың һан темаһы буйынса алған белемдәрен нығытыу һәм киңәйтеү. Һандарҙы башҡа һүҙ төркөмдәренән айыра белеү күнекмәһен камиллаштырыу.

Һандарҙы телмәрҙә ҡулланыу даирәһен киңәйтеү, уҡыусыларҙың ижади һәләтен, телмәрен һәм фекерләү ҡеүәһен үҫтереү.

Башҡорт халыҡ эпосы "Урал батыр"ға, халыҡ мәҡәлдәренә таянып, һан төркөмсәләрен айыра белеү күнекмәһен үҫтереү,

Башҡорт теле предметына, "Урал батыр " эпосына ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү.

**Йыһазландырыу:** компьютер, мультимед. проектор, презентация

**Дәрес барышы:**

**1 этап. Ойоштороу моменты. 1 мин.**

**2 этап. Дәрескә эмоциональ әҙерлек. (1-4 слайд)**

- Уҡыусылар, мин һеҙгә шиғыр тыңлап китергә тәкдим итәм:

**Йылмайыу**
Кәйефтәрҙе күтәрергә,
**Йылмай** әле йышыраҡ.
Таңдар йылмайып башланһа,
Эштәр барыр яҡшыраҡ.
Донъя матур. **Йылмайҙыңмы**
Көстәр ҡуныр beләккә.
Һис тартынмай өләшә бел
Яҡшы кәйеф бүләккә.

- Бер-беребеҙгә йылмайыу бүләк итәйек тә, бөгөнгө дәресте яҡшы кәйеф менән башлап ебәрәйек.

**Бөгөнгө дәресебеҙҙең темаһын** белер өсөн "Урал батыр" эпосынан бер нисә өҙөк тыңлап китегеҙ**.** Иғтибарлы булығыҙ: был өҙөктәрҙең уртаҡ яғы нимәлә икәнен аңларға тырышығыҙ. **(5, 6 слайд)**

1. Берҙән-бер көн дүртәүләп,
Былар ауға киткән, ти.
2.Урал, Шүлгән икәүләп
Көн-төнөн, ай-йыл һанап,
Тау артылып, һыу кисеп,
Ҡара урмандар үтеп.
Һаман алға барған, ти;
3. Бына мин дә ун бала
Күргән әсә донъяла;
4.Бер саҡ тауыш ҡуҙғалған:
Алтышар башлы дүрт йылан
Асҡыс һөйрәй икән, ти.

- Дөрөҫ, бөгөнгө дәрестә "һан" темаһы тураһында һөйләшәсәкбеҙ.

- Әгәр ҙә "һан" темаһы буйынса алынған белемде нығытыу һәм йомғаҡлау дәресе икән, беҙ дәрестә нимә менән шөғөлләнергә тейешбеҙ? Кем әйтә? Бирелгән өҙөктә ниндәй һан төркөмсәләре ҡулланылған?

**3. Әүҙем уҡыу эшмәкәрлегенә әҙерлек этабы.**

***Уҡыусыларға дәфтәрҙәрҙә числоны яҙырға тәкдим ителә. (7 слайд)***

- Һеҙ бөгөнгө числоны яҙығыҙ. Был осраҡта һеҙ ниндәй һан төркөмсәһен ҡулландығыҙ? Ни өсөн шулай уйлайһығыҙ? Характеристика бирегеҙ (рәт һанын).

- Һеҙҙең парталарығыҙҙа "Контроль бит" ята. Бында һеҙ дәрестең һәр этабында, әгәр яуаптарығыҙ дөрөҫ булһа "+" ҡуйып бараcаҡһығыҙ. Дәрес аҙағында дөрөҫ яуаптарығыҙҙы һанағандан һуң, үҙегеҙҙең эшегеҙгә баһа ҡуясаҡһығыҙ. "5"

- Дәрес темаһынан сығып, бөгөнгө дәрестең маҡсатын билдәләп ҡарағыҙ**.**

**Уҡыусыларҙың яуабы.** (һан тураһында белгәндәрҙе ҡабатларға, төрлө практик күнекмәләр ярҙамында белемде тикшерергә).

- Беҙ йыш ҡына белемдең тормошта кәрәклеге тураһында ишетәбеҙ. Һеҙ нисек уйлайһығыҙ, һан тураһында белем тормошта һеҙгә кәрәк булыр микән? (Яуаптар)

- Уҡыусылар, бөгөнгө дәрес бер нисә этаптан торасаҡ.

- Бер нисә дәрес эсендә беҙ һан тигән һүҙ төркөмө тураһында күп кенә нәмә белдек. Хәҙер һан тураһындағы һорауҙарға яуап биреп ҡарағыҙ. Әйткәнегеҙҙе миҫалдар менән дәлилләргә онотмағыҙ.

**1 этап. "Һорауҙарға яуап": (8, 9 слайд)**

1. Нимә ул һан?

2. Һандарҙы һан мәғәнәһенә эйә булған башҡа һүҙ төркөмдәренән нисек айырырға була? (Һан мәғәнәһенә һандарҙан башҡа икенсе һүҙ төркөмдәре лә эйә. Һандарҙы һүҙ менән дә, цифрҙар менән дә яҙып була, ә башҡа һүҙ төркөмдәрен бары тик һүҙ менән генә яҙырға мөмкин).

3. Яһалышы буйынса һандар нисә төркөмгә бүленә, улар нисек атала? (ябай, ҡушма).

4. Һан төркөмсәләрен атағыҙ (төп, рәт, сама, йыйыу, бүлем, кәсер, үлсәү).

5. Йыйыу һандары ниндәй ялғауҙар ярҙамында яһала? (-әү,-ау: берәү, алтау).

6. Ҡайһы осраҡта һандар эйәлек заты, килеш менән үҙгәрәләр һәм күплек ялғауы ҡабул итәләр? (исем урынында килһә: дошман *берҙе* биш итер).

7. Һандар һөйләмдең ниндәй киҫәктәре була?

8. Рим цифрҙарында ялғауҙар нисек яҙыла?

9. Календарь цифрҙы күрһәткән һандар нисек яҙыла? (ҡыя һыҙыҡ аша 2013/2014 уҡыу йылы).

10. Ун бер, ун биш һандары дөрөҫ әйтелештә нисек яңғырай?

**Яуаптар тыңланыла (миҫалдар)**

**2 этап – нығытыу.**

- Шулай итеп, һеҙ "һан" темаһы буйынса теоретик белемегеҙ барлығын раҫланығыҙ. Ә хәҙер, практик белемдәрегеҙ ҙә ныҡлы икәнен күрһәтергә тырышығыҙ.

**Нығытыуға күнегеүҙәр.**

**2. "Һүҙ төркөмдәре". (10 слайд)** Түбәндәге һүҙҙәрҙе 5 төркөмгә бүлегеҙ: 1) исем, 2) рәүеш; 3) һан; 4) ҡылым; 5) сифат.

***Бишбүләк, берлек, икеләнеү, унлата, алтау, берҙәм, бер юлы, етеле, икенсенең, берләшмә, йөҙөшәр,етегән, өсмөйөш, Етеболаҡ, Бишағас, егерме биш дүрткел, берләшеү,берәгәй,өскөл, ҡырҡ, етлегеү.***

Үҙегеҙҙең эшегеҙҙе баһалап ҡарағыҙ, һанды башҡа һүҙ төркөмдәренән айырыу ауырмы? (Уҡыусыларҙың яуаптары)

- Һеҙҙең белеүегеҙсә, һандар килеш менән үҙгәрмәй. Әммә башҡа һүҙ төркөмөнән килгәндә, улар килеш ялғауы ҡабул итә. Ошо миҫалдар араһынан килеш менән үҙгәрерҙәй һүҙҙәрҙе һайлап әйтегеҙ:

Берәү, икеләнә, унлыҡ, берләшмә, өсләтә

**3. "Ябай һәм ҡушма һандар".** Артабанғы эштәрҙең маҡсаты һеҙҙең ябай һандарҙы ҡушма һандарҙан айыра беләһегеҙме икәнен белеүгә ҡоролған.

Һандарҙы ябай һәм ҡушма һандарға бүлеп ике төркөм яһағыҙ: ***егерме, йөҙ ҙә бер, алты, етмеш икенсе, биш, алтмыш, утыҙ өс, ун биш, һикһән ике, ике йөҙҙә етмеш биш, йөҙ, мең.***

Был эште атҡарыу ҡыйынлыҡ тыуҙырҙымы? Кем бер хата ла ебәрмәне? Ниндәй ҡағиҙәгә таяндығыҙ?

**4. "Артыҡ һандарҙы тап"**

1. Рәт һандары: ун бишенсе, өс йөҙ утыҙ өс, етенсе, егерме беренсе, егерме дүрт;

2. Сама һандары: туғыҙ самаһы, етешәр, туғыҙ, йөҙҙән бер, туғыҙынсы, биш-алты;

3. Төп һандар: туҡһан, туғыҙ, егерме икенсе, бер йөҙ ҡырҡ дүрт, туғыҙ-ун, йөҙ, бер бөтөн ундан биш;

4. Кәсер һандар: биш мең, алтынан бер, биш бөтөн өстән бер, утыҙ самаһы, етмешенсе.

**5. “Күңелле разминка”.** Уйын элементтары булған эш, түбәндәге һорауҙарға яуап бирегеҙ:

- апрель йылдың нисәнсе айы?
- бер быуатта нисә йыл?
- “биш”тең уртаһында нимә бар?
- ниндәй һанға “йортло” һүҙенең синонимын ҡушһаң, район исеме килеп сыға?
- ниндәй һанға н хәрефе өҫтәһәң, аҫыл ташҡа әйләнә?
- магик һанды атағыҙ.
- Ә хәҙер ошо магик көскә эйә тип иҫәпләнгән ете һаны тураһында ҡыҫҡаса мәғлүмәт тыңлап китегеҙ. (ике уҡыусының сығышы)

*1) Башҡортостандың Ейәнсура районында "Ете быуын" (Семиколенка) тауы бар.*

*Суверенлы Башҡортостан Республикаһының Дәүләт атрибуттарысимволикаһында ла ете һаны сағылыш таба.*

*Көньяҡ Башҡортостанда боронғо Ете ырыу берләшмәһе һәмхәҙерге Башҡортостанда йәшәгән төрлө милләт вәкилдәренеңберҙәмлек билдәһе булараҡ, республикабыҙҙың Дәүләт флагындағы аҡһыҙыҡтың уртаһында алтынһыу төҫтә эмблема - түңәрәк эсендә ете таж япрағынан торған ҡурай сәскәһе эшләнгән. Ул - дуҫлыҡ символы, аҡһыҙыҡ уртаһында урынлашҡан ете таж япрағы Башҡортостан территорияһында уның халыҡтарының тупланыуына һәм берләшеүенә башланғыс һалған ете ырыуҙы кәүҙәләндерә: Юрматы, Үҫәргән, Бөрйән, Табын, Мең, Тамъян, Түңгәүер.*

*2) 7– ғәжәйеп хикмәтле һан. Әҙәмде донъяла шул етелек уратып тора кеүек: өҫтә – 7 ҡат күк, аҫта – 7 ҡат ер. Күктә – 7 йондоҙ, ерҙә – 7 мәғдән. Аҙнаның 7 көнө, йәйғорҙоң 7 төҫө, моңдоң 7 өнө. 7 мөғжизә. Башҡортостандың 7 мөғжизәһен иҫкә төшөрөү ҙә етә. Бына улар: “Урал батыр”эпосы, Салауат Юлаев һәйкәле, башҡорт балы, ҡурай, Шүлгәнташ мәмерйәһе, Красноусол минерал сығанаҡтары.*

- Ысынлап та, һандарға бәйле ырым-юрауҙар ҙа, ер-һыу атамалары ла етерлек беҙҙең телдә. Шуға ла һандарға бәйле бик күп әйтем-мәҡәлдәр барлыҡҡа килгән. Мәҫәлән:

Бик яҡшы белгән кеше тураһында **үҙенең биш бармағы кеүек белә,**

бәхәсләшкән ике кеше араһында тороп ҡалыуҙы йәки ике төрлө тойғоноң береһен һайлай алмағанда **ике ут араһында ҡалыу,**

бер-береһенә нығ оҡшаған кешеләр тураһында ике тамсы һыу кеүек,

яҡын күреүҙе ун бармаҡтың ҡайһыныһын тешләһәң дә ауырта тиҙәр.

**6. “Мәҡәлдәр”.** Карточкалар менән төркөмдәрҙә эш:

Бирелгән мәҡәлдәр араһынан йыйыу һандары булғанын табып, күсереп яҙығыҙ, мәғәнәләрен аңлатығыҙ.

1-се төркөм:

1. Яңғыҙ ҡарға яҙ килтермәй.
2. Берәүҙең ҡулы эшләй, икенсенең теле эшләй.
3. Ил өҫтөндә илле дуҫың булһын.
4. Ике уйла, бер һөйлә.

……………………………………

2-се төркөм:

1.Белеме юҡ берҙе еңер, белеме бар меңде еңер.
2. Йәйҙең бер көнө йылды туйҙыра.
3. Берәүҙән икәү яҡшы.
4. Дошман берҙе биш итер.

……………………………….

3-сө төркөм:

1. Икәү булһаң, береңә кәңәш ит, берәү булһаң, кәпәсеңә кәңәш ит.

2. Етмеш ергә ҡул һуҙма.
3. Бер эшсегә ун башсы.
4. Ир аҡылы – бер алтын, ил аҡылы – мең алтын.
…………………………
4-се төркөм:
1. Һигеҙ һыйыр аҫрағансы, һимеҙ һыйыр аҫра.
2. Етмеш йондоҙ тыуһа ла, яҡтылығы айҙай юҡ.
3. Берәү берәүгә терәү.
4. Һәр ҡулымда йөҙ бармаҡ, йөҙөһө лә – бер бармаҡ.
……………………………………………
5-се төркөм:
1. Бер ағас мейестә лә янмаҫ, ике ағас яланда ла һүнмәҫ.
2. Унған кеше ҡылды ҡырҡҡа ярыр.
3. Һигеҙ көн ғүмергә туғыҙ көн тырышлыҡ кәрәк.
4. Егәрленең ҡулы етәү.
- Кемгә был эште атҡарыу ауыр булманы?
……………………………………..
**7. "Морфологик анализ". Түбәндәге өҙөктә аҫтына һыҙылған һандарға морфологик анализ яһағыҙ:**

Береһе арыҫлан менәм, тип,
Береһе шоңҡар сөйәм, тип,
Маҙаһына тейгән һуң,
Ике улына Йәнбирҙе
Төшөндөрөп биргән, ти:
"Икегеҙ ҙә – баламһыҙ,
Күҙебеҙҙең ҡарамһыҙ,
Тешәр сағығыҙ үтмәгән,
Быуыныңыҙ ҡатмаған…"

**8. "Һүҙһеҙ диктант":**
100, 20-се, 15, 1093, 9-10, 5,3,
**9. "Ижади эш"** – бирелгән хәреф һәм һандарҙан һүҙҙәр төҙөргә:
1) М10СА
2. 7ГӘН,
3) 100ӨК,
4) 5ЕК
5) 1ЛЕК
- Ә хәҙер дәрескә йомғаҡ яһайыҡ. Бының өсөн түбәндәге һөйләмде дауам итегеҙ:
Бөгөн беҙ ….. үттек.
Беҙ беләбеҙ….
Алынған белемдәр ….
Хәҙер "Контроль бит"тәге мәрәйҙәрегеҙҙе һанап сығырығыҙ, үҙегеҙгә баһа ҡуйығыҙ. Ә хәҙер үҙегеҙгә ҡағылышлы һөйләмде генә һайлағыҙ:
Миңә бөгөнгө дәрестә бөтәһе лә аңлашылды.
Минең бөтә эшем дә уңышлы булды.
Ҡайһы бер эштәр миңә ауырыраҡ булды.
Мин үҙем менән ҡәнәғәтмен.
Мин үҙем менән әллә ни ҡәнәғәт түгелмен.
Мин үҙем менән бөтөнләй ҡәнәғәт түгелмен.
**Өйгә эш**: Һандар ҡулланып, мини инша яҙырға.
**Контроль бит**
**Тема: "Һан. Йомғаклау"**
**VI синыф укыусыһы**

| Һорау ҙарға яуап | Һүҙ төркөмдәре | Ябай һәм ҡушма һандар | Артыҡ һандар | Күңелле разминка | Мәҡәлдәр | Морфологик анализ | Һүҙһеҙ диктанат | Иж адиэш | Мәрәйҙәр | Баһа |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| 1 | 2 | 3 | 4 | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 | 10 | 11 |
| | | | | | | | | | | |

**8-9 мәрәй – “5”; 6-7 мәрәй – “4”; 3-4 мәрәй – “3”**

©Кагарманова С.М., 2024

УДК 37.373

***Кинйәбулатова Ф.Ф.,***
*башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы,*
*Иҫке Собханғол урта мәктәбе*
***Кинзябулатова Ф.Ф.,***
*учитель башкирского языка и литературы,*
*Старосубхангуловская СОШ*

## “УРАЛ БАТЫР” ЭПОСЫНДА МӘҢГЕЛЕК ТЕМАЛАРҘЫҢ БИРЕЛЕШЕ (9-СЫ КЛАСТА ТУҒАН ӘҘӘБИӘТЕНӘН ДӘРЕС ӨЛГӨҺӨ)

## ОТРАЖЕНИЕ ТЕМЫ ВЕЧНОСТИ В ЭПОСЕ «УРАЛ-БАТЫР» (ОБРАЗЕЦ УРОКА ПО РОДНОЙ ЛИТЕРАТУРЕ В 9 КЛАССЕ)

**Аннотация.** Целью данного урока является глубокое изучение башкирского народного эпоса «Урал-батыр», выявление его идейно-эстетического, идейно-тематического своеобразия, его место в научно-исследовательской работе Ахмета Сулейманова, рассмотрение и изучение темы вечности в эпосе. В результате будет проведена образовательно-воспитательная работа с обучающимися, прививание им чувств любви, преданности к родине, малой родине в частности, патриотизма.

**Ключевые слова:** эпос, тема, вечность, идея, смысл, поэтика, Ахмет Сулейманов, патриотизм, героизм, любовь к родине, родная природа, образовательный метод.

**Дәрес төрө:** дәрес-эҙләнеү.

**Маҡсат: белем биреү** – эпос йөкмәткеһенә таянып, эҙләнеү эшен алып барыу; **үҫтереүсе** – эпостың идея-тематик йөкмәткеһен үҙләштереү аша унның донъя кимәлендәге юғарылығын асыҡлау, унда күтәрелгән мәсьәләләрҙең актуаллеген билдәләү, яҡташыбыҙ, арҙаҡлы ғалим Әхмәт Сөләймәнов эшмәкәрлеге менән бәйле эпостың әһәмиәтен билдәләү уҡыусыларҙың фекерләү ҡеүәһен, һөйләү һәм яҙма телмәрен, эҙләнеү һәләтен, үҙаллылығын үҫтереү; **тәрбиәүи** – уҡыусыларға халыҡ педагогикаһы нигеҙендә әхлаҡ тәрбиәһен биреү, улар күңелендә изгелек, яҡшылыҡ, батырлыҡ өлгөһөндә граждандлыҡ тойғоһон үҫтереү, халыҡ ижадына һөйөү тәрбиәләү.

**Универсаль уҡыу эшмәкәрлеген формалаштырыу:**

1**) шәхси эшмәкәрлек** – һәр уҡыусының үҫеше өҫтөндә эшләү, уҡыусыларҙың ижтимағи ролдәрҙә, шәхес-ара мөнәсәбәттәрҙә дөрөҫ йүнәлеш алыуын тәьмин итеү, үҙаллылығын үҫтереү.

2**) регулятив** – дәрестең маҡсатын үҙ аллы билдәләү, баһалау.

**3) танып белеү эшмәкәрлеге** – эпоста күтәрелгән мәсьәләләрҙе асыҡлау, уларҙың актуаллеген билдәләү, өҫтәлмә мәғлүмәт туплау.

**4) коммуникатив эшмәкәрлек –** ҡуйылған мәсьәләне коллектив менән хәл итеү.

**Бурыстар:**

- уҡыусыларҙың эпос һәм унда күтәрелгән мәсьәләләр тураһында белемдәрен арттырыу, халыҡ ижады буйынса үтелгәнде ҡабатлау;

- аңлы уҡыу һәм яҙыу күнекмәләрен, фекерләү, эҙләнеү һәләттәрен үҫтереү;

- уҡылған әҫәр буйынса әңгәмә, өҫтәлмә материал, халыҡ педагогикаһы нигеҙендә уҡыусыларға әхлаҡ тәрбиәһе биреү, граждандлыҡ тойғоһон үҫтереү, халыҡ ижадына һөйөү тәрбиәләү, ҡыҙыҡһыныу уятыу.

**Планлаштырылған һөҙөмтәләр:**

- эпоста күтәрелгән мәсьәләләрҙе асыҡлау, уларҙы хәл итеү юлдарын билдәләү;
- бәйләнешле телмәр, эҙләнеү һәләтен үҫтереү;
- уҡытыусы менән берлектә эшләй һәм эште дөрөҫ баһалай белеү.

**Ҡулланылған уҡытыу методы һәм технологиялар: проблемалы уҡытыу.**

**Дәреслек менән эш: аралаш уҡытыу.** Маҡсат: уҡылған әҫәрҙе үҙаллы тикшереү, эҙләнеү алымдарына өйрәтеү.

**Дәрес барышы:**

| | *Дәрес этаптары* | *Уҡытыусы эшмәкәрлеге* | *Уҡыусы эшмәкәрлеге* |
|---|---|---|---|
| | Ойоштороу мәле.<br>(1 минут) | Уҡытыусының сәләмләү һүҙе.<br>-Хәйерле көн, уҡыусылар! Дәресте беҙ башлайыҡ.<br>Яңы белем, яҡшы билдә<br>Көн дә алып ҡайтайыҡ! | Уҡыусылар уҡытыусыны сәләмләй.<br>Дәрескә әҙерләнәләр. |
| | Дәрес темаһын билдәләү, маҡсатын ҡуйыу. (Айырым уҡыусылар менән эш, коммуникатив)<br>(5минут) | *(“Уралым” көйө уйнай, экранда бер-бер артлы Башҡортостан- дың 7 мөғжизәһе күренә бара.)*<br>- Ошо көйҙө тыңлағас, һеҙҙә ниндәй тойғолар уянды?<br>- Ете мөғжизә араһынан мәктәп программаһына ингән, тәрбиәүи әһәмиәткә эйә булған ниндәй рухи ҡомартҡыбыҙҙы әйтә алаһығыҙ?<br>- Уҡыусылар, “Урал батыр” эпосы меңәр йылдар элек ижад ителгән, ә егерме беренсе бы- уатта унда күтәрелгән темалар бөгөн ниндәй әһәмиәткә эйә?<br><br>- Дәресебеҙҙең темаһы нисек булыр?<br><br>- Эйе, эпостың һәр һүҙе, кинәйә менән әйтелгән һәр фекере тәрән мәғәнәгә эйә. Уҡыусылар, бөгөн дәрестә нимәләр асыҡларбыҙ? Эпосты өйрәнеү- ҙең әһәмиәте нимәлә?<br>- Бөгөнгө дәрескә үҙебеҙгә ниндәй маҡсат-бурыстар ҡуябыҙ? | - Күҙ алдына Урал тауҙары, Башҡортостан тәбиғәте баҫты.<br><br>- “Урал батыр” эпосы.<br><br>- Проблемалар шул уҡ: яратыу-яратмау, киң күңеллелек – көнсөллөк, яҡшылыҡ – яуызлыҡ һ.б. бик күп хис-тойғоларҙан торған күңел донъяһы. Эпоста күтәрелгән проблемалар мәңгелек.<br>-“Урал батыр” эпосын- да мәңгелек темаларҙың берелеше”.<br>*(дәфтәргә дата һәм дәрес темаһын яҙалар).*<br>- Тәрбиәүи яҡтан ҙур әһәмиәткә эйә, донъя башланғысы тураһында белем бирә, тормоштоң асылын аңларға өйрәтә.<br><br>*Уҡыусылар маҡсат-бурыстарҙы билдәләй.* |
| | Яңы белем биреү.<br>Индивидуаль, диалог, парҙар | - Уҡыусылар, иғтибарҙы таҡтаға йүнәлтәйек.<br>“Беҙгә ата-бабаларыбыҙҙан | (слайд.)<br>- Халыҡтың телдән телгә күсеп килгән ижады. |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | менән эш.<br>(24 минут) | Египеттағы мәшһүр пирамидалар кеүек тарихи ҡоролмалар мираҫҡа ҡалмаған… Әммә бабаларыбыҙ беҙгә әллә ниндәй шаҡ ҡатырғыс архитектура ҡомартҡыларына биргеһеҙ, әллә күпме томдарға һыйғыһыҙ мираҫты йәдкәр иткән. Ул – беҙҙең фольклорыбыҙ”.<br>Әхмәт Сөләймәнов.<br>- Нимә ул фольклор?<br>Был һүҙҙәргә һеҙҙең ҡарашығыҙ нисек булыр?<br>- Ә кем ул Әхмәт Сөләймәнов? *(слайд, фото.)*<br>- Уның тормош юлы тураһында кем тулыраҡ белә?<br>- Иғтибарҙы таҡтаға йүнәлтәйек. *(Слайд.)*<br>Ә. Сөләймәнов 1939 йылда Бөрйән районы Нәби ауылында тыуған. 1967 йылда БДУ-ның филология факультетын тамамлағас, Нәби һигеҙ йыллыҡ мәктәбендә башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булып эшләй. Аспирантурала уҡый. 1972 йылдан БДУ-ла башҡорт әҙәбиәте һәм фольклоры кафедраһында уҡытыусы, доцент. 1991 йылдың ғинуарынан – Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында фольклор һәм сәнғәт бүлеге мөдире. 2006 йылдан М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының башҡорт әҙәбиәте һәм мәҙәниәте кафедраһы профессоры.<br>2016 йылдың 21 ноябрендә Өфө ҡалаһында вафат була. Тыуған ауылы Нәбиҙә ерләнгән.<br>- Ә ни өсөн тап уның һүҙҙәренә мөрәжәғәт иттек һуң?<br>- Уҡыусылар, яҡташыбыҙ Әхмәт Сөләймәнов үҙ ғүмерендә Башҡортостан райондарын ғына түгел, беҙгә сиктәш булған өлкәләрҙә йәшәгән башҡорттар араһында йыш була, фольклор материалдарын йыя, “Башҡорт халыҡ ижады” томлыҡтарын нәшер итеүгә күп көс һала. Улар араһында “Оло Урал батыр” эпосы ла бар. Ул 8210 юлдан тора, 2014 йылда «Ватандаш» журналында һәм БДПУ-ның | Бәләкәйҙән әкиәт, йомаҡ, мәҡәл, таҡмаҡ һәм башҡа халыҡ ижады жанрҙарын ишетеп үҫтек.<br><br>- Фольклорсы-ғалим, филология фәндәре докторы.<br>-*Уҡыусыларҙың яуатары.*<br>*Бер уҡыусы бирелгән мәғлүмәтте уҡый.*<br>*Һығымта сығаралар:*<br>- Ул беҙҙең Бөрйән улы, яҡташыбыҙ.<br><br>*Уҡыусыларҙың фекерҙәре.* |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | | редакцияһында айырым китап итеп баҫтырыла.<br>- Һөйләгәндәрҙән ниндәй һығымта эшләргә була?<br>-Ысынлап та, ғалим күп эшләй. Кирәй Мәргән, яҡташыбыҙ Мөхтәр Сәғитовтан ҡала был эпосты ентекле өйрәнә, Бөтә Рәсәй һәм Халыҡ-ара конференцияларҙа сығыштар яһай, гәзит-журналдарҙа фекерҙәре менән бүлешә.<br>- Дәреслектә бирелгән, беҙ өйрәнгән төп “Урал батыр” эпосы беҙгә нисек килеп еткән?<br><br><br><br><br><br><br><br>- Афариндар! Эпос нисә юлдан тора һәм нисә йылдар элек яҙылған икән?<br><br>- Эйе. Был турала Ә.Сөләймәнов: “Эпос – оператив жанр түгел...Алланың йәшен билдәләп булмағандай, мифтыҡын да аныҡ әйтеү – мөмкин булмаған хәл”, - тип әйтә, асылаһы серҙәр күплеген билдәләй. (“Йәшлек, №54, 2003)<br>- Уҡыусылар, эпосты күбегеҙ белә, кем оҡшаған өлөшөн ятҡа һөйләй? Ҡалғандар ятлаған, уҡыған өлөштәрҙе иҫкә төшөрөп ултырырһығыҙ.<br>- Эпосҡа бәйле районда ниндәй эштәр башҡарыла?<br><br><br><br><br><br><br><br>- Уҡыусылар, Бөрйән ерлегендә эпосҡа бәйле ниндәй ер-һыу атамаларын беләбеҙ?<br>(Бөрйән районы картаһы, слайд) | - Ә. Сөләймәнов “Урал батыр” эпосын ныҡлы өйрәнгән, күп эшләгән.<br><br><br><br><br><br><br><br>- Фольклорсы һәм сәсән Мөхәмәтша Буранғолов «Урал батыр» эпосын 1910 йылда Баймаҡ районы 2-се Эткол ауылында мәшһүр сәсәндәр Ғәбит Арғынбаев һәм Хәмит Әлмөхәмәтовтан яҙып ала.<br>*Уҡыусыларҙың яуаптары.*<br>- 4500 юлдан тора, яҡынса 4000 йыл элек барлыҡҡа килгән.<br><br><br><br><br><br><br>*Бер уҡыусы эпостан өҙөк ятлап ишеттерә.*<br><br><br><br><br>- Беҙ бәхетле, сөнки башҡалар бер килеп күрергә хыялланған “Урал батыр” эпосы барлыҡҡа килгән ерлектә йәшәйбеҙ. Эпосты ятҡа һөйләү конкурсы ла Бөрйән ерендә башланғыс алған. Бөгөн эпосты хатта 2-3 йәшлек балалар ҙа беләләр. Аҡбуҙат һыны эшләнде. Районда “Урал батыр” мәктәбе эшләп килә, район уҡыусылары эпосты тулыһынса сәхнәләштереүгә өлгәште.<br>- Шүлгәнташ мәмерйә- һе – Бөрйән районының Ғәҙелгәрәй ауылынан 2-3 |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | | Эпоста ыңғай ваҡиғаларҙың бирелеше тураһында һөйләшеп үтәйек.<br><br>- Ә ниндәй кире ваҡиғалар һәм геройҙарҙың тураһында һөйләй алаһығыҙ?<br><br>- Эпоста геройҙарҙың үҙ-ара мөнәсәбәтенә, хис-тойғоға ҙур урын бирелә. Ниндәй өлөштәрҙе атарға мөмкин?<br><br>Эпос буйынса ниндәй һығымта сығарырға мөмкин? | саҡрым алыҫлыҡта урынлашҡан.<br>- Шүлгән күле – мәмерйә ауыҙы янындағы төпһөҙ күл.<br>-Йылҡысыҡҡан күле – мәмерйәнән 5 км сама- һы алыҫлығында урын- лашҡан.Легендаға ҡарағанда, ул Шүлгән күле менән тоташҡан.<br>- Йәншишмә – ҡайһы бер сығанаҡтарға ҡарағанда, ул Яңы Собханғол ауылы янында урынлашҡан булырға тейеш. Ағиҙел йылғаһы...<br>- Уралдың кешелекте мәңгелек итеүе, Йәнбикә менән Йәнбирҙе йән бирә, тәрбиә алымы: баланы тыйыу, ни өсөн икәнлеген аңлатыу, атай рухында тәрбиәләү. Самрау батшаның илен рәхәтлектә йәшәтеүе. Шүлгән дә Йәншишмәне эҙләп сыға, Шүлгән булмаһа, яманлыҡтар ҡылмаһа, Урал батыр булып һанланыр инеме, яҡшылыҡты аңлар инекме? Һаҡмарҙы Урал рухында тәрбиәләү (шәжәрә, ҡан туған).<br>- Шүлгән Уралға ҡаршы сыға, сөнки көнләшә. Ҡатил батша, яуызлыҡ иле, ҡорбан салдыра, һыуға һалдыра. Уралдың да яңғыҙ башы менән уйлап, кәңәш ҡороп тормаған, батырлығына маһайып, уңмаҫ юлды һайлаған.<br>- Шүлгән менән Урал диалогы. Ҡан эсеү. Һомайҙың үтенесе. Уралдың атаһына мөрәжәғәте. Самрау батша илендә йәшәүе ниндәй рәхәт. (Эпостан өҙөктәрҙе табып уҡыу)<br>- «Урал батыр” эпосы – башҡорт халҡының бөйөк ҡомартҡыһы, ата-бабаларыбыҙ быуындан- |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | | - Дөрөç. Яҡташыбыҙ Ә.Сөләймәнов та Урал батырҙың “Мәңгелек ғүмер” программаһының яңы мәғәнә алыуы тураһында ҙур әһәмиәткә эйә фекерҙәрен яҙып ҡалдырҙы. (“Йәшлек”, №18,19, 2014 й.) | быуынға тапшырған бай хазина. Боронғолоғо, күләме, йөкмәткеһе һәм әһәмиәте яғынан донъяла билдәле башҡа ошо жанр әçәрҙәре менән бер кимәлдә тора. Эпоста халҡыбыҙ асылы, тарихы, мәҙәниәте, ғөрөф-ғәҙәттәре, йәшәү мәғәнәһе, изгелек һәм яуызлыҡ, яҡшы менән яман, тыуым, үлем һәм үлемһеҙлек кеүек мәңгелек төшөнсәләр үҙенсәлекле итеп сағылдырылған. |
| | Индивидуаль эш. (5 минут). | - Эпос геройҙарын ҡылыҡһырлау өсөн, диамант алымына мөрәжәғәт итәйек. 1-се рәт – Урал менән Шүлгән,<br>2-се рәт – Самрау һәм Ҡатил образдарын һүрәтләй. | - *Уҡыусыларҙың үҙаллы эше. Аҙаҡ эш дөйөмләштерелә.*<br>***Урал.***<br>***Батыр, көслө.***<br>***Һаҡлай, яҡлай, ярҙам итә.***<br>***Ил күрке. Ҡаһарман. Баһадир. Яҡлаусы.***<br>***Көнләшә, үсләшә, тыйылмай.***<br>***Яуыз, алдаҡсы.***<br>***Шүлгән.***<br><br>***Самрау.***<br>***Изге, бәхетле.***<br>***Дуçлаша, уртаҡлаша, ярҙамлаша.***<br>***Самрау илендә рәхәт йәшәйҙәр. Бәхет.***<br>***Йәлләмәй, уçаллаша, үлтерә.***<br>***Яуыз. Ҡанһыҙ.***<br>***Ҡатил.*** |
| | Йомғаҡлау.<br>(5 минут) | - Урал иле – Ерҙең кендеге, тарих ҡабатланғанда ла, тормош тап ошо урындан башланыр, тип иçбатлай ғалимдар. Эпосты мәңгеләштереү өсөн ниндәй эштәр башҡарыла? | - Йыл һайын эпосты яттан һөйләүселәр конкурсы үткәрелә, Шүлгәнташ мәмерйәһенең күсермә- һе, Аҡбуҙатҡа һәйкәл. Кинофильм төшөрөлгән. Эпосҡа бәйле байрамдар, «Ирәмәл» тәбиғәт паркы биләмәһендә эпос буйынса ете туҡталҡалы, 28 саҡрымлыҡ туристик |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | | - Донъяла мәңге ҡалыр эш нимә ул? Эпоста кешелек өсөн мөһим тағы ниндәй мәсьәлә күтәрелә?<br><br>- Бөгөн был проблема нисек хәл ителә? Тәбиғәткә нисек ярҙам итергә?<br><br>- Яҡташыбыҙ, фольклорсы-ғалим Ә.Сөләймәновтың тыуыуына быйыл – 85 йыл. Халҡыбыҙ өсөн күп эш башҡарған ғалимдың эшмәкәрлеген дауам итеп, һеҙ, уҡыусылар, нимәләр эшләр инегеҙ?<br><br>- Эйе. “Урал батыр”эпосын, фольклорҙы өйрәнһәк, ата-әсәйҙәр менән өйҙә уҡыһаҡ, иптәштәребеҙ менән әңгәмәләшеп, фекер бүлешһәк, ҡорҙар йыйып һөйләшһәк (был йүнәлештә эш алып барыла ла инде: уҡыусылар был эпосты ятлау ғына түгел, һәр юлын тәрән аңларға ла тейеш. Район- дар буйлап “Урал батыр” мәктәптәре эшләй), эпосты өйрәнеүҙе, ысынлап та, тәрбиәүи кимәлгә еткерер инек. | маршрут, Урал батырҙың һәм эпостың башҡа геройҙарының ағас һындары ҡуйыласаҡ.<br>- Тәбиғәтте һаҡлау, экология. Кешенең түгел, ә тәбиғәттең мәңгелек булыуы иң боронғо эпосыбыҙҙа иҫбатланған. Ҡарт ҡоҙғондоң телмәрендә күпте күргән йән эйәһенең тәбиғәтте сылбыр рәүешле тасуирлауы күп ғилемгә өйрәтә.<br>- Меңәр йылдар элек ҡуйылған мәсьәлә бөгөн киҫкен хәлдә. Тәбиғәт беҙҙән ярҙам көтөп арығас, үҙе баш күтәрә. Һыу баҫа йә ҡоролоҡ, ер тетрәй һ.б. *Уҡыусылар хәл итеү юлдарын ҡарай.*<br><br>-Туған телебеҙҙе, халҡыбыҙ ижадын өйрәнергә, хөрмәт итергә, ҡәҙерләп һаҡларға тейешбеҙ. Көндәлек тормошта уны дөрөҫ ҡулланырға бурыслыбыҙ. (Һәр уҡыусы үҙе сығарған һығымтаны дәфтәргә яҙа). |
| | Рефлексия.<br>Яңы алынған белемгә үҙбаһа ҡуйыу, уҡытыу- сы баһаһы.<br>(3 минут) | - Дәрескә ниндәй маҡсат ҡуйылғайны? Маҡсатыбыҙға ирештекме? Иҫбатлағыҙ. Әйҙәгеҙ, үҙебеҙгә һәм иптәштәребеҙгә баһа ҡуяйыҡ. Дәрес һеҙгә оҡшанымы? | Уҡыусылар дәрес буйынса үҙ фекерҙәре менән бүлешәләр, ниндәй маҡсаттарға ирешеүҙәре хаҡында һөйләйҙәр, үҙҙәренә һәм иптәштәренә баһа ҡуялар. |

| | | |
|---|---|---|
| | Өйгә эш.<br>(2 минут) | Фекерләү иншаһы яҙырға:<br>1. Быуындарҙы ялғап быуындарға.<br>2. Эпоста тәбиғәтте һаҡлау проблемаһының ҡуйылышы.<br>3. Донъяла мәңге ҡалыр эш – ул да булһа яҡшылыҡ.<br>4. Ата-әсә һүҙен тотоу – изге бурыс. |

©Кинзябулатова Ф.Ф., 2024

УДК 37.373

***Мырҙабулатова Г.Ә.,***
*башҡорт теле һәм әҙәбиәте укытыусыһы,*
*Аҫҡар урта мәктәбе*
***Мурзабулатова Г.А.,***
*учитель башкирского языка и литературы,*
*Аскаровская СОШ*

## УҠЫТЫУСЫЛАР ӨСӨН ҠУЛЛАНМА БУЛАРАҠ КҮРЕНЕКЛЕ ҒАЛИМ-ФОЛЬКЛОРСЫ ӘХМӘТ СӨЛӘЙМӘНОВТЫҢ ЮБИЛЕЙ КИСӘҺЕ

## ЮБИЛЕЙНЫЙ ВЕЧЕР ИЗВЕСТНОГО УЧЕНОГО-ФОЛЬКЛОРИСТА АХМЕТА СУЛЕЙМАНОВА КАК РУКОВОДСТВО ДЛЯ УЧИТЕЛЕЙ

**Аннотация.** Одним из способов увековечивания памяти известного ученого-фольклориста Ахмета Сулейманова является его юбилейная дата. В юбилейный год муниципальные школы Бурзянского района в своих стенах проводят вечера памяти, конференции, посвященные ученому, нашему выдающемуся земляку. Данная работа является руководством для учителей башкирского языка и литературы по проведению вечера памяти А. Сулейманова.

**Ключевые слова:** Ахмет Сулейманов, сценарий, оформление, презентация, воспоминания, ученый, научное и творчесткое наследие, фотографии, память.

**Маҡсат:**

1. Күренекле шәхесебеҙ Әхмәт Сөләймәновтың тормошо, эшмәкәрлеге менән уҡыусыларҙы таныштырыу.
2. Сәсәнлектә, һүҙ оҫталығында үҙҙәрен һынап ҡарау.
3. Халыҡ ижадына ҡыҙыҡһыныу, һөйөү тәрбиәләү. Билдәле яҡташтарыбыҙ ижадын хөрмәтләү, ҡәҙерләү.

Сәхнәгә Әхмәт Сөләймәновтың портреты һәм 85 йыл тип яҙылған яҙыу. Ҡурайҙа башҡорт халыҡ көйө “Урал” яңғырай.

1. Алып барыусы: Хәйерле көн, хөрмәтле әҙәбиәт һөйөүселәр, халыҡ ижадын ихтирам итеүселәр!
2. Донъяла ваҡыттан да оҙон нәмә юҡ. Ни өсөн тигәндә, – ул мәңге. Ваҡыттан да ҡыҫҡа нәмә юҡ. Сөнки кеше был фани ғүмерендә бары бер мәл генә. Кеше ғүмере өсөн ваҡыт сикле икән, йыһан өсөн ул икһеҙ – сикһеҙ.

Зарыҡтырған да ваҡыт, үкендергән дә ваҡыт, тиҙәр. Әммә ваҡыт менән дә ярышыр көс бар. Ул да булһа – әҙәбиәт, халыҡ ижады. Яҡшылыҡҡа, матурлыҡҡа, татыулыҡҡа әйҙәр әҙәбиәт һәм, әлбиттә, бар булмышы менән шул әҙәбиәт Ғали йәнәптәренә хеҙмәт итер ғалим. Талантлы ғалим ижадында заман йөҙө ваҡыт юя алмаҫлыҡ итеп мәңгеләштерелә.

Башҡортостан фәне һәм мәҙәниәте өлкәһендә баһалап бөткөһөҙ аҫыл хазиналарға тиң хеҙмәт туплап ҡалдырған фольклорсы ғалим, Башҡортостандың мәғариф алдынғыһы,

атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, республиканың һәм Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған фән эшмәкәре, Башҡортостан Яҙыусылар союзы ағзаһы, Рәсәй Гуманитар фәндәр академияһы академигы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, Мифтахетдин Аҡмулла һәм Жәлил Кейекбаев исемендәге премиялар лауреаты, Бөрйән районының почетлы гражданы булған Әхмәт Мөхәмәтвәли улы Сөләймәновтың тыуыуына 85 йыл тулыуға арнап йыйылғанбыҙ.

2. Һөйләшеүҙе дауам итеп арҙаҡлы шәхесебеҙҙең тормош юлын, эшмәкәрлеген бәйән итергә һүҙҙе 9-сы класс уҡыусыһы Ғәбиҙуллина Әлфиәгә бирәбеҙ. Рәхим ит! (Тормош юлы, эшмәкәрлеге тураһында һөйләп таныштыра. Презентация күрһәтелә).

3. Алып барыусы. Әйтеремде ата – бабаларыбыҙҙың тәрән мәғәнәле, тос фекерле, ҡыҫҡа ла, оҫта ла әйтелгән һүҙҙәренән башлағым килә. Уларҙың сәсән теле былай тигән:

Тыуған йортон белмәгән
Тыуған ауылын белерме?
Тыуған ауылын белмәгән
Тыуған илен белерме?

Тыуған йортта бишек көйөн көйләгәндәр, экиәтен дә, хикәйәтен дә, төрлө легендаһын да һөйләгәндәр, йыйын-мәжлестәрҙә оҙон көйҙө һуҙғандар, йыр туҡталһа, таҡмаҡ әйткәндәр, аҡыллы бәйет, әйтем – мәҡәлдәр менән сәсәнлектә ярышҡандар, табылып-яңырып торған мәҙәктәрен дә һөйләргә онотмағандар. Йәшәгән төйәктән ил – донъя күләмендәге хәл-ваҡиғалар ҙа ситтә ҡалмаған – ауыҙ-тел ижадтарында сағыла барған, күңелдән күңелгә күсә торған... Тимәк, халыҡ йортонда, ауылында, йәшәгән төйәгендә – һәр ерҙә, һәр урында ябай, шул уҡ ваҡытта бөйөк ижадсы тыуған.

4. Әхмәт Сөләймәнов бар булмышын берҙәй үк изге нәмәләргә – фольклорға, Тыуған илгә һәм тыуған халҡына – хеҙмәт итеүгә бағышланы. Әммә һәр кемдең был тормошта үҙ тәғәйен юлы, әҙәбиәттә үҙ урыны, үҙ һүҙе бар. Ә хәҙер күмәкләп иҫкә алыу маҡсатынан «Тамыр» балалар студияһы төшөргән Портрет тапшырыуынан бер өҙөк ҡарап китәйек. Иғтибар экранға!

5. Арыу-талыу белмәй ғилми эштәр менән шөғөлләнгән ғалимыбыҙ, тел,милләт мәсьәләләренә арналған бөтә сараларҙың, фольклор йыйындарының уртаһында йөрөгән әүҙем йәмғәтсе, түкмәй-сәсмәй үҙ ғилемен киләсәк быуынға еткереүсе сәсән остазыбыҙ икәнлеген барыбыҙҙа яҡшы беләбеҙ. Берәмләп-бөртөкләп ауыҙ-тел ижады үрнәктәрен эҙләп алып, уҡымлы итеп эшкәртеп, кире халыҡҡа ҡайтарыу ни тиклем көс талап итә. Ә ваҡыт, ял итеү һәм шәхси тормош менән иҫәпләшеп тормаусы ғалимлыҡ, уҡытыусылыҡ хеҙмәте! 400-ҙән ашыу ғилми хеҙмәт, өс тиҫтәләй монография, мәктәптәр һәм юғары уҡыу йорттары өсөн 40-тан ашыу уҡыу ҡулланмаһы һәм әсбаптар авторы булыуы яҡташыбыҙҙың ниндәй ғилемгә эйә булыуы хаҡында һөйләй.

6. Әйҙәгеҙ, шундай матур үрнәктәрҙең береһе булған «Атайҙың башы бар инеме» исемле күләмәсте ҡарап китәйек.

7. «Батыр онотолмай, әгәр ҙә уны халыҡ онотмаһа» ниндәй тапҡыр, хаҡ әйтелгән һүҙҙәр. Сәхнәгә мәктәп китапханасыһы Ғәбиҙуллина Раушания Зөбәир ҡыҙын саҡырабыҙ. Рәхим итегеҙ!

8. Тыуған төйәгенән бөткөһөҙ көс һәм илһам алып йәшәүсе ғалимыбыҙ хаҡында уның бер туған ағаһы Зәки Сөләймәнов «Ҡустыма» исемле шиғыр ижад итте. Әйҙәгеҙ, ҡыҙҙар башҡарыуында был шиғырҙы тыңлап китәйек.

9. Сәхнәләштереүҙе дауам итеп һүҙҙе тағы ла уҡыусыларға бирәйек.

10. Ҡыҙыҡлы көләмәс һөйләүселәр араһында ярыш иғлан итәбеҙ. Иң ҡыҙыҡлы, һөйләү оҫталығы булған уҡыусыға бүләктәр тапшырыласаҡ.

11. Хәйер, Әхмәт Сөләймәнов ҡайҙа ғына йөрөһә лә үҙ кеше булды. Һәр төбәктең тарихи үҙенсәлектәрен, тел-телмәр нескәлектәрен яҡшы белгән ғалим барыһы менән дә тиҙ генә уртаҡ тел тапты. Беҙҙең мәктәптә булған осрашыу хәтирәһен иҫләү өсөн һүҙҙе Шәкирова Зәлифә Вәдүт ҡыҙына бирәйек.

12. Һүҙемде йомғаҡлап, бай күңелле һәм рухлы яҡташыбыҙҙы иҫкә алып бер минут тынлыҡ иғлан итәм.

©Мурзабулатова Г.А., 2024

УДК 37.01.39.

***Сәйәхова С. Ғ.,***
*башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы,*
*Байназар ДББУ мәктәбенең*
*Яуымбай филиалы*
***Саяхова С.Г.,***
*учитель башкирского языка и литературы,*
*Яумбаевский филиал Байназаровской СОШ*

# ТУҒАН ТЕЛ ҺӘМ ӘҘӘБИӘТ ДӘРЕСТӘРЕНДӘ ЭТНО-МӘҘӘНИТ КОМПЕТЕНЦИЯҺЫН ФОРМАЛАШТЫРЫУ ҺӘМ ҮҪТЕРЕҮ

# ФОРМИРОВАНИЕ И РАЗВИТИЕ ЭТНОКУЛЬТУРНОЙ КОМПЕТЕНЦИИ НА УРОКАХ БАУШКИРСКОГО ЯЗЫКА И ЛИТЕРАТУРЫ

**Аннотация.** В статье раскрываются возможности прививания обучающимся этнокультурной компетенции на уроках башкирского языка и литературы. Одним из способов являются использование на уроке местного материала по краеведению, фольклору, этнографии, что позволяет детям получить знания о малой родине, деревне, где они родились и выросли. Полученные знания закрепляются во время различных конкурсов, смотров, форумов, праздников. Основная цель данной компетенции, по менению автора, состоит в воспитании у обучающихся любови и преданноси к Отчизне в целом и малой родине в частности, гуманизма и человечности, патриотизма и гордости за Родину.

**Ключевые слова:** этнокультурная компетенция, воспитание, обучение, обучающиеся, школа, прививание, курай, национальная одежда, музей, любовь к малой родине, патриотизм.

Туған тел – ул һәр милләттең иң ҡиммәтле хазинаһы, тәрбиә һандығы, халыҡтың рухиәтен байытыусы, аралашыу һәм фекер алышыу сығанағы. Туған телеңде белмәйенсә тороп, башҡа халыҡтарҙың телдәрен өйрәнеү мөмкин дә түгел.Быға күпер ,әлбиттә,тик туған тел аша ғына һалына.Бөйөк тел ярҙамында сал быуаттар төпкөлөнән һәр халыҡтың ҡабатланмаҫ тарихы, милли мәҙәниәте, йәшәйеш үҙенсәлектәре, ғөрөф ғәҙәттәре,йолалары,быуындан быуынға тапшырылып,һаҡланып ҡала килә. Әсәләр үҙ балалары менән туған телдә донъяның иҫ киткес матурлығы, күп төрлө билдәләре һәм сағыу күренештәре хаҡында әңгәмә ҡора. Шуға күрә беҙ туған телебеҙҙе күҙебеҙҙең ҡараһылай яҡларға һәм һаҡларға тейешбеҙ. Туған теле барҙың туған рухы ла бар. Был турала онона ярамай. Түкмәй-сәсмәй генә киләһе быуынға халҡыбыҙҙың рухиәтен байытыусы, быуындарҙы быуындарға ялғаусы туған телебеҙҙе ҡиммәт итеп тапшырырға бурыслыбыҙ. Беҙҙең мәктәбебеҙҙең уҡытыу-тәрбиә эшмәкәрлегендә уҡыусыларға рухи-әхлаҡи, интернациональ һәм патриотик тәрбиә биреү дәрестәрҙә һәм кластан тыш сараларҙа күп төрлө заманса технологиялар һәм алымдар ярҙамында алып барыла.Башҡорт теле һәм әҙәбиәте һәм башҡа тел дәрестәрендә уҡыусыларҙың күңелендә әхлаҡи-патриотлыҡ, кешелеклелек,әҙәплелек һыҙаттары, башҡа милләттәргә, республикабыҙҙың тарихына, ғөрөф-ғәҙәт, йолаларыбыҙға ихтирам менән ҡарау һәм ҡыҙыҡһыныу хистәре уяна. Байрамдарҙа уҡыусылар милли кейемдәр кейеп, туған телдә

йырлап-бейеп, ҡурай моңо оҙатыуында шағирҙарыбыҙҙың шиғырҙарын яттан һөйләп, ата-әсәләрҙе, килгән ҡунаҡтарҙы хайран итәләр.

Беҙ мәктәптә уҡыусыларға этник мәҙәни белем биреүгә ныҡлы иғтибар бирәбеҙ. Ауылыбыҙ, районыбыҙ, республикабыҙҙың күренекле кешеләре менән осрашыуҙар, тыуған яғыбыҙҙың төрлө тарихи һәм тәбиғи мөйөштәренә экскурсиялар, уҡыусыларҙың конкурстарҙа,ярыштарҙа,байрамдарҙа, халыҡ ансамблдәре, бейеү коллективтары смотр-конкурстарында ҡатнашыуҙары, дәрес-әңгәмәләр үткәреү һәм башҡа тәрбиә һәм уҡытыу формалары тормошҡа ашырыла. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрендә уҡыусылар халыҡ әкиәттәре, йомаҡтар, мәҡәлдәр, тиҙәйткестәр,һанашмаҡтар менән танышалар. Халҡыбыҙҙың героик эпостарын өйрәнеүгә ҙур иғтибар бирелә.

Уҡыусыларҙың этник мәҙәниәт компетенцияһын байытыуҙа тыуған яҡты өйрәнеү төп сара булып тора. Улар тарих, сәнғәт, мәҙәниәт, тыуған яҡ әҙәбиәте менән ныҡ ҡыҙыҡһына. Гражданлыҡ тәрбиәһен бире өлкәһендә тыуған яҡты өйрәнеү-бик яҡшы мәктәп. Халҡыбыҙҙың быуаттар дауамында һаҡланып килгән тарихи һәм мәҙәни тәжрибәһенә таянып ҡына бөгөнгө йәш быуын тулы ҡанлы тормош алып бара ала икәнлеге бик дөрөҫ.

Беҙҙең мәктәптә бик бай тыуған яҡты өйрәнеү музейы бар. Уҡыусыларыбыҙ үҙ шәжәрәһен, ауылыбыҙҙың бай тарихын яҡшы белә.Һәр уҡыусы бик ҙур теләк менән үҙҙәренең нәҫел шәжәрәһен төҙөйҙәр,реферат,иншалар яҙалар. Халҡыбыҙҙың Бөйөк Ватан һуғышында еңеүенең 78 йыллығын байрам иткән көндәрҙә, беҙҙең уҡыусыларыбыҙ, үҙҙәренең еңеүсе олаталарының фотографияларын тотоп, ауылдаштарыбыҙ менән бергә “Үлемһеҙ полк” байрағы аҫтында сафтарға теҙелеп урамдан үттеләр. Бындай саралар һәр йәш кеше күңелендә өлкән быуынға хөрмәт менән ҡарау хисе тәрбиәләй, патриотлыҡ тойғолары уята. Мәктәп музейында уҡыусыларға ҡыҙыҡлы экскурсиялар ойошторам. Шулай уҡ улар менән берлектә экспонаттар йыйыу эше даими рәүештә алып барыла. “Кәкүк сәйе”, “Кәкүк төкөрөктәре”, “Һабантуй”, “Боҙ оҙатыу”, “Еп иләү”, “Ҡарға бутҡаһы”, “Уңыш байрамы”, “Ҡаҙ өмәһе” кеүек үҙебеҙҙең яҡтағы байрамдарҙы, йолаларҙы өйрәнәбеҙ һәм үткәрәбеҙ. Милли мәҙәниәтте, милли йолаларҙы өйрәнеүгә ылыҡтырыу уҡыусыларҙы изгелеккә, бер-береһен хөрмәт итергә, аңларға, яуаплылыҡҡа һәм башҡа иң матур дөйөм кешелек сифаттарына эйә булырға ынтылыш бирә. Милли байрамыбыҙ һабантуйҙың әһәмиәте бик ҙур. Был байрам дуҫлыҡ, татыулыҡ, берҙәмлек байрамына әүерелә. Ул һәр кем күңелендә ҡунаҡсыллыҡ, хеҙмәткә һөйөү, дуҫлыҡ, гуманлылыҡ тойғоһо тәрбиәләй.

Башҡорт теле дәресендә ерле материалды файҙаланыу уҡыусыларҙы рухи яҡтан үҫештерә.Бындай мәғлүмәттәр уҡыусыға тыуған яҡтың матурлығын һәм байлығын күрә белергә, үҙенең Кесе Ватанының үткәнен һәм бөгөнгөһөн тәрән аңларға ярҙам итә. Дәрестәрҙә тыуған Башҡортостаныбыҙ тураһындағы киң мәғлүмәт сараларын һәм әҙәбиәтте киң ҡулланам. Башҡорт теле һәм әҙәбиәтен уҡытыу программаһы уҡыусыларҙың рухи-әхлаҡи мәҙәниәтен байытыуға нигеҙләнгән. Уҡытыусы үҙе лә халҡының туған телен, әҙәбиәтен һәм мәҙәниәтен яҡшы белергә тейеш. Ул бит һәр уҡыусы, шәхес күңелендә милли ғорурлыҡ тойғоһо уята,йүнәлеш бирә. Уҡытыу-тәрбиә эшендә уҡыусыға үҙ аллы үҫешһен өсөн яҡшы уңайлыҡтар булдырыу этник үҙ-ара бәйләнеш системаһында беҙҙең эштә приоритет булып тора.

Башҡорт фольклоры уҡыусыларҙы тәрбиәләүҙә ҙур әһәмиәтле урын биләй.Башҡорт халыҡ әҫәрҙәре уҡыусыларҙың аҡыл үҫешенә, эстетик һәм әхлаҡи тәрбиә биреүҙә ыңғай йоғонто яһай. Шәхесте үҫтереүҙә туған телебеҙгә,тарихыбыҙға, мәҙәниәтебеҙгә һаҡсыл ҡараш булдырыуҙы онотоpға ярамай. Туған тел һәм әҙәбиәт дәрестәре – улар тормош, мәҙәниәт һәм тәрбиә дәрестәре. Намыҫ, ышаныслылыҡ, кешелек дәрәжәһе,ғаиләгә, мәктәпкә, Ватанға һөйөү, гражданлыҡ... Дәрестәрҙә был юғары сифаттарҙы тәрбиәләү эше беҙҙең мәктәптә яҡшы ҡуйылған. Бөйөк Ватаныбыҙға, тарихының һәм мәҙәниәтенең героик биттәренә арналған дәрестәр үткәрелә. Уҡыусыларыбыҙ тарихи китаптар,ваҡытлы матбуғат баҫмаларын яратып уҡыйҙар. Радио һәм телевизорҙан ҡыҙыҡлы тапшырыуҙар

ҡарайҙар. Күбеһенсә бындай эштәр өйгә бирелә. Уҡыусыларыбыҙ кластан тыш сараларҙа,мәктәп,район,төбәк-ара конкурстарҙа ҡатнашып,призлы урындар яулайҙар.

“Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре” ҡанунын тормошҡа ашырыу барышында беҙҙең мәктәп уҡытыусылары уҡыусыларҙы Башҡортостан Республикаһы халыҡтарының милли йолалары нигеҙендә тәрбиәләүгә ныҡлы иғтибар бүләләр. “Дан йырлайым һиңә,Ватаным!”, “Минең яратҡан уҡытыусым”, “Ғорурланам һинең менән,тыуған Башҡортостаным!”, “Ер хужаһы” һәм башҡалар; төрлө темаларға туған телдә шиғыр ятлаусылар конкурсы, “Урал батыр” эпосын башҡарыусы йәш сәсәндәр конкурсы, “Балалар әҙәби картаһы” республика конкурсы, “Минең Рәми” яттан шиғыр һөйләүселәрҙең республика Интернет-видеоконкурсы,шағир һәм яҙыусыларҙың юбилейҙарына арналған республика конкурстарында бик теләп ҡатнаша уҡыусыларыбыҙ.

Туған әҙәбиәт дәрестәрендә уҡыусыларҙың китап уҡыуға ынтылышы бермә-бер арта бара. Үҙ туған телеңдәге ҡыҙыҡлы китаптарҙы уҡыу китап уҡыуға ынтылышты арттыра ғына. Туған телдә уҡыу уҡыусыларҙы рухи-әхлаҡи тәрбиәләү дәрестәре икәнлеген онотторға ярамай. Минең уҡыусыларым предметым буйынса мәктәп,муниципаль һәм төбәк-ара олимпиадаларҙа,төрлө кимәлдәге фәнни-ғәмәли конференцияларҙа йылда ла ҡатнашып,яҡшы һөҙөмтәләргә ирешәләр.Башҡорт теле һәм әҙәбиәте,Башҡортостан тарихы һәм мәҙәниәте буйынса олимпиадаларҙа минең уҡыусыларым йылда ла муниципаль кимәлдә призлы урындар яулайҙар.Үткән уҡыу йылдарында 9-сы кластан минең уҡыусым Башҡортостан тарихы һәм мәҙәниәте фәненән беренсе урын яулап,төбәк-ара олимпиадала,унан алдағы йылда башҡорт теле һәм әҙәбиәте олимпиадаһында уҡыусым беренсе урын яулап,төбәк-ара олимпиадала ҡатнашты.Башҡорт теле буйынса Бөтә Рәсәй Дистанцион олимпиадаһында ике уҡыусым еңеүсе булып, дипломға лайыҡ булдылар. “Кейекбаев уҡыуҙары” республика фәнни-ғәмәли конференцияһында бер уҡыусым еңеү яулап, беренсе дәрәжәләге дипломға лайыҡ булды.Башҡорт теленән эҙләнеү эштәре муниципаль,республика конкрстарында минең уҡыусыларым бик теләп ҡатнашалар һәм һәр ваҡыт юғары уңыштар яулайҙар.

Шулай итеп, беҙ, туған тел һәм әҙәбиәт уҡытыусылары,илебеҙҙең ысын патриоттарын тәрбиәләйбеҙ һәм уҡытабыҙ, мәктәбебеҙгә, районыбыҙға,тыуған республикабыҙға, телебеҙгә, Башҡортостан Республикаһы биләмәһендә йәшәгән халыҡтарҙың мәҙәниәтенә һөйөү һәм ихтирам тойғолары тәрбиәләйбеҙ. Ғаиләнән,мәҙәни ҡиммәттәрҙе, мәҙәниәтте, тарихты, төрлө милләт халыҡтары менән яҡшы мөнәсәбәт һаҡлауҙан башланған этник мәҙәниәт белеме – уҡыусыларҙа әхлаҡи-патриотик һыҙат булдырыуҙың төп нигеҙе. Уҡытыусының төп маҡсаты – ул үҙ иленең булдыҡлы, һәр яҡлап үҫешкән,гармониялы граждандарын тәрбиәләү. Йәмғиәт тормошона әҙерлекле, эшһөйәр, яңы заман технологиялары менән эш итә белгән, күп милләтле тыуған илебеҙҙең патриоты булырлыҡ,үҙ туған телен һәм әҙәбиәтен, мәҙәниәтен, үҙ халҡының күп быуатлыҡ тарихын, бай этник йолаларын яҡшы белгән, уларҙы һаҡлаған, дәғүәселеккә һәләтле һөнәр эйәләре, илһөйәр шәхестәр тәрбиәләү – беҙҙең һәр беребеҙҙең бурысыбыҙ.

©Саяхова С.Г., 2024

УДК 37.373

***Хисаметдинова А.А.,***
*Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы,*
*Иҫке Монасип УДББ мәктәбе*

***Хисаметдинова А.А.,***
*учитель башкирского языка и литературы,*
*Набиевский филиал*
*МОБУ СОШ Старомунасипово*

## ӘХМӘТ СӨЛӘЙМӘНОВТЫҢ ИЖАД ШИШМӘҺЕ: КЛАСТАН ТЫШ ДӘРЕС ҠУЛЛАНМАҺЫ БУЛАРАҠ

## ТВОРЧЕСКИЕ ИСТОКИ АХМЕТА СУЛЕЙМАНОВА: КАК РУКОВОДСТВО ВНЕКЛАССНОГО УРОКА

**Аннотация.** В данном сообщении приводится образец руководства к внеклассному уроку по означенной теме, посвященной жизни и творчеству известного ученого-фольклориста А.М. Сулейманова. Проведение подобных уроков позволит глубже познакомить учащихся с биографией и научной деятельностью известного ученого и гражданина.

**Ключевые слова:** Ахмет Сулейманов, ученый, фольклорист, жизнь, биография, Бибикамал, сестра, брат, родник, творчество.

Зал биҙәлгән. Әхмәт Сөләймәновтың хеҙмәттәренән күргәҙмә ойошторолған. Стенд һәм фотолар урынлаштырылған. Видео һәм фото презентациялар күрһәтеү өсөн ҡулайламалар. Музыкаль биҙәлеш мотлаҡ.

**Ҡатнашалар:**

Алып барыусылар һәм уҡыусылар, Бибикамал инәй образындағы һөйләүсе.

**I алып барыусы**: Башҡортостан фәне һәм мәҙәниәте өлкәһендә баһалап бөткөһөҙ аҫыл хазиналарға тиң фундаменталь хеҙмәт туплап ҡалдырған фольклорсы ғалим, филология фәндәре докторы, профессор, академик, Рәсәй Гуманитар Фәндәр академияһы ағзаһы, Рәсәй һәм Башҡортостан Яҙыусылар союзы ағзаһы, Салауат Юлаев премияһы лауреаты Әхмәт Сөләймәнов нәҡ халыҡ ижадының бишеге булған Бөрйән еренән тәүге аҙымдарын яһарға тейеш булған төҫлө.

**II алып барыусы:** Арыу-талыу белмәй ғилми эштәр менән шөғөлләнгән ғалимыбыҙ, тел, милләт мәсьәләләренә арналған бөтөн сараларҙың, фольклор йыйындарының уртаһында йөрөгән әүҙем йәмғиәтсе, түкмәй-сәсмәй үҙ ғилемен киләсәк быуынға еткереүсе сәсән остазыбыҙ тыуған төйәгенән бөткөһөҙ көс һәм илһам алып йәшәне.

**III алып барыусы:** Алып барыусы: Бер туған ағаһы Зәки Сөләймәнов “Ҡустыма” шиғырында әйткәнсә:

Ағиҙелең үҙе сафлыҡ бирһә,
Шаршылары бирһә ярһыуҙар
Тоноҡтары сабырлыҡтар бирһә,
Уйҙар тәрәнлеге-ятыуҙар...

**I алып барыусы:** Хәйер, Әхмәт Сөләймәнов ҡайҙа барһа ла үҙ кеше булды. Һәр төбәктең тарихи үҙенсәлектәрен, тел-телмәр нескәлектәрен яҡшы белгән ғалим барыһы менән дә тиҙ генә уртаҡ тел тапты. Һәр саҡ олоһо-кесеһе менән аралашып, берәмләп-бөртөкләп ауыҙ-тел ижады үрнәктәрен эҙләп алып, уҡымлы итеп эшкәртеп кире халыҡҡа ҡайтарыу ни тиклем белемлелек, сабырлыҡ, мәғрифәтлелек һәм мәҙәниәтлелек талап итә.

**II алып барыусы:** Ә ваҡыт, ял итеү һәм шәхси тормош менән иҫәпләшеп тормаусы ғалимлыҡ, уҡытыусылыҡ хеҙмәте! 400-ҙән ашыу ғилми хеҙмәт, өс тиҫтәләй монография, мәктәптәр һәм юғары уҡыу йорттары өсөн 40-тан ашыу уҡыу ҡулланмаһы һәм әсбаптар авторы булыуы яҡташыбыҙҙың ниндәй ғилми көскә эйә булыуы хаҡында һөйләй.

**III алып барыусы:** Ни өсөн унық күңеленә халыҡ ижады яҡын була? Бындай оло хеҙмәттең нигеҙе нимәлә? Әйҙәгеҙ ғалимыбыҙҙың тәүбишегенә әйләнеп күҙ һалайыҡ!

**I алып барыусы**: Ғаилә башлығы Сөләймәнов Мөхәмәтвәли Хәйрулла улы тураһында унық замандаштары, бик шаян кеше булды тип хәтерләйҙәр. Яйы тура килгәндә төртмә таҡмаҡтары менән мәрәкәләп ебәреүгә аптырамаған Мөхәмәтвәли бабай. Әсәһе Нурикамал Сөләймәнова 1907 йылда тыуған. Ул да бик йор һүҙле, ауыр замандарҙа ла диндән айырылмаған сая телле, эшкә уңған ғаилә усағы һаҡсыһы булған. Ул ул заманда

ятыраҡ күрненеш йәшелсә үҫтереп һатыу менән шөғөлләнгән. Әхмәт Сөләймәнов әсәһен һәр ваҡыт, иманлы һәм диндар кеше булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алып хәтерләгән.

**II алып барыусы:** Ауылыбыҙ сәсәне Әхмәт Сөләймәновтың бер туған ағаһы Зәки Сөләймәнов та “Атайым” шиғырында атаһының да таҡмаҡтарын ауылдаштары отоп алып, һөйләп йөрөүҙәре хаҡында яҙа:

**Уҡыусы:**

Әүәҫ булды таҡмаҡ сығарырға
Ҡыҙыҡ хәлгә ҡалған һәр кемгә
Әсе телле төртмә таҡмаҡтарын
Ҡайһы берәү иҫләй хәҙер ҙә.

Атаһы бәләкәй Әхмәттең дә телдәр буласағын самалаған.

**III алып барыусы**: Сөләймәновтар ғаиләһе тураһында яҡташыбыҙ Самат Ғәбиҙуллин “Яҡташым, ҡәләмдәшем” мәҡәләһендә телгә маһир, сәсән телле ауылдаштарыбыҙ хаҡында: Сөләймәновтар- сәсәнлектең, йор һүҙлелектең Бөрйәндә һаҡланып ҡалған бер ҡыуағы ул тип яҙған” Ул хатта баҫтырырып сығарырға тип китап та әҙерләй, тик өлгөрмәй. Мәрхүм булып ҡала. Әхмәт Мөхәмәтвәли улы үҙе лә, атайым менән әсәйем хатта үҙ-ара һөйләшкәндә лә шиғырға күсеп китәләр ине тип хәтерләр булған. Ауылда әле лә улар сығарған таҡмаҡтар йәшәп ята.

Атайым да әсәйем дә рифмалаштырып һөйләүгә оҫта булдылар тип хәтерләп яҙған ғалим.

**Уҡыусы**:

Әсәһенең бер әйтеүе:
Ишегем алды йүкәлек
Ҡырҡып алдым кәртәлек
Ҡулъяҙмамды яҙып ҡуям
Булһын һеҙгә иҫтәлек
Быяла йәшник эсенә
Помидор тултыралар
Иҫегеҙгә төшөр әле
Бергәләп ултырыуҙар

**I алып барыусы**: Оло ағаһы тураһында бик яҡты хәтирәләр менән йәшәгән Әхмәт Сөләймәнов. Ошо юлдан китеүенә лә ағаһының йоғонтоһо көслө булды тип һанай сәсән. Ағаһы ла фольклор менән мауыға. Мөхәмткилде Мөхәмәтвәли улын ауылдаштары шулай уҡ зирәк һәм оҫта телсе буларак хәтерләйҙәр.Ул үҙенең әҫәрҙәрен Кесе Илсебай, Н.Башарт ҡушаматы менән район гәзиттәрендә баҫтырған.

**II алып барыусы**: Шулай итеп, ошондай мөхиттә үҫкән кешенең халыҡ ижады менән мауығып китеүе, әлбиттә, осраҡлы түгел. Ғаиләһендә үк күңеленә ижад орлоҡтары, халыҡ ижадына мөхәббәт сәсеп үҫтерелгән Әхмәт Сөләймәнов киләсәктә халҡыбыҙ ижадын быуындарға тапшырыусы иң төп сығанаҡтарҙың береһенә әүерелә. Халыҡ араһында йөрөп, бәләкәй генә, бер бөртөк кенә булһа ла әкиәт, бәйет, ҡобайыр яҙып алыуға ирешһә, ул үҙен бик бәхетле һанай торған булған тип хәтерләй уның ғаиләһе.

**III алып барыусы**: Иң оло апайҙары Бибикамал да әсәләренең кинәйәле һүҙле булыуын һәр саҡ телгә алыр булған. Йәл, быны ваҡытында яҙып алыусы булмаған. Бибикамал инәй заманында уны кейәүгә бирергә теләгән кешегә сыҡмай, Урал йәйләүенә мал көтөүгә ҡасып китә. Әсәһе уға күстәнәс менән бергә ошондай шиғыр яҙып ебәрә.

**Уҡыусы:**

Урал ере- һыҙғырыҡ ел,
Унда ҡышлаусыларға,
Урал ере иҫкәрмә ул,
Йәрен ташлаусыларға!

**I алып барыусы**: Бибикамал инәй үҙе лә бик тапҡыр һүҙле, хисле кеше булған. Уны Әхмәт Сөләймәнов бәйеттәр сығарыуға оҫта булды, төртмә таҡмаҡтары менән колхоз

председателенән дә, бригадирҙан да әрләнеп ала торғайны тип хәтерләй. Армияла сағымда миңә яҙған хаттарында ҡағыҙҙың бер буш урынын ҡалдырмай, сәләм, таҡмаҡ яҙа торған ине тип хәтерләй. Оло апаһы бәләкәй Әхмәтте һәр саҡ үҙе менән алып йөрөр булған.

**II алып барыусы:** Ғаиләләге күңелһеҙ ваҡиғаларҙы ла сағылдырмай ҡалдырмаған ул бәйеттәрендә:

**Бибикамал инәй образы:**

Атайымды алып киттеләр,
Ауылдағы бөтә бабайҙар
Ырғыҙлыла ағас ҡырҡа ине-
Өйҙә лә юҡ ине ағайҙар.
Өс йәш кенә ине ул саҡта
Кинйә ҡустым, һиңә, Әхмәткә
Был донъяла ҡайһы ваҡыт
Булып ҡуя бит хикмәт тә.
Атайымды ерләп ҡайтҡас та,
Донъяға тыуҙы Гәүһәр,
Бына бит ул бер мөғжизә
Шулай ҙа була хәлдәр.
Атайымдан Әхмәт ҡустым,
Йәтим ҡалды өс йәштә.
Ашарға ла саҡ-саҡ ине,
Һуғыш ине ул саҡта

**III алып барыусы**: Ғөмүмән, Бибикамал инәйҙең шиғырҙарын уҡып, тотош һуғыш осорондағы ҡатын- ҡыҙҙарҙың ауыр тормошон күҙ алдына килтерергә була.

**Бибикамал инәй образы:**

Беҙ “Партизан” ҡыҙҙары **(Шиғырҙы ҡыҫҡартырға мөмкин)**

Беҙ бәләкәй саҡтарҙа
Колхоз “Партизан” ине
Халҡы эшсән, ашлығы ла
Бигерәк уңа ине.

“Партизан”ды ул ваҡытта
Етәкләй Зәйнәғәле (Сәфәрғәлин)
Илдәр тыныс, балалар шат,
Һуғыш та юҡ саҡ әле.

Һуғыш ҡаты барған саҡта,
Беҙ ятманыҡ тик кенә.
Бер тиҫтер ҡыҙҙар йөрөнөк
Колхоз ҡушҡан эшенә.

Саптыҡ бесән, урҙыҡ ураҡ,
Ятманыҡ күктән һорап.
Утын-бесәнде ташыныҡ,
Үгеҙҙе егеп һөйрәп.

Күркәтауға ебәрҙеләр,
Хәҙисә менән беҙҙе.
Һыу алырлыҡ юл булһын, тип
Уйып ҡайтырға боҙҙо.

Алты ҡыҙ ағас ҡырҡабыҙ,
Ашарка урманында.
Яҙһаң, бик күп һағыш ята
Үткәнде уйлағанда.

Фәриҙә менән Хәбирә,
Ғәйниә һәм Гөльямал.
Ағас ҡырҡыу – ирҙәр эше,
Ҡыҙҙарға ауыр яман,

Ҡарурманда йүкә һуйһаҡ –
Йөкмәп ҡайттыҡ йәйәүләп.
Ауыр булһа ла түҙгәнбеҙ,
Бер кем торманы йәлләп.

Молотилка менән иген
Һукты ана шул ҡыҙҙар,
Беҙ йырлап эштән ҡайтканда,
Яңғырап торҙо ҡырҙар.

Көндөҙ һуғабыҙ игенде,
Төндәр үтә вилкала.
Беҙ ҙә ҡарышып тормайбыҙ,
Тамаҡтар ас булһа ла.

Бер көн башҡарған эшебеҙ

Өс эш көнө яҙырлыҡ,
Беҙ “Партизан” ҡыҙҙарына
Түгел былар яңылыҡ.

**I алып барыусы:** Әхмәт Сөләймәновтың тағын бер ағаһы – шиғыр, таҡмаҡ, бәйет сығарырға маһир Зәки Мөхәмәтвәли улы ла ғаиләлә үҫә, бала саҡтан уҡ шиғырҙар яҙа башлай. Тик ижадын һуң ғына матбуғатҡа тәҡдим итә. 53 йыл хеҙмәт стажлы БАССР мәктәптәренең атҡаҙанған уҡытыусыһы, тиҫтә йылдар буйына мәктәп етәксеһе Зәки Мөхәмәтвәли улы ауылыбыҙҙың сәсәне булды. “Күргәндәрем, кисергәндәрем” (Өфө, 2005),

**II алып барыусы**: “Йылдар, юлдар, уйҙар” (2011), “Бәйеттәр” (Өфө, 2016) китаптары һәм йыйынтыҡҡа ингән ижад емештәре бар. Туғандары Нәби мәктәбендә йыл һайын Зәки Сөләймәнов исемендәге премия тапшыра. Уға остазыбыҙҙың үҙе һымаҡ ижад, спорт, фән һәм шахмат уйнау өлкәһендә уңыштарға ирешкән уҡыусыларға тапшырыла. Зәки олатайҙың ҡустыһы тураһында бик матур, ысынбарлыҡты һүрәтләгән шиғырҙары бихисап.

**Уҡыусы:**

Сәстәреңә салдар иртә төштө
Ҡайғыларҙы әллә күп күрҙең.
Әллә инде бер үк ҡайғыларҙы
Тәрәнерәк минән кисерҙең.

**Уҡыусы:**

Йәй көндәре ялға сығыу менән,
Ашығалар күптәр диңгеҙгә.
Һин ҡайтаһың тыуған ауылыңа,
Рәнйемәҫ, тип, диңгеҙ минһеҙ ҙә.

**Уҡыусы:**

Уйлайҙарҙыр: тәбиғәткә сумып
Ял итә, тип,Әхмәт Бөрйәндә
Ултыраһың яҙмаларға сумып
Нисә тапҡыр барып инһәң дә.

**III алып барыусы**: Әхмәт Сөләймәновтың уҡыусыһы шағирә Ғәлиә Кәлимуллина әйткәнсә,

Урал батыр илдәренең
Изге рухы инегеҙ.
Нисә ҡустығыҙ бар ине,
Нисәү ине һеңлегеҙ?!.

Ғалимдың туғандары ғына түгел, балалары ла фән донъяһы эшлеклеләре, ижад кешеләре.

**I алып барыусы:**

Өлкән ҡыҙы – Итҡолова (Сөләймәнова) Ләйсән Әхмәт ҡыҙы – философия фәндәре докторы, доцент.

Улы Йәлил Әхмәт улы Сөләймәнов – Рәсәй рәссамы, Рәсәй Федерацияһы, Башҡортостан Республикаһы атҡаҙанған рәссамы, Ш. Бабич ис. премия лауреаты.

Хөббитдинова (Сөләймәнова) Нәркәс Әхмәт ҡыҙы – ғалим-филолог, филология фәндәре докторы, “Ал да нур сәс!” медале кавалеры, М. Аҡмулла ис. премия лауреаты.

Улар барыһы ла, башлы-күҙле, ғаиләле булып, Өфөлә йәшәй. Әхмәт Сөләймәновтың алты ейәне, ике бүләсәһе бар.

**II алып барыусы**:

Бер интервьюһында Әхмәт Сөләймәнов ошолай тигән:

Ейәнем минән, кешеләр барыһы ла үләме тип һораны. ...кеше үлмәй ул. Минең дә әсәйем, атайым бар ине. Мин уларҙан тыуғанмын. Һинең өләсәйең менән минән – әсәйең, ә уларҙан һин тыуғанһың. Һин дә бер заман атай, унан олатай булырһың, һинең дә уландарың,

ҡыҙҙарың, ейән, ейәнсәрҙәрең булыр… Кеше ғүмере ана шулай быуындан-быуынға күсеп тик бара ул, – тигән булдым”.

Эйе, кеше үҙе яҡты донъяларҙы ҡалдырып китһә лә, уның исеме, башҡарған эштәре ҡала. Әхмәт Сөләймәнов һымаҡ арҙаҡлы ауылдашыбыҙ булыуы менән ғорурланабыҙ!

**Әҙәбиәт**


1. Сөләймәнов Әхмәт. Әкиәттә хәҡиҡәт. Өфө; Китап, 1997.



©Хисамитдинова А.А., 2024

## МУНИЦИПАЛЬ ДӨЙӨМ БЕЛЕМ БИРЕҮ МӘКТӘП УҠЫУСЫЛАРЫ СЫҒЫШТАРЫ

## ВЫСТУПЛЕНИЯ ОБУЧАЮЩИХСЯ МУНИЦИПАЛЬНЫХ ОБЩЕОБРАЗОВАТЕЛЬНЫХ ШКОЛ

УДК 008; 793

***Алтынбаева Алтынай,***
*Аҫҡар УДББ мәктәбенең 7 кл. уҡыусыһы,*
*ет.:* ***Мырҙабулатова Г.Ә.,***
*уҡытыусы*

***Алтынбаева Алтынай,***
*ученик 7 кл. Аскаровской СОШ,*
*рук.:* ***Мурзабулатова Г.А.,***
*учитель*

# ӘХМӘТ СӨЛӘЙМӘНОВТЫҢ ХАЛЫҠ ИЖАДЫ БУЙЫНСА ТИКШЕРЕНЕҮҘӘРЕ ҺӘМ ФОЛЬКЛОРҘЫ ҺАҠЛЫУ МӨҺИМЛЕГЕ ХАҠЫНДА

# ОБ ИССЛЕДОВАНИЯХ АХМЕТА СУЛЕЙМАНОВ ПО НАРОДНОМУ ТВОРЧЕТВУ И ВАЖНОСТИ СОХРАНЕНИЯ ФОЛЬКЛОРА

**Аннотация.** Ахмет Сулейманов всю свою жизнь посвятил собиранию и сохранению башкирского народного творчества, в своих исследованих он изучал жанры легенд и преданий, сказок, эпоса, обрядового фольклора и оставил большое научное наследие. Многие образцы фольклора, пословицы, поговорки он записывал у своих земляков.

**Ключевые слова:** Ахмет Сулейманов, труды, научные исследования, сказки, эпос, обряды, пословицы, поговорки, собрать, сохранять, поэтика, стиль.

Заманалар үҙгәреү менән беҙҙең әҙәбиәтебеҙ, мәҙәниәтебеҙ ҙә ҙур үҙгәрештәр кисерә. Нидәйҙер әҫәрҙәр онотолоп юҡҡа сыға, ниндәйҙер яңы йүнәлештәр барлыкка килә һәм башҡалар. Ләкин беҙ үҙебеҙҙең үткәнебеҙҙе, ғөрөф-ғәҙәттәребеҙҙе, миллитебеҙҙең йөҙөк ҡашы булған эпос, риүәйәт, экиәттәребеҙҙе онотороға хаҡыбыҙ юҡ. Бихисап шәхестәребеҙ, яҙыусыларыбыҙ милләтебеҙ ижадын беҙгә килтереп еткереп, быуындан-быуынға ҡалдырыр өсөн күп көс һалған. Шуларҙын береһе Бөрйәнебеҙҙең аҫыл аҡһаҡалы, милләтебеҙҙең аҡыл эйәһе, халҡым, илем, телем тип янған шәхесебеҙ, бар булмышы, тормошо менән итәғәтлелек, кешелеклелек, кеселеклелек өлгөһө булған арҙаҡлы Кеше, билдәле ғалим, профессор, академик Ил ағаһы Әхмәт Мөхәмәтвәли улы Сөләймәнов.

Ғалим 18 томдан торған «Башҡорт халыҡ ижады» серияһын әҙерләп нәшер итеүҙә турана-тура ҡатнаша. Ул шулай уҡ фундаменталь хеҙмәттең рус телендә сыҡҡан баҫмаһының өс томын әҙерләүсе. Был эше өсөн башҡа авторҙар менән бер рәттән Салауат Юлаев исемендәге премияға лайыҡ була.

Ул 400-ҙән ашыу фәнни хеҙмәт, шул иҫәптән 30-ҙан артыҡ монография, мәктәп уҡыусылары һәм юғары уҡыу йорттары студенттары өсөн 40-тан артыҡ уҡыу әсбабы һәм уҡыу-методик ҡулланма авторы.

Фәнни эшмәкәрлеге башҡорт көнкүреш экиәттәренең, эпостарының поэтикаһын һәм стилен тикшереүгә, йола һәм балалар фольклорын өйрәнеүгә арналған. “Әкиәттә хәҡиҡәт” (1997), “Халыҡтың юмористик сәсмәүере” (1998), “Башҡорт халыҡ новеллаһы” (“Башкирская народная новелла”; 2005) һ.б. монографияларында башҡорт халыҡ новеллистик әҙәбиәтенең генезисы һәм жанр сиктәре, сюжет‑тематика составы ҡаралған.

Аҡмулла, Ш.Бабич, Һ.Л.Дәүләтшина, Ж.Ғ.Кейекбаев, И.Л.Кинйәбулатов, М.Кәрим, Р.Ф. Мифтахов, К.Мәргән ижадтарына арналған тикшеренеүҙәр; хәҙерге замандың ижтимағи-сәйәси проблемалары күтәрелгән “Иҫле иҫәп белер” (2002), “Аң булайыҡ, ғәмһеҙ булмайыҡ!” (2003) публицистик китаптар; шулай уҡ “Һәр мөғжизә – миңә хәҡиҡәт” (2007) шиғырҙар йыйынтығы, “Ҡобайырым – нәсихәт” (2014) ҡобайырҙар һәм тәржемәләр авторы; “Хәйләкәр төлкө” (“Хитрая лиса”) (2015), “Алтын-сәс” (“Златовласая”), “Әсә йөрәге” (“Сердце матери”) һ.б. балалар өсөн башҡорт халыҡ әкиәттәре серияһын төҙөүсе һ.б.

Әхмәт Сөләймәнов ғүмеренең ахырынаса “Урал батыр” эпосы өҫтөндә эшләне. Халҡыбыҙҙың иң боронғо ҡомарткыһы тураһында күптән инде әйтеләһе әйтелгән, тикшерәһе тикшерелгән кеүек, әммә уның “Урал батыр”ҙың асылына төптәнерәк төшөнгөһө килә, аңларға тырыша. “Оло ”Урал батыр” тигән хеҙмәте бөтә донъя кимәлендә эпостар өҫтөндә бығаса башҡарылған тикшеренеү һөҙөмтәләренә һәм тәжрибәләренә таянып ижад ителгән хеҙмәт.

Халҡыбыҙҙың аҫыл байығын йыйыуға, туплауға Әхмәт Сөләймәновтың өлөшө бик ҙур. Уларҙы йыйыу һәм киләһе быуынға еткереү һәр беребеҙҙең изге бурысы.

Мин дә үҙ сиратымда Аҫҡар ауылы халҡы араһында ғына башҡарылған таҡмаҡтарҙы ветеран уҡытыусы Нафиға Зиннәт ҡыҙы Теләүембәтованан яҙып алдым. Уға әсәйе мәрхүмә Мәрйәм инәй яҙып ҡалдырған булған.

Йырлар инем, йырлар инем,
Йыр ҡапсығым йыртылған.
Кисә бер йыр оҡкан инем,
Ул да булһа онотолған.

Сәсәтәрендә майлап тар,
Майлай торған майы бар.
Теләк ҡабул була торған
Рамаҙан айы бар.

Ҡара костюмдарын кейеп,
Ҡара фуражка кейгән.
Наверно, ҡайғылары бар,
Баштарын түбән эйгән.

Ҡулымдағы йөҙөгөмдөң
Исемдәре Моратша.
Кәпәс кейеүең килешмәй,
Кейеп йөрө фуражка.

Өҫтөмдәге күлдәгемдең
Поясы бер ҡат ҡына.
Барып та күрә алмайым,
Ебәрәмен хат ҡына

Берәүгә лә сер түгел 21 быуат – технология, интернет һәм компьютер быуаты. Бөтә булмышыбыҙ, йәшәйешебеҙ ошо зомби-йәшниктәр менән бәйле, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы. Әлеге ваҡытты Интернет сығанаҡтарына һылтанып үҙебеҙҙең үткәнебеҙҙе, йолаларыбыҙҙы, ғөрөф-ғәҙәттәребеҙҙе, олатай, өләсәйҙәр ижад иткән бәйет, ҡобайырҙарыбыҙҙы онотоп бөтөп барабыҙ. Уларҙа бит халыҡ яҙмышы, милләтебеҙ үткәне. Ә. Сөләймәнов кеүек ғалимдар туплаған башҡорт халыҡ ижады хаҡында китап, фәнни эҙләнеүҙәр, төрлө йыйынтыҡ-китаптарҙы беҙ күҙ ҡараһылай һаҡларға, уларҙы әленән тулыландырып, яңыртып сығарып үҙебеҙҙән һуң ҡалған быуынға тапшырырға тейешбеҙ. Үҙ теленән оялмаған, үҙ йолаларын хөрмәт итеп, быуындар сынйырын өҙмәгән, рухлы һәм маҡсатлы йәштәр беҙ – милләт киләсәге булырға бурыслыбыҙ!

© Алтынбаева А., Мурзабулатова Г.А.,2024

УДК 008; 793

***Әйүпова Лиана,***
*Иҫке Монасип УДББ мәктәбе,*
*10-сы класс уҡыусыһы,*
*ет.:* ***Истәкова Р.Ә.,***
*башҡорт теле*

*һәм әҙәбиәте укытыусыһы,*
*Иҫке Монасип ау.*
***Аюпова Лиана,***
*ученик 10 кл. Старомунасиповской СОШ,*
*рук.: **Истякова Р.А.,***
*к. филол. н.,*
*учительница башкирского языка и литературы,*
*дер. Старомунасипово*

## ТАҠМАҠ – ҺҮҘ ҺӘМ ЮМОР БАЙЛЫҒЫ (ТАҠМАҠСЫ ШӘМСЕНИСА ӨЛӘСӘЙЕМ)

## В ТАКМАКАХ* БОГАТСТВО ЮМОРА (ТАКМАКСЫ БАБУШКА ШАМСИНИСА)

**Аннотация.** В статье рассматривается фольклорный жанр такмак, который отличается своей живой, скоро создаваемой природой на ту или иную тему, в разные ситуации, шутливой характеристикой поведения человека и т.д. В такмаках отразился ум, смекалка, меткые изречения сочинителя. Они богаты на юмор и сатиру. Все эти особенности и своеобразия жанра отражаются в жизни и остроcловии бабушки автора Аюповой Шамсинисы.

**Ключевые слова:** такмаки, бабушка Шамсиниса, жаер, фольклор, юмор, осрословие, меткость слова, ситуации, работа, праздник, свадьба.

**1.Инеш.**

**Таҡмаҡ – халыҡ ижадының киң таралған жанры**

Башҡорт халҡы ижади һәләткә бик бай. Ул беҙҙең быуынға эпостар, ҡобайырҙар, йырҙар, әкиәттәр, легендалар, риүәйәттәр, мәҡәлдәр, йомаҡтар һәм башҡа жанрҙа әҫәрҙәр ижад итеп ҡалдырған.

Таҡмаҡ – халыҡ ижадының киң таралған жанры. Ул Бөйөк октябрь социалистик революцияһына тиклем барлыҡҡа килгән. Совет осоронда, бигерәк тә колхозлашыу мәлендә, күмәк хужалыҡтар үҫешкән ваҡытта бигерәк тә киң таралған.

Өләсәйем Шәмсениса Ноғоман ҡыҙы Әйүпова 1925 йылдың 9 сентябрендә Бөрйән районы Аралбай ауылында тыуған. Хәйерниса һәм Ноғоман Садыҡовтар ғаиләһендә баш бала булып донъяға ауаз һала. Был татыу ғаиләлә өләсәйем, һеңлеһе Гөлнур һәм ҡустыһы Хәмзә менән бергә матур тәрбиә алып, үҫеп етеп, эйәле-башлы булып, үҙ ғәиләләрен ҡора.

Ҡыҙғаныҫҡа күрә, өләсәйем бәләкәй сағында ҡаты ауырығандан һуң, күҙҙәре зыян күреп, мәктәптә белем алыу мөмкинселегенән мәхрүм була. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, өләсәйем бик зирәк, отҡор йор һүҙле була. Һәр һөйләгән һүҙен халыҡ әйтемдәре менән йөпләп ҡуйырға ярата. Үҙе щиғырҙар, таҡмаҡтар ижад итергә оҫта була. Ул, бөтөнләй музыка белеме булмаһа ла, шул тиклем матур, моңло йырлаған. Һабан мы, башҡа йыр бәйгеләре булһынмы, алдынғылыҡты бер кемгә лә бирмәгән. Ә балаларына, ейән-ейәнсәрҙәренә һөйләгән әкиәттәренең иҫәбе-һаны юҡ. Нисек барыһын да хәтерендә тотҡандыр, хәтере бик киң булғанғалыр.

Бәләкәйҙән эшкә әрһеҙ өләсәйем йәш сағынан уҡ колхозда, бер эштән дә баш тартмай, тырышып эшләй, уҙе һымаҡ үҫмер ҡыҙҙар менән ағас ҡырҡыуҙа эшләгәндә йәрәхәтләнһә лә, эшен ташлап ҡайтмай.

1956 йылдың 5 ғинуарында Яңы Монасип башланғыс мәктәбенә йыйыштырыусы булып эш башлағанға тиклем, колхозда ҡайҙа ғына эшләһә лә алдынғылыҡты бирмәй ул. Шуғалыр ҙа уның хеҙмәте юғары баһалана. 1978 йылдың 19 июлендә өләсәйем "Хеҙмәт ветераны" миҙалы менән бүләкләнә. 1972 йылдың 25 сентябрендә хаҡлы ялға сыҡһа ла,

* альтернатива жанра русского фольклора частушки. – *Р.А.*

Шәмсениса өләсәйем Яңы Монасип башланғыс мәктәбендә йыйыштырыусы булып эшләүен дауам итә.

Хөснитдин олатайым менән ҡорған татыу ғаиләлә 8 бала тәрбиәләнә: 4 малай 4 ҡыҙ бер-бер артлы үҫеп буй етәләр. Балаларының икәүһе юғары белем алһа, алтауһы училище, техникумдар тамамлап, хаҡлы ялға сыҡҡансы үҙ һөнәрҙәренә тоғро ҡалып хеҙмәт итәләр. Ата-әсәнән алған хеҙмәткә һөйөү тәрбиәһе үҙ ғаиләләрен ҡороп йәшәп китеү өсөн ныҡ ярҙам итә.

Үҙ балаларын илебеҙгә кәрәкле һөнәр эйәләре итеп дөрөҫ тәрбиәләгән Хөснитдин олатайым һәм Шәмсениса өләсәйем менән ғорурланам.

Беҙҙең Яңы Монасип (Мишәр) ауылы тураһында ветеран уҡытыусы Нәсимә Сәғитова “Тарих һөйләй Ҡаратау” китабын яҙҙы. Унда өләсәйем шулай итеп телгә алынған: “Инәй тураһында хаҡлы рәүештә “таҡмаҡты ҡоя ла ҡуя” тигән даны ҡалды. Эшкә әрһеҙ инәй, таҡмаҡҡа ла шәп ине, ҡайһы саҡтарҙа мәрәкәләп, әңгәмәсеһенә лә таҡмаҡ менән яуап бирер булған. Ҡатын-ҡыҙҙар, күмәкләшеп эшкә йөрөгәндә, ялға туҡтаған мәлдәрҙә, мәрәкәләшеп, таҡмаҡтар әйтешеп ала инеләр. Шуныһы, үсегеү, һүҙгә килеү тигән нәмә күҙәтелмәне, тик мәрәкә һәм көлкөгә бороп, үҙ күңелдәрен үҙҙәре күтәреү эште еңеләйткәндер, күрәһең.

Инәйҙең күп таҡмаҡттары, онотолоп, юғалған. Ҡыҙҙары Флүрә менән Нурия әсәләренән отоп алған таҡмаҡтарҙы, иҫтәренә төшөрөп яҙғандар” .

Билдәле ғалим, филология фәндәре докторы Салауат Галин үҙенең “Тел асҡысы халыҡта” китабында таҡмаҡҡа ошолай билдәләмә бирә: “Таҡмаҡ – йырҙың еңел көйгә әйтелеп, бейеү хәрәкәтен оҙатыусы бер төрө. Ул һәр ваҡыт уйын, бейеү менән бергә йәшәй” [2; 251]. Өләсәйем таҡмаҡты бик яратып ижад иткән. Уның оҫта йырлауы ла таҡмаҡ ҡойоуға ярҙам иткән.

**2.2.Таҡмаҡтарҙың төрҙәре, йөкмәткеһе.**

**Бейеү таҡмаҡтары.**

Әйүпова Шәмсениса өләсәйҙең ижад иткән таҡмаҡтарынан иң ҙур урынды бейеү таҡмағы ала. “Уларҙың төп вазифаһы – бейеүҙе оҙатыу, шуға күрә улар бейеүҙең үҙенән айырылғыһыҙ” [Галин,1999: 251].

Иҫке шырпы ҡабы,
Иҫке шырпы ҡабы,
Шыпырҙатып баҫып йөрөй
Хөснитдиндең бабы.
Аръякта ла ҡаҡы,
Бирьякта ла ҡаҡы,
Таҡмаҡ әйтеп бейетәм тип,
Тамаҡтарым да ҡатты.

Бейе, бейе, бейе әле,
Бейер хәлең бар але,
Үтеп барған ғүмеркәйҙе
Ҡыуып етеп ҡарале.
Тыпыр-тыпыр бейеһәк тә,
Тәпәй үҙебеҙҙеке,
Ҡырҡ бешереп ашаһаҡ та,
Кәртүк үҙҙебеҙҙеке.

**Мөхәббәт тураһында таҡмаҡтар**


Әйүпов Хөснитдин Хөсәин улы

Шәмсениса өләсәй менән Хөснитдин олатай бик татыу йәшәйҙәр. Олатайым Бөйөк Ватан һуғышы ветераны. “1943 йылдың 6 майында фронтҡа алына. Алкинола ҡыҫҡа сроклы хәрби әҙерлек үткәндән һуң, фронтҡа оҙатыла. 143 дивизияның 487 полкы составында данлы ла, ҡанлы ла дәһшәтле Курск һуғышы уты эсенә барып эләгә олатайым. Йәйәүле ғәскәрҙә хеҙмәт иткәндәргә һуғыштың иң әсеһе, ҡатыһы төшә. 1943 йылдың 7 сентябрендә ҡаты яраланып госпиталгә эләгә. 1944 йылдың мартына тиклем дауаланып, инвалид булып, ауылға ҡайта. Хаҡлы ялға сыҡҡансы почтальон, аҙаҡ колхозда төрлө эштәрҙә эшләй. 1985 йылда I дәрәжәле Бөйөк Ватан һуғышы ордены менән наградлана” [Сәғитова, 2021: 27].

Шәмсениса өләсәй тәҡмәҡтарында мәхәббәткә тоғролоҡто маҡтай.

Ҡаптыр-ҡоптор тиртунымды,
Ҡаптырҙатып кейәмен.
Бәхетемә тура килгәс,
Ҡарт булһала ла һөйәмен.
Аралбайҙа тыуып үҫтем,
Килен төштөм Мишәргә,

Насип булған ҡартым менән
Ҡырҡ биш йыл да йәшәргә.
Аҡ кәпәсем бар тиеп,
Күген һүтә күрмәгеҙ,
Йәшәп булмай туғандарһыҙ,
Яңғыҙ ҡала күрмәгеҙ.

**Ғүмер ҡәҙере, туғандар татыулығы тураһында таҡмаҡтар**

Тормошта туғандарҙың ҡәҙерен белеп, татыу, дуҫ йәшәү, ғүмерҙең ҡәҙерен белеү тураһында таҡмаҡтар бик фәһемле. “Таҡмаҡтарҙың һәр төрөнә тормошсан йөкмәтке, фекер ябайлығы, ритм аныҡлығы хас. Ғалимдәр фекеренсә, таҡмаҡтарҙағы фекер тослоғо уларҙы мәҡәл, әйтемдәргә яҡынайта” [Башҡорт халыҡ ижады, 1981: 33].

Шәмсениса өләсәй һигеҙ балаһына, ейән-ейәнсәрҙәренә тормош мәғәнәһен төшөндөрә. Таҡмаҡ аша ул бик уңышлы килеп сыға.

Сыбыртҡылыҡ иш йүкәнән,
Урманда үҫә икән.
Уйнап-көлөп йәшәгеҙ һеҙ,
Был ғүмер ҡыҫка икән.
Таҡмаҡ әйтеп бейешеп,
Йәшәйбеҙ шул гөрләшеп,
Улдарым-килендәрем.
Ҡыҙҙарым-кейәүҙәрем,
Ғүмер үтһен һөйөшөп.
Килер ҙә китер инде,
Килер ҙә китер инде,
Һандуғастан үткән ғүмер ,
Беҙҙән дә үтер инде.

Беҙҙең ауыл ҙур ауыл,
Минең бабай ҡарауыл,
Балаларым иҫән булһын,
Донъя шулай бара ул.
Һандуғастар ҡунып һайрар
Баҡсамдағы баланға,
Эсем яна балаларым,
Минән яңғыҙ ҡалғанға.
Самауырҙы тиҙ ҡайната,
Ҡайын утын кумере.
Балаларыма рәхмәтлемен,
Рәхәт үтһен ғүмере.

**Ҡоҙалар менән шаярыу таҡмактары**

Туй ваҡытында ҡоҙалар менән шаярыу, уларға төртмә таҡмаҡтар әйтеү борондан килгән йола. Ул шаян таҡмаҡтарҙы бер кем дә ауырға алмаған.

Шыптыр-шыптыр ямғыр яуа,
Өй башы ҡалайҙарға.
Быйыл ҡыҙҙарҙы бирәләр
Ыштанһыҙ малайҙарға.

Ҡоҙа түгел икәнһеҙ,
Ҡоҙа тугел икәнһеҙ,
Ас бүреләр ашаһа ла,
Әрәм түгел икәнһеҙ.

**Уйын таҡмаҡтары**

Был таҡмаҡтар төрлө уйындарҙа, мәжлестәрҙә бейегәндә әйтелгәндәр.

Таш ташыйҙар мишәрҙәр,
Таш ташыйҙар мишәрҙәр,
Һөймәгәнде һөйә тейҙәр,
Һөйһәң, нимә эшләрҙәр.

Түбән оста килендәрҙә,
Һалма-һурпа эскәйнем,
Шунан бирле асыҡмайым,
Аллаһу әкбәр иткәйнем.

Таҡмаҡтар, ниндәй төргә ҡарамаһын, уларҙың нигеҙендә юмор ята. Юмор – ул шаярыу, тыңлаусыларҙың күңелен асыу өсөн ҡулланылған сара. Ул таҡмаҡтарҙы көлкөлө һәм шатлыҡлы итә. “ЮМОР (ингл. humour), ысынбарлыҡты көлкөлө итеп һүрәтләү ысулы” [Төбәк интерактив...].

Әйүпова Шәмсениса өләсәй һүҙ байлығы, тапҡырлығы менән сәсәнлек һәләтен үҙендә туплаған кешеләрҙең береһе булған. Ҡыҙғаныҫҡа күрә, унең йыр-таҡмаҡтарының тик бәләкәй бер өлөшө генә һаҡланып ҡалған. Уларға ҡарап, беҙ яҡты күңелле, алсаҡ, йор һүҙле, сәсән телле өләсәйебеҙҙе һағынып иҫкә алабыҙ.

## ЙОМҒАҠЛАУ

Шулай итеп, эҙләнеү эшендә Яңы Монасип ауылында йәшәгән Әйүпова Шәмсениса Ноғоман ҡыҙының сәсәнлек һыҙаттары – таҡмаҡҡа оҫталығы ҡарап үтелде. Халҡыбыҙҙың тел байлығын киләсәк быуынға тапшырыуы маҡтауға лайыҡ. Унең телгә, һүҙгә булған оҫталығы балаларына ла күскән. Тимәк, оләсәйемдең ижады йәшәй, дауам итәлә.


**Әҙәбиәт**

1. Башҡорт халыҡ ижады. Совет осоро. Беренсе китап. Бәйеттәр. Йырҙар. Таҡмаҡтар. Өфө. Башҡортостан китап нәшриәте, 1981. – 392 б.

2. Галин С. Тел асҡыысы халыҡта. Башҡорт фольклорының аңлатмалы һүҙлеге. – Өфө: башҡортостан “Китап” нәшриәте, 1999. – 328 б.

3. Сәғитова Н.Ғ. Тарих һөйләй Ҡаратау. – Өфө: “Самрау” нәшриәте, 2021. – 206 б.

4. Төбәк интерактив энциклопедик портал “Башкортостан”. https://bashenc.online/ba/sitemap/

5. Ғаилә архивы. Туғандарҙан интервью.


© Аюпова Л., Истякова Р.А.,2024

УДК 008; 793


***Ишбулатова Лиана,***
*Байназар урта дөйөм белем биреү мәктәбенең*
*11-сы класс уҡыусыһы*
*ет.:* ***Баязитова Р.Р.,*** *уҡытыусы,*
*Байназар ау.*

***Ишбулатова Лиана,***
*ученица 11 кл. Байназаровской СОШ,*
*рук.:* ***Баязитова Р.Р.,*** *учительница,*
*дер. Байназарово*


## «УРАЛ БАТЫР» ЭПОСЫНДА САҒЫШТЫРЫУҘАРҘЫҢ БИРЕЛЕШЕ

## СРАВНЕНИЯ В ЭПОСЕ «УРАЛ-БАТЫР»


**Аннотация.** В статье рассматриваются сравнения, обнаруженные в эпосе «Урал-батыр». Автором установлено, что поэтические сравнения были образованы несколькими способами, эпос богат изобразительными средствами, которые обогащают поэтику эпоса и углубляют его идейно-художественное содержание, делают его ярче и читабельным.



**Ключевые слова:** эпос «Урал-батыр», сравнения, поэтика, содержание, изобразительные средства.


Башҡорт халҡының донъяға билдәле мәшһүр эпостарының иң күренеклеһе булған “Урал батыр” бик күп ғалимдарыбыҙ тарафынан бөгөнгө көндә лә өйрәнелеү өҫтөндә. Шулай ҙа эпоста асылмаған серҙәрҙе күп табырға була. “Урал батыр”ҙың тарихи ерлеге беҙҙең Бөрйән яҡтарына бәйле булыуы миндә ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙырҙы.

“Урал батыр” эпосының йөкмәткеһе менән күптән танышмын. Эпосты башланғыс класта уҡығанда, бер нисә рәт уҡып сыҡтым. Быйыл етәксем менән эпос буйынса эҙләнеү эшен башҡарыу теләге тыуҙы. Эпостан һүрәтләү саралары булараҡ сағыштырыуҙарҙы табыу бик мауыҡтырғыс булды. Унан бик күп төр сағыштырыуҙар таптым. Билдәле ғалимдар менән бер рәттән унда ҡулланылған сағыштырыуҙарҙы өйрәнә башланым. Был төр һүрәтләү сараһы тураһында тағы ла ныҡлыраҡ белеү маҡсатында, етәксем менән Ким Әхмәтйәновтың һәм Ғайса Хөсәйеновтың “Әҙәбиәт теорияһы” китаптарынан, интернет селтәренән бик күп мәҡәләләр менән таныштым. В. Псәнчиндың “Телдең күркәмлек саралары” китабы эҙләнеү эшен башҡарғанда, иң төп ярҙамсым булды.

«Сағыштырыуҙар ярҙамында әйтергә теләгән уй-фекерҙәр, һүрәтләнгән хәл-ваҡиғалар йыйнаҡ, үтемле, образлы итеп күҙ алдына килтереү мөмкинлеге тыуа» [Хәкимов, 2004: 76]. Улар ыңғай геройҙарҙың тышҡы ҡиәфәттәрен һүрәтләү менән бер рәттән, эске рухи донъяларын, тоғролоҡ, алсаҡлыҡ, ярҙамсыллыҡ кеүек, кире геройҙарҙың алдаҡсылыҡ, аҫтыртынлыҡ, кешелекһеҙлек кеүек сифаттарын да асып бирергә ярҙам итә. “Сағыштырыу – әйберҙе, кешене йәки күренеште икенсе бер әйберҙең сифаты һәм үҙенсәлеге менән һынландырыу ул” [Әхмәтйәнов, 2004: 133]. Ғилми әҙәбиәттә яһалыу формалары һәм мәғәнәләре яғынан сағыштырыуҙарҙың бер нисә төрө билдәле.

“Урал батыр” эпосы сәсәндәребеҙ тарафынан күп төрлө һүрәтләү саралары менән биҙәлгән. Бигерәк тә сағыштырыуҙар эпоста ҙур урын ала һәм күп ҡулланыла.

**1. Эпоста ҡулланылған синтетик сағыштырыуҙар.**

Эпоста синтетик сағыштырыуҙар күп, уларҙа **–дай/-дәй, -тай/-тәй, -ҙай/-ҙәй, -лай/-ләй** кеүек ялғауҙар киң ҡулланыла. Улар төрлө һүҙ төркөмдәренә ҡушылып килеп образ тыуа.

**а) исемгә:**

“Урал батыр” эпосында исем һүҙ төркөмө менән яһалған 64 төр сағыштырыу табылды. Сағыштырыуҙар күбеһенсә тәбиғәт күренештәренә бәйле. Мәҫәлән, шоңҡарҙай, ҡыйғырҙай, суртандай, һөләктәй, үләндәй, ағастай, айыуҙай, тауҙай, йондоҙҙай һ.б. Был төр сағыштырыуҙар менән сәсәндәр Айһылыуҙың, Һомайҙың матурлығын һүрәтләй. Уларҙың көмөштәй саф тауышлы, бал ҡортондай нәҙек билле, тирә -яҡты йәмләп торған гөлдәй һылыуҙар булғанлығы тураһында әйтәләр.

“Балғаң буған **ташыңдай,**
Ҡошҡа сөйәр **шоңҡарҙай,**
Балыҡ тотар **суртандай,**
Ҡан һурыусы **һөләктәй,**
Йәнлек аулар **көсөктәй,**
Һуҡҡың буған түгелме?” [Урал батыр, 2005: 21]

**б) –ған, -гән, -ҡан, -кән ялғаулы сифат ҡылымға:**

Эпоста -ған, -гән ялғаулы сифат ҡылымдан килгән – 6, ә -ҡан, -кән ялғауы менән 2 төр сағыштырыу бар.

“Бер әсәнән **тыуғандай,**
Бер төҫ кейем **кейгәндәй,**
Барыһы ла шәп-шәрә
Бер төркөм халыҡ йыйылған.” [Урал батыр, 2005:, 27]
Тағы ынтылып бер һуҡтым, -
**Тау ҡолатҡандай** иттем. [Урал батыр, 2005:, 82]

**в) –р, -ыр, -ер ялғаулы сифат ҡылымға:**

Сағыштырыуҙарҙың –р, -ыр, -ер ялғаулы сифат ҡылымдан килеүсе 21 төр менән эпоста осраштым. Был сағыштырыуҙар Уралдың, Әзрәҡәнең телмәрҙәрендә ҡулланыла. Уралдың Һомайға әйткән һүҙҙәренән миҫал:

“Күҙ йәше **һөртөрҙәй,**
Миңә юлдаш **булырҙай,**
Яуҙа ҡорҙаш **булырҙай**
Бүләк бир тип һорайым.” [Урал батыр, 2005: 61]

**г) ҡылымдың юҡлыҡ формаһы менән яһалыусы сағыштырыуҙар:**

Ҡылымдың башланғыс формаһына юҡлыҡ аффиксы ҡушыла, ә ҡалған аффикстар юҡлыҡ формаһынан һуң килә. Мәҫәлән:

“Утҡа төшһә**, янмаҫтай**,
Һыуға төшһә, **батмаҫтай**,
Ел дә ҡыуып **етмәҫтәй**,
Тауҙан-таштан **өркмәҫтәй**,
Ир-егеттән бүтәнде

Үҙенә тиң **күрмәҫтәй**...

Аҡбуҙ толпар бирәйем.” [Урал батыр, 2005: 61]

Күреүегеҙсә, Һомайҙың телмәрендә ҡылымдың юҡлыҡ формаһы менән яһалған сағыштырыуҙар.

**д) алмаштан килгән сағыштырыуҙар:**

Былдай, ундай, һиндәй, шундай, ошондай кеүек сифат урынында ҡулланыла торған алмаштарҙан килгән 12 төр сағыштырыу бар. Улар барыһы ла батырҙарҙы һүрәтләгән осраҡта ҡулланыла һәм күпселеге Һомайҙың телмәрендә.

Мыға саҡлы мин былай

**Һиндәй** егет күрмәнем. [Урал батыр, 2005: 63]

**Ундай** батыр аҙ булыр,

Булһа ла, яңғыҙ һин булыр. [Урал батыр, 2005: 48]

**е) Яңғыҙлыҡ исемдән килгән сағыштырыу:**

Яңғыҙлыҡ исемдән килеүсе сағыштырыу эпоста бер генә урында ҡулланылған.

“**Уралдай** уҡ батырға

Әсә булырһың, балам,” – тип өндәшә атаһы ҡыҙы Һомайға [Урал батыр, 2005: 66].

**ж) –мы, -ме, -мы ни, -ме ни аффиктары ла сағыштырыуҙар яһай:**

Сағыштырыуҙың -ме аффиксы менән яһалыу осрағына ике миҫал бар. Урал ҡулында ҡош телгә килгәс, ошо һүҙҙәрҙе әйтә:

“- Ай, егет, һин туҡта әле,

Миңә үҙең әйт әле:

**Дейеүме һин, енме һин?”** [Урал батыр, 2005: 62]

**з) -раҡ, -рәк аффикстары менән яһалыусы сағыштырыу:**

Был төр сағыштырыу әҫәрҙә Урал батырҙың телмәрендә осраны:

“Үҙегеҙҙән **көслөрәк**

Берәй хайуан һайлағыҙ” [Урал батыр, 2005: 35]

Ул –ҙән ялғаулы сығанаҡ килештән һуң килгән сағыштырыу дәрәжәһендәге һүҙ.

Сәсәндәр ҡатын-ҡыҙ күркәмлеген төрлө сағыштырыуҙар менән биреп һүрәтләгәндәр. Эпоста шулай уҡ ил-йорт, ир-егет, ат матурлығы ла урын ала. Был осраҡта ла сағыштырыуҙар урынлы ҡулланылған. Ҡушарлы сағыштырыуҙар эпоста Урал барып тап булған ҡыҙ менән уның әсәһен, барса халыҡты ҡан-йәш илатҡан Ҡатил батшаны, Самрау менән Ҡояш ҡыҙы Һомайҙы, Ай ҡыҙы Айһылыуҙы һүрәтләгәндә ҡулланылған. Былдай ҡушарлы сағыштырыуҙар һүрәтләнгән күренештең күп ҡырлы һәм ҡатмарлы булыуын һынландырыу өсөн бик ҡулай сара һанала.

**2. Эпоста ҡулланылған аналитик сағыштырыуҙар.**

“Урал батыр” эпосында сағыштырыуҙың аналитик төрө лә ҡулланылған.

а) **һымаҡ** бәйләүесе менән (2 миҫал)

**“Ҡуян һымаҡ,** ҡайһылар

Йылға ике-өс түлләһә.” [Урал батыр, 2005: 23]

б) **төҫлө** һүҙе менән (1 миҫал):

“Ҡапҡаға яҡын килгән, ти,

Бер **ҡыҙ төҫлө** буған, ти.” [Урал батыр, 2005: 42]

в) **булып** кеүек ҡылым менән дә сағыштырыулы образ яһала:

“Урал былай дан алһа,

Атама данлы ҡайтһа,

**Батыр булып** маҡталыр.” [Урал батыр, 2005: 67] (Эпоста 3 миҫал бар.)

**г) һорау киҫәксәһе менән яһалыусы сағыштырыу:**

Микән киҫәксәһе менән аналик сағыштырыу яһалған.

Шүлгән ҡара күргән дә:

**“Болот микән, тау микән?”** –

Шүлгән, арыҫлан уйлаған. [Урал батыр, 2005: 50]

Аналитик сағыштырыуҙар эпоста һирәк осраны, әммә эпостың йөкмәткеһен асыуҙа был төр һүрәтләү сараларының да роле ҙур.

**3. Эпоста ҡулланылған атама сағыштырыуҙар.**

Эпостан атама сағыштырыуҙарҙы ла тикшереп өйрәнеп сыҡтым. Атама сағыштырыуҙарҙың ҡулланылышы буйынса В.Ш.Псәнчиндың "Телдең күркәмлек саралары" китабынан уҡып өйрәндем. Эпостан миҫалдар ҡарайыҡ:

"**Көслөнөкө – байман,** тип,

Еҫерҙе сит күрмәҫкә." [Урал батыр, 2005: 49]

"**Бала – бауырым,** тигәндәр" [Урал батыр, 2005: 23]

Бындай атама сағыштырыуҙарҙың үҙенсәлеге шунда: улар мәҡәлдәргә оҡшағандар, улар шикелле ритм һәм рифмаға нигеҙләнгән поэтик алымдарға бай. Был типтағы сағыштырыуҙарҙың художество көсө бик күпкә артыҡ.

Шулай итеп, беҙ был тикшеренеү эшендә "Урал батыр" эпосында ҡулланылған сағыштырыуҙарҙы өйрәндек. Түбәндәге һығымталар яһалды: сағыштырыуҙар бер нисә юл менән яһала, эпос һүрәтләү сараларына бик бай, сағыштырыуҙар уның йөкмәткеһенә айырым бер мәғәнә биҙәге бирә һәм эпостың тел байлығын күпкә һутлыраҡ, сағыуыраҡ, уҡымлыраҡ итә. Уны уҡыған һайын уҡығы, яңы тел биҙәктәрен асҡы килеп тора. Сәсәндәребеҙ тарафынан һүрәтләү саралары эпоста урынлы һәм оҫта ҡулланылған. Халыҡтың тел байлығы иҫ китерлек икәненә хайран ҡалдым.

Эпос телен өйрәнеү аша туған телебеҙҙең байлығына, матурлығына, яғымлылығына тағы бер инанып һәм ҡыуанып була. Башҡортмон тигән кеше үҙенең халҡының эпостарын өйрәнергә һәм белергә тейеш.

Әгәр һәр башҡорт балаһы "Урал батыр" эпосын уҡыһа, улар бер ваҡытта ла тыуған халҡына, башҡорт теленә һәм үҙ иленә битараф булмаясаҡ; ә эпостың халыҡсан телен өйрәнһә, телебеҙҙең ни тиклем бөйөк һәм бай икәненә инанасаҡ.

Эпостан был төр һүрәтләү сараларын өйрәнеүем миңә киләсәктә тел байлығын үҫтереүҙә ярҙам итер, тип уйлайым.

**Әҙәбиәт**


1. Башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлеге. – Мәскәү, 1993.
2. Псәнчин В.Ш. Телдең күркәмлек саралары. – Өфө, 2003.
3. Урал батыр. – Өфө, 2005.
4. Хөсәйенов Ғ. Әҙәбиәт теорияһы. – Өфө, 2010.
5. Хәкимова В.Ш. Туған тел һәм әҙәбиәт. – Өфө, 1994.
6. Әхмәтйәнов К. Әҙәбиәт теорияһы. – Өфө, 2004.
7. http://dergipark.gov.tr/download/article-file/386610.


© Ишбулатова Л.А., Баязитова Р.Р., 2024

УДК 008; 793

***Ишкинина Рушана,***
*Иҫке Собханғол урта төп дөйөм белем биреү мәктәбенең Яңы Мөсәт филиалының 8-се класс уҡыусыһы,*
*ет.:* ***Әхмәтова Н.А.,***
*уҡытыусы,*
*Иҫке Собханғол ау.*

***Ишкинина Рушана,***
*ученица 8 кл. Новомусятовского филиала средней общеобразовательной школы,*
*рук.:* ***Ахметова Н.А.,***
*учительница,*
*с. Старосубхангулово*

## ДАНЛЫ БӨРЙӘНДЕҢ ДАНЛЫ УЛЫ

## СЛАВНЫЙ СЫН СЛАВНОЙ ЗЕМЛИ БУРЗЯНСКОЙ

**Аннотация.** Статья посвящена рассмотрению жизни и научной деятельности известного ученого-фольклориста А.М. Сулейманова (1939-2016), который родился в дер. Набиево Бурзянского района. Отмечается, что ученый оставил большое научное наследие, одним из важных направлений которого являются бытовые, новеллистические сказки и башкирский народный эпос «Урал-батыр». Особняком среди последних направлений его научных интересов было составление критической редакции эпоса «Оло «Урал-батыр» – «Большой «Урал-батыр», который включил в себя такие эпосы, как «Идель и Яик», «Акбузат», «Царь Шульган и Минэй-батыр», а также другие кубаиры, в которых так или иначе упоминается эпический пращур Урал-батыр.

**Ключевые слова:** А.М. Сулейманов, видный ученый-фольклорист и общественный деятель, исследования, труды, статьи, эпос, сказки, монографии, Бурзянский район.

Ул ауманы, ҡоламаны
Һәм йәшен дә атманы
Бары һуңғы сәфәренә –
Мәңгелеккә атланы...

Башҡорт халыҡ ижады – быуаттар буйы һаҡланып, быуындан-быуынға күсеп килеүсе аҫыл ҡомартҡы, ҡиммәтле хазина, изге аманат, ҡәҙерле мираҫ, хатта хәтер ҙә ул. Быуаттар дауамында һәм тарих боролмаларында, башҡорт халҡы үҙенең рухи ҡомартҡыларын һаҡлап ҡала алған. Халыҡ ижады үҙенең тәбиғәте менән художестволы ижадтың, сәнғәттең, фәндең төрлө төрҙәрен үҙендә туплаған ҡатмарлы ижад. Унда халыҡтың тарихы ла, теле лә, әҙәбиәте лә, йыр-моңо ла, им-том саралары ла, йолаһы ла, һынлы сәнғәте лә, педагогик ҡараштары ла, этнографияһы ла тупланған. Бына шуға күрә лә борон аҡһаҡалдар һүҙен тыңлау, сәсәндәр телен өйрәнеү, йолалар үҙләштереү яҙылмаған ҡанундар кимәлендә булған.

“Башҡорт халыҡ ижады – быуаттар буйына халыҡтың тормош- көнкүрешен, күңел, рух булмышының ыңғай, камил йәшәйешен тәьмин иткән боронғо мираҫ. Уны инҡар итеү– алтынды бысраҡҡа буяп ташлау менән бәрәбәр”, – тип яҙғайны ғалим-фольклорсы Ә. Сөләймәнов [2; 221]

Фольклорсы ғалим, филология фәндәре докторы, профессор, Салауат Юлаев исемендәге премия лауреаты һәм Слауат Юлаев ордены кавалеры, Бөрйәнебеҙҙең почётлы гражданины Әхмәт Сөләймәнов 1939 йылдың 15 мартында Башҡортостандың матур төйәгендә – Бөрйән районының Нәби ауылында Хәйрулла улы Мөхәмәтвәли менән Лотфулла ҡыҙы Нурикамал тигән уңған колхозсылар ғаиләһендә тыуған. Тиңдәштәре кеүек үк, унын да бала сағы ауыр һуғыш йылдарына тура килгән. 1942 йылда ҡаты ауырыуҙан атаһы үлә. Өс кенә йәшендә атайҙан етем ҡалып, балалығы һуғыш дәүеренә тура килгән Әхмәттең бала сағы бик ауыр була.

Башҡорт дәүләт университетының филология факультетының башҡорт – рус бүлегендә белем ала. Уҡыу йылдарында фольклор менән етди ҡыҙыҡһына башлай. Бәләкәй сағында уҡ фольклор өлгөләрен йыйыу менән мауыҡҡан бала экспедицияларға ла ҙур теләк менән сыға.

Бихисап хеҙмәттәренән Ә.М. Сөләймәновтың «Башҡорт халыҡ ижады»ның 18 томлыҡ баҫмаһын әҙерләп сығарыуҙа ҡатнашыуын телгә алып китеү кәрәктер. Ошо хеҙмәте өсөн 1987 йылда башҡа төҙөүсе-авторҙар менән бергә Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһына лайыҡ булды. Ә инде рус телендәге баҫмаһын әҙерләгәндә Ә.Сөләймәнов өс томлыҡты төҙөүсе булып сығыш яһаны. Был эше өсөн башҡа авторҙар менән бер рәттән Салауат Юлаев исемендәге премияға лайыҡ булды.

Ул 400-ҙән ашыу фәнни хеҙмәт, шул иҫәптән 30-ҙан артыҡ монография, мәктәп уҡыусылары һәм юғары уҡыу йорттары студенттары өсөн 40-тан артыҡ уҡыу әсбабы һәм уҡыу-методик ҡулланма авторы ла.

Фольклорсы ғалимдың башҡорт халыҡ ижадына арналған ике йөҙҙән ашыу күп яҡлы һәм тәрән йөкмәткеле ғилми хеҙмәттәре: монографиялары, китаптары баҫтырылды, абруйлы фәнни журналдарҙа, ғилми конференция йыйынтыҡтарында, республика матбуғат биттәрендә сығыштары, бихисап мәҡәләләре донъя күрҙе. Ғалимдың 2000 йылда башҡорт халыҡ эпосын өйрәнеү мәсьәләләренә арналған очерктарҙан торған "Башҡорт халҡының архаик эпосы" китабы донъя күрә. Эпостарҙың сюжеттары нигеҙендә ятҡан мифологик мотивтар, шулай уҡ эпик әҫәрҙәрҙең быға тикшерелмәгән аспекттары ҡарала. Башҡорт халҡының мифологик эпосы "Урал батыр" эпосы иран ерлекле "Авеста", алтай эпостары менән сағыштырып , ҡайһы бер яңы үҙенсәлектәрен асыҡлай [10;528].

2007 йылда донъя күргән "Мөхәббәт дастандары: Уларҙың урындағы милли фольклор менән мөнәсәбәте" монографияһында төрки телле халыҡтарҙың мөнәсәбәте арҡаһында башҡорттоң "Йософ менән Зөләйха", "Таһир менән Зөһрә"һ.б.эпостарында үҙенсәлекле үҙгәрештәргә дусар булыуын дәлилләй.

Китаптың беренсе киҫәген автор тарафынан тулыландырылған "Урал батыр", икенсе томдағы икенсе һәм өсөнсө киҫәктәрҙе шулай уҡ тулыландырылған "Иҙел менән Яйыҡ", "Аҡбуҙат", өсөнсө томға ингән дүртенсе һәм бишенсе киҫәктәрҙе тулыландырылған "Минәй батша менән Шүлгән батша", "Ҡуңыр буға" ҡобайырҙары тәшкил итә.

Ә.М. Сөләймәновтың монографик хеҙмәттәренән тыш, эпос жанрын өйрәнеүгә арналған бихисап теоретик мәсьәләләр күтәрелгән мәҡәләләре төрлө кимәлдәге фәнни конференцияларҙа яңғыраны, абруйлы йыйынтыҡтарҙа, гәзит-журналдарҙа үҙенең лайыҡлы урынын тапты. Уның башҡорт халыҡ эпостарының иран ерлекле "Авеста", алтай, ҡырғыҙ, ҡараҡалпаҡстан, үзбәк һ.б. төрки халыҡтарҙың эпостары менән оҡшаш һәм айырмалы яҡтарын өйрәнеүгә, шулай уҡ эпик әҫәрҙәрҙең төп мотивтарын, поэтик үҙенсәлектәрен, тарихи нигеҙҙәренә бәйле мәҡәләләре башҡорт эпосын өйрәнеү ғилемен юғары кимәлгә күтәрҙе.

Башҡорт фольклористикаһы менән бөйөк ғалимыбыҙ исеме бер-береһе менән үтә тығыҙ бәйләнгән. Уның хеҙмәттәре башҡорт фольклористикаһының йөкмәткеһен билдәләй. Бөйөк Л.Толстойҙың «кешене йәмғиәттән тыш күҙ алдына ла килтереп булмай» тигән һүҙҙәрен Ә.М. Сөләймәновҡа ҡарата ҡулланырға мөмкин: «Башҡорт фольклористикаһын Әхмәт Мөхәмәтвәли улынан башҡа күҙ алдына ла килтереп булмай». Эйе, хаҡ һүҙҙәр. Ул ауыл мәктәбе уҡытыусыһы булып та үҙаллы фольклор йыя, өйрәнә башлай. Тыуған халҡына, уның ижадына һөйөү уның тормош маҡсатын билдәләй, фәнни эш уға дөрөҫ юл һайларға ярҙам итә. Ә.Сөләймәнов ғүмеренең аҙағына тиклем ул яратҡан эшенә тоғро була.

Үҙенең хеҙмәттәрендә ғалим был өлкәлә эшләүсе күренекле фән эшмәкәрҙәренең, яҙыусы- ғалимдарҙың эшенә ентекле анализ бирә, сағыштыра, үҙенсәлектәрен билдәләй. Фольклор өлгөләрен ынйы бөртөктәре кеүек йыйып, башҡорт халыҡ ижадын башҡа төрки, славян телдәре менән сағыштыра [Сөләймәнов, 2007: 156].

Әхмәт Сөләймәновтың һығымталарынан күренеүенсә, фольклор буйынса миҫалдар, өлгөләр килтергәндә күберәк үҙе тыуып үҫкән Бөрйән районы топонимикаһына, этнографияһына таянып эш итә, Нәби, Мишәр, Һарт, Байназар ауылы исемдәре йыш телгә алына. Ерле халыҡ араһынан бөртөкләп яҙып алынған халыҡ ижады өлгөләрен анализлап, А.М. Сөләймәнов фольклорҙың бай традицияларын, халыҡтың рухи мәҙәниәтендәге ролен ышандырырлыҡ һәм аңлайышлы итеп күрһәтә алған.

Әхмәт Сөләймәновтың йыйып туплаған, классификациялаған иң күләмле фольклор өлгөләренең береһе – әкиәттәр.

Әкиәт – халыҡ ижадының бик боронғо һәм киң таралған жанры. Халыҡ араһында уны "ҡарһүҙ" тип тә йөрөтәләр. Ул ҡарттарҙан ҡалған "аҡыллы һүҙ" тигәнде аңлата.

Беҙҙең бөтәбеҙҙең дә өлкәндәрҙең әкиәт һөйләгәнен ишеткәнебеҙ бар. Ул, ғәҙәттә, “Борон – борон заманда йәшәгән, ти, бер әбей менән бабай”, тип башлана һәм “әле лә йәшәп яталар, ти”, тип тамамлана. Ошондай традицияла башланыу һәм тамамланыу әкиәткә хас алым: ул тыңлаусының иғтибарын тиҙ генә йәлеп итеү өсөн шулай бирелә.

Йөкмәткеһенә ҡарап, Ә. Сөләймәнов әкиәттәрҙе тематика, йөкмәтке һәм характерҙар, сюжеттар тибы яғынан тормош-көнкүреш әкиәттәрен бер нисә төркөмгә бүлеп ҡараны: 1) зирәктәр, 2) мөхәббәт һәм ғаилә тоғролоғо, 3) үтә үҙ һүҙле ҡатындар, 4) ҡыйыу ҡыҙ менән ҡарттар, 5) йомаҡ-әкиәттәр һәм ғибрәтле әкиәттәр тип билдәләй ул [Сөләймәнов, 2000: 83].

Донъялағы бүтән халыҡтарҙағы кеүек, башҡорттарҙың да ауыҙ-тел ижадында хайуандар тураһында әкиәттәр әһәмиәтле урын алып тора һәм фольклорҙың боронғо жанрҙарынан һанала. Күләме яғынан ҙур булмаған, еңел отоп алына торған хайуандар тураһында әкиәттәрҙә, ғәҙәттә, теге йәки был төбәктә тереклек иткән йәнлектәр төп персонаждар булараҡ сығыш яһай. Урал-Волга буйҙарында йәшәгән халыҡтар әкиәттәрендә, нигеҙҙә, төлкө, бүре айыу булһа, төрөкмәндәрҙә, мәҫәлән, бүре урынына йыш ҡына шакал сығыш яһай һәм ишәк, джейран, юлбарыҫ, арыҫлан кеүек кейектәр ҙә күберәк урын ала тип иҫбатлай ғалим. Әкиәттәр ҙә шулай уҡ халыҡтың идеалдары, ғәҙеллеккә, изгелеккә ышаныуҙарҙы үҙсәнлекле сағылыш тапҡан. Ғәҙеллек, тоғролоҡ, дуҫлыҡ, бер-береңә ярҙам итеү, килешеп йәшәү кеүек төшөнсәләрҙе әкиәт юғары ҡуя.

Шулай итеп, эҙләнеү эшенең маҡсатынан сығып ҡуйылған бурыстарға ирештек. Төрки фольклористикаһында күренекле урын тотҡан филология фәндәре докторы Ә. Сөләймәновтың халыҡ ижадын ғилми яҡтан тикшереү буйынса хеҙмәттәре өйрәнелде һәм әһәмиәте билдәләнде.

1. Әхмәт Сөләймәнов ауыҙ-тел фольклоры буйынса башҡорт фольклорсылары тарафынан төҙөлгән йыйынтыҡ, монографияларҙы ентекле өйрәнеп, терминология, ҡайһы бер жанрҙарҙың төркөмләнеше буйынса төҙәтмәләр индереп, “ Башҡорт халыҡ ижады”ның 18 томын төҙөүҙә ҡатнаша, рус телендә сыҡҡан баҫмаһының өс томын әҙерләүсе лә булып тора.

2. Ул 400-ҙән ашыу фәнни хеҙмәт, шул иҫәптән 30-ҙан артыҡ монография, мәктәп уҡыусылары һәм юғары уҡыу йорттары студенттары өсөн 40-тан артыҡ уҡыу әсбабы һәм уҡыу-методик ҡулланма авторы.

3. 60-80-се йылдарҙа фольклор экспедициялары ойоштороп, халҡыбыҙҙың ҡиммәтле хазинаһын һаҡлап алып ҡалыуға, инәй-бабайҙарҙан ауыҙ-тел ижадын яҙып алыуға өлгәшә.

4. Үрҙә һынап кителгәндәрҙең сығып, Ә. Сөләймәновтың изге йәдкәр сифатында халыҡ ижадын үтереүҙә беҙгә ҡалдырған ҡаһарманлыҡ, ватансылыҡ һәм халыҡтар дуҫлығы идеяһы менән һуғарылған фольклор әҫәрҙәре оло батырлыҡҡа тиң икәнлегенә төшөндөм. Әммә уның хаҡында йәш быуын ныҡлы белеп етмәй, тимәк, әле өйрәнәһе хеҙмәттәр, эшләнәһе эштәр артабан да дауам ителергә тейеш тип иҫәпләйем.

**Әҙәбиәт**


1. Аҡ тирәк, күк тирәк. Өфө, 1991; Балалар фольклоры: Мөғжизәле, әкиәтле бала саҡ – уйындарҙа һәм уйҙарҙа ҡаласаҡ. – Өфө, 1996.

*2.* Башҡорт халыҡ ижады = Башкирское народное творчество: әкиәттәр, риүәйәттәр, хәтирәләр, сәсәндәр ижады : сказки, предания, устные рассказы, творчество сэсэнов / мөх. Л. Бараг ; Н. Зарипов ; Кирәй Мәргән ; Ғ. Хөсәйенов ; төҙ. Н. Т. Зарипов; А.М. Сулейманов. – Өфө : Башҡортостан китап нәшриәте, 1982 . – 422 б.: рәс. – На башк. яз. – ISBN , 5000 экз..

3. Башҡорт халҡының йола байрамдары.Сөләймәнов Ә. М., Солтанғәрәева Р. Ә. Йыйындар . Өфө – 1995.

4. Ғәләүетдинов И. Ғ. һәм башҡалар. Балалар фольлоры: Бала саҡ – уйнап көлөп үҫер саҡ (баш.). – Өфө: Башҡортостан «Китап» нәшриәте, 1994. – ISBN 5-295-01280-8.

5. Сәғитов М. М. Башҡорт халыҡ эпосының мифологик һәм тарихи нигеҙҙәре. – Өфө: Китап, 2009. – 280 бит.

6. Сөләймәнов Ә.М. Ҡобайырым – нәсихәт: ирекле тәржемәләр, ҡобайырҙар [Текст] / Ә.М. Сөләймәнов. – Өфө: Башҡ. энцикл., 2014. – 240 б.

7. Сөләймәнов, Ә.М. Архаик эпостарҙа "атты ҡулға эйәләштереү" мотивы // Башкирский фольклор. IV выпуск.85 лет записи башкирского народного эпоса «Урал-батыр» [Текст] / Ә.М. Сөләймәнов. – Уфа: Гилем, 2000. Стр. 209 – 226.

8. Сулейманов, А.М. К проблеме сходства "Манаса" и башкирского эпоса // Башкирский фольклор. IV выпуск.85 лет записи башкирского народного эпоса «Урал-батыр» [Текст] / А.М. Сулейманов. – Уфа: Гилем, 2000. Стр. 226 – 231.

9. Сөләймәнов Ә. М. Бала-сағаның уйын фольклоры. Өфө, 2007

10. Мировая тюркология и Казанский университет: М64 материалы Международной научно-практической конференции (Казань, 26–28 апреля 2018 г.). Казань: Изд-во Казан. ун-та, 2018. 528 с.

*Приложение*



Фото 1. Музей етәксеһе Роза Шәриф ҡыҙы менән осрашыу.



Фото 2. Ә. Сөләймәнов музейы – ғалим хаҡындағы иҫтәлек ул.

© Ишкинина Р., Ахметова Н.А., 2024

УДК 008; 793

***Мирасов Линар,***
*Иҫке Собханғол урта мәктәбе*
*Нәби филиалының 5 кл. уҡыусыһы,*
*ет.:* ***Хисаметдинова Ә.Ә.,***
*Уҡытыусы,*
*Нәби ау.*

***Мирасов Линар,***
*ученик 5 класса Набиевского филиала*
*МОБУ СОШ Старомунасипово,*
*рук.: Хисаметдинова А.А.,*
*учительница,*
*д. Набиево.*

# ӘХМӘТ СӨЛӘЙМӘНОВ ХЕҘМӘТЕНДӘ КӨЛДӨРӨКТӘРҘЕҢ ҮҘЕНСӘЛЕГЕ

# ОСОБЕННОСТИ НЕБЫЛИЦ В ТРУДАХ АХМЕТА СУЛЕЙМАНОВА

**Аннотация.** Среди научных исследований видного ученого-фольклориста А.М. Сулейманова есть такая поджанровая форма сказки как небылицы. Они были очень популярны в народе. Смысл их заключался в повествовании о никогда не происходивших в жизни событиях, которые рассказывались как реально сбывшиеся и а результате вызывали смех. В работе в рассмотренных 31 небылицах было выявлено 37 фразеологизмов, которыми определены идейно-тематические, идейно-эстетические своеобразия сказок.

**Ключевые слова:** А.М. Сулейманов, смешные истории, фразеологизмы, герои, Ерэнсэ-сэсэн, труды, исследования.

Арҙаҡлы яҡташыбыҙ Әхмәт Мөхәмәтвәли улы Сөләймәнов – ғалим-фольклорист, филология фәндәре докторы, профессор, Рәсәй Гуманитар фәндәре академияһының академигы, Рәсәйҙең һәм БР-ҙың атҡаҙанған фән эшмәкәре, Башҡортостандың мәғариф алдынғыһы, Яҙыусылар союзы ағзаһы, Республикабыҙҙың Салауат Юлаев һәм Жәлил Кейекбаев премиялары лауреаты һәм Салауат Юлаев ордены эйәһе, районыбыҙҙың Почетлы гражданины.

Сөләймәнов Әхмәт Мөхәмәтвәли улы (15.03.1939 йылда тыуған, БАССР-ҙың Бөрйән районының Нәби ауылы), башҡорт фольклорсыһы. Филология фәндәре докторы (1991), профессор (1995). Рәсәй Гуманитар Фәндәр академияһының тулы хоҡуҡлы ағзаһы (академик, 1995). Башҡорт дәүләт университетының (БДУ) филология факультетын тамамлаған (1967). 1967 алып – Бөрйән районы Нәби һигеҙ йыллыҡ мәктәбендә тел һәм әҙәбиәт уҡытыусыһы, 1972 йылдан башлап БДУ-ла башҡорт әҙәбиәте һәм фольклоры уҡытыусыһы, доцент. 1991 йылдың ғинуарынан алып Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында фольклор һәм сәнғәт бүлеге мөдире. "Башҡорт халыҡ ижады" күп томлы йыйылмаһын төҙөүселәрҙең береһе. Башҡорт халыҡ экиәттәрен тикшереүгә арналған монографиялар, вуздар һәм мәктәптәр өсөн дәреслектәр һәм уҡытыу ҡулланмалары авторы. Башҡортостандың Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты (1987). Уның хаҡында 1997 йылда «Башҡортостан: Ҡыҫҡаса энциклопедия» шундай мәғлүмәттәр биргән (532-се б.) һуңғы йылдарында Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының башҡорт әҙәбиәте һәм мәҙәниәте кафедраһы профессоры, Башҡортостан мәғарифы алдынғыһы (1999), Республикабыҙҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре (1991), Башҡортостандың (1997) һәм Рәсәй Федерацияһының (2006) атҡаҙанған фән эшмәкәре, Жәлил Кейекбаев (2005), Мифтахетдин Аҡмулла (2009)

исемендәге премиялар лауреаты, Бөрйән районының маҡтаулы гражданины; Башҡортостандың һәм Рәсәй Федерацияһының яҙыусылар союздары ағзаһы, утыҙлап монография авторы, БДУ доценты Ғәйнислам Ибраһимов менән бер ҡулдан Төрөк республикаһында сыҡҡан ике томлыҡ «Башҡорт әҙәбиәте антологияһы»н төҙөүсе, дүрт блоктан, утыҙ биш томдан торған «Төрөк донъяһының уртаҡ әҙәбиәттәре» тупламаһының Башҡортостан буйынса координаторы һәм авторҙашы. Дөйөм алғанда, һигеҙ йөҙләп хеҙмәте ташҡа баҫылған бөйөк ғалим Әхмәт Мөхәмәтвәли улы.

2016 йылдың 21 ноябрендә арҙаҡлы яҡташыбыҙ беҙҙе ташлап китте. Ул тыуған ауылындағы зыяратҡа, ата-бабалары янына ерләнгән.

**Көлдөрөккә аңлатма**

Беҙ тикшергән көлдөрөктәр ғалимдың ”Башҡорт балаларының ҡарһүҙе” китабына индерелгән.

Нимә һуң әле ул көлдөрөк?

*“Булмағанды бар, тип, бойомға ашмаҫты бойомға ашҡан, тип һөйләп, көлдөрә торған йыйнаҡ күләмле махсус башкарыла торған фольклор жанры.*

*Көлдөрөк һөйләү. Бик ҡыҙыҡлы булды әле был көлдөрөк. Көлдөрөктәр тормошто тиҫкәреһен тышҡа әйләндергән кеүек, көләмәс геройы ҡәҙимге шарттарҙа күрһәтелә. Көләмәстәр менән көлдөрөктәр араһында ла яҡынлыҡ күҙәтелә. Икеһенә лә көлдөрөүсәнлек хас. Ләкин, көләмәстәрҙән айырмалы рәүештә, көлдөрөктәр һәр саҡ тулы сюжетлы була. Бер нисә көлдөрөк, бергә ойошоп, күләмлерәк көлдөрөк хасил итеүҙәре лә мөмкин”.*

*Ә. Сөләймәнов, “Башҡорт балаларының ҡарһүҙе” хеҙмәтенән.*

**Әхмәт Сөләймәновтың ”Башҡорт балаларының ҡарһүҙе” китабы буйынса эш**

Башҡорт фольклор ғилемендә бындай әҫәрҙәргә күҙәтеүҙәр беренсе мәртәбә бары 1983 йылда ғына күп томлыҡ “Башҡорт халыҡ ижады” тупламаһына ингән “Әкиәттәр” йыйынтығының бишенсе китабында бирелгән. Унда 24 көлдөрөк тексы бар. Улар русса “небылицы” тип атала икән. Уларҙы әкиәттең бер төрө тип ҡараған ғалимдар ҙа бар. Ләкин улар әкиәттәрҙән айырмалы рәүештә, теҙмә формала ла булырға мөмкин, һәм көлдөрөктәрҙең аҙағы әкиәттәрҙең йомғаҡланышы һымаҡ, һәр ваҡытта ла бәхетле, ҡыуаныслы булып тамамланмаҫҡа ла мөмкин. Шулай ҙа уларҙы уҡыһаң, көлкө килә. Хатта ундағы хәлдәргә ышанып та ҡуяһың. Бәләкәй балаларға улар донъяны яҡшыраҡ танып-белһендәр өсөн һөйләнгәндер. Мәҫәлән, миҫал өсөн бер көлдөрөккә туҡталайыҡ:

11.”Ҡуян аулаусылар”ҙа ...атайым менән үҫмәгән ҡыуаҡтан, тыумаған ҡуян балаһын килтереп сығарҙыҡ”. Көлдөрөктө тыңлаған бала уйланырға тейеш була инде. Үҫмәгәс, ул ҡыуаҡтың араһында ҡуян нисек ҡасып ятты икән, алып ҡайтҡан ҡуяндары ишеккә һыймағас, тәҙрәнең бәләкәй өлгөһөн алып, шунан индереүҙәре лә баланы уйландырырға тейеш.

9.”Һунарсы хикмәттәре”ндә ....айыу шундай ҡурҡты, ҡойроғон һелтәп ебәрҙе-мин осоп барып төштөм”. Тыңлаусы был көлдөрөктө иғтибар менән тыңлап ултыһа, айыуҙың ҡойроҡһоҙ булғанын шунда уҡ иғтибарға аласаҡ.

Мин тикшергән китапта барлығы күләме кәмей барыу тәртибендә 31 көлдөрөк урынлаштырылған ине.

Әйтеп үтеүемсә, был минең тәүге тикшеренеү эшем. Һәм мин алдыма ҙур мәсьәләләр ҡуйыуҙы киләсәккә ҡалдырып, үҙебеҙгә таныш булған тема: нығынған һүҙ бәйләнештәр, йәғни фразеологизмдарҙың көлдөрөктәрҙәге әһәмиәтен билдәләү өсөн, текстар буйлап уларҙы эҙләп, билдәләп сыҡтым. Ҡайһы берҙәрен фразеологизмдар һүҙлегенән, ҡайһыларын уҡытыусым ярҙамында асыҡлап, уларҙың текстағы әһәмиәтен билдәләнем. Ҡайһы бер текстарҙа улар бөтөнләй ҡулланылмаған, ә ҡайһы берҙәрендә икешәр-өсәр тапҡыр фразеологизмдар ярҙамында әйтергә теләгән фекер еткерелгән. Шунан сығып, көлдөрөктәр бик бәләкәй йәштәге балалар өсөн түгел, ә бер аҙ ҙурыраҡтар өсөн тәғәйенләнгәндер. Сөнки, бәләкәй бала унда һүрәтләнгән ваҡиғаларҙы бөтөнләй аңламаҫҡа мөмкин тип уйлайым.

31 текстан мин бөтәһе бергә 37 фразеологик берәмек таптым. Уларҙың тестағы әһәмиәтен билдәләнем. Уларҙы үҙем уйлап, бер таблицаға урынлаштырҙым, мәғәнәләрен һүҙлек ярҙамында һәм текста ҡулланылышына ҡарап, яҙып сыҡтым:

| **Фразеологик берәмек** | **Мәғәнәһе** | **Ҡайһы көлдөрөктә** |
|---|---|---|
| Телеңә бик күп һалышып торма | Күп һөйләмә | “Ерәнсә сәсәндең ҡырҡ алдағаны” |
| Елгә еленләгән, көнгә ҡолонлаған | Бушты юҡтан барлыҡҡа килгән | “Ерәнсә сәсәндең ҡырҡ алдағаны” |
| Һыу һөлөгө кеүек ҡара ҡашлы | Бик һылыу | “Ерәнсә сәсәндең ҡырҡ алдағаны” |
| Мең бәлә менән | Көскә-көскә | “Ерәнсә сәсәндең ҡырҡ алдағаны” |
| Түтәгә һуҡтырып ҡайтып ултырам | Тура юлдан барыу | “Ерәнсә сәсәндең ҡырҡ алдағаны” |
| Энә буйы ер киттем | Бик аҙ юл үтеү | “Ерәнсә сәсәндең ҡырҡ алдағаны” |
| Ҡустыңдың башына еттем | Юҡ иттем | “Ерәнсә сәсәндең ҡырҡ алдағаны” |
| Иҫен йыйып ала алмаған | Аптырап ултырған | “Ерәнсә сәсәндең ҡырҡ алдағаны” |
| Әҙәм көлкөһөнә ҡалған | Уңайһыҙ хәлгә тарыған | “Алдар менән Ямар” |
| Баҙары күтәрелеп киткән | Ҡәҙере артҡан | “Алдар менән Ямар” |
| Был эштең осо килеп сыҡҡан | Был эште аңлағандар | “Алдар менән Ямар” |
| Ҡотон алып сыҡтылар | Ҡурҡытҡандар | “Алдар менән Ямар” |
| Күҙең сыҡмағандыр | Күрмәймәйһеңме ни | “Алдар менән Ямар” |
| Береһен алдап, икенсеһен ямап | Икеһен дә алдаған | “Алдар менән Ямар” |
| Һыуһынды тултырғас | Туйған | “Ҡуҙашман” |
| Итәк тулы балаһы | Балалары күп | “Хисам әкиәте” |
| Ус аяһындай ер | Бик бәләкәй ер | “Хисам әкиәте” |
| Эс бошорғос көй | Күңелһеҙ көй | “Хисам әкиәте” |
| Тәү әтәстән тороп, ҡара төнгә тиклем | Бик оҙаҡ ваҡыт | “Хисам әкиәте” |
| Тәрән уйға батҡан | Ныҡ уйланған | “Хисам әкиәте” |
| Таң һарғая башлағас | Ҡояш сығырға яҡынлаған | “Хисам әкиәте” |
| Һушһыҙ булып йығылған | Иҫе китеп ҡолаған | “Хисам әкиәте” |
| Ҡото алынған | Ҡурҡҡан | “Хисам әкиәте” |
| Һөрән һалып | Ҡысҡырып | “Хисам әкиәте” |
| Тас-тос һуғыша башлағандар | Ныҡ итеп талашҡандар | “Хисам әкиәте” |
| Ҡулыбыҙҙан килмәгән эш юҡ | Барыһын да беләбеҙ | “Хисам әкиәте” |
| Йыл һайламай, шаулап уңған | Бик ныҡ уңған | “Хисам әкиәте” |
| Ҡото осҡан | Ҡурҡҡан | “Тирмәнсе малай” |
| мереп эшләй | Бик яҡшы эшләй | “Тирмәнсе малай” |
| Иҫен юғалтып | Һушһыҙ булған | “Һунарсы хикмәттәре” |
| Баш-күҙҙең һаулығы | Именлек | “Һунарсы хикмәттәре” |

| | | |
|---|---|---|
| Һөйәк-һаяғы имен-ҡалыуға ҡыуанып | Тере ҡалыуына ҡыуанған | “Бар, имеш, юҡ, имеш” |
| Бер тамсы һыу ҡалмаған | Бөтөнләйгә бөткән | “Бер бабайҙың ҡыҙға әйләнгәне” |
| Байтаҡ ер кистеләр | Арыу уҡ ер киткәндәр | “Йөҙ егерме йыл йоҡлаған ике әҙәм” |
| Һүҙ биреп ҡайтып китте ти | Вәғәҙә биргән | “Сәләх һунарсының оҙон сәләме” |
| Һүҙендә ныҡ торған | Үҙ фекерендә ҡалған | “Кем көслө?” |
| Энә буйы ер киткән | Бик аҙ ер үткән | “Кем көслө?” |

Ошо эшемде атҡарып сығыу өсөн мин көлдөрөктәрҙе ике тапҡыр уҡып сыҡтым, өсөнсөһөндә фразеологизмдарҙы билдәләнем. Көлдөрөктәр ысынлап та, көлкө уятһа ла бик әһәмиәтле халыҡ ижады жанры икәнлеген аңланым. Көлдөрөк геройҙары әҙәм ышанмаҫлыҡ эштәр башҡарһа ла, улар ҡылған эштәрҙең ҙур мәғәнәһе лә бар. Кеше ҡулынан килмәҫтәй эш юҡ, бары тик теләгең һәм уңғанлығың булһын тип әйтергә теләгән боронғолар.

Ғалим үҙе көлдөрөктәрҙең әһәмиәтен ошолай итеп билдәләп үткән:

*“...Ысынлап та, мәҫәлән, боронғо һунарсылар урман, тау эйәләренә (рухтарына) бағышлап, уларҙың иғтибарын яулау маҡсатында һәм шул юл менән уларҙың мәрхәмәтенә ирешеү өсөн, әкиәт һөйләгән замандарҙа, «кире тел» формаһын да файҙаланыуҙары ихтимал. Сөнки, беҙгә мәғлүм күпселек көлдөрөк сюжеттарының һунар темаһы менән бәйле булыуы; икенсенән, борон сихри заттар кеше әйткәндең киреһен аңлауына инаныуҙары (Һинең: “Бар” – тип әйтеүең, мәҫәлән, улар өсөн “юҡ” мәғәнәһе ала, тип белеүҙәре) шуға ишара, буғай. Нисек булғанда ла, хәҙер көлдөрөктәр эстетик вазифа үтәй. Улар, ысын мәғәнәһен тышҡы мәғәнәһеҙлеккә (алогизм формаһына) тәрән йәшереп, тыңлаусының һиҙгерлегенә иҫәп тотҡан үҙенсәлекле әкиәттәр төркөмөн хасил итәләр...”*

Тимәк, халҡыбыҙ ижадының бер өлгөһө булған көлдөрөктәр, үҙҙәренең йөкмәткеһе менән тыңлаусыны уйланырға мәжбүр иткән. Кәйефен күтәргән. Хәҙерге тормошта ла көлдөрөктәрҙең әһәмиәте бар. Тик уларҙы уҡырға, ҡулланырға, өйрәнергә кәрәк. Фразеологизмдарҙың да ҡулланылыуы , был төр жанрҙы уҡымлыраҡ итә. Минең ошо бәләкәй генә фәнни эҙләнеүҙәрем, белем алырға, халҡыбыҙ ижадын өйрәнергә теләүселәргә хеҙмәт итер тип ышанам.

**Әҙәбиәт**


1. Сөләймәнов Ә.М. Башҡорт балаларының ҡарһүҙе. Өфө, 2009.
2. Сөләймәнов Ә.М. Бала-сағаның уйын фольклоры. Өфө, 2007.
3. Сөләймәнов Ә.М. Әкиәттә хәҡиҡәт. Өфө, 1997.
4. Ураҡсин З. Ғ. Башҡорт теленең фразеологик һүҙлеге. Өфө, 2006.


© Мирасов Л.А., Хисаметдинова А.А., 2024

УДК 008; 793

***Мостафин Заһит*,**
*Яуымбай фил.*
*Байназар урта төп*
*дөйөм белем биреү мәктәбе*
*6 класс уҡыусыһы*
*ет.:* ***Ғәбделхаев З.Ғ.,***
*уҡытыусы,*

*Яуымбай ау.*

***Мустафин Загит,***
*ученик 6 кл. Яумбаевского филиала*
*Байназаровской СОШ,*
*рук.: **Габделхаева З.Г.,** учительница,*
*дер. Яуымбаево*

# УЙЫНДАРҘА – ТОРМОШ БАШЫ
## (Балалар фольклоры)

# В ИГРАХ – НАЧАЛО ЖИЗНИ
## (Детский фольклор)

**Аннотация.** В статье рассматривается одно из направлений научно-исследовательской деятельности видного башкирского ученого-фольклориста Ахмета Сулейманова – детский фольклор. Авто указывает на то, что в детских играх, как части обрядового фольклора башкир, заложены нравсвтенно-этические, дидактические начала, необходимые в жизни людей, раскрывается значение игра для детей разных возрастов. В статье также использованы зафиксированные автором игры.

**Ключевые слова:** А.М. Сулейманов, ученый, деский фольклор игры, воспитание, нравственность, этнопедагогика.

Филология фәндәре докторы, профессор, Рәсәй федерацияһының һәм Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған фән эшмәкәре, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Башҡортостан Республикаһының мәғариф алдынғыһы ,Башҡортостан фәндәр академияһының почетлы академигы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы, Ж.Кейекбаев, М.Ғафури, М.Аҡмулла, З.Вәлиди исемендәге премиялар лауреаты, С.Юлаев ордены кавалеры Сөләймәнов Әхмәт Мөхәмәтвәли улы 1939 йылдың 15 мартында Башҡортстандың иң матур төйәге булған – Бөрйән районының Нәби ауылында Хәйрулла улы Мөхәмәтвәли уҙаман менән Лотфулла ҡыҙы Нурикамал тигән унған колхозсылар ғаиләһендә тыуған. Тиңдәштәре кеүек үк, унын да бала сағы ауыр һуғыш йылдарына тура килгән. 1942 йылда ҡаты ауырыуҙан атаһы үлә. Өс кенә йәшендә атайҙан етем ҡалып, балалығы һуғыш дәүеренә тура килгән Әхмәттең бала сағы бик ауыр була.

Башҡорт дәүләт университетының филология факультетының башҡорт-рус бүлегендә белем ала. Уҡыу йылдарында фольклор менән етди ҡыҙыҡһына башлай. Ғүмер буйы халҡының күңел донъяһынан рухи хазиналарҙы сүпләп, туплап, халҡына кире ҡайтарыусы арҙаҡлы фольклорсының тап Бөрйәндән сығыуы ла тәбиғи хәл. Ысынлап та, матур тәбиғәтле, рухи хазиналарға һәм ҡомартҡыларға бай булған Бөрйәнебеҙҙә, саф, эскерһеҙ ,ижадка ғашик кешеләр генә йәшәйҙер ул. Башҡорт халҡының менталитетын, йөҙөн билдәләгән бик күп эпостар, иртәктәр, ҡобайырҙар тап ошонда ижад ителгән дә инде. Әхмәт Мөхәмәтвәли улы Сөләймәнов башҡорт халҡының ижадын күп яҡлап , тәрән, ентекле өйрәнгән белгес. Ул бәләкәй сағында уҡ фольклор өлгөләрен йыйыу менән мауыға. Шулай итеп фольклор өлгөләрен йыйып төркөмләй , халҡының ауыҙ-тел ижадын, яҙма ҡомартҡыларын өйрәнеп, уларҙы халыҡҡа еткереү буйынса ҙур хеҙмәт күрһәтә.

Ул, айырыуса эпос, риүәйәт, легенда, әкиәт көләмәс, йола һәм балалар фольклорын өйрәнеү өлкәһендә эшләй.

Мин унын халыҡ ижадын туплау, йыйыу буйынса эшенә байҡау яһап, уйын фольклорын ҡарарға булдым. Минең был эшемдең төп өлөшө булып, олатай-өләсәйҙәребеҙ бәләкәй саҡта уйнаған төрлө уйындарҙы өйрәнеү, тергеҙеү. Был тәңгәлдә мин, иптәштәремде лә эшкә ҡуштым. Эшләгән эштәребеҙ мәктәп музейына тапшырылһа, яҙып алған уйындарҙы башҡа тиҫтерҙәребеҙгә лә өйрәтәсәкбеҙ.

Минең уйлауымса, балалыҡ уйындан, уйын балалыҡтан айырылғыһыҙ. Был инде бөтәһенә лә билдәле. Ләкин уйынды ололар бары күңел асыу сараһы тип кенә баһалаусан. Ә ысынында, балалар өсөн ул-тотош бер донъя. Шулай итеп, уйын бала-сағала сәм, ярыш теләге уята. Уйынсыларҙың һәр береһе, йәшенә ҡарамай физик яҡтан ал бирмәҫкә тырыша. Сослоҡта, етеҙлектә, беләк, бил көсөндә, мәргәнлектә, зирәклектә, тапҡырлыҡта, иғтибарлыҡта, һиҙгерлектә ярыша. Бындай һәләттәрҙе һәр кем үҙе өсөн уйнағанда ғына түгел, күмәкләп уйнағанда ла күрһәтергә тырыша. Сөнки уның уңышы-команданың уңышы, команданың уңышы-уның уңышы. Шуға күрә бындай уйындарҙа бер-береңә ышыҡланып ҡалыу насар ғәҙәт һәм күренеш. Шулай итеп күмәк уйындар, бала-сағала коллективлыҡ тәрбиәләүгә булышлыҡ итә лә инде.

Күҙәтеүҙәргә ҡараһаң, балалар үҫкән һайын уларҙың уйындары ла "үҫә". Олораҡ йәштәге балалар уйыны, йөкмәткеһе яғынан бай һәм төрлө булыуы менән бәләкәйҙәр уйынынан айырыла. Бала уйнаған һайын уның фантазияһы ла байый, киңәйә төшә. Ул билдәле бер уйындың йөкмәткеһен үҙгәртеп, уның нигеҙендә икенсе бер уйын барлыҡҡа килтерә, йә булмаһа шул уйындың йөкмәткеһен байыта.

Хәрәкәтле уйындарҙа ҡағиҙәләр төп шарттарҙың береһенә әйләнә һәм улар шул ҡағиҙәләр нигеҙендә ярышыуға ҡорола. Ҡағиҙәне бала теүәл үтәргә тейеш, тимәк, уйын баланы айрым тәртипкә, мәжбүрилеккә, теүәллеккә өйрәтә.

Сослоҡ, таҫыллыҡ, йылдамлыҡты тәрбиләү өсөн хәрәкәткә бәйләнгән уйындар һүҙ, таҡмаҡ, диалогтар менән байытыла.

Ғөмүмән, күп эренгия талап ителгән уйындар көстө арттырһа, баланың һүҙгә йорлоғо, ижади һәләтлеге йырлы – таҡмаҡлы уйындарҙа тәрбиәләнә.

Күберәк хәрәкәтле уйындарҙа һәр уйнаусынан ихтыяр көсө, сыҙамлылыҡ, ныҡышмалылыҡ талап ителә.Һығымта ла, уйнаған бала менән уйнамаған бала араһында айырма күҙгә күренеп күҙәтелә.Һәр саҡ хәрәкәтле уйындарҙа ҡатнашҡан балала, ныҡышмалылыҡ, сабырлылыҡ сифаттары камиллаша тип уйлайым.

Филология фәндәре докторы, профессор, Салауат Юлаев исемендәге премия лауреаты Ә.М.Сөләймәновтың "Бала-сағаның уйын фольклоры" китабында уйын фольклорын уҙыш-баҫтырышмаҡтар, туп һуғыш, роль бүленешеп уйнауҙар, туп уйнауындары, таяҡ уйындары, йәшенмәктәр, яҙлыҡтырыуға, мәсьәлә – яуапҡа ҡоролған уйындар төрөнә бүленгән. Был төргә бар балалар яратып уйнаған алтмыш ике тирәһе төрлө уйындар ингән (Аҡ тирәк, күк тирәк, Буяу алыу, Һуҡыр тәкә, Һәпәләк, Әбәк, Мәскәй әбей,Ҡыҙыл байраҡ һ.б.). Китаптағы уйындарҙы ҡарап сыҡҡандан һуң, ололарҙан йөрөп яҙып алған уйындарымдың, тик өсәүһе генә булмай сыҡты.

"Бала-сағаның уйын фольклоры" китабынан "Ер алыш" уйыны оҡшаны. Уйынды иптәштәремә лә өйрәттем. Был уйында оҫталыҡ, мәргәнлек талап ителә.

Халыҡ "Уйындарҙа – хәрәкәт, хәрәкәттә – бәрәкәт" тип юҡҡа ғына әйтмәгәндәр. Сөнки балалар өсөн уйын ҡоро хәрәкәт кенә түгел, ә дәртле йәшәйеш һәм һәр яҡлап йылдам үҫеш сығанағы, халыҡтың шөғөлөндә, ғөрөф-ғәҙәттәрендә һәм рухында тәрбиә алыу сараһы, донъяны, тормошто таныҡкан уҡыу һәм көс-ғәйрәтте, таҫыллыҡты үҫтергән мәктәп.

**Уйын төрҙәре.**

Икенсе бүлектә ололарҙан һорашып,улар бала саҡтарында уйнаған уйындарҙы яҙып алдым.

**"Ҡайыш" уйыны**. ***(Был уйынды Вәлитова Резида инәйҙән яҙып алдым).*** Уйынсылар бер-бер артлы парланышып, теҙелешеп баҫалар.Тик бер уйынсы ғына иң алда парһыҙ торорға тейеш. Һәр уйынсыға, уйынды ойоштороусы шым ғына һандар әйтеп сыға. (Ул һандар 30 йәки 50 һанынан үтмәҫкә тейеш. Мәҫәлән, 25,10,5,15, 30). Уйынды алып барыусы ҡулындағы ҡайышы менән иң алда парһыҙ тороусыны һуға башлай. Был уйынсы ҡайыш һуғылыуҙан ҡотолоу өсөн, ниндәйҙер һанды ярҙамға саҡыра. Ул әйткән һан менән уйынсы бар икән, үҙ парын ташлап йүгереп алға килеп баҫырға тейеш, уйынды

алып барыусы ҡайышты уға һуға башлай. Ә тәүге парһыҙ ҡалыусы уның урынына барып баҫа.

Шулай итеп, уйын дауам итә. Әгәр парһыҙ ҡалыусы, уйынсыларҙа булмаған һанды ҡысҡырһа, ул дөрөҫ һан әйтеп саҡырғанға тиклем, ҡайыш менән һуғыла ла һуғы ла.

**“Ун ике таяҡ” йәки “Йәшенмәк”.** (***Уразгулов Рысъян апа һәм Сәниҙә инәйҙән яҙып алдым***). Бындай уйындарҙа етеҙлек, зирәклек, иғтибарлылыҡ үҫешә.

Был уйында бер көтөүсе һайлап ҡуйыла.

Оҙон таҡтаны бүрәнә аша һалабыҙ ҙа, уның ергә тейеп торған яғына бер дәүмәлдәге ун ике таяҡсаны өйөп һалабыҙ. Уйынсылар ошо таҡтаны уратып, түңәрәкләп баҫалар ҙа, һамаҡлай башлайҙар:

Беҙ, беҙ, беҙ инек
Беҙ ун ике ҡыҙ инек,
Бер таҡтаға теҙелдек
Таң атҡансы юҡ булдыҡ..., –

тип әйтеп бөтөүгә, уйынсыларҙың береһе таҡтаның ҡалҡыу яғына баҫһа, таяҡтар осоп китә. Көтөүсе ҡасан уларҙы йыйып, урынына кире һалғансы, уйынсылар тирә-яҡҡа йәшенләр. Көтөүсе уларҙы эҙләй башлай, бер үк ваҡытта таяҡтар һалынған таҡтаны ҡарап та, һаҡлап та өлгөрөргә тейеш.

**“Аҡ ҡалас” уйыны.**

Был уйын балаларҙың телмәр үҫешенә, хәтерҙәрен нығытыуға йоғонтоһо бик ҙур

Бына был уйынды, ***өләсәйем Әхмәтйәнова Рәсимә Мөхәмәҙиә ҡыҙы һөйләне.***

Мәҫәлән, беҙ бала-сағалар тыуған көндәрҙе үткәргәндә “Аҡ ҡалас” уйынын уйнарға яраттыҡ. Ул ошолай уйналына ине: ҡулға-ҡул тотоношоп түңәрәк яһайбыҙ.Кемдең тыуған көнө ул уртала ҡала. Беҙ йырлай-йырлай, нисек итеп ҡаластың йәйелеүен,бешеүен хәрәкәттәр менән күрһәтеп, уртала ҡалыусыны берсә ҡыҫып, берсә ысҡындырып, түңәрәк буйлап әйләнәбеҙ.

Заһиттың тыуған көнөнә
Беҙ бешерҙек аҡ ҡалас;
Бына шулай ул бейек,
Бына шулай ул тәпәш;

Бына шулай киңлеге,
Бына шулай тарлығы;
Аҡ ҡалас,аҡ ҡалас,
Теләгәненде ал да ҡас!

Урталағы бала үҙ урынына икенсене һайлап ҡуя ла, үҙе түңәрәккә ҡушылып,уйынды дауам итәләр.

Һүҙемде йомғаҡлап, ошоларҙы әйтер инем. Бала-сағаның уйын фольклоры, балаларҙың физик яҡтан камиллашыуына, интеллектуаль, әхлаҡи йәһәттән үҫеүенә ыңғай йоғонто яһай. Бигрәк тә хәрәкәтле уйындарҙы уйнап үҫкән балалар, иптәштәре эргәһендә физик яҡтан айырылып торалар. Мин үҙем дә тик тормаҫ, саф һауала хәрәкәтле уйындарҙы уйнарға яратҡан баламын.

Ә инде һуңғы ваҡытта бигерәк тә телефон аша төрлө насарлыҡтарҙы пропагандалаған уйындар, фильмдар балаларҙа аяуһыҙлыҡ, ҡаты бәғерлелек һыҙаттары үҫтерә башланы. Ошо шарттарҙа бишектән үк балаға телефон тоттормай, киреһенсә милли фольклорға, шул иҫәптән, милли уйын фольклорына мөхәббәт тәрбиәләү ыңғай һөҙөмтә бирер ине.

Шулай итеп, уйындарҙа балалар берҙәмлеккә, лидер сифаттарына өйрәнә, ынтыла. Ошоларҙан сығып, мин үҙемдең бәләкәй генә эҙләнеү эшемдә олатай-өләсәйҙәр уйнаған уйындарҙы яҙып алып, тиҫтерҙәрем менән бергәләп өйрәнеп,башҡаларҙы ла йәлеп итербеҙ тигән ышаныста ҡалам. Артабан да ошо башлаған эшемде дауам итермен. Үҙебеҙҙең шәжәрәләрҙе белеү, тарихын өйрәнеү, йолаһын йыйыу, барыбыҙ өсөн дә мөһим эш.

**Әҙәбиәт**

1. Башҡорт халыҡ ижады. I-III томдар. – Өфө, 1972-1985 йылдар.
2. Ғәләүетдинов И.Ғ. һ.б. Балалар фольклоры: Бала-саҡ уйнап-көлөп үҫер саҡ. – Өфө: Башҡортостан “Китап” нәшриәте, 1994.
3. Сөләймәнов Ә.М. Бала-сағаның уйын фольклоры. – Өфө: Китап, 2007.
4. Солтангәрәева Р.Ә. Мин – тәбиғәт балаһы: Балалар фольклоры: Уҡытыусылар өсөн ҡулланма. – Өфө: Китап, 2001.
5. Ололарҙан алынған мәғлүмәттәр.

© Мустафин З.,Габделхаева З.Г., 2024

УДК 008; 793

***Сәғитов Әскәт,***
*Яңы Монасип башланғыс мәктәбенең*
*3 класс укыусыһы*
*ет.:* ***Яхина Л.Ф.****, укытыусы,*
*Яңы Монасип ау.*

***Сагитов Асгат,***
*ученик 3 кл. Ново-Мунасиповской начальной школы*
*рук.:* ***Яхина Л.Ф.****, учительница,*
*дер. Ново-Мунасипово*

## ӘХМӘТ СӘСӘН ЗАТЫНА ТОҒРОЛОҠ: ФОЛЬКЛОРҘЫ ӨЙРӘНЕҮҘӘ МИНЕҢ ҒАИЛӘМДЕҢ ӨЛӨШӨ

## ПРЕДАННОСТЬ РОДУ АХМЕТ-СЭСЭНА: ВКЛАД МОЕЙ СЕМЬИ В ИЗУЧЕНИЕ ФОЛЬКЛОРА

**Аннотация.** В статье приведены воспоминания бывших учеников А.М. Сулейманова, который отличался строгостью и требовательностью. Автор делится материалами из семейного архива своих родственников. В статье проводится идея о том, что односельчане ученого не должны забывать о нем, увековечивать его память, продолжая на практике его дело по сохранению и популяризации устного народного творчества.

**Ключевые слова:** А.М. Сулейманов, известный ученый-фольклорист, фольклор, память, сохранение, семья, сэсэнство-сказительство, вкалад.

Быйыл арҙаҡлы яҡташыбыҙ күренекле профессор, академик, ғалим- фольклорист Әхмәт Мөхәмәтвәли улы Сөләймәновҡа 85 йәш булыр ине. Күп йылдар дауамында ижад ителгән әҫәрҙәре, ғилми хеҙмәттәре башҡорт фольклорында ҡабатланмаҫ эҙен һалған, халыҡ күңеленә үтеп, үҙ урынын тапҡан.

Әхмәт Сөләймәнов ғүмеренең аҙағынаса “Урал батыр” эпосы өҫтөндә эшләгән. Бөтә донъя кимәлендә эпостар өҫтөндә быҒаса башҡарылған тикшеренеү һөҙөмтәләренә һәм тәжрибәләренә таянып, ул ҡыҙыҡлы һығымталар яһаған. Унын ижадын хөрмәт итәбеҙ, шуға ла мәҡәләмде уға арнарға булдым.

Безгә Әхмәт Мөхәмәтвәли улы йәмғиәтебеҙҙе үҫтереүгә индергән тос хеҙмәттәре, эшмәкәрлеге аша яҡшы таныш, ә уның укыткан укыусылары иһә уның һәр һүҙен иҫтәлек итеп һаҡлай. Шуға ла уның хаҡында хәтирәләр менән бүлешеүҙәрен һорап мөрәжәғәт иттек.

Яңы Монасип ауылынан хаҡлы ялдағы укытыусы *Сәғитова Нәсимә Ғилман ҡыҙы* менән әңгәмә :

- ***Һеҙҙең өсөн кем ул Әхмәт Сөләймәнов?***

- Иң беренсе уҡытыусым. 1970 йыла Нәби мәктәбенә 5 класҡа уҡырға барҙым. Әхмәт ағай рус һәм немец телдәренән уҡытты. Бик талапсан, урыны менән уҫал ғына ине. “2” билдәһен ҡуйырға йәлләмәне. Миңә лә эләкте, әммә ғүмерлек һабаҡ булды. Коридорҙың осонда Ағайыбыҙҙың тауышы ишетелеү менән, шаярып йөрөгән балалар, шымып ҡала инек.

- Үҙ еренең патриоты ине Әхмәт ағай. Үҙебеҙҙең тарихты, ерлектәге фольклор материалдарын йыйыу, һаҡлауға ныҡ әһәмиәт бирҙе. Беҙҙең ауылдашыбыҙ ғалимы Мөхтәр Сәғитов исемен мәңгеләштереү буйынса күп эшләне, һөҙөмтәлә районда уның исемендәге музей асылды.

- Беҙҙең мәктәп музейына ғалимдың ҙур итеп эшләнгән фотоһон эшләтеп, бүләк итте. 1993 йылда М. Сәғитовтың юбилейын мәктәптә үткәрелеүе лә, уның эш һөҙөмтәһе. Теләктәр яҙылған дәфтәре әле лә ҡәҙерле иҫтәлек булып һаҡлана



- **Фольклорҙы өйрәнеүҙә минең ғаиләмдең өлөшө**.

Нимә ул фольклор? Был инглиз һүҙе “халыҡ белеме”, “халыҡ ғилеме”, “халыҡ аҡылы” тигәнде аңлата.

1.1. **Өләсәйем Сәғитова Гәүһәр Афзал ҡыҙы тураһында**.



Минең өләсәйем Сәғитова Гәүһәр Афзал ҡыҙы сит телдәр (немец, француз) һәм рус теле, әҙәбиәте уҡытыусыһы булып эшләгән. Студент сағында бейеү ансамбле составында бик күп смотр-фестивалдәрҙә ҡатнашып йөрөгән. Балаларға белем биреү менән бер рәттән, әүҙем рәүештә фәнни-эҙләнеү эше менән шөғөлләнгән. Ул республика кимәлендә, сит илдәрҙә фәнни конференцияларҙа сығыш яһаған.

Шул уҡ мәлдә балаларға ауыҙ-тел ижадын, башҡорт фольклор өлгөләрен өйрәтеү буйынса ҙур эш алып барған. Ул өйрәткән “Киндер” бейеүен, боронғо башҡорт кейемдәре тураһында эҙләнеү эше эшләүҙәрен, сепрәк ҡурсаҡтар эшләргә өйрәтеүен, уйындар, таҡмаҡтарын уҡыусылары әле лә ҙур ихтирам менән иҫкә алалар.

Был эҙләнеү эшенә әҙерләнгәндә ғаилә архивынан уның бер нисә эштәрен табып алдыҡ.

**Инәйем Әхтәмова (Сәғитова) Гөлдәр Таһир ҡыҙы тураһында.**

Ул мәктәптән һуң М. Аҡмулла исемендәге БДПУ-ын тамамлай. Хеҙмәт юлын мәктәптә башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булып башлай. Йәш кенә булыуына ҡарамаҫтан ул үҙе бер хазина сығанағы булған. Бик матур бейегән, спектаклдәрҙә ролдәрҙе оҫта башҡарған. Үҙ ҡулдары менән башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарҙың милли кейемдәре-

күлдәк, бишмәт, ҡашмау, һаҡал, хәситә эшләп алған. Бәйләп-сиккән, ҡораған ҡорамаларының иҫәбе-һаны юҡ.

- 2017 йылда районда үткәрелгән "Әхмәт әйтеше" сәсәндәр конкурсында 1 урын ала. "Г. Әхтәмова сараның асышы булды. Уның ораторлыҡ һәләте, ниндәй сетерекле хәлдәрҙә лә юғалып ҡалмауы уның еңеүселәр рәтендә буласағын баштан аңғартты. Жәлил Кейекбаевҡа арнап яҙған ҡобайыры ла уның тел ҡалҡаны булыуына, сәсәнлегенә төшөндөрҙө.", тип яҙылып сыға "Таң" гәзитендә.
- "Серле биҙәк ҡорама, үткәндәрҙән ҡот ала" район ҡорамасылар конкурсында актив ҡатнаша.
- 2018 йылда бөтә Рәсәй сәсәндәр фестивале лауреаты Дипломына лайыҡ була.
- 2018 йылда Әбйәлил районында үткәрелгән "Ҡыҙыл йәйләүе" башҡорт этник ижад конкурсында "Башкирское устное поэтическое творчество" номинацияһында еңеүсе була.
- 2018 йылда Әхтәм Әбүшахманов призына һәүәҫкәр театрҙар республика фестивалендә "Иң яҡшы ҡатын-ҡыҙ роле" номинацияһында еңеүсе була.
- 2018 йыл "Бөрйән балы-башҡорт даны" Халыҡ-ара этнофестивалдә "Ритайым" бейеү конкурсында еңеүсе Дипломы менән бүләкләнә.

Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, таланты сәскә ата башлаған осорҙа йәшләй генә мәрхүмә булып ҡала инәйем (Ҡушымта 12, 13).

Бөгөнгө көндә әсәһенең юлын ҡыҙы Айшат апайым дауам итә тип әйтергә мөкин. Ул балалар баҡсаһына йөрөгәнендә, мәктәптә уҡығанында "Урал батыр" эпосын йәш башҡарыусылар конкурсында 2015 йылда 1 урын, 2016 йылда 2 урын ала. Әле апайым М. Аҡмулла исемендәге БДПУ-да уҡып йөрөй.

Эйе, "Батырҙарын иҫкә алғанда, онотмаһын мине лә Тыуған ил!", тигән шиғыр өҙөктәре телгә килгәндә беҙ халҡыбыҙҙың бөйөк улы, районыбыҙҙың олуғ шәхесе Әхмәт Мөхәмәтвәли улы Сөләймәновтың яҡты исемен беренселәрҙән булып телгә алырға бурыслы – ошоно онотмайыҡ!

Халыҡ ижадын, уны ғилми яҡтан өйрәнеүҙә Әхмәт Сөләймәновтың башҡарған эше сикһеҙ. Һәр саҡ эҙләнеүсән, баҫалҡы ғалим, кешелекле уҡытыусы буларaҡ хәтерҙәрҙә уйылып ҡалыр Әхмәт Сөләймәновты белгән һәр кеше иң тәүҙә уны итәғәтлелеге һәм ихласлығы өсөн хөрмәт, ихтирам итә ине...

Ә инде Гәүһәр өләсәйем һәм Гөлдәр инәйем беҙҙең өсөн яҡты йондоҙ булып ҡаласаҡтар. Улар һәм башҡарған эштәре тураһында мин эҙләнеү эшемде дауам итәсәкмен, башҡаларға ла ҙур ғорурлыҡ менән һөйләйәсәкмен.

**Әҙәбиәт**


1. Башҡорт Википедияһы.
2. "Ватандаш" журналы № 3 1997 йыл,
3. "Таң" гәзите, 2017 й.
4. Сәғитова Н. Ғ. "Тарих һөйләй Ҡаратау".
5. Сәғитова Г. А., Әхтәмова Г. Т. ғаилә архивынан.


©Яхина Л.Ф., Сагитов А., 2024

УДК 008; 793

***Сәғитова Гөлнәзирә,***
*Бөрйән районы Иҫке Собханғол урта*
*мәктәбенең 7-се класс уҡыусыһы.*
*ет.: **Сәғитова Р. Ғ.,** уҡытыусы,*
*Иҫке Собханғол ау.*

***Сагитова Гульназира,***
*ученица 7 кл. Старосубхангуловской СОШ,*
*рук.:* ***Сагитова Р.Г.****, учительница,*
*дер. Старосубхангулово.*

# «УРАЛ БАТЫР» ЭПОСЫНДА БАТЫР ОБРАЗЫ

# ОБРАЗ БАТЫРА В ЭПОСЕ «УРАЛ-БАТЫР»

**Аннотация.** В статье рассматривается образ батыра в башкирском народном эпосе «Урал-батыр». Выделяются такие характеристики героя как самоотверженность, преданность родной земле и людям, человеколюбие и честность. Указывается, что и сегодня есть воины-батыры, которые сохранили в себе эти характеристики и как эпические батыры охраняют родную землю от врагов.

**Ключевые слова:** эпос «Урал-батыр», батыр, герой, героический поступок, борьба со злом, утверждение добра и справедливости на земле, воин-батыр.

Минең тикшеренеү эшем “Урал батыр” эпосында һүрәтләнгән батырлыҡ, ҡыйыулыҡ сифаттарына арнала. Беҙҙең халҡыбыҙ тарихында героик шәхестәр, иле, ере өсөн йәнен биргән батырҙар бөгөн дә онотолмай. Батыр ир-егеттәр нисек шулай батыр, ҡыйыу, көслө рухлы булып тыуа һуң? Данлы “Урал батыр” эпосында ла тап шул батыр, ҡыйыу булған Урал ерҙе, йәшәйешете мәңгелек иткән. Үҙен яҡлаған батырҙар тураһында халыҡ ҡобайырҙар, йырҙар, әкиәттәр ижад иткән. Ә бына эпостағы Урал батыр халыҡ тормошонда ниндәй роль уйнауын асыҡлар өсөн, мин тикшеренеү эшен ошо темаға арнаным. Был тема бик кәрәкле һәм актуаль, тип һанайым.

М. Сәғитов яҙыуынса, “Урал батыр – эпостың баш ҡаһарманы. Урал – халыҡ күрергә теләгән идеал – батыр образы”. Ғалим Урал батыр образына, уның батырлығына туҡтала. “Урал батыр” эпосында батыр һәм халыҡ мөнәсәбәте – төп темаларҙың береһе.

Унда яҙылған батырлыҡ, ҡыйыулыҡ сифаттары, бер-береһенә ярҙамсыл булыу тәрбиәнән килә. Донъяла һәр кеше бәхетле йәшәргә тейеш! Уға ҡурҡыныс янай икән, илдең батыр улдары дошманды юҡ итергә тейеш.

“Урал батыр” эпосынан:
Мин күренмәҫ Үлемде
Юҡ итергә сыҡҡанмын;
Ҡан ҡойоусы батшанан,
Кеше ашар дейеүҙән
Бар кешене ҡотҡарыу,
Йәншишмәнән һыу алып,
Үлгәндәрҙе терелтеү
Өсөн тыуған батырмын!

Был юлдар халыҡты ҡайғыртҡан батырҙың һүҙҙәре. Илен, ерен һаҡлаусы булып һәр ваҡыт батыр улдар торған. Бөтә ир-егеттәр ҙә батыр булып тыумай һәм батыр булып дан алмай. Ә батыр ниндәй булырға тейеш?

Эпоста батыр образы, Урал батыр образы нисек бирелгән?

**Эпоста Урал батыр образы бирелеше**

Халыҡ илап торғанын
Күҙ алдында күргәндә,
Йәнде алыр яуыз үлем
Кешегә ҡулын һалғанда,
Ирмен тигән Ир-батыр
Шып-шым ҡарап торормо?
Яуыздарға юл ҡуйып,
Батыр ҡурҡып ҡалырмы?

Бушҡа ғына халыҡ « атанан күргән уҡ юнған, әсәнән күргән тун бескән», тип әйтмәгән. Ғаиләлә ир-егеттәр атайҙан үрнәк, өлгө алалар. Урал батыр ололар һүҙен, күңәшен һәр ваҡыт тыңлай. Уларҙың кәңәше буйынса батыр ике тапҡыр өйләнә һәм яңылышмай.

Халыҡ эсендә иң ҡарты
Былай тиеп әйткән, ти:
Батша ҡыҙын ал,егет,
Беҙгә ғүмер ит,егет!

Ҡарттарҙың кәңәше буйынса алған кәләштәре улдарын аталары кеүек батыр, ғәҙел, илһөйәр итеп тәрбиәләйҙәр, улар атайҙарының изге эшен дауам итәләр. «Сәләм тәндә - сәләмәт рух» , тип юҡҡа әйтмәйҙәр. Урал батыр физик яҡтан бик көслө, сыныҡҡан. Үҙ көсөнә ышана һәм бер нимәнән дә ҡурҡып тормай алға бара. Ул Ҡатил батшаның илен, Ҡәһҡәһәнең йылан батшалығын ҡыйрата, дейеүҙәр батшаһы Әзрәҡәне юҡ итә. Мәҫәлән, Ҡатилдың ярандары менән һуғышҡанда, уның ғәйрәтле батыр булыуы һүрәтләнә:

Ер һелкенгәйндәй булған
Аҡһаҡалдар, батша ла,
Олаҡтырған батыр ҙа
Он-талканға ҡалған, ти,
Күҙҙән ғәйеп булған,ти.

Эйе, Урал батыр халҡы тыуған иле өсөн йәшәй, һәр ваҡыт изге уйҙа.

“Урал батыр” эпосының мөһим законы – ул батырҙың халыҡ өсөн көрәше. Ил улы үҙ иле, ере өсөн йәнен-тәнен аямаҫҡа, уның бәхете өсөн яу сабырға тейеш. Ысын батырлыҡ – ул яуызлыҡҡа юл ҡуймауҙа, ти Мәрйәм Бураҡаева. Эпос беҙгә шуны аңлата, тип яҙа.

Бөгөн беҙҙе һаҡлап, яҡлап тороусы һалдаттар – улар батырҙар. Үҙҙәренең ғүмерҙәрен йәлләмәй, бер нәмәнән дә ҡурҡмайҙар. Тимәк, бөгөн дә батырҙар бик кәрәк. Һәм быны ошо яуаптар дөрөҫләй. Шулай итеп, “Урал батыр” эпосында төп герой Урал батырҙың гел ыңғай сифаттары асылды. Халҡына, кешелеккә йәшәү өсөн көрәшкән Урал батыр мәңге халыҡ хәтерендә ҡала. Былдай батырҙар халҡыбыҙ тарихында ла. Күп. Шуның өсөн беҙгә лә ошо еребеҙҙе, илебеҙҙе, телебеҙҙе һаҡлап йәшәргә кәрәк. Урал батыр беҙҙе бер ҡасан да ҡурҡып ҡалмай, ҡыйыу булырға өйрәтә.

© Сагитова Г., Сагитова Р.Г., 2024

УДК 008; 793

***Сәйетбаталов Зөфәр,***
*Иҫке Собханғол урта мәктәбенең*
*8-се класс укыусыһы*
*ет.:* ***Ишбулатова М.Ш.,***
*укытыусы,*
*Иҫке-Собханғол ау.*

***Саитбатталов Зуфар,***
*ученик 8 кл. Стуросубхангуловской СОШ.*
*рук.:* ***Ишбулатова М. Ш.,***
*учительница,*
*дер. Сатросубхангулово*

## ХАЛҠЫБЫҘ АҠЫЛЫ – “УРАЛ БАТЫР” ЭПОСЫНДА: ЭСӘР ҺЫУ – МӘҢГЕЛЕК ЙӘШӘҮ СИМВОЛЫ

## НАРОДНАЯ МУДРОСТЬ В ЭПОСЕ “УРАЛ-БАТЫР”: ПИТЬЕВАЯ ВОДА – СИМВОЛ ВЕЧНОСТИ

**Аннотация.** В статье раскрывается проблема сохранения окружающей среды, природы, питьевой воды в особенности, которая сегодня нуждается в пристальном внимании. По мнению автора все важные заповеди об охране природы – флоры и фауны давно и подробно сказано в древнем эпосе "Урал-батыр". Он призывает услышать заповеди Урал-батыра, жить в гармонии с природой, которую он создал. Иначе будущему поколению нечего будет оставить.

**Ключевые слова:** эпос «Урал-батыр», герой Урал, природа, экология, сохранение окружающей среды, преданность заповедям батыра.

**«Урал батыр»** эпосы – башҡорт халҡының бөйөк ҡомартҡыһы, ата-бабаларыбыҙ быуындан быуынға тапшырған бай хазина – ауыҙ-тел ижадының һоҡланғыс өлгөһө. Ул үҙенең боронғолоғо, күләме, йөкмәткеһе һәм әһәмиәте яғынан донъяла билдәле башҡа ошо жанр әҫәрҙәре менән бер кимәлдә тора. Эпоста халҡыбыҙ асылы, тарихы, мәҙәниәте, ғөрөф-ғәҙәттәре, йәшәү мәғәнәһе, изгелек һәм яуызлыҡ, яҡшы менән яман, тыуым, үлем һәм үлемһеҙлек кеүек мәңгелек төшөнсәләр үҙенсәлекле итеп сағылдырылған.

**Кеше һәм тәбиғәт бер бөтөн**

Кеше һәм тәбиғәт бер бөтөн булыуы хаҡында эпоста асыҡ күренә. Тәбиғәттә бөтә тереклектең берҙәм булыуын эпоста кешеләр менән хайуандар бер бөтөн булып йәшәү образы алып барыуы күрһәтә. Ауыр саҡта Урал кәңәш һорап, тәбиғәткә мөрәжәғәт итә. Бөтә йәнлектәр донъяһы кеше сифаттарын алған- һөйләшәләр, бәхәсләшәләр. Мәҫәлән: Урал батыр Аҡбуҙатты үҙ ҡулына эйәләткәнсе юлбарыҫҡа атланып йөрөй; шоңҡар менән арыҫлан һунар ваҡытында ярҙам итәләр; суртан балыҡ тотоп бирә; ҡара ҡарға, һайыҫҡан, аҡҡош, үгеҙ, йылан, Аҡбуҙат кеше тауышы менән һөйләшә .

Эпос ҡош-ҡорт, йәнлектәргә ҡарата шәфҡәтле булыу, уларҙы яҡлау, тәбиғәт байлыҡтарынан һаҡсыл файҙаланыу кәрәклегенә ишара яһай. Был – экологик белем һәм тәрбиә сараларының береһе ул. Тимәк, кеше- тәбиғәт балаһы, улар икеһе бер бөтөн тигән ҡараш тағы ла нығыраҡ нығынды күңелемдә.

**Һыуһыҙ тормош юҡ**

Тыуған ер,тыуған тупраҡ, тыуған ауыл, атай йорто – һәр кем өсөн изге төшөнсәләр. Кешеләге бөтөн изгелек тыуған ерҙән, атай йортонан, изге шишмәләрҙән башлана. Урал образы ошондай маҡсатҡа яуап биреүсе булараҡ ҡиммәтле. Донъя йәмен, донъя именлеген үҙ ғүмеренән дә артыҡ күргән батыр үҙенә тип йыйылған тере һыуҙың тамсыһын да йотмайынса тирә-йүнгә бөркә :

"Тау-урмандар йәшәрһен,
Мәңге үлмәҫ төҫ алһын,
Ҡошо маҡтап һайраһын,
Халҡы йырлап хуплаһын,
Ерҙән ҡасҡан дошмандар
Бары күреп һоҡланһын,
Ил һөйөргә ил булып,
Ер һөйөргә бағ булып,
Дошман күҙен ҡыҙҙырып,
Балҡып торор ер булһын!

Халҡын үлемһеҙ, ер-һыуын мәңге аҫыл итеп күрергә теләгән батыр халыҡ бәхете, ил ҡото, мәңге йәшәйеш өсөн йәнен фиҙа ҡыла. Был – унаң тыуған еренә һәм ғәзиз халҡына баһалап бөткөһөҙ изгелеге.

Тәбиғәттәге һыуҙың кеше өсөн кәрәкле, файҙалы булыуы, унһыҙ тормош юҡлығы ла әйтелә эпоста. Ләкин шул уҡ ваҡытта һыуҙың, әгәр дөрөҫ ҡулланмаһаң, бик күп бәлә килтереү мөмкинселеге күрһәтелә. Мәҫәлән, Шүлгән Самрау илен һыу менән баҫтырырға теләй:

Шүлгән таяҡ алғас та,
Һомайҙы ла көтмәйсә,
Айһылыуҙы күрмәйсә,

Самрауға әйтмәйсә,
Бер яҡ ҡырға сыҡҡанда,
Таяҡты бер һуҡҡанда,
Барыһын һыуҙан баҫтырған,
Һәләкәткә ҡалдырған.

Бөгөн эсәр һыуыбыҙҙың бысраныуы бар әҙәмде борсоуға һала. Ағиҙелдең ("аҡ "”Иҙел" – саф, таҙа һыулы Иҙел тигәнде аңлата) исеме генә ҡалып бара. Уға, завод-фабрикаларҙың бысраҡ һыуы ағыҙыла, тирә-яҡ ағыулана.

Урал батыр әйткән дейеүҙәр эйәләшкәнме уға?

Урал: Халҡым һеҙгә шуны әйтәм
Уландарым , һеҙгә әйтәм:
Уйым-уйым күлдәрҙең
Барында дейеү буласаҡ,
Уҫаллығын ҡыласаҡ,
Эсегеҙгә керәсәк,
Күлдең һыуын эсмәгеҙ
Хараплыҡҡа төшмәгеҙ,
Дейеүҙәргә буй биреп,
Ҡул ҡаушырып тормағыҙ!

Урал батыр бысраҡ- ағыулы һыуҙы эсмәҫкә, бәлә- ҡазанан йыраҡ булырға, йәғни кешелекте хәүеф- хәтерҙән ҡурсаларға саҡыра.

**Уралдың халкына васыяты**

Урал үҙенең улдарына, халҡына ла тәбиғәт матурлығын һаҡлауҙы васыят итеп әйтә. Шуға ла "кешеләр бик күбәйеп, торор ер, эсәр һыу етмәй башлағас", Урал батырҙың улдары Иҙел, Яйыҡ, Һаҡмар, Нөгөш ҡылыстары менән ерҙе уя сабып, шишмәләр сығарып, үҙҙәре шуның һыуы булып, йылға яһап ағып китәләр. Тимәк, Урал батырҙың улдары ла ер- һыу күрке, мәңге йәшәүе өсөн үҙ ғүмерҙәрен ҡорбан иткәндәр . Халыҡ йырында әйтелгәнсә, ир- егет үҙе өсөн тыуа, иле өсөн үлә . Был әйтем -мәкәл бөгөнгө көндә лә аһәңле яңғырай.

**Йомғаҡлау**

Иң бөйөк аҡыл халыҡта. Ә халҡыбыҙ аҡылы "Урал батыр" эпосында, Урал батыр васыятында әйтелгән.

"Күрҙегеҙ барын күҙ менән:
Һыу уртлаған ауыҙыма
Дейеүҙәр тулды яу менән.
Йөрәгемде телделәр.
Ҡулдан көстө алдылар.
Халҡым, һеҙгә шуны әйтәм,
Уландарым, һеҙгә әйтәм:
…………..….............. ...........
Күлдең һыуын эсмәгеҙ,
Хараплыҡҡа төшмәгеҙ...

Нимә ул уйым-уйым күл һыуы? Ни өсөн донъялағы иң батыр Урал күл һыуы эсеп харап була?

Уйым-уйым күл – ул төрлө мәғлүмәт сығанағы. Күлдәрҙәге дейеүҙәрҙең ҡоһоро батырҙың йәнен ҡыя. Асыҡ дошманды күреп-танып була. Ә бына эстән емерә торғанын – иң мәкерлеһен күреп булмай. Һомай аҡылы хаҡлы. Халыҡҡа һыу табам, тип уйлаһағыҙ, яңы юлдарын табығыҙ. Яуыҙлыҡҡа ҡаршы көрәшеп, үҙегеҙҙе бөтөрәһегеҙ, тигән фекер әйткәс, Уралдың уландары йылға яра башлай.

Тимәк, төрлө мәғлүмәттәргә мөкиббән китмәҫкә. Тәбиғәттән һәр беребеҙгә баш, аҡыл, зиһен бирелгән. Анализ эшләргә. Үҙ аҡылыбыҙҙы тоторға. Ә төп маҡсат – Уралыбыҙҙы һаҡларға. Һаҡлау юлдарын табырға. Беҙгә йыһан ярҙам итер. Эпоста шулай

бит: һәр саҡ Ҡояш ҡыҙы Һомай осоп килә. Бер-беребеҙҙе тикшереү төп маҡсаттан ситләштерә, албырғата, быуындағы көстө ала. Иң мәкерле дошман тотторған ҡорал ул - үҙ-ара низағлашыу. Дейеүле күл һыуы ул. Урал һынлы Уралды еңгән бит. Унаң васыятын тотайыҡ. Халҡыбыҙға ярҙам итеү өсөн, һәр беребеҙ йылға юлы асайыҡ. "Күлдең һыуын эсмәгеҙ, Эсеп әрәм булмағыҙ".

Ҡолаҡ икәү. Күҙ икәү. Тел берәү. Уйлап, сағыштырып, үҙ аҡылыбыҙ ҡаҙанында ҡайнатмайынса, хәл итмәйек, туғандар. Еребеҙ бай, әммә ни өсөн ул илебеҙ мәнфәғәтенә хеҙмәт итмәй? Ни өсөн ерҙәребеҙ ташландыҡ хәлдә тороп ҡала? Ни өсөн урмандар яна? Технологияның заман ҡаҙанышы ни өсөн тәбиғәтте һаҡлауға хеҙмәт итмәй? Ни өсөн халыҡ мәнфәғәте артҡы планда? Йылғалар ҡорой. Ә бит Уралдың көньяғын юҡҡа сығарыу тотош Ер шары йәшәйешенә афәт килтерәсәк.

Киләһе заманда йәшәйәсәк балаларыбыҙ өсөн һыу алтындан ҡиммәт буласаҡ. Урал батырҙың батыр уландары бит халыҡҡа ярҙам итеү өсөн йылға яра башлай. Барлыҡ кешелек донъяһын йәшәтеү уларҙың маҡсаты. Ә беҙҙең ҡайһы берҙәре беҙ ни эшләй? Шүлгән яғына ыҡлайбыҙмы? Ғәзиз балаларыбыҙҙы эсәр һыуһыҙ ҡалдырабыҙ бит. Океан, диңгеҙ һыуы эсәр һыу түгел. Төньяҡ боҙло океан боҙҙарын иретеп файҙаланыу мөмкин түгел.

**Әҙәбиәт**


1. “Урал батыр” эпосы
2. Интернет селтәре материалдары
3. Ғәлләмов С. “Урал батыр” //Шоңҡар. №6. 1995.


© Саитбаталов З., Ишбулатова М. Ш., 2024

УДК 008; 793


***Солтанова Зарина,***
*Иҫке Собханғол урта мәктәбенең 5 “в” класы уҡыусыһы.*
*ет.:* ***Кинйәбулатова Ф. Ф.,***
*уҡытыусы,*
*Иҫке Собханғол ау.*

***Султанова Зарина,***
*ученица 5 кл. Старосубхангуловской СОШ,*
*рук.:* ***Кинзябулатова Ф.Ф.,***
*учительница,*
*дер. Старосубхангулово*


## “УРАЛ БАТЫР” ЭПОСЫНДА ҒАИЛӘ ПРОБЛЕМАҺЫ

## ПРОБЛЕМА СЕМЬИ В ЭПОСЕ “УРАЛ-БАТЫР”


**Аннотация.** Статья посвящена проблеме единства семьи, ее нерушимости перед сложными ситуациями, которая впервые была затронута в древнем эпосе “Урал-батыр”. Авто утверждает идею о том, что современные дети являются наследниками Урал-батыра, продолжателями его священного дела и поэтому всем необходимо хорошо знать этот эпос, быть преданным высказаной в нем идеологии человеколюбия.



**Ключевые слова:** эпос «Урал-батыр», герой Урал, семья, брак, родители, ценности, сохранение, воспитание, единение.


**Ғаилә** – аныҡ ойошҡанлыҡҡа эйә булған, никах йәки туғанлыҡ мөнәсәбәте менән бәйле, уртаҡ көндәлек тормош, үҙ-ара яуаплылыҡ менән йәшәгән социаль төркөм. Ғаилә – ул беҙҙең өй, атай-әсәй, олатай-өләсәйҙәребеҙ. Атай-әсәй – ғаиләнең тотҡаһы, ә балалар –

көҙгөһө. Тотҡа ҡупмаһын, көҙгө ватылмаһын өсөн, бер-беребеҙҙе һаҡлап, яҡлап, хөрмәт итеп йәшәргә тейешбеҙ. Ғаилә темаһы башҡорт халыҡ ижадында ҙур урын алған. Әкиәт, йыр, мәҡәл һәм башҡа жанр төрҙәрендә лә был темаға, тәрбиә мәсьәләһенә ҙур урын бирелә.

“Урал батыр” эпосын ҡыҙыҡһынып өйрәнәм, төрлө темаларҙың бирелешен асыҡларға тырышам. Был теманы быйылғы йылға бәйләп тикшерҙек.

Тәрбиә – һәр ғаиләлә баланы тормошҡа әҙерләүсе сара булып тора. Электән ата-бабалар, хатта ғалимдар ҙа тәрбиәгә, ғаилә төшөнсәһенә ҙур әһәмиәт биргән. Мин дә ошо тема менән ҡыҙыҡһынып, “Урл батыр” эпосын уҡып сыҡтым һәм асыштарымды эҙләнеү эшендә сағылдырҙым. Тәрбиәнең, ғаилә берҙәмлегенең кешелек өсөн ҙур әһәмиәткә эйә булғанлығын һәм атай-әсәйгә, туғандарыма иғтибарым, хөрмәтем арта барыуын асыҡланым. Ғаилә тураһында фекеремде эпосҡа бәйле киңәйтеү, үҙ-ара мөнәсәбәттәргә, тәрбиәгә иғтибарҙы арттырыу, ошо темаға бәйле файҙалы эштәр башҡарыу, төп маҡсат булһа, ғаилә эсендәге кешеләр бәйләнешен, ғаиләлә тәртип һәм тәрбиә биреүҙе асыҡлауҙы бурыс итеп ҡуйҙым.

Тикшеренеү, өйрәнеү барышында, “Урал батыр” эпосын ентекләп уҡып сыҡтыҡ, атай-әсәйем, уҡытыусым менән һөйләшеп, мәғлүмәттәр тупланыҡ, эпос тураһындағы гәзит-журнал материалдары, китаптар менән таныштыҡ, иптәштәремдең дә тәрбиә мәсьәләһенә фекерҙәре менән бүлештем.

Өйрәнелгән эшем мәктәптә үткәрелгән тәрбиәүи сараларҙа файҙаланыла һәм төрлө тикшеренеү эштәрен төҙөүҙә ҡулланыла ала. Үҫеп килеүсе йәш быуын – иптәштәрем менән аралашҡанда ла уларға үҙем туплаған, өйрәнгән фекерҙәрем менән уртаҡлашырмын. Артабан үҙемдең дә эшмәкәрлегемдә файҙаланырмын.

Тикшеренеү эше инеш, төп өлөш, йомғаҡлау, Әҙәбиәт исемлегенән һәм ҡушымтанан тора.

Төп өлөштә эпоста бирелгән ғаиләләр, уларҙа тәртип һәм тәрбиә мәсьәләһе ҡуйылышын өйрәндем. “Урал батыр” эпосында бер нисә ғаилә бар. Эпоста был ғаиләләр төрлө яҡтан асыла. Ғаилә баланы тәртип, тәрбиәгә өйрәтә. Ата-әсәнең баланы яратыуы, шуның өсөн уларҙың теләгән үтәргә әҙер булыуын да аңланым. Атаһы һәм әсәһе яҡшы булһа, балалары ла яҡшы була тигәндәр. Улар балаларының бәхетле, яҡшы ғаилә ҡороуҙарын теләйҙәр, һәйбәт кәләш, кейәү эҙләгәндәр.

“Урал батыр” эпосында беҙҙе ғаиләне һаҡларға, яратырға, тәртип һәм тәрбиә юлында булырға өйрәтәләр. Берҙәм ғаилә булып, Урал үҙенең 4 батыр улы менән яманлыҡты еңеләр. Шүлгән менән Айһылыуҙың улы Һаҡмар, Уралға эйәреп, яҡшылыҡ юлына бара. “Берҙәмлектә, татыулыҡта – көс”, – тип юҡҡа әйтмәйҙәр.

Тикшеренеү барышында мин иптәштәремдән атай-әсәй һүҙен тотоу-тотмау тураһында фекерҙәрен һораным. Күбеһе атай-әсәйҙе беҙҙе тик яҡшыға өйрәтеүҙәре тураһында әйткәс, мин дә үҙемдең тура юлда булыуымды аңланым. Тимәк, ғаилә һәр беребеҙ өсөн яҡын, ҡәҙерле. Ә тәрбиәгә килгәндә, әлбиттә, атай-әсәй беҙҙе һәр саҡ яҡшылыҡҡа өйрәтә. “Урал батыр” эпосында ла яҡшылыҡтың мәңгелек булыуы тураһында һүҙ бара. Тәрбиәүи яҡтан ҙур әһәмиәткә эйә булған эпосты белеү – беҙҙең бурыс.

© Солтанова З.С., Кинйәбулатова Ф. Ф., 2024

УДК 008; 793

***Усманова Әминә,***
*Әбделмәмбәт дөйөм белем биреү урта мәктәбенең*
*7- се кл. уҡыусыһы*
*ет.:* ***Үтәбаева А.Р.,***
*уҡытыусы,*
*Әбделмәмбәт ау.*

*Усманова Амина,*
*ученица 7 кл. Абдельмамбетовской СОШ.*
*рук.: Утябаева А.Р.,*
*учительница,*
*дер.Абдельмамбетово*

## СӨЛӘЙМӘНОВТАР ҒАИЛӘҺЕ ҠУЛЛАНҒАН КӨНКҮРЕШ ӘЙБЕРҘӘР ҺӘМ МОНАЯТТАР

## ПРЕДМЕТЫ БЫТА И УТВАРЬ СЕМЬИ СУЛЕЙМАНОВЫХ

**Аннотация.** Статья посвящена изучению предметов быта и обихода семьи Сулеймановых, в которой родился будущий ученый Ахмет Сулейманов. Колыбель – сэнгэлдэк, палас, лавка – урындык, медный самовар, печь и другие предметы сегодня хранятся в музее А.Сулейманова в с. Старосубхангулово. По мнению автора, эти предметы, которые когда-то были обстановкой в семье Сулеймановых, хранят в себе память о видном ученом и его семье.

**Ключевые слова:** семья Сулеймановых, Ахмет Сулейманов, бишмет, палас, самовар, сэнгэлдэк, урындык, печь, сурук, музей, экспонаты, предметы обихода.

Минең был эҙләнеү эшем класыбыҙ менән “Әхмәт Сөләймәновтың музейы”на барғандан һуң башланды. Был музейҙа Сөләймәновтар ғаиләһенең йәшәйешен, боронғо тормошон сағылдырған бик күп әйберҙәр бар. Мине иң ғәжәпләндергәне еҙ самауыр, сөрөк, балаҫ, бишмәт, мейес, ашҡабаҡ булды. Улар ниндәй үҙенсәлектәргә эйә? Ни өсөн боронғо кешеләр еҙ самауыр, сөрөк, ашҡабаҡ ҡулланған, хәҙерге көндә ошо әйберҙәр тормошта ҡулланыламы тигән һорауҙар тыуҙы, һәм мин уны тикшереп ҡарарға булдым. Хәҙерге осорҙа боронғо халыҡ кәсептәрен тергеҙеүгә, ҡулланылған әйберҙәрҙең, ашаған ризыҡтарҙың экологик яҡтан таҙа булыуына, сәләмәт йәшәү рәүешенә ҙур иғтибар бирелә. Ә еҙ әйберҙәр эшләү – боронғо халыҡ кәсептәренең береһе, еҙҙән эшләнгән һауыт-һабала ризыҡ үҙенең сифатын юғалтмай оҙаҡ һаҡлана, унан эшләнгән әйберҙәр дауалау сифатына эйә. Шуға күрә уны өйрәнеү бөгөн дә бик **актуаль тема**, тип уйлайым.

### Әхмәт Сөләймәнов музейында ҡунаҡта

Әхмәт Сөләймәнов ниндәй мөхиттә йәшәгәнен өйрәнеү өсөн мин музейға килдем. Музейҙың төп яғына үтеү менән минең ихтибарҙы сәңгелдәк йәлеп итте. Был Әхмәт Сөләймәнов үҙе яткан сәңгелдәк. Әлбиттә, ул тыуған мәлендә был сәңгелдәк булмаған. Уны Янһары ауылы оҫтаһы Йомағолов Ишембай Кинйәбай эшләгән. Ул 1898 йылғы, 1959 йылда вафат булып ҡала. Унының ағастан эшләнгән станогы булған һәм шуның ярҙамында төрлө әйберҙәр эшләгән һәм уларҙы һатып көн иткән. Ауылдар буйлап һатыу иткәндә ошо сәңгелдәкте Сөләймәновтар ғаиләһе һатып ала. Әхмәт Сөләймәнов унда аҙ ята, сөнки атлап йөрөгән була. Сәңгелдәк йәшел төҫтә була, ул мәлдә буяҙы ҡайҙан тапҡандар икәне билдәле түгел. Ул сәңгелдәктә Әхмәт Сөләмәймәновтан һуң 21-22 бала ятҡан. Был сәңгелдәктең эсендә киндер тушәк ята. Минең ихтибарымды уҙенә унын төбөндә ятҡан сөрөге тартты.

### Сөрөк

Ә нимә була икән сөрөк? Уны ни өсөн ҡулланғандар?

Сөрөк ул ағастың сереп-сороп, ҡул менән ыуғанда йәки төйгөс менән төйгәндә онталырлыҡ – ваҡланырлыҡ хәлгә килеүе. Элек баланың тәне сейләнмәһен тип сәңгелдәк эсенә сөрөк онтағы һалғандар. Еүешләнһә йәки бысранһа, алыштырып, киптереп торғандар. Сей яраға сөрөк, йәғни серегән ағас онон һибә торғайнылар. Хәҙерге профессиональ медицина күҙлегенән ҡарағанда, сөрөк, бәлки, сәйерерәк тә, ҡырағайыраҡ та булып күренәлер, әммә беҙҙең ауылда, мәҫәлән, бер малайҙың да яраһы боҙолоп, ауырып йөрөгәне булманы (Әмир Ғүмәров "Киске Өфө" газетаһы).

### Еҙ самауыр

Артабан минең ихтибарҙы йәлеп итте улар ҡулланған еҙ самауыр. Еҙ самауыр- һыу ҡайнатыу һәм сәй әҙерләү өсөн ҡорамал. Әхмәт Сөләймәнов һөйләүе буйынса : “Иң элек әсәйемдең ике биҙрә һыу һыймалы самауыры иҫкә төшә. Ике ағайым ике яҡ ҡолағынан тотоп саҡ күтәреп индерә торғайны. Еңгәйҙәр, инәйҙәр уны тиҙ генә бушата. Ауылда шулай бит инде: сәй эсеү көнө буйына бара. Сөнки һөйләшеп ултырырға ул – үҙе бер стимул. Әбейҙәр, еңгәйҙәр тәһәрәт яңырта-яңырта һемерә генә сәйҙе. Бер генә сынаяҡ эстениһәләр тыйып алып булмай. Ысынлап та, самауыр артында бөтәһенең дә теле сиселә. Самауырҙың гәпләштереү генә түгел, берләштереү, кешене уртаҡ фекергә килтереү ҡеүәһе лә бар.Самауырҙарыбыҙҙы ауылдан алып килдек. Бәләкәйен улым үҙенә алды, ҙуры миндә ҡалды. Бәләкәйе Совет осороноҡо, ҙуры Николай заманынан. Самауырҙың хикмәтле яғы бар бит: унда һыу иҫкермәй. Сөнки эсе көмөш. Шуға күрә таможнянан үткәрмәйҙәр икән уны. Һирәк осрай торған ҡомартҡы тип һынала”.

**Кейеҙ**

Урындык өҫтөндә ятҡан серге тышлы кейеҙгә лә иғтибар итмәй ҡалманым. Элек – электән кейеҙҙе һыуыҡтан һаҡланыр өсөн ҡулланғандар. Әхмәт Сөләймәновтың әсәһе Нурикамал Сөләймәнова баҫҡан кейеҙҙе улар балаларҙың аҫтына түшәр өсөн ҡулланғандар, сөнки кейеҙ еүеш булһа ла һыуланып ятмаған йәғни бала ҡоро ятҡан, еҫ сығармаған. Шул ваҡытта кейеҙең ниндәй ҙур роль уйнағанын белеп була.

**Балаҫ**

Аҫалы балаҫ инде һуғыш ваҡытында үгеҙҙең ярмаһына ҡуйылып иләнгән йөндән һуғылған. Үгеҙ бик яй хайуан. Унын менән элек ер һөргән мәлдә, үгеҙ бик яй барғанлыҡтан, Әхмәт Сөләймәновтың Бибикамал исемле апайы орсоҡ менән йөн иләп барған, ә иләнгән йөндән әсәһе буяп төндәрен балаҫ һуҡҡан.Үҙенең эсенә күпме тарих һыйҙырған был балаҫ.

**Мейес**

Символик рәүештә ашҡабаҡ ултыртылған, сөнки Әхмәт Сөләймәновтың әсәһе бик тыҡшыр кеше булған. Төшкө ашҡа ашҡабаҡ эсенә ярма һалып аш бешерелгән.Өҫтөн ҡырҡып ҡапҡас рәүешенә килтергәндәр һәм урыҫтарҙан күреп ухват менән мейес эсенә ҡуйып бешереп алғандар. Бынан сығып беҙ Сөләймәновтар ғаиләһенең йәшелсә үҫтерергә әүҙем булыуын да күрә алабыҙ, икенсенән аш бик файҙалы ла. Тимәк, халыҡ медицинаһында бик яҡшы белгәндәр, тип әйтергә була. Ашҡабаҡ Мөхәммәт пәйғәмбәрҙең дә ятҡан ризығы була. Сөнки ашҡабаҡ күп витаминдарға бай ризыҡ.

**Бишмәт**

Ул әсәһенең ҡулы менән эшләнгән бишмәте. Сәхнә кейеме түгел, ә көндәлек тормошта кейеп йөрөр өсөн тегелгән, сөнки ул диндар кеше булған. Иғтибарҙы йәлеп иткәне уның тәңкәләре.Уның һәр береһе үҙе айырым тарих, айырым эҙләнеү эше.

Шулай итеп, Әхмәт Сөләймәнов тәрбиәләнгән ғаилә көн-күрешендә тотолған, файҙаланылған әйберҙәр ғалимдың баласаҡ тормошо хаҡында хәтер булып тора. Кейемдәр, балаҫ, урындыҡ, сәңгелдәк һәм башҡаһы ҡасандыр ғалимдың атаһы, әсәһе ҡулдары эшләп башҡарған, шуларға Әхмәт Сөләймәнов ҡағылған, файҙалланған. Быларҙың барыһы ла күренекле ғалим һәм уның ғаиләһе хаҡында ҡыҙыҡлы тормошсан мәғлүмәт булып тора. Музейҙа күргән һәм өйрәнгән монаяттар шуны раҫлай.

**Ҡулланылған сығанаҡтар**


1. Сөләймәнов Әхмәт. Бала сағым .
2. Сөләймәнов Мөхәмәткилде. Походтар һәм маршруттар. Альбом.


©Үтәбаева А.Р., Усманова А., 2024

УДК 008; 793

***Үтәбаева Ләйлә,***
*Я.Хаммат ис. Башҡорт гимназияһы,*
*10-сы класс уҡыусыһы.*
*ет.; **Ҡаһарманова С.М.,***
*филол. ф. к., башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы,*
*Белорет ҡ.*

***Утябаева Ляйля,***
*ученик 10 кл. Башкирской*
*гимназ им. Я. Хамматова,*
*рук.: **Кагарманова С.М.,***
*к. филол. н., учитель*
*башкирского языка и литературы,*
*г. Белорецк*

# ТЕМА ОХРАНЫ ПРИРОДЫ В ЭПОСЕ «УРАЛ-БАТЫР»

# УРАЛ-БАТЫР” ЭПОСЫНДА ТӘБИҒӘТТЕ ҺАҠЛАУ ТЕМАҺЫ

**Аннотация.** Статья посвящена изучению проблемы охраны природы, любви к окружающему миру, отраженных в башкирском народном эпосе «Урал-батыр». В эпосе в поэтических красках ярко изображается жизнь первых людей, эпического героя на лоне природы, их охранительное отношение к окружающей среде, потому что герои брали от природы только самое нужное количество, а главный герой Урал-батыр возрождает ее, окропив Живой водой.

**Ключевые слова:** живая природа, башкиры, традиции, чистота, бережливое отношение, эпос, Урал-батыр, Живая вода, флора и фауна.

Башҡортттар элек-электән үҙен тәбиғәт балаһы тип иҫәплəгән. Был уның ярым күсмә тормош менән йәшәүенә бәйле аңлатыла торғандыр. Ҡайҙа ғына йәшәһә лә, бер урындан икенсе урынға күсенгәнендә, торлаҡ урынын тәртипкә килтергән. Сөнки белгән: ул булмаһа, башҡалар бында килеп йә йәйләр, йә ҡышлар, ә йәшәр ерең һәр саҡ таҙа, бөхтә булырға тейеш.

Тәбиғәт ҡанундарына таянып йәшәү, уға хилафлыҡ ҡылмау проблемаһы башҡорт халҡының бөйөк эпосы “Урал батыр”ҙа ла сағылыш тапҡан. Тикшеренеү эше темаһының **актуаллеге** ошоноң менән билдәләнә.

“Урал батыр” эпосының төп темаһы үлем һәм үлемһеҙлек булһа ла, эҫәрҙең башынан алып аҙағынаса кеше һәм уның тәбиғәткә мөнәсәбәтенә лә мөһим урын бирелгән. Әҫәр ике йән эйәһенең: Йәнбирҙе менән Йәнбикәнең кеше аяҡ баҫмаған ергә килеп, донъя көтөүен һүрәтләүҙән башланып китә. Тәүге юлдарҙа уҡ беҙ улар йәшәргә төйәк иткән урындың тәбиғәтен күҙ алдына баҫтырабыҙ: был – диңгеҙ буйы. Эпоста яҙылыуынса, “дүрт яғын диңгеҙ ураҡкан, булған, ти, бер урын”. Икенсе төрлө әйткәндә, эпос йөкмәткеһе беҙҙе тәбиғәт күренештәре, ул тирәлә йәшәгән йәнлек, ҡош-ҡорт менән таныштыра. Эпоста ваҡиғалар үҫешкән һайын, тәбиғәт менән бәйләнеш арта, ул конкретыраҡ төҫ ала бара.

Әҫәрҙә һүрәтләнгән ваҡиғалар Урал тауы, Ағиҙел, Нөгөш, Яйыҡ, Һаҡмар йылғалары буйында, Шүлгән күле тирәһендә бара. Хәҙерге Белорет районы төбәгендәге Ямантауҙың барлыҡҡа килеү версияһы ла ҡыҙыҡлы: ул Әзрәҡәнең кәүҙәһенән бар булған.

Эпоста һүрәтләнгән Шүлгән мәмерйәһе тураһында рус ғалимы В.И. Даль килтергән фекер ҙә иғтибарға лайыҡ. Ул “башҡорттар араһында Ағиҙелдең үрендәрәк, Шүлгән тигән бер урынды дейеү пәрейҙәренең еңелгән (таш булып ҡатҡан) урыны” тип һөйләгәндәрен телгә ала [2, 96]. Халыҡ ижадындағы атамалар ысынбарлыҡ тормошта топонимик атамаға

әйләнеп, әле лә һаҡланып килә. Бөрйән районында урынлашҡан данлыҡлы Шүлгәнташ мәмерйәһе быны асыҡ миҫалы.

Боронғо дәүерҙә кеше тәбиғәтте тере йән итеп күргән. Шуға ла йәнле һәм йәнһеҙ тәбиғәт уларҙың табыныу объектына әйләнә. Улар, мәҫәлән, елдәрҙең, һыуҙың сихри көсөнә ышанғандар. Ошондай тәбиғәт – кеше бәйләнеше "Урал батыр" эпосында башланғыс ала кеүек. Йәнбирҙе менән Йәнбикә тәбиғәт килтергән ҡазаға – һыу баҫыуға ҡаршы көрәшеп тормайҙар, ә бары тик йәшәү урынын алыштыралар. Йәғни тәбиғәт шарттарына яраҡлашып йәшәүҙәрен дауам итеп алып китәләр. Улар һунарсылыҡ менән көн күрәләр. Хатта Уралдың үлгәндән һуң тауға әйләнеүе лә символик мәғәнәгә эйә: тимәк, кеше – тәбиғәт менән гармонияһы дауам итә.

Эпоста бөтә ерҙе уратып алған диңгеҙ һыуы эсергә яраҡһыҙ. Шуға ла Уралдың улдары, тау-таш ярып, халыҡҡа эсер һыуҙар – йылғалар булдыра. Тәбиғәттә тоҙло һыу менән бер рәттән, сөсө һыуҙар ҙа булырға тейеш.

Алда әйтеп үтелеүенсә, башҡорттарҙа нимәгә лә булһа табыныу күренештәре булған. Һәр ырыуҙың үҙенең ҡошо булыуы ошо хаҡта һөйләй. Бер ырыу торнаны үҙ итһә, икенселәре йә бөркөттө, йә ҡарсығаны һайлаған. Шулай уҡ ырыу ҡошо аҡҡош булғандары ла бар. Ҡайһы бер ғалимдарҙың раҫлауынса, был мәжүсилек заманына ҡайтып ҡала һәм был ҡоштар кешеләргә ҡот, бәрәкәт килтерә, тип иҫәпләнгән. Шул уҡ ваҡытта, барлыҡ төрки халыҡтарында тип әйтерлек, аҡҡош изге ҡош һанала, уны атыу, итен ашау ҡәтғи тыйыла һәм гонаһ иҫәпләнә.

Аҡҡош образы "Урал батыр" эпосында ҙур урын алып тора. Ул Йәнбирҙе ҡарттың тотоп алып ҡайтҡан ҡоштары араһында булып сыға. Ағалы-ҡустылы ошо аҡҡош арҡаһында һүҙгә килә: Шүлгән был ҡошто ашау яғында булһа, Урал уны ҡотҡарырға теләй. Башҡа ҡоштарҙан айырмалы, аҡҡош һөйләшә белә һәм ул үҙенең Ҡояш менән Самрауҙың Һомай исемле ҡыҙы икәнлеген асып бирә. Ошоноң менән үк уның затлы нәҫелдән икәнлеге аңғартыла.

Аҡҡош-Һомай кешеләрҙән имен ҡалыу сараһы итеп, үҙенең Йәншишмә юлын белеүен әйтеүҙе кәрәк һанай.

Эпостың башынан аҙағына тиклем, тәбиғәттең бөйөк көсө, уға ҡаршы тороу – йәшәйеш ҡанундарына ҡаршы сығыуға тиң, тигән тәғлимәт ята. Быны Уралдың үлемгә ҡаршы көрәшеү буйынса кәңәш итеү өсөн, урмандағы барлыҡ йәнлек-ҡоштарҙы йыйғанында уҡ күрә алабыҙ.

Эпоста тәбиғәттә үҙен һаҡлап алып ҡалырға теләгәндәргә һәр төрлө мөмкинлектәр бирелгәнлеге атала. Мәҫәлән, ҡоштарҙың күбеһе бала сығарыу өсөн шыр ҡара урмандарҙы һайлай, ә ҡоралай, болан, ҡуян ише кейектәргә шәп сабырҙай көслө аяҡ бирелгән, улар үҙҙәрен аулаусы йыртҡыстарҙан ҡасып ҡотола алалар.

"Урал батыр" эпосында, йәшәү-үлем темаһы күтәрелеп, ул кешенең тирә-яғына, бер-береһенә, тәбиғәткә булған мөнәсәбәте аша асып бирелә. Сөнки кешенең тормошо тәбиғәт менән тығыҙ бәйле. Тәбиғәт кеше өсөн аҙыҡ та, кейем дә, көнкүрешенең нигеҙе лә. Тәбиғәткә зыян килә икән, тимәк, кешелектең киләсәгенә лә ҡурҡыныс янай. Эпоста күтәрелгән мәсьәләләр бөгөн дә актуаль булып яңғырай. Шуға күрә лә эпосты белеү, уның әһәмиәтен аңлатыу эштәрен пропагандалауҙы маҡсат итеп ҡуйыр кәрәк бөгөнгө башҡорттарға.

©Кагарманова С.М., Утябаева Л., 2024

УДК 008; 793

***Утәбаева Наҙгөл,***
*Әбделмәмбәт мәктәбенең*
*4-се класс уҡыусыһы.*
*Ет.:* ***Сәйфитдинова Л. Ғ.,***
*уҡытыусы,*
*Әбделмәмбәт ау.*

***Утябаева Назгуль,***
*ученица 4 кл.*
*Абдельмамбетовской школы.*
*рук.:* ***Сайфитдинова Л.Г.****,*
*учительница,*
*дер. Абдельмамбетово*

## «УЙЫН ҒЫНА ТҮГЕЛ БИТ УЛ...»

## «ЭТО ВЕДЬ НЕ ТОЛЬКО ИГРА…»

**Аннотация.** В статье раскрывается проблема места детских игр в жизни и научной деятельности известного ученого-фольклриста ахмета Сулейманова. Автор приводит игры и развлечения детей и раскрывает их роль в деле воспитания подрастающего поколения, значимости в их жизни. Практической стороной сообщения являются приведенные образцы детских игр.

**Ключевые слова:** бабушка, Бибикамал, Ахмет Сулейманов, детские игры, воспитание, познание мира, детство.

Минең ҡарт өләсәйем – Бибикамал өләсәйҙең бер туған ҡустыһын, Әхмәт олатай Сөләймәновты, бөтәһе лә бик яҡшы беләләр. Беҙ ҙә уны яҡшы беләбеҙ. Мин уны үҙем күреп белмәһәм дә атайҙарҙың, әсәйҙәрҙең һәм туғандарҙың һөйләүенән күҙ алдынана килтерәм. Уны фотоларҙан, телевидениелағы фильмдарҙан ҡарап, кем икәнен белдем.

**Шуҡ, шаян, йор һүҙле Әхмәт олатай**

Әхмәт олатай яҙҙың иң матур мәле – тәүге гөрләүектәрҙең шаулап аҡкан сағында, Бөрйән районы Нәби ауылында доньяға килгән.




Әхмәт олатай ҡул араһына иртә ингән. Үҙаллы булып үҫкән. Ҡышын урмандан йүкә килтереп, айырып, арҡан-дилбегә ишеп һатҡан. Йәшелсә, картуфты, биҙрәләп, хатта кукуруз, боросто Байназарға алып барып стаканлап һатып, кейем-һалым, уҡыу кәрәк-яраҡтары алған.

Ни тотһа, шул ҡулынан килгән. Коньки, саңғыны эшләп алған. Бәләкәйҙән зирәк, телдәр булған. Әле теле асылып килгәндә, әсәһе Әхмәткә:

– Улым, мин ҡартайғас, көтәңме? –ттип һорау биргән.

– Көтәм.

– Ҡайһылайтып?

– Сыбыртҡы ишеп алам да, ана-а-ауындағы йәшел сиҙәмгә сығарып көтәм, – тигән.

Бәләкәй саҡтан бик шуҡ булған өсөн уҡытыусыһы мөйөшкә баҫтырып ҡуйыр булған. Хатта «күсермәйем», тигән ваҡыттары ла булған уҡытыусының.

Улар ғаиләләре, заттары менән сәсән булғандар.Ҡайҙа нимә күрһәләр ҙә, торған ерҙәренән таҡмаҡтар сығарып, шиғыр сығарып йөрөр булғандар.

Ниндәй уйындарҙы уйнаһалар ҙа, уйындарҙы ябай ғына итеп түгел, ә һамаҡлап уйнар булғандар. Йор һүҙле булған. Бала саҡта тиҫтерҙәренән шуҡлығы менән айырылып торған Әхмәт олатай. Һәр саҡ мәрәкәләп һөйләшкән.

## ПРАКТИК ӨЛӨШ

**Әхмәт олатай уйындары**

Әхмәт олатай Сөләймәнов беҙҙең ауылда ла булған. Сабирйән сәсән Мөхәмәтҡоловтың әсәһе –Зәкиә инәйҙән бик күп фольклор материалдар яҙып алған. Әммә уға бик күп эштәрҙе атайымдың өләсәһе – Бибикамал өләсәй биргәндер тип уйлайым.Сөнки ул тик беҙҙең яҡта ғына уйналған уйындарҙы өйрәткән булған.

Йәйге каникул ваҡытында Фәүриә өләсәйем беҙҙең яҡта электән уйналған “Ҡыҙыл байраҡ”, “12 таяҡ”, “Бура һуғыу” тигән уйындарҙы өйрәткәйне инде. Уларҙы беҙ саҡ ҡына буш ваҡыт булһа, ҡунаҡҡа килгән туғандар менән уйнарға яратабыҙ. Беҙгә был уйындарҙы уйнау бик оҡшаны! Шуға күрә Миңнур инәйҙән, өләсәйемдән һорашып, Әхмәт олатайҙың китаптарынан, фәҡәт беҙҙең яҡта ғына уйналған уйындарҙы яҙып алдым. Уларҙы дуҫтарыма, класташтарыма ла өйрәттем.

**«Ҡыҙыл байраҡ»**

Балалар ике төркөмгә бүленәләр. Ике яҡта ла «Ҡыҙыл байраҡ». Ул таяҡ башына берәй сепрәк ҡуйып эшләнелә йәки таяҡ ҡына ҡуйыла. Балаларға үҙеңдекен һаҡларға, ә күршенең байрағын ҡулға төшөрөргә кәрәк. Йүгереп китеп барғанда, ҡаршы яҡтыҡылар эләктерһә, уны «ҡатыра». Иптәше килеп етә алһа, ҡотҡара ла бергәләп китәләр. «Ҡыҙыл байраҡ»ты ала алһаң, «дошман» араһынан кире ҡайтып етергә кәрәк. Әгәр «дошман»дың байрағы ҡулға төшһә, урынды алмашалар ҙа тағы ла уйнай башлайҙар [Башҡорт халыҡ йола уйындары, 1997].

**«12 таяҡ» уйыны**

Ергә ҙур ғына таш йә түмәр һалына, унының өҫтөнә таҡта. Таҡтаның бер яҡ башы ергә терәлә, шунда 12 таяҡ йыйып өйөлә. Һанашмаҡ ярҙамында көтөүсе билдәләнә. Уйын бер ҡатнашыусының таҡтаның икенсе яҡ осона килтереп баҫыуынан башлана. Көтөүсе осоп киткән таяҡтарҙы йыйып, таҡтаны рәтләп, барыһын да кире урынына урынлаштырғансы, ҡалған ҡатнашыусылар тирә-яҡҡа ҡасып, йәшенеп бөтәләр. Көтөүсенең маҡсаты – йәшенгәндәрҙе эҙләп табыу. Берәйһен тапҡас та йүгереп килеп таҡтаның осона ҡулы менән тейһә генә йәшенеүсе тотола. Әгәр ҙә инде йәшенгән кеше отҡорораҡ булып, алдараҡ килеп, таҡтаның осона ҡабаттан баҫһа, таяҡтар яңынан туҙа, көтөүсе яңынан йыя, ә шул арала тотолған ҡатнашыусылар ҡабаттан йәшенәләр. Әммә, көтөүсе таяҡтарҙың берәүһен булһа ла осоп барышлай ҡулына тотоп өлгөрһә, баҫыусы үҙе көтөүсегә әйләнә һәм хәҙер ул таҡтаны ҡороп балаларҙы эҙләй башлай. Тәүге көтөүсе бөтәһен дә теүәл генә тотоп сыҡһа, беренсе табылған бала көтөүсе була.

«**Аҡ тирәк-күк тирәк**»

Балалар ике төркөмгә бүленәләр.Улар Бер-береһенән 20-30 метр йыраҡлыҡта теҙелеп баҫалар ҙа бер-береһе менән ҡулға-ҡул тотоношалар.



Беренсе төркөм:
Аҡ тирәк, күк тирәк,
Беҙҙән һеҙгә кем кәрәк?
Аҡ тирәк, күк тирәк,
Беҙҙән һеҙгә кем кәрәк?

Икенсе төркөм:
Аҡ тирәк, күк тирәк,
Һеҙҙән беҙгә... кәрәк!

Исеме сыҡҡан уйынсы ҡаршы яҡҡа йүгереп барып өҙөп сығарға тырыша. Өҙә алһа, бер уйынсыны эйәртеп үҙ яғына алып ҡайта. Өҙә алмаһа, шул яҡта ҡала. Уйын шул тәртиптә, бер яҡта уйынсылар бөткәнсе дауам итә.

**«Һунарсылар менән өйрәктәр»**



Балалар ике төркәмгә бүленәләр. Һәр төркөмдә берешәр “һунарсы ”билдәләнә, ә ҡалған балалар – “өйрәктәр”. “Һунарсы” туп бәреп, “өйрәктәр”ҙе ауларға тотона. “Өйрәктәр”, туп тейеүҙән ҡасып, йүгерешеп йөрөҙәр. Әгәр туп “өйрәктәр”ҙең береһенә тейһә, ул тупты тиҙ генә ҡулына алып “һунарсылар”ҙың береһенә бәрә. Туп “һунарсы”ға тейһә, “өйрәк” уйындан сыҡмай, дүртмөйөш эсендә ҡала; тейҙерә алмаһа – “яна” һәм һыҙыҡтан сыға.

Шул тәртиптән “өйрәктәр” аҡрынлап “һунар”сылар тарафынан ауланып бөтә. Дүртмөйөш эсендә бер “өйрәк” тә ҡалмағас, яҡтар урындарын алмаштыра. Уйын шулай дауам итә.

**«Йәшерәм яулыҡ»**

Беҙҙең атай- әсәйҙәр был уйынды, ғәҙәттә, ҡырға сыҡҡанда уйнағандар, тип телгә алырға яраҡкан Әхмәт олатай.



Йәшел үләнгә түңәрәк яһап, эс яҡҡа ҡарап ултыралар. Бер уйынсы ҡулына яулыҡ тотоп тыштан уратып йөрөй. Күмәкләп һамаҡлайҙар:

Йәшерәм-йәшерәм яулығымды
Йәшел ҡайын төбөнә.
Һиҙҙермәйенсә һалып китәм
Бер иптәшем артына.

Кемдең артына һалып китә, шул һикереп тороп, уны баҫтыра башлай.Тотһа, ул көтөүсе булып дауам итә.

**«Боҙоҡ телефон»**

Балалар теҙелешеп ултыралар. Алып барыусы иң ситтәгенә бер уйынсыға һүҙ әйтә. Ул нисек ишетә, шулай күршеһенә тапшыра. Иң аҙаҡҡы уйынсынан ниндәй һүҙ булыуын һорайҙар. Шунда кем яңылышҡанын беләләр һәм иң артҡа күсереп ултырталар.

**«Йөҙөк һалыш»**

Балалар эскәмйәләргә теҙелешеп ултыра. Уйынды алып барыусы ҡулына йөҙөк йәки берәй әйбер алып, уны эскәмйәлә ултырған бөтә балаларҙың да усына йомдорған кеүек итеп һалып сыға.



Йөҙөктө берәүгә һала. Иғтибар менән күҙәтеп ултырған баланан: ”Йөҙөк кемдә?” – тип һорай. Йөҙөк оҙаҡ табылмай торһа эҙләүсегә яза бирәләр. Тапһа, кемдән таба, шул кеше – көтөүсе була, һин уның урынына ултыраһың.

**«Буяу алыш»**

Балалар ултыралар. «Әсәй», һатып алыусы билдәләйҙәр. «Әсәй» балаларға төҫтәр әйтеп сыҡҡас, һатып алыусы килә.

Әсәй:

– Ниндәй төҫ кәрәк? – тип һорай. Һатып алыусы ҡайһы төҫтө әйтә, шул бала сығып йүгерә. Тота алмаһа, кире килә лә ултыра. Һатып алыусы икенсе төҫтө һорай, ә тотолмағанға башҡа төҫтө бирәләр. Аҙаҡ һатып алыусы, «әсәй» алмашына.

**«Бура һуғыу»**

«Бура һуғыу» уйыны тәбиғәт ҡосағында үткәрелә. Был уйынды икәүләп йәки төркөмдәргә бүленеп уйнарға мөмкин.

Бура һуғыу – бер тигеҙ генә, утын ағасы кеүек ағастарҙы теҙеп ҡуйып алыҫтан тороп икенсе бер ағас менән бәреп йығыу икән ул.

**«Мәскәй әбей»**

Уйынсылар араһында «әсәй», «Мәскәй әбей»ҙе билдәләйҙәр, ә ҡалғандары – балалар. Балалар түңәрәккә торалар, «әсәй» кеше балаларҙы уратып йөрөй: «Тимер ситән үрәйем Мәскәй әбей инмәҫкә», – тип һамаҡлай ҙа һөткә китә, шул ваҡыт «Мәскәй әбей» тыңлап тора ла балаларҙы баҫтырып тота башлай, кем тотола – шул «Мәскәй әбей» затына әүерелә бара. Уйын шулай дауам итә.

«**Йәмле таш**»

Бүрәнә алып, шуның өҫтөнә таҡта, ә таҡтаның бер яҡ осона күп кенә итеп таш һалаһың. Бер кеше таҡтаның теге яҡ осона баҫһа, таштар тирә-яҡҡа һирпелә, шунан таштарҙы һирпкән кеше, кире йыйып һалырға тейеш. Уйындың шарты: һәр ташты һанап һалырға кәрәк.

***

Малайҙар ҡышын боҙҙа сәкән һуғып уйнай торғайнылар. Йәйен инде йүгерек уйындар уйнаныҡ. Тик Ҡыпсаҡ уйындарын өйрәнеү балаларға туған телдең матурлығын күрһәтә. Иғтибарлылыҡты, йылғырлыҡты үҫтерә, тип әйтә торғайны Әхмәт олатайың, тине, Фәүриә өләсәйем.

## Онотолмаҫ уйындар

Тәнәфестә класташтар менән Әхмәт олатай Сөләймәновтың уйындарын уйнауҙы ғәҙәткә индерҙек. «Мәскәй әбей» уйынын уйнаған ваҡытта, оло класта уҡыған ике апай уйынға килеп ҡушылдылар. Беҙ уларға уйындың шартын өйрәтергә булдыҡ. Айсулпан апай менән Илгизә апайҙар: «Йәйгелек мәктәп алдындағы лагерҙа уйнай торғайныҡ, беләбеҙ», – тип яуап бирҙеләр.

Мәктәп алдындағы йәйге лагерҙың бәйләнештәр сайтында интернетта группаһы бар. Беҙ Гөлшат менән ул группаны ҡарап сығырға булдыҡ. Әлеге беҙҙең «Боҙоҡ телефон», «Йөҙөк һалыш», «Буяу алыш», «Бура һуғыу», «Йәмле таш», «Аҡ тирәк-күк тирәк»,«Йәшрәм яулыҡ» уйындарҙың бөтәһен дә уйнайбыҙ икән дә!

Тимәк, был уйындар ысынлап та беҙҙең яҡта электән уйнала! Онотолмаҫ был уйындар!

Шулай итеп, уйын ул – уйын ғына түгел икән. Ә уйын – ул ял, күңел асыу, тән һәм йән яҙыу. Донъяны танып белеү.Тормошто өйрәнеү.

Балалар уйындарҙа берҙәмлеккә, лидер сифаттарына өйрәнә, ынтыла. Сәм, ярыш теләге уята.Уйында ҡулланылған йырҙарҙы, һамаҡтарҙы ятларға, шәп йүгерергә, матур йырларға үсекмәҫкә, сыҙамлы булырға, ошаҡлашмаҫка өйрәнә. Һаулығыбыҙға ла ҙур файҙа.

Эҙләнеүҙәр барышында үҙебеҙҙең олатай-өләсәйҙәр уйнаған, беҙҙең яҡтарҙа уйналған уйындарҙы Әхмәт олатай Сөләймәновтың китаптары аша өйрәндек. Хәҙер инде тәнәфестә, буш ваҡытта рәхәтләнеп уйнайбыҙ.

Был уйындар онотолмаҫ, киләһе быуынға барып етер, тип уйлайым. Артабан да Әхмәт олатайҙың китаптарын һәм беҙҙең яҡта уйналған уйындарҙы өйрәнеүҙе дауам итәсәкмен.

## Әҙәбиәт


1. Сөләймәнов Ә.М. Бала сағаның уйын фольклоры. – Өфө: Китап, 2007
2. Балалар уйындары – Башҡорт Википедияһы.
3. Башҡорт халыҡ йола уйындары/Автор-төҙ. Р.Ә.Солтангәрәева, Ә.М.Сөләймәнов. – Өфө, 1997. – 120 бит.
4. https://interesne.me/source-64386308/post-25485
5. https://vk.com/public173776894


©Сайфитдинова Л.Г., Утябаева Н., 2024

УДК 008; 793

***Хәлиуллина Алина,***
*Әбделмәмбәт мәктәбенең*
*9- сы класс укыусыһы*
*ет.: **Үтәбаева А.Р.,***
*укытыусы,*
*Әбделмәмбәт ау.*

***Халиуллина Алина,***
*ученица 4 кл.*
*Абдельмамбетовской школы.,*
*рук.: **Утябаева А.Р.,***
*учительница,*
*дер. Абдельмамбетово*

## ӘХМӘТ СӨЛӘЙМӘНОВ ҺӘМ УНЫҢ КЕСЕ ВАТАНЫ

## АХМЕТ СУЛЕЙМАНОВ И ЕГО МАЛАЯ РОДИНА

**Аннотация.** Статья посвящена рассмотрению глубоких связей известного ученого-фольклориста Ахмета Сулейманова и его малой родины. Как отмечает автор, ученый, хоть и жил и работал долгие годы в Уфе, он никогла не рвал связь со своими родными и близкими, в особенности с деревней Абдельмамбетово-Кыпсак, где всю жизнь жила его старшая сестра Бибикамал. Здесь он не только гостил, но тесно общался с родственниками, сельчанами, записывал фольклор.

**Ключевые слова:** Ахмет Сулейманов, ученый, родные и близкие, малая родина, глубокая связь, родная деревня Набиево.

Бәләкәй Ватанды өйрәнеү ғаиләнән, йорттан ғына башланмай, ә районға, Башҡортостанға ҡағылышлы фотоларҙы, мәғлүмәттәрҙе лә өйрәнеүҙән башлана.

Ни өсөн беҙҙең мәктәп Әхмәт Сөләймәновтың эшенә мөрәжәғәт итергә булды?

Ул тере саҡта уҡ беҙҙең мәктәптә, Әхмәт Сөләймәнов исемендәге фольклор кабинеты бар ине, һәм ошо ваҡытта ҡыҙыҡһынып мин үҙемә һорау бирә торғайным, нисек был кеше беҙҙең ауыл менән бәйле икән тип.

Асыҡланыуынса, уның Әбделмәмбәт ауылына арналған «Аҡбейек», «Ҡыпсаҡ», «Ҡараташ» исемле шиғырҙары ла бар икән.

Тағы ла ул ваҡыты-ваҡыты менән Ҡыпсаҡ ауылына килеп йәшәп киткән булған. Ғалимдың эшмәкәрлек башын өйрәнеү өсөн, мин уның музейына юлландым, һәм мине стеллаж эсендә ятҡан документтар, альбомдар ҡыҙыҡһындырҙы.

Һәр төбәктең данлы шәхестәре бар. Исемдәре тотош донъяға билдәле спортсыларҙың, ғалимдарҙың, артистарҙың биографияһына күҙ һалһаҡ, уларҙың байтағы ауылда тыуған. Был иһә билдәле булыу өсөн әллә ниндәй шәп шарттар түгел, бары ихтыяр көсө, сәмселлек, тырышлыҡ, маҡсат ҡуйып, шуға ынтылыу кеүек сифаттарға эйә булыу кәрәклеген аңлата. Бөрйән районынанда да ошондай билдәле ғалим, фольклорсы сыҡҡан. Ул Әхмәт Сөләймәнов.

**Тормошона йоғонто яһаусылар**

Өлкән **ағаһы Мөхәмәткилде** Сөләймәнов фольклорсы, сәйәхәтсе, географ, рәссамды ла үҙ эсенә алған. Туған районы буйлап күп сәйәхәт итә ул, үткән юлын шиғыра төргән, булған ауылдарының тарихын яҙып ҡына ҡалмаған, маршрутын һыҙған, картаһын төшөргән һәм ауылдың планын биргән. Быны «Походтар һәм юлъяҙмалар» тигән альбомда күрә алабыҙ. Икенсе **ағаһы Мөхәмәтзәки** – шағир күңелле математик, Башҡортостанда билдәле уҡытыусы, үҙен педагог эшмәкәрлегенә бағышлаған шәхес. **Бибикамал апаһы** Әбделмәмбәт ауылында оҙаҡ ваҡыт йәшәгән. Табын-мәжлестәргә мәрәкәсел була, уныңса, йыр, бейеү-табындың төп өлөшө булған.

– Әй, һин апай, теге Әхмәт-Зәкиҙәрҙең апайҙарымы ул? – тиһә,

– Юҡ, мин Зәкиҙең әсәһенең кинйә ҡыҙының иренең ҡайынбикәһе, – тип яуап ҡайтарыусан. Йә булмаһа:

– Кордон Мөхәмәдйәндең ҡатыны түгелме? – тигән һорауға

– Мөхәмәдйәндең ҡатынының ҡәйнәһенең улының хәләл ефете, – тип яуаплар булған.

Аталарын ерләргә киткән ваҡытта тыуған һеңлеһе **Гәүһәр** шулай уҡ шиғри телле, шиғри күңелле шәхес булып үҫкән.

Бәләкәй сағынан телле, шаян, шуҡ, тыйыуһыҙ булып үҫә. Уҡытыусы Әхмәт апа дәрестә булған саҡта, дәрес үткәрә алмай һәм шунда уның телгә бай икәнлеге күренә. Күп таҡмаҡтар, ҡобайырҙар ижад итә. Хатта йөрөп уҡыған, эшләгән саҡтарҙа ул хаттарҙы таҡмаҡ менән яҙған булған.

**Әхмәт Сөләймәнов эшмәкәрлегендә патриотизм темаһы**

Патриотизм ул кесе Ватанға тоғролоҡ һәм һөйөү. Ул тойғо кешелә ҡасан башлана? Әлбиттә, бәләкәй саҡтан уҡ. Әхмәт Сөләймәновҡа ла был тойғо ят, сит түгел. Быны беҙ түбәндәге миҫалдар менән иҫбатлай алабыҙ.

“1812 йылғы һуғыш башланып китә, әсәйҙәренең һөйләүе буйынса кискелек, ашап ултырған мәлдә, Француз яуын үтеп кире Нәбигә ҡайтып ингән аттары, башын тәҙрәгә тызып торғанын һөйләп һәр ваҡыт күҙенә йәш алыр ине Әхмәт ағайым”, – тип һөйләй Миңнур апай.

Һуғыш балаларына хас булғанса, ул сығыныуҙар алып үҫә бәләкәй сағынан. Танкист булып 3 йыл Ҡарағом сүллектәрендә хеҙмәт иткәндән һуң, күп тапҡыр һөйләп маҡтана торған булған. Оҙаҡ ваҡыт танкист кейемен сисмәй йөрөй. Хеҙмәт иткәндә, күп уңыштарға өлгәшә, аҙаҡ уны журналист булып эшкә саҡырһалар ҙа, ул риза булмай, сөнки уны кесе Ватаны үҙенә тартып тора. Ул ҡартайғас та, йәйгеһен тыуған йортона ҡайтып, иртәнсәктән кискә тиклем яҙыша торған булған. Ҡайтып йортонда йәшәргә хыялланды, ләкин килеп сыҡманы. Һәр ваҡыт Бөрйән менән тығыҙ бәйләнештә булды.

Хатта ғүмеренең ахырынаса «Урал батыр» эпосы өҫтөндә эшләгән. Халҡыбыҙҙың иң боронғо ҡомартҡыһы тураһында күптән инде әйтелһә лә, ул «Урал батыр» эпосын төптәнерәк аңларға тырышҡан. Һәм беҙҙең районыбыҙға эпосты яттан һөйләүселәр конкурсының жюри рәйесе булып ҡына түгел, ә башҡорттоң булмышы Йәнбирҙе менән Йәнбикәнең Шүлгән мәмерйәһенә бәйләп халыҡҡа сығарыуы бик күп нәмә тураһында һөйләй. Тағы ла Әхмәт Сөләймәнов был балалар конкурсының тап Бөрйән ерендә үтергә тейеш, тигән маҡсат ҡуя. Район газетаһы “Таң”дан бер ваҡытта ла айырылмауы ла уның Кесе Ватанына тоғролоғо тураһында һөйләмәйме ни?!

Тыуған яҡҡа һөйөүе атай нигеҙенә үҙ ҡулдары менән һалған йорттоң булыуы ла асыҡ миҫал булып тора. Тап ошо йортонан ул мәңгелек йортона оҙатылған.

**Ҡыпсаҡ менән уны нимә бәйләй?**

Әбделмәмбәт мәктәбендә Ә. Сөләймәнов үҙе тере саҡта фольклор кабинеты асылды. Ни өсөн тап Ҡыпсаҡта?

Әхмәт Сөләймәновтың атаһы Мөхәмәтвәли Сөләймәнов менән Әбделмәмбәт ауылы сәсәне Сабирйән Мөхәмәтҡолов репрессия ваҡытында бер үк ергә алыналар. Беламор каналын төҙөүгә кем барырға теләй тигәндә, уларҙың юлдары айырыла. Ә. Сөләймәнов атайҙар дуҫлығына хыянат итмәй, бәлки, шуға ла Ҡыпсаҡ уны үҙенә тартҡандыр. Сабирйән Мөхәмәтҡоловтың ҡыҙы Зәкиәгә ул бик йыш килгән һәм унан күп фольклор материалдарын яҙып алған. Дуҫлыҡ оҙаҡ йылдар дауам иткән.

Донъяға ниндәй ҡараш аша ҡарау шәхестең бала сағынан уҡ сағылыш таба. Туғандарының араһында һәр береһе башҡорт ауыҙ-тел ижадын, һынлы сәнғәтте һаҡлаусы, дауам итеүсе, үҙҙәре аша үткәреүсе булып торған. Илһөйәрлек тә тыуған төйәккә һөйөүҙән башлана шул.

Ә. Сөләймәнов күпме эшләһәлә, ул эштәрен эшкәртеп өлгөрмәй, улар әле лә папкала килеш музейҙа һаҡлана.

**Әҙәбиәт**

1. Сөләймәнов Ә. Бала сағым.
2. Сөләймәнов Мөхәмәткилде. “Походтар һәм маршруттар” альбомы.

© Халиуллина А., Утябаева А.Р., 2024

УДК 008

***Язаголова Зәмирә,***
*Иҫке Монасип мәктәбе Тимер*
*филиалының 8-се класс укыусыһы*
*ет.:* ***Язаголова М.Т.,***
*директор кәңәшсеһе,*
*Тимер ау.*

***Язагулова Замира,***
*ученица 8 кл. Тимеровского филиала*
*Старо-Мунасиповской школы.*
*рук.:* ***Язагулова М.Т.,***
*советник директора,*
*дер. Тимерово*

## ӘХМӘТ СӨЛӘЙМӘНОВТЫҢ БАШҠОРТ БАЛАЛАР УЙЫН ФОЛЬКЛОРЫНА ИНДЕРГӘН ӨЛӨШӨ

## ВКЛАД АХМЕТА СУЛЕЙМАНОВА В БАШКИРСКИЙ ДЕТСКИЙ ИГРОВОЙ ФОЛЬКЛОР

**Аннотация.** Статья посвящена освещению вклада известного ученого-фольклориста Ахмета Сулейманова в сбор и изучение детского фольклора, детских игр в частности. Автор указывает на практическую пользу игр, позволяющих развивать в детях смекалку и находчивость, а подвижные игры – физическую выносливость и активность. Приведенные игры имеют большое значение в жизни детей, также занимают важное место в научно-исследовательской деятельности ученого.

**Ключевые слова:** Ахмет Сулейманов, ученый, башкирская фольклористика, вклад, детские игры, воспитание, физическая выносливость, интеллектуальное развитие.

Балалар фольклоры бик ҙур күләмле һәм күп яҡлы ижад. Ул ололар тарафынан ижад ителгән бала бағыу поэзияһын да, шулай ук балалар үҙҙәре тыуҙырған һүҙ-уйын сәнғәте өлгөләрен дә эсенә ала. Балалар фольклоры бала тыуғандан алып бәлиғ булғансы уға өлкәндәр тарафынан бирелә торған һәм шулай ук балаларҙың үҙ мөхиттәрендә йәшәп килгән халыҡ ижады әҫәрҙәрен үҙ эсенә ала. Балалар фольклоры функциялары һәм поэтик үзенсәлектәре яғынан күп төрлө жанрҙарҙы ала. Мәҫәлән, кескәй балаларҙы йоҡлатыу йәки күңелен күтәреү өсөн, өлкәндәр тарафынан башҡарыла. Икенселәре хәрәкәтле уйындар менән бәйле рәүештә, балалар үҙҙәре башҡара, өсөнсөләре иһә балаларҙың күңел асыуҙары йырланыу ваҡытында һүҙ уйындары булараҡ ҡулланышҡа инә. Балаларға бәйләнешле тел-уйын ижадын, ғәҙәттә, ҙур өс төркөмгә бүлеп йөрөтәләр:

1) бала бағыу фольклоры;
2) һүҙ уйыны йәки һүҙ менән күңел асыу фольклоры;
3) хәрәкәтле уйын фольклоры.

Быларҙың беренсеһе балаларға бағышлап ололар тарафынан тыуҙырылған ижадтан тора. Һуңғы икеһе иһә башлыса, балаларҙың үҙ ижадына нигеҙләнә.

Башҡорт халыҡ уйындары ҡатмарлы үҫеш баҫҡыстары үткән. Беҙҙең көндәргә килеп еткән уйындарҙа халыҡтың боронғо ышаныуҙарын, хәрби мөнәсәбәттәрҙе һәм күп төрлө хеҙмәт деталдәрен күреп була. Мәҫәлән, тәүтормош кешеләренең төрлө

ышаныуҙары «Ҡарға бутҡаһы», «Убыр әбей», «Аҡ тирәк, күк тирәк», «Соҡор туп», «Ашыҡ сағыу», «Үгеҙ уйыны», «Һаҡыташ» кеүек уйындарҙа һаҡланған.

Күреүебеҙсә, халыҡ уйындары – халыҡ көнкүрешенең кескәй бер сағылышы, тимәк, халыҡ үҙе ижад иткән төрлө уйындар ярҙамында йәш быуынды тормош күтәргә, матур ғүмер итергә әҙерләй.

**Әхмәт Сөләймәнов ижадында бала-сағаның уйын фольклоры**

Халыҡ ижадының фәндә «балалар фольклоры» тип йөрөтөлгән өлөшө йола фольклорына яҡын. Сөнки ул күпселектә балаларҙың теленә, ҡылығына, зиһененә, тойғоһона, үҫешенә, сәләмәтлегенә ыңғай йоғонто яһауға хеҙмәт итә. Иҫ белгән балалар, үҫмерҙәр мауығып тыңлай торған әкиәт, көләмәс, нәсихәт, йомаҡ, мәҡәл, әйтемдәр, йыр, таҡмаҡтар ҙа, яратып уйнай торған уйындар ҙа уларҙан ҡалышмай.

Балалар фольклоры, айырыуса уларҙың уйын фольклоры, элек-электән башҡорт халҡының тарихы, мәҙәниәте менән ҡыҙыҡһыныусыларҙың иғтибарына эләгә килгән. Был тәңгәлдә иң әүәл ситтән килгән ғалимдар әйткән. П.И. Рычков, И.И. Лепехин, П.С. Паллас, И.Г. Георги кеүек тикшеренеүселәрҙең яҙмалары шуға миҫал. XX быуат баштарынан алыпбашҡорт халҡының этнографияһын өйрәнеүгә ҙур хеҙмәт бағышлаған С.И. Руденко иһә «Ашыҡ уйыны», «Йөн туп», «Өсәт» кеүек уйындарҙы ентекле генә тасуирлап ҡалдырған.

Халыҡ уйындарының быуындан-быуынға тапшырылып, әлегә тиклем һаҡланып ҡалғандарына иғтибар итһәң, улар халыҡтың уҙған тормошон, культураһын, көнкүрешен күҙ алдына баҫтырырға ярҙам итәлер. Халыҡ уйындарының әһәмиәтенә килгәндә, уларҙың йәш быуынды тәрбиәләүҙә тотҡан урыны баһалап бөткөһөҙ. Уйындар кешене күп яҡлап үҫтерә, уларҙың фекерләүен, хәтерен, ихтыяр көсөн үҫтерә һәм физик яҡтан нығыта. Уйын барышында һәр кем етеҙҙәрҙән, көслөләрҙән өлгө алыуҙы, үҙе лә беренселеккә ирешеүҙе маҡсат итеп ҡуя һәм төрлө ҡаршылыҡтарҙы еңеп сығырға тырыша, уңышҡа ирешһә, үҙенең еңеүе менән ләззәтләнә. Күмәк уйындар дуҫлыҡ, берҙәмлек сифаттарын тәрбиәләргә булышлыҡ итә.

Элек уйын ваҡыттарында туранан-тура һунар, хеҙмәт ҡоралдары ҡулланылһа, тора-бара уҡ-йәйә, һөңгө, таш урынына таяҡ, шар, туп һәм башҡа шундай нәмәләр ҡуллана башлағандар. Шул рәүешле хеҙмәт деталдәрен үҙ эсенә алған спорт уйындары тыуған.

Башҡорт халыҡ уйындары ҡатмарлы үҫеш баҫҡыстары үткән. Беҙҙең көндәргә килеп еткән уйындарҙа халыҡтың боронғо ышаныуҙарын, хәрби мөнәсәбәттәрҙе һәм күп төрлө хеҙмәт деталдәрен күреп була. Мәҫәлән, тәүтормош кешеләренең төрлө ышаныуҙары «Ҡарға бутҡаһы», «Кәкүк сәйе», «Убыр әбей», «Аҡ тирәк, күк тирәк», «Соҡор туп», «Ашыҡ сағыу», «Үгеҙ уйыны», «Ҡырҡташ» кеүек уйындарҙа һаҡланған.

Ололарҙың һөйләүе буйынса, борон, балаларҙы мәргәнлеккә, сослоҡҡа өйрәтеү маҡсатында, аҡһаҡалдар балалар араһында «бағана шары», «Себен», «бура һуғыу», «Сүрәкә», «Сиртмәк» кеүек махсус ярыштар ойошторор булғандар. Физик һәм әхләҡи яҡтан сыныҡтырыуға ҡоролған бындай уйындар, асылда, һунарсының, малсының, балыҡсының көндәлек хеҙмәте өсөн мотлаҡ күнекмә булып торған. 4-5 йәшкә тиклем малайҙарҙы атайҙары үҙ тәрбиәһенә алған. Улар һыбай йөрөргә, уҡтан атырға, йүгерергә, көрәшергә өйрәткән. Төрлө уйындарҙы ла улар үҙҙәре уйлап тапҡан, әлбиттә. Мәҫәлән, бура һуғыууйыны. Күпме сослоҡ, мәргәнлек һәм көс кәрәк. Ул-борондан килгән уйын.

Халыҡ уйындарының шундай һәйбәт яғы бар: улар ваҡыт һынауынан ҡурҡмайҙар, оҙаҡ йылдар һуҙымында бер аҙ үҙгәреш кисерһәләр ҙә, һаман да киләсәк быуынға хеҙмәт итеүен дауам итәләр. Шуныһы ла ҡыуаныслы – уйындар тел барьерына ла дусар түгелдәр. Әйтәйек, башҡорт малайҙарының уйындарын рус, сыуаш, мари, мордва, удмурт һәм башҡа милләт халҡы балалары ла кинәнеп уйнайҙар.

**Быуындан-быуынға тапшырылып килгән уйындар**

**«АҠ ТИРӘК, КҮК ТИРӘК»** – күптәргә таныш һәм яратып уйналған уйындарҙың береһелер. Уның асылы шунда: балалар ике төркөмгә бүленеп, бер-береһенән 20-30 метр алыҫлыҡта ҡулға-ҡул тотоношоп, ҡапма-ҡаршы баҫалар.

Беренсе яҡтағылар һамаҡлай:
Ҡап-ҡап ҡабырсаҡ,
Ҡабырсағым-кимерсәк.
Ат башында кимерсәк.
Уҡ аттым-батманым,
Сәңгелсәгем ҡаҡманым.
Аҡ тирәк, күк тирәк
Беҙҙән һеҙгә кем кәрәк?
Икенсе яҡ яуаплай:
Аҡ тирәк, күк тирәк
Аҡ та кәрәк, күк тә кәрәк,
Энә менән еп тә кәрәк.
Ҡашығаяҡ йыуылмаған-
Беҙгә Сәлимә кәрәк!

Исеме аталған уйынсы ҡаршы яҡка йүгереп барып тотоношҡан ҡулдарҙы өҙөп сығырға тырыша. Өҙөп сыға алһа, үҙ яғына бер уйынсыны алып ҡайта. Кире хәлдә ҡаршы яҡта ҡала. Уйын шул тәртиптә бер яҡта уйынсылар бөткәнсе дауам итә. «Аҡ тирәк, күк тирәк» - балаларҙың аяҡ, ҡул мускулдарын нығытыуға, сыҙамлылыкты тәрбиәләүгә нигеҙләнгән.

**«БЕҘ УН ИКЕ ҠЫҘ ИНЕК»**

Уйнаусылар түңәрәк яһап теҙелешеп ултыралар. Түңәрәк уртаһында бер ҡыҙ бала һамаҡлай.

Беҙ, беҙ, беҙ инек,
Беҙ ун ике ҡыҙ инек.
Баҙға төштөк, май ашаныҡ,
Аҡ келәттә бал ашаныҡ.
Бер таҡтаға теҙелдек, атҡансы юҡ булдыҡ!

Түңәрәктә ултырған ҡыҙҙар бер-береһенең баш бармаҡтарынан тотошалар ҙа “беҙ” тигәс, аҫҡа эйеләләр, икенсе тапҡыр “беҙ” тигән саҡта, баштарын күтәрәләр. Шулай итеп, һәр һүҙ әйтелгән һайын эйелеп-бөгөлөп ултыралар. “Юҡ булдыҡ” тигән һүҙ әйтелеү менән, бармаҡтарын ысҡындыралар ҙә төрлөһө төрлө яҡка ҡасалар. Ә һамаҡлаған ҡыҙ уларҙы ҡыуа башлай. Иң тәүҙә кемде тота, шул уйынды тағы башлай.

**«ТӨЛКӨ ҺӘМ ТАУЫҠТАР»**

Тәбиғәттәге йән эйәләренең холоҡ-фиғелен, үҙ-ара мөнәсәбәттәрен танып белеүгә, отҡорлоҡ һәм етеҙлекте үҫтереүгә ҡоролған. Уйын барышы түбәндәгесә ойошторола: балалар үҙҙәре араһынан «төлкө», «әтәс» һайлап ҡуялар. Ҡалғандары «тауыҡтар» була. Төлкө бер ситкә китеп үҙенә оя билдәләй. Тауыҡтар ҙа шаҡмаҡ һыҙып һарай яһайҙар һәм шунда урынлашалар. Шул ваҡыт әтәс ҡысҡырып ебәрә, тауыҡтар уянып һарайҙан сығалар. Әтәс тауышына үҙ ояһында йоҡлап ятҡан төлкө уяна һәм тауыҡтарға һөжүм итә башлай. Әтәс, үҙ сиратында, тауыҡтарҙы һарайға саҡыра, ә үҙе төлкө менән көрәшкә сыға. Әгәр төлкө тауыкты тотһа, ул тауыҡ төлкөгә әйләнә, төлкө иһә тауыҡ була. Тауыҡ тотолған һайын, яңы «әтәс» билдәләнә. Төлкө булмайынса ҡалған тауыҡ еңеүсе тип һанала.

**«ҠАП ТА ҠОП»**

Балалар түңәрәк яһап теҙелешеп ултыралар һәм үрҙә килтерелгән «Беҙ ун ике ҡыҙ инек» уйыныныды әйтелгән һамаҡты үҙгәртеп һамаҡлайҙар.

Беҙ, беҙ, беҙ инек,
Беҙ ун ике ҡыҙ инек,
Баҙға төштөк, май ашаныҡ,
Аҡ келәттә бал ашаныҡ.
Бер таҡтаға теҙелдек,
Таң атҡансы юҡ булдыҡ.

Әпсен, төпсөн, ҡап та ҡоп!

"Ҡоп" һүҙе әйтелгәс тә бөтә балалар ауыҙҙарын йомоп шым ҡала һәм бер-береһен көлдөрөргә тырыша. Көлөп ебәреүсе наказ үтәй.

**«АЛЫРМЫН ҠОШ, БИРМӘМ ҠОШ»**

Уйындың маҡсаты: иғтибарлылыҡты, сослоҡто, етеҙлекте, хәрәкәт әүҙемлеген үҫтереү; ойошҡанлыҡ тәрбиәләй.

Балалар был уйынды яҙ көндәре, ҡаҙҙар бәпкәләрен сығарғас, уларҙы көткән саҡта уйнағандар. Уйында "ҡаҙ", уның "бәпкәләре" һәм "төйлөгән" ҡатнаша. Төйлөгән булған бала ерҙе соҡоп ултыра. Ҡаҙ, бәпкәләрен эйәртеп уның эргәһенә килә һәм:

– Төйлөгән, төйлөгән, ни эшләйһең? – тип һорай.

Төйлөгән:

– Бына һинең балаларыңды атып алырға ултырам, – ти.

Ҡаҙ:

– Мин һиңә балаларымды бирмәйем! – ти.

– Төйлөгән урынынан тора ла:

– Алам, алам, атар ҡош! – тип, ҡаҙ бәпкәләренә ташлана.

Ҡаҙ:

– Бирмәм, бирмәм битәр ҡош! – тип, бәпкәләрен ҡурсалай башлай.

Ә бәпкәләр, ҡаҙ артынан бер-бер артлы тотоношоп: Сип-сип-сип, – тип йөрөйҙәр. Төйлөгәндең ҡулы тейгән бала уйындан сыға бара. Уйын ҡаҙ бәпкәләре тотолоп бөткәнсе дауам итә.

**«ЙӘШЕРӘМ ЯУЛЫҠ»**

Балалар түңәрәк яһап ултыралар, араларынан көтөүсе һайлана. Ул яулыҡ ала. Балалар йырлай:

Йәшерәм-йәшерәм яулығымды
Йәшел ҡайын аҫтына.
Һиҙҙермәйсә һалып китәм
Бер иптәшем артына.

Көтөүсе булған бала түңәрәкте уратып йөрөй һәм бер уңайлы ваҡытта һиҙҙермәй генә яулыҡты бер иптәшенең артына һалып китә. Ә үҙе һаман яулыҡты йәшереп тотҡан һымаҡ йөрөй.

Артында яулыҡ ятҡан бала, көтөүсе түңәрәкте әйләнеп килгәнсе, үҙенең артында яулыҡ ятҡанын һиҙмәй ултырһа, көтөүсе уның янына килеп еткәс, яулыҡты ала ла уға яулыҡ менән һуға. Был бала көтөүсе булып ҡала. Әгәр ҙә түңәрәктәге бала артына яулыҡ һалынғанын һиҙеп ҡалһа, тиҙ генә тороп, көтөүсе артынан йүгерә. Ә көтөүсе яулыҡтан һуғылмаҫ өсөн, түңәрәк буйлап йүгереп, уны баҫтырған иптәшенең урынына ултырырға тырыша. Әгәр ултырып өлгөрмәһә, ул тағы көтөүсе була һәм уйын яңынан башлана.

**Ҡара-ҡаршы әйтешеп уйнау**

– Һике аҫтында май ҡайҙа? – Сысҡан ашаған. – Сысҡан ҡайҙа? – Һалам аҫтында. – Һалам ҡайҙа? – Үгеҙ ашаған. – Үгеҙ ҡайҙа? – Һаҙға батҡан. – Һаҙ ҡайҙа? – Һайыҫҡан соҡоған. – Һайыҫҡан ҡайҙа? – Кәртә башында. – Кәртә ҡайҙа? – Утта янған. – Ут ҡайҙа? – Көл булған. – Көл ҡайҙа? – Күккә осҡан.

**«Осто-осто»**

Уйынсылар теҙелешеп ултыра йәки баҫып тора. Алып барыусы оса торған һәм осмай торған нәмәләрҙе буташтырып әйтә лә ҡулын күтәрә.

Осто-осто – торналар осто.
Осто-осто – тырмалар осто.
Осто-осто – ҡарғалар осто.
Осто-осто – арбалар осто.

Башҡалар тик осоусы әйбер әйтелгәндә генә ҡул күтәрергә тейеш. Кем осмай торған әйбер әйтелгәндә ҡулын күтәрә, шул йәки алып барыусыны алмаштыра, йәки уйындан сығарыла, йә булмаһа берәй "яза"ға тарттырыла: йырлай, бейей, шиғыр уҡый һ.б.

Шулай итеп, таяҡты әйләндергән һайын берәр мәрәй йыйыла. Уйындың әһәмиәте: Уйын баланы көслө итеп тәрбиәләүгә булышлыҡ иткән. Физик яҡтан ыңғай тәьҫир иткән.

Башҡорт халҡының тарихи яҡтан ныҡынған күңел асыу, уйын-көлкө, тамаша ҡылыу саралары һәм спорт, бейеү, йыр бәйгеләре ул. Башҡорт халыҡ уйындары күсмә мәҙәниәт традицияларында формалашҡан һәм башҡорттарҙың тарихы, хеҙмәте, көнкүреше һәм йолалары менән бәйле үҫешкән. Уйындар кешелә ғәйрәтлелек, сыҙамлылыҡ, етеҙлек кеүек сифаттар үҫтерә һәм тәрбиәләй, башҡалар менән аралашырға, хеҙмәт һәм хәрби ҡоралдар менән эш итергә өйрәтә. Уйындарҙың ерәүҙәре ҡатнашыусыларҙың уҙышыуына, ярышыуына, икенселәре оҫталыҡты күрһәтеүгә, өсөнсөләре донъяны танып белеүгә ҡоролған.

Халыҡ уйындарын бер нисә төркөмгә бүлергә була. Мәҫәлән, йыр менән башҡарылған уйындар – етеҙлек, йылғырлыҡ, осҡорлоҡ һәм башҡа физик тәрбиә биреү менән бергә эстетик тәрбиә лә бирә. Был төр уйындарына “Йәшерәм яулыҡ”, “Аҡ тирәк, күк тирәк”, “Аҡҡалас”, “Наза” кеүек уйындарҙы индерергә була.

Туп менән башҡарылған уйындар физик яҡтан үҫешергә ҙур ярҙам итә, күбеһе йүгереүгә ҡоролған. Улар етеҙлек, йылдамлыҡ, һиҙгерлек тәрбиәләйҙәр. “Өйрәк һәм һунарсы”, “Соҡор туп”, “Туҡта” һәм башҡа уйындарҙы туп менәнуйнайҙар.

Киләһе төркөм – таяҡтар ярҙамында уйналған хәрәкәтле уйындар. Һәр ваҡыт таяҡтар менән эш итергә тура килгәнлектән, уларҙы саф һауала ойошторалар. Уйында ҡатнашыусылар йүгерәләр, һикерәләр. Мәҫәлән, “Ун ике таяҡ”, “Себен”, “Көршәк”, “Сәкән уйындары”.

Коллектив рәүештә башҡарылған төрлө хәрәкәтле уйындар бик күп һәм үҙенең төрлөлөгө менән айырылып тора. Уйындарҙың күбеһе хәрәкәткә, йүгереүгә, һиҙгерлекте арттырыуға, етеҙлеккә өйрәтә, балаларҙа берҙәмлек, намыҫлылыҡ, татыулыҡ сифаттары тәрбиәләй.

Был төркөмгә ошо уйындар инә: “Буяу”, “Бесәй һәм сысҡан”, “Энә һәм еп”, “Һәпәләк”, “Алтын тау”, “Кем һуҡты” кеүек уйындар.

Балаларҙы тәрбиәләүҙә халыҡ уйындары ҙур роль уйнай. “Уйындарҙа – хәрәкәт, хәрәкәттә-бәрәкәт”, тип халыҡ юҡҡа ғына әйтмәгән. Бала донъяға килгәс тә хәрәкәтләнә башлай, сөнки хәрәкәт – йәшәүҙең һәм физиологик үҫештең төп нигеҙе ул. Бары хәрәкәт арҡаһында ғына кеше йәшәй, үҫә, тормош ҡора, ижад итә һәм эшләй. Балаларҙы тәрбиәләүҙә уйындар айырыуса ҙур урын алып тора. Әкиәт, йырҙар уйлап сығарған кеүек уйындарҙы ла халыҡ уйлап тапҡан. Яҡташыбыҙ Ә. М. Сөләймәнов фольклор уйындарын һәм башҡа бик күп төрлө халҡыбыҙ ҡомартҡыларын киләһе быуынға еткереү өсөн күп көс һалған, шулай уҡ хеҙмәттәрен яҙып ҡалдырған.

**Әҙәбиәт**


1. Башҡорт халыҡ ижады. Әкиәттәр / Төҙөүсе, инеш мәҡәлә авторы Ә. М. Сөләймәнов, аңлатмалар биреүсе Л. Г. Бараг менән Ә. М. Сөләймәнов. Яуаплы редакторы С. Ә. Галин. Өфө, 1981. 4-се китап 398 б.
2. Сөләймәнов Ә. М. Башҡорт балаларының ҡарһүҙе (әкиәттәр). – Өфө: Китап, 2008. 244 б.
3. Сөләймәнов Ә. М. Бала-сағаның уйын фольклоры. – Өфө: Китап, 2007.
4. Башҡорт фольклоры концептосфераһы: лингвокультурологик һүҙлек. Сәмситова Л.Х. – Өфө, 2013.


© Яҙағолова З.С., Язагулова М.Т., 2024

УДК 008; 793

***Йәрмөхәмәтова Гөлсөм,***
*Аҫҡар урта мәктәбенең*
*8- се класс уҡыусыһы,*
*ет.:* ***Мырҙабулатова Г. Ә.,***
*уҡытыусы,*
*Аҫҡар ау.*

***Ярмухаметова Гульсум.,***
*ученица 8 кл. Аскаровской СОШ.*
*рук.:* ***Мурзабулатова Г.А.,***
*учительница,*
*дер. Аскар*

## «УРАЛ БАТЫР» ЭПОСЫНДА ТӘРБИӘ НИГЕҘҘӘРЕ

## ОСНОВЫ ВОСПИТАНИЯ В ЭПОСЕ «УРАЛ-БАТЫР»

**Аннотация.** В статье расскрываются основы нравственно-эстетического воспитания, отразвшиеся в башкирском народном эпосе «Урал-батыр». Описывая древний период человечества, картины рождения и развития детей, прививание им родителями различных жизненно-важных навыков, выбор детьми своего пути, отношение к живой природе и т. п. – во всем прочитывается народная педагогика, воспитание, которое является основополагающим и актуальным в обучении и дидактике и сегодня.

**Ключевые слова:** эпос «Урал-батыр», первые люди, герои, батыр, природа, оживление, борьба добра и зла, воспитание бережного отношения к природе, реки.

«Урал батыр» – донъя халыҡтарының эпик ҡомартҡылары араһында иң күренекле урындарҙың береһен биләгән әҫәр. Башҡортостан мәктәптәрендә уның тураһында ишетмәгән бала юҡтыр: йыл һайын «Урал батыр» эпосын башҡарыусы йәш сәсәндәрҙең республика конкурсы үткәрелә, унда биш-алты йәшлек балаларҙан алып ун беренсе класҡа тиклемге уҡыусылар ҡатнаша. Шуларҙан һәр йылда ярышҡа кәм тигәндә егермегә яҡын йәш сәсән, әҫәрҙе тулыһынса тиерлек ятлап килә.

Ҡобайыр үлсәмендәге был эпостың теле халҡыбыҙҙың һәм боронғо һүҙ оҫталарының йәнле һөйләү теленә ҡоролған, шуға күрә лә ул ябай, аңлайышлы, ятлауға еңел. Әммә ошо ябай тел менән беҙҙең заман кешеләре өсөн бик үк таныш булмаған ҡатмарлы, тиҙ генә һүтеп сыҡҡыһыҙ кинәйәле мәғәнәле, тәрән фәлсәфәле күренештәр, хәл-ваҡиғалар, образдар кәүҙәләндерелгән. «Урал батыр»ҙа бер нисә оло дәүерҙе үҙ эсенә алған бик оҙайлы ваҡыт сағылдырылған. Бындай әҫәрҙе бер генә быуын кешеһе сығара алмай, уны ижад итеүҙә бер нисә быуын һүҙ оҫталары ҡатнашҡан. Шуғалыр ҙа эпостың бер нисә ҡатламдан тороуын күреп була.

Районыбыҙҙа оҙаҡ йылдар үткәрелә килгән «Урал батыр» эпосын яттан һөйләүселәр бәйгеһендә абруйлы баһалаусы Әхмәт Мөхәмәтвәли улы Сөләймәнов булды.

Бик тә яуаплы ошо сараны башлап ебәреүсе, матур байрамға әүерелдереүсе Роза Шәриф ҡыҙы Ғүмәроваға ҙур рәхмәтебеҙҙе белдерәбеҙ!

Тәбиғәттең һәм кешелектең үлемһеҙлеген данлаусы «Урал батыр» эпосы – иң боронғо эпик ҡомартҡыларҙың береһе, халҡыбыҙҙың рухи хазинаһы, әҙәби мираҫы. Урал батырҙың көрәш маҡсаты бөгөнгө заман өсөн дә әһәмиәтле.

Был – кешелектең йәшәү мәғәнәһе, ер тормошо, тыныслыҡ проблемаһы. Ер йөҙөндәге һәр кешенең бурысы – был донъяла лайыҡлы урын табыу, дөйөм кешелектең йәшәйешен, быуындар аша үлемһеҙлекте дауам итеү.

Эпоста Йәнбирҙе менән Йәнбикә ер йөҙөндәге тәүге кешеләр булараҡ һүрәтләнә. Шуға күрә лә улар – үлемһеҙ. Кеше һәм хайуандар бер бөтөн йәшәү образы алып бара.

Аҡбуҙатты эйәрләгәнгә тиклем, Урал батыр арыҫлан менеп йөрөй. Ул уның тоғро дуҫы ла. Болан да, арыҫлан да ҡулға эйәләштерелмәгән. Был тәбиғәттә бөтә тереклектең берҙәмлеген аңлата. Ауыр саҡта Урал, кәңәш һорап, тәбиғәт донъяһына мөрәжәғәт итә. Ҡара ҡарға, һайыҫҡан, аҡҡош, үгеҙ, йылан, Аҡбуҙат кеше тауышы менән һөйләшә, арыҫлан ҡысҡырып Йәнбикә менән Йәнбирҙегә һунарҙа ярҙам итә, суртан балыҡ тотоп бирә.

Эпос ҡош-ҡорт, йәнлектәргә ҡарата шәфҡәтле булыу, уларҙы яҡлау, тәбиғәт байлыҡтарынан һаҡсыл файҙаланыу кәрәклегенә ишара яһай. Был – экологик белем һәм тәрбиә сараларының береһе.

Азат рухлы, ирек һөйөүсе кешенең тәбиғәткә һаҡсыл ҡарашы эпоста асыҡ күренә. Урал батыр, халыҡҡа эсер һыу бөткәс, Йәншишмәне эҙләп сығып китә. Тапҡас, үҙе эсмәй, тирә-яҡҡа бөркә.

Был – уның тыуған еренә һәм ғәзиз халҡына баһалап бөткөһөҙ изгелеге. Һыу – йәшәү сығанағы. Эсер һыуға һаҡсыл ҡараш та тәрбиәләй эпос һәм бөгөн Уралдың нисәмә быуат элек иҫтәртеүенә ҡарамаҫтан, тәбиғәткә аяуһыҙ мөнәсәбәтебеҙ артҡандан артыуы арҡаһында (алыҫтан миҫал эҙләмәйек) Ағиҙел йылдан-йыл һайыға, бәләкәй йылғалар юҡҡа сығыу өҫтөндә һәм шулар иҫәбендә үҙебеҙҙең ауылдың уртаһынан аҡҡан Кесе Нөгөш, Оҙон ялан йылғаларың да хәлдәре мөшкөл.Эпоста башҡа бик күп экологик проблемалар күтәрелә.

Бөгөн эсәр һыуыбыҙҙың бысраныуы бар әҙәмде борсоуға һала. Ағиҙелдең («аҡ» «Иҙел» – саф, таҙа һыулы Иҙел тигәнде аңлата) исеме генә ҡалып бара. Бик борсолдора.

Урал батыр бысраҡ – ағыулы һыуҙы эсмәҫкә, бәлә-казанан йыраҡ булырға, йәғни кешелекте хәүеф- хәтәрҙән ҡурсаларға саҡыра.

Урал үҙенең улдарына, халҡына ла тәбиғәт матурлығын һаҡлауҙы васыят итеп әйтә. Был васыят – бөтә халыҡҡа аманат булып яңғырай.

Донъяла мәңге ҡалыр эш –
Донъяны матур төҙөгән,
Бағты мәңге биҙәгән –
Ул да булһа яҡшылыҡ.
Күккә лә осор – яҡшылыҡ,
Һыуға ла батмаҫ – яҡшылыҡ,
Утта ла янмаҫ – яҡшылыҡ,
Телдән дә төшмәҫ – яҡшылыҡ, –

тигән юлдарҙа Урал батыр Йәншишмә һыуын бар тереклек йәшәрлек шарт тыуҙырыуға файҙаланыу кәрәклегенә төшөндөрә.

Нөгөш, Һаҡмар, Яйыҡ, Иҙел ата һүҙен тота – кешелеккә хеҙмәт итеүгә бөтә көсөн һала, халҡым йәшәйешендә тәбиғәт күрке булып йәшәүен дауам итә, яуызлыҡ символы булған Шүлгән дә һыуҙан бәрәкәт таба.

Эпоста ғаилә тәрбиәһенә ҡағылышлы юлдар күп. Бөгөн ғаиләлә атайҙарҙың ролен күтәреү, бала менән атай араһындағы мөнәсәбәтте нығытыу, ғаиләлә татыулыҡ булдырыу, атайҙарҙың ғаилә терәге генә түгел, ил терәге икәнлеген аңлатыу, шәжәрәнең атайҙарҙан башлап төҙөлөүен төшөндөрөү мөһим.

Эпоста төп иғтибар баланың холоҡ-фиғелен тәрбиәләүгә йүнәлтелә. Урал менән Шүлгән бала-саҡта тыйыу алымы менән тәрбиәләнһә, үҫкәс, ҡарт менән ҡарсыҡ уларға үҙ яҙмыштарын хәл итеүгә ирек бирә. Характерҙарының артабан формалашып етеүенә иһә айырым кешеләр, хәл ваҡиғалар ҙур йоғонто яһай. Был Уралдың Аҡҡош (Һомай) менән, Шүлгәндең Зәрҡүм һәм Ҡатил башта менән осрашыуында күренә.

“Атанан ала ла тыуа, ҡола ла тыуа”, ти, халыҡ мәҡәле. Бер үк ғаиләлә тәрбәиәләнгән Шүлгән менән Уралдың ҡылыҡтары ҡапма-ҡаршы. Икеһе лә һау-сәләмәт, көслө, арыу-талыуҙы белмәйҙәр, ләкин береһе – көр күңелле, кешелекле, тик яҡшылыҡ теләүсе, изгелеккә ынтылыусы, халыҡ өсөн йәнен-тәнен аямаусы, тәбиғәткә үлемһеҙлек

бүләк итеүсе. Ул аҡыл менән эш итә. Үҙенең ҡылған ыңғай һәм кире ҡылыҡтары хаҡында уйлана.

Урал батыр яҡшылыҡ, изгелек символы булараҡ еңеп сыға. Эпоста халыҡтың изге йолаларын, ғөрөф-ғәҙәттәрен боҙмаҫҡа ишара яһай.

Бөгөнгө тормошта йыш осраған уғрылыҡ, аҙғынлыҡ, ҡаты бәғерлелек, үлтереш кеүек кире күренештәр – иманһыҙлыҡ билдәһе. Эпосты уҡып, фәһем алған һәр кеше был насар күренештәрҙән азат булыр. Йәш үҫмерҙәр араһында эскелек, наркомания кеүек яман сирҙәр таралыуы – заман бәләһе. “Урал батыр” эпосында Шүлгән атай рөхсәтенән тыш ҡарбырсаҡтан ҡан эсә. Ҡан – һыу түгел, ул “быуыны ҡатмаған” бала өсөн ағыуға тиң. Яңылыш юлға баҫҡан бала киләсәктә кешелек сифаттарынан яҙып эскесегә, наркоманға әйләнеүенә ишара яһай был мәшһүр эпос. Боронғолар уның яманлыҡ икәнлеген анлаған һәм үҙ фекерен киләсәк быуынға васыят итеп калдырған.

"Урал батыр" эпосының милли үҙаң, милли рух тәрбиәләүҙәге әһәмиәте ҙур. 4000 йыл элек ижад ителгән был ҡомартҡы уҡыусыларҙы тыуған ер ҡәҙерен белергә өйрәтә, ил тәрәге булған батырҙарға, ил ағаһы булыр аҡһаҡалдарға ихтирам тәрбиәләүе ҙур әһәмиәткә эйә.

Тыуған ер, тыуған тупраҡ, тыуған ауыл, атай йорто – һәр кем өсөн изге төшөнсәләр. Кешеләге бөтә изгелек тыуған ерҙән, атай йортонан, изге шишмәләрҙән башлана. Урал образы ошондай маҡсатка яуап биреүсе булараҡ ҡиммәтле. Донъя йәмен, донъя именлеген үҙ ғүмеренән дә артыҡ күргән батыр үҙенә тип йыйылған тере һыуҙың тамсыһын да йотмайынса тирә-йүнгә бөркә. Халҡын үлемһеҙ, ер-һыуын мәңге тере итеп күрергә теләгән батыр, халыҡ бәхете, ил кото, мәңгелек йәшәйеш өсөн ғүмерен фиҙа ҡыла.

Дөйөм алғанда, кеше ғүмере йылдар иҫәбе менән түгел, ер йөҙөндә, кешеләр күңелендә ҡалдырған изгелек, яҡшы эштәр менән үлсәнә. Өҙәмде был донъяла кеше итеп йәшәтеүсе матур, күркәм ғәҙәттәр һәм әхләҡи ҡиммәттәр бар. Был әҙәп һәм әхләҡ ҡанундарын беҙ халыҡ ижады аша, мәшһүр "Урал батыр" эпосы аша тәрбиәләй алабыҙ. Эпостағы һәр һүҙҙә төплө фекер, аҡыл бирелгән. Киләсәк быуын күңеленә тәрбиә орлоҡтарын һалыу – һәр кешенең мөҡәддәс бурысы.

Шулай итеп, яҡты зиһенле, зирәк аҡыллы, атай-олатайҙарыбыҙ ҡалдырған яҡшылыҡ, изгелек ҡанундарынан тайпылмаһаҡ, милләт булып һакланырбыҙ, үҙ сәнғәтебеҙҙе үҫтерербеҙ, тарихыбыҙҙы, шәжәрәләребеҙҙе өйрәнеүҙе дауам итербеҙ, рухи ҡомартҡыбыҙҙы донъя кимәленә танытырбыҙ.

Урал батыр васыятына тоғро ҡалып, йәмғиәтебеҙгә, халҡыбыҙға кәрәкле кеше булып, һәр саҡ яҡшылыҡҡа ынтылып, тирә-йүнгә "изгелек орлоҡтарын" сәсеп, намыҫлы, иманлы булып йәшәйек.

**Әҙәбиәт**


1. Башҡорт халыҡ эпосы «Урал батыр» . Өфө; Китап, 2017.
2. «Таң» гәзите. №73(9701). 2014.
3. «Таң» гәзите. №51(10083). 2017.
4. « Таң» гәзите. №52(9980). 2016.


© Мурзабулатова Г.А., Ярмухаметова Г., 2024

## ФӘННИ СМЕНА.
## БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫ ЮҒАРЫ УҠЫУ ЙОРТТАРЫ СТУДЕНТТАРЫ ТИКШЕРЕНЕҮҘӘРЕНДӘ ФОЛЬКЛОРҘЫ ӨЙРӘНЕҮ

## НАУЧНАЯ СМЕНА.
## ИЗУЧЕНИЕ ФОЛЬКЛОРА В ИССЛЕДОВАНИЯХ СТУДЕНТОВ ВУЗОВ РЕСПУБЛИКИ БАШКОРТОСТАН

УДК 372.881

***Абдрахманова З.Р.,***
*студент БГПУ им. М. Акмуллы,*
*г. Уфа*

# ПОЛИЛИНГВАЛЬ БЕЛЕМ БИРЕҮ ОЙОШМАЛАРЫНДА ФРАЗЕОЛОГИЯНЫ ӨЙРӘНЕҮГӘ МЕТОДИК ТӘҠДИМДӘР

# МЕТОДИЧЕСКИЕ РЕКОМЕНДАЦИИ ДЛЯ ПОЛИЛИНГВАЛЬНЫХ ОБРАЗОВАТЕЛЬНЫХ ОРГАНИЗАЦИЙ

**Аннотация.** Обсуждается методика обучения фразеологизмам башкирского языка в сопоставительном виде. Предлагается методический подход, позволяющий использовать фразеологизмы как материал для активизации коммуникативной компетенции.

**Ключевые слова**: полилингвальное образование, фразеологическая единица, эквивалент.

Телдәрҙе сағыштырма өйрәнеүҙең төп идеяһы – телдәр араһындағы оҡшашлыҡтарҙы һәм айырмалыҡтарҙы асыҡлау, шул рәүешле өйрәнеүселәргә уларҙы һөҙөмтәле үҙләштерергә ярҙам итеү. Был ысул ике телдең грамматик структураһын һәм лексикаһын, шулай уҡ фонетик үҙенсәлектәрен сағыштырыуға нигеҙләнә, был уҡыусыларға материалды яҡшыраҡ аңларға һәм иҫтә ҡалдырырға ярҙам итә.

Телдәрҙе сағыштырма өйрәнеүҙең өҫтөнлөктәре:

1. Ике телде лә тәрәнерәк аңлау: сағыштырма өйрәнеү уҡыусыларға грамматиканы һәм лексиканы яҡшыраҡ аңларға мөмкинлек бирә, сөнки улар араһындағы оҡшашлыҡтарҙы һәм айырмалыҡтарҙы сағыштыра;
2. Материалды яҡшыраҡ хәтерләү: телдәрҙе сағыштырыу уҡыусыларға телдең үҙенсәлектәрен яҡшыраҡ иҫтә ҡалдырырға ярҙам итә, сөнки улар өйрәнелгән белемде яңы контекста ҡуллана ала;
3. Тел күнекмәләрен үҫтереү: сағыштырма уҡыу уҡыусыларға ике телдә бер үк ваҡытта уҡыу, яҙыу, һөйләү һәм тыңлау кеүек тел күнекмәләрен үҫтерергә ярҙам итә;
4. Мәҙәни аңлауҙы киңәйтеү: телдәрҙе өйрәнеү уҡыусыларға телдәрҙең мәҙәниәте һәм традициялары тураһында күберәк белергә мөмкинлек бирә.

Дөйөм алғанда, телдәрҙе сағыштырмаса өйрәнеү ике телде лә һөҙөмтәлерәк үҙләштерергә теләгән уҡыусылар өсөн файҙалы алым булып тора. Ул телдәрҙе сағыштырырға мөмкинлек бирә, был уҡыусыларға уларҙы яҡшыраҡ аңларға һәм практик контекста ҡулланырға ярҙам итә.

Мәктәптә фразеологияны өйрәнеү практик йүнәлешле була, шуға күрә дәреслектәрҙе әҙерләүселәр, беренсенән, алынған белемде нығытыуға һәм уҡыу-тел фразеологик күнекмәләрен формалаштырыуға йүнәлтелгән күнегеүҙәр типологияһын әҙерләүгә, икенсенән, уҡыусыларҙы фразеология буйынса белемде бәйләнешле әйтемдәрҙә ҡулланырға өйрәтеүгә ҙур иғтибар бүлә. Бының өсөн дидактик материал тәҡдим ителә, уны иншаларға һәм изложениеларға әҙерләнеү

өсөн, шулай уҡ орфографик оҫталыҡты һәм күнекмәләрҙе нығытыу өсөн ҡулланырға мөмкин.

Фразеологияны өйрәнеү уҡыусыларҙың башҡорт теленең һүҙлек составы байлығы тураһында төшөнсәһен киңәйтә, уларҙың фәнни донъяға ҡарашын формалаштырыуға ярҙам итә, уҡыусыларҙың телдәге тарихи үҙгәрештәр тураһында төшөнсәһен тәрәнәйтә, уларҙың телмәрен фразеологизмдар менән байыта.

Мәктәптә өйрәнелгән барлыҡ фразеологик күренештәр тураһында түбәндәге мәғлүмәттәр бирелә: төшөнсәнең билдәләмәһе, телдең функцияһы, аңлатмалы һүҙлектә сағылдырыу ысулы, художестволы әҫәрҙәрҙә ҡулланыу маҡсаты тураһында мәғлүмәт бирелә. Бынан тыш, фразеологизмдарҙы төрлө функциональ стилдәрҙә ҡулланыу үҙенсәлектәре тураһында мәғлүмәттәр бирелә.

Фразеологизмдар тураһында уҡыусылар түбәндәгеләрҙе белергә тейеш: фразеологизмдарҙың билдәләмәһе, һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәр менән оҡшашлыҡ билдәләре, фразеологизмдың лексик мәғәнәһе булыу-булмауы, фразеологизмдар араһында синонимдар һәм антонимдар, фразеологизмдарҙың художестволы әҫәрҙәрҙәге роле, фразеологизмдарҙы аңлатмалы һүҙлектәрҙә сағылдырыу ысулы.

Фразеологияны өйрәнгәндә уҡыусыларҙа уҡытыу-тел фразеологик күнекмәләре формалаша.

Уҡыусылар ошоларҙы белергә тейеш:

- фразеологизмдың лексик мәғәнәһен грамматик мәғәнәһенән айырыу;
- фразеологизмдарҙы фразеологизм булмағандан айырыу;
- фразеологизмдарҙың контекста ниндәй мәғәнәлә ҡулланылыуын билдәләү;
- өйрәнелгән фразеологик күренештәрҙе контекста табыу;
- өйрәнелгән фразеологизмдарҙы иҫтә ҡалдырыу;
- һөйләмдә фразеологизмдарҙы ҡулланыу;
- фразеологизмдарҙы төрлө сифат буйынса төркөмләү;
- фразеологик һүҙлектәр менән файҙаланыу.

Тәҡдим ителгән күнегеүҙәр комплексы башҡорт теле дәрестәрендә фразеологик берәмектәрҙе уңышлы өйрәнеүгә мөмкинлек бирә.

1-се күнегеү. Бирелгән фразеологик берәмектәрҙең мәғәнәһен яҙығыҙ.

1. Аҡылға ултыртыу 6. Бежать, сломя голову
2. Тарихта эҙ ҡалдырыу 7. Кто в лес, кто по дрова
3. Эт һуғарыу 8. Спустя рукава
4. Араларынан ҡара бесәй үтеү 9. Встать не с той ноги
5. Ҡаш менән күҙ араһында 10. С гульгин нос

2-се күнегеү. «Күҙ», «глаз», «eyes» һүҙе булған фразеологизмдарҙы яҙып алығыҙ.

3-сө күнегеү. «Эт менән бесәй шикелле», «to let the cat out of the bag» фразеологизмдары нисек барлыҡҡа килгән тигән һорауға яуап бирегеҙ. Фразеологизмдар һүҙлегенә мөрәжәғәт итегеҙ, мәғәнәһен асыҡлағыҙ.

4-се күнегеү. Тәүҙә «алдау – врать – to lie» мәғәнәһендәге фразеологизмдарҙы яҙығыҙ, артабан «эшһеҙлек – безделье – idleness» һәм «тиҙ генә – быстро – quick» мәғәнәһендәге фразеологизмдарҙы яҙығыҙ.

5-се күнегеү. Фразеологизмдың өлөштәрен берләштерегеҙ. Килеп сыҡҡан фразеологизмдарҙың башҡорт һәм инглиз эквивалентын табығыҙ.

| |
|---|
| Глаза негде упасть как сыр<br>Кот не клюют<br>наплакал<br>разбежались куры яблоку<br><br>в масле кататься |

6-сы күнегеү. Буш ояларҙы тултырығыҙ.

| Башҡорт фразеологизмы | Рус фразеологизмы | Инглиз фразеологзмы |
|---|---|---|
| башҡа менеү | | |
| | Мастер на все руки | |
| | | A drop in the ocean. |
| донъя күреү | | |

Шулай итеп, дөрөҫ һайланған күнегеүҙәр, ысулдар һәм алымдар уҡыусыларҙа фразеологик берәмектәрҙе өйрәнеүҙең уңышлы булыуына ыңғай мотивация үҫтереүгә булышлыҡ итә.

**Әҙәбиәт**


1. Ураксин З.Г. Русско-башкирский фразеологический словарь. Под ред. Э.Р. Тенишева. – М., 1989. – 404 с. – Режим доступа: https://vk.com/doc704697_453229492?hash=a0xdEcomUX2fo6CbQJZB9NOwZvPZ34bpARF8YBHaszL&dl=Bc3wrffHr24Y6xwBkMmNUOp6KhUITUilI7PcApdHxoT . – Дата обращения: 2.05.2024
2. Ураҡсин З.Ғ. Башҡорт теленең фразеологик һүҙлеге. – Яңыртылған, 2-се баҫма. – Өфө: Китап, 2006. – 344 бит. – Режим доступа:https://kitaptar.bashkort.org/files/Башҡорт%20теленең%20фразеологик%20һүҙлеге.pdf. – Дата обращения: 1.05.2024.


©Абдрахманова З.Р., 2024

УДК 82.512.141

***Абдулова Л.А.,***
*студент СФ УУНИТ.*
*(науч. рук.: к. филол. н, доцент Фаткуллина Р.Х.),*
*г.Стерлитамак*

## КОСМОГОНИЧЕСКИЕ ВОЗЗРЕНИЯ ДРЕВНИХ БАШКИР В ЭПОСЕ «АКБУЗАТ»

**Аннотация.** В данной статье рассмотрен эпос «Акбузат». Были изучены особенности эпоса, представляющие воззрения древних башкир. Описываются взгляды башкир на свое происхождение и историю. Приведены примеры космогонических воззрений.

**Ключевые слова:** эпос, батыр, космогония, народное творчество.

Фольклор тюркских народов очень богат и многогранен, в нем сохранились предания, воззрения и традиции родственных народов. Через народное творчество современный читатель может узнать историю своих предков, их устои и взгляды на жизнь. Эпосы являются прекрасным источником для глубоких исследований по философии, мифологии, этнографии народов. Так, эпос «Акбузат» богат фольклорно-этнографическим материалом башкирского народа.

Эпос – (от греческого рассказ) – произведение эпического и лиро-эпического характера (преимущественно героического содержания), рассказывающее об этнической и гражданской истории народа [Ахмедьянов, 2018: 276].

Данный эпос записал Мухаметша Бурангулов во время научной экспедиции по Республике Башкортостан в 1917 году. Эпос повествует о событиях после смерти Урал батыра. Главный герой – Хаубан, сын Сура-батыра, продолжает дело своего отца, деда Иделя и прадеда Урал-Батыра. Главный герой борется за счастливое будущее своего народа, стремится к тому, чтобы башкиры жили в спокойствии и свободе.

В эпосе «Акбузат» Хаубан отправляется в подводное царство Шульгена в поисках украденного дивами Акбузата и алмазного меча Урал-батыра. Он уничтожает дэвов (дейеу) и драконов, разрушает подводное царство, в котором обитает злой и коварный правитель Шульген. Из его царства Хаубен освободил крылатого коня-тулпара Акбузата, потомки которого и поныне верой и правдой служат людям. Вместе с конём он возвращается на землю и освобождает свой народ от рабства хана Масима. После возвращается к озеру и разрубает правителя подводного царства на мелкие кусочки, а обитателей превращает в змей, жаб и летучих мышей. Спасает семерых батыров: Кыпсак Батыра, Катай Батыра, Токлес Батыра, Тамъян Батыра, Юрматы Батыра и Табын Батыра, основателей семи башкирских родов. Разгромив врагов и освободив украденных дивами девушек, Хаубан женится на дочери подводного царя Нэркес.

Космогония – наука, изучающая происхождение и развитие мира и космических тел [Плотин, 1995: 27]. Рассмотрим примеры космогонических воззрений башкир в эпосе «Акбузат».

Оригинал: «...Борон-борон саҡта бөтә донъяны һыу бахҡан, беҙҙең олатайҙар бумаған, Урал тауы сыҡмаған, бы тирәлә дүрт аяҡты йән йөрөмәгән. Тик дейеүҙәр йәшәгән, һыу батшаһы ғына баш буған саҡта, Урал тигән батыр килеп яу асҡан. Уның Аҡбуҙ толпары юлынан Урал тауы бар буған…» [Башкирское народное творчество,1998: 143].

Перевод на русский: «...Когда-то давно весь мир водой был затоплен. В наших местах не было ни людей, ни зверей и не проступили еще Уральские горы. И царствовал здесь водяной батша Шульген – повелитель страшных дивов. Вот тогда и появился батыр по имени Урал, и пошел он на злого батшу войной. Там, где прошел его конь Акбузат – выросли Уральские горы...» [Онлайн-библиотека «ЛИБКАТ»: 3].

В данном отрывке мы видим взгляды башкир на появление мира – первоначально был только водный хаос, также водная стихия упоминается в большинстве башкирских мифов, не было животных и людей, Уральские горы и сухая земля появилась после побед над дивами.

В древних верованиях башкир водной стихии присуща двойственность. С одной стороны, она враждебная человеку среда, где человек не может жить и там властвуют существа, противостоящие всему живому. С другой же стороны, царь подводного мира одаривает земного батыра скотом и другим состоянием [Аминев, 2005: 6].

Башкиры верили, что Уральские горы появились в результате деятельности Урал-батыра и названы предками в его честь, также они верили в мистические силы озера Шульгана, поэтому боялись и опасались этого места:

Оригинал: «...Урал батырҙың ат йөҙҙөрөп кигән юлында тау барҙыҡҡа килгән. Дейеүҙәре күп үлгән һайын, ҡоро ер күбәйгән. Шунан аның торҙағы күләүек күләүектәрҙә генә ҡалған. Көсө бөткәс, һыу батшаһы ошо Шүлгән күлгә килеп урындашҡан. Шүлгән күл ер ахтындағы һыуға тоташҡас, уны бөтөрә алмағандар. Батша шунда йәшәп ҡалған. Хәҙер Урал йөрөгән тау – Урал батырҙың улдары тәү баштап яуға кигән юлы ул. Ирем үлер сағында улдарына: «Шүлгән батша ғәскәре ҡалған урындан һыу эсмәгеҙ. Үҙегеҙгә һыу табағыҙ» тигән. Улар ерҙе тишеп, йылға ағыҙғандар. Бына хәҙерге дүрт йылға – Иҙел, Яйыҡ, Һаҡмар, Нөгөш – шуларҙың ағыҙған йылғалары...» [Башкирское народное творчество, 1998: 174].

Перевод на русский: «...Там, где проплывал Урал-батыр, поднимались горы. Уральские горы – это и есть дорога Урал-батыра. Где Урал-батыр убивал дивов – поднимались скалы. И настало такое время, когда пристанищем батши остались лишь мелкие лужи да озеро, названное Шульгеном. Оно сливалось с подземными водами, и батыры не могли высушить его до дна. Тут батша и стал жить. А горы назвали в честь батыра – Уралом. Умирая, он дал такой наказ: «Там, где остались войска Шульгена, воду гнилую не пейте, ищите себе чистую воду» И сыновья его, прорубив горы, открыли новые

реки, носящие ныне имена батыров: Идель, Яик, Хакмар, Нугуш...» [Онлайн-библиотека «ЛИБКАТ»: 16].

В отрывке описано появление рек и их названий – Идель, Яик, Хакмар и Нугуш, они названы в честь сыновей Урал батыра и сохраняют свои имена и сегодня. Башкиры верили, что реки появились благодаря батырам.

В башкирском фольклоре этноним какого-либо рода или племени часто становится именем батыра. Или, наоборот, с именем батыра связывается какое-нибудь племя. В данном сказании упоминаются имена батыров – родоначальников своих племен, либо им даны имена в честь их рода:

Оригинал: «...Иҙел батыры Ҡыпсаҡты
Ирәмәл батыры Ҡатайҙы
Яйыҡ батыры Төкләһте,
Тора батыры Тамъянды
Яланда Ирәндекте
Нөгөш батыры Юрматты
Үҙән батыры Табынды
Ҡымтып торған дейеү!...» [Башкирское народное творчество, 1998: 175].

Перевод на русский:
«...Кыпсака – батыра Идели,
Катая – батыра Иремели,
Тукляса – батыра Яика,
Тамьяна – батыра Тора,
В степях Ирендыка
В Нугуше – Юрматы,
На Узяне – Табына,
В тисках своих всех державший!...» [Онлайн-библиотека «ЛИБКАТ»: 17].

Легенды о семи башкирских племенах находят свое отражение древнее мифологическое мировоззрение народа.

Изучая мифологическое мировоззрение древних народов, известный исследователь Евсюков В.В. пришел к выводу: «В главных своих чертах картина мира у большинства народов повторяется с некоторыми вариациями. Мироздание имеет весьма устойчивое число параметров. Прежде всего оно делится на две части: мир естественный и мир сверхъестественный, а по вертикали состоит минимум из трех частей. Горизонталь разбивается на четыре части с особо отмеченной точкой в центре. Итого важнейших координат получается ровно семь: четыре страны света, центр, верх, низ. Думается именно этим следует объяснить громадную популярность семерки – ведь она описывает собой основные параметры Космоса» [Аминев,2005: 98].

Яблоко в эпосах может быть связано с потусторонним миром, или символом начала нового времени. В связи с этим яблоком можно найти ему параллель в мифологии скандинавских народов. У башкир яблоко встречается в фольклорных произведениях. Например, в эпосах «Урал батыр» или «Акбузат», в котором царь Масим дает своей дочери Айхылыу яблоко, которое она должна вручить самому достойному батыру:

Оригинал: «...Бына, ҡыҙым, бер алма, Батырҙарынды һайҙа,
Сорғот алмам алдына,
Күнгән батыр шартыма
Алмаң алыр ҡулыңдан,
инең күргән ҡарсыҡты
Апкилер шу Шүлгәндән» [Башкирское народное творчество, 1998: 166].

Перевод на русский:
«Даю тебе, дочь, яблоко,
Вручишь его тому егету,
Кто мою волю решится исполнить –

Приведет к нам старуху

Из озера Шульгена...» [Онлайн-библиотека «ЛИБКАТ»: 13].

Таким образом, эпос «Акбузат» является одним из основных памятников устного творчества башкирского. В эпосе много информации об этнографии, примеров космических воззрений и представлений башкир о мире вокруг них.

**Литература**

1. Аминев З.Г. Космогонические воззрения древних башкир. Уфа: Башлингвоцентр, 2005. 140 с.
2. Ахмедьянов К. А. Теория литературы. Уфа: Китап, 2018. 400 с.
3. Онлайн-библиотека «ЛИБКАТ». Перевод эпоса Акбузат: https://libcat.ru/knigi/starinnaya-literatura/mify-legendy-epos/428202akbuzat.html (дата обращения – 23.04.2022).
4. Плотин. Космогония. К.: Ваклер, 1995. 304 с.
5. Башкирское народное творчество. Том 3. Эпос. Уфа: Китап, 1998. 448 с.

© Абдулова Л.А., Фаткуллина Р.Х., 2024

УДК 394-3

***Абдыкаимов З.,***
*студент БГПУ им. М. Акмуллы*
*(науч. рук.: канд.ист. наук, доцент Шагапова Г.Р.),*
*г.Уфа*

## НАРОДНЫЕ ИГРЫ В ЭПОСЕ «МАНАС»

**Аннотация.** Статья посвящена рассмотрению национальных игр в эпосе «Манас», а также дается их описание.

**Ключевые слова**: кыргызский народ, эпос «Манас», альчики, игра ордо , эр эниш , тогуз коргоол.

Актуальность данной темы состоит в изучении и понимании киргизской культуры и истории. В эпосе «Манас» содержится множество описаний народных игр, которые являлись важной частью жизни киргизского народа. Эти игры отражают не только развлекательную сторону культуры, но и социальные, моральные и духовные ценности общества. Изучение народных игр в контексте эпоса «Манас» позволяет лучше понять традиции, обычаи и образ жизни киргизского народа, а также увидеть, какие ценности и навыки ценились в том времени. Это также помогает сохранить и передать будущим поколениям уникальное культурное наследие. Таким образом, тема народных игр в эпосе «Манас» имеет большое значение для изучения киргизской культуры и истории, и ее актуальность остается важной и сегодня.

В трилогии «Манас» описывается более 30 традиционных игр и состязаний кыргызов. В доступной литературе имеется богатый фактический материал, касающийся исследуемой темы. Анализ данных показывает, что в эпоху феодализма народные игры и богатырские состязания развивалась в тесной связи с кочевым образом жизни, скотоводческим хозяйством и военными событиями. Игры и состязания кыргызов эпохи феодализма можно классифицировать как: военно-физические упражнения; мужские состязательные пешие игры; конные спортивные игры и состязания; подвижные игры; игры развивающие умственные способности; забытые и запрещенные игры; традиционные игры; ролевые игры для детей и подростков [Молдобаев, 1989: 114-127].

Ниже пойдет речь о четырех самых известных играх из эпоса «Манас».

«Тогуз Коргоол» – игра на специальной доске с ямами и камнями. Игроки перемещают камни по доске в определенном порядке в зависимости от правил игры. Цель

игры заключается в том, чтобы захватить камни противника и набрать как можно больше очков. Эта игра описана в Эпосе Манас следующим образом.

| | |
|---|---|
| Жалпак жыгач чаптырып | Выстрогав доску, |
| Чараларын оюшуп, | Лунки в ней выдолбив |
| Бир жагына бир тогуз, | С одной стороны девять, |
| Бир жагына бир тогуз | И с другой стороны девять |
| Үй чыгарып оюшуп, | Посредине еще две лунки |
| Ою менен олтуруп, | выдолбив, |
| Ташын салып толтуруп, | Сколько хотели, сидели |
| Тогуз коргоол ойгону | (за игрой) |
| [Сагынбай Орозбак уулу …, 1978: 154] | |

Чүкө (чюке). Другое название игры – ашык. Одна из древних и значимых игр кочевых кыргызов считаются игры в чюкѐ – игры с астрагалами. В кыргызско-русском словаре К.К. Юдахина альчикам дается следующее определение: чюкѐ – «коленная косточка овцы или козы» [Юдахин, 1965].

Игры в альчики известны всем кочевым тюркским народам. Их название различны: на казахском – асық, по узбекски – oshiq, по-туркменски – aşık, на башкирском – ашык и т.д. [Шагапова, 2020]

Но как бы не называлась игра, ее суть состояла в том, чтобы выбить кости из круга при помощи другой кости. Чюке в ребенке воспитывает точность, меткость, сила, умение думать и планировать, стратегию и пр, то есть то, что необходимо будущему воину, меткому стрелку.

Ордо. В эпосе главный герой Манас со своими 40 чоро (джигитами) играли в ордо. По правилам игры чертится большой круг, и никто кроме игроков не имел права наступать на черту, так как он олицетворял границы государства. Эпизод в эпосе говорит о том, что шпионы, посланные китайским ханом Эсенханом, специально пересекли эту черту на своих верблюдах во время игры в ордо Манаса и его доузей. Тогда разгневанный Манас одним ударом своего томпоя (бита из коленной кости быка) сломал ноги двум верблюдам.

Разгневанный Манас
Ударяет одним альчиком.
Попадает в ногу
Верблюду Эсенкана
Нога сломана,
Кызыл нар падает…[Сагынбай Орозбак уулу …, 1978: 154]

Тогда удивленные таким поведением калмыки спрашивают: «Что это за игра, из-за которой можно было так разгневаться?». Как пишет Б.Солтоноев: «Игру в Ордо нельзя воспринимать лишь как игру. Начерченный круг – это крепость, посередине, окруживши хана, выстроенные альчики – войска хана [Молдобаев, 1989: 114]. Игра в ордо своего рода, стратегия и тактика внешней и внутренней политики государства, для кыргызов не просто игра, в ней заключен свод правил и законов кочевого образа жизни.

Эр эңиш. В эпосе «Манас» в тризне «Поминки по Кокетаю» также упоминается о борьбе верхом на коне – эр эңиш. Так, выступающий в качестве «жарчы» (глашатай) сын Ырамана Ырчы уул говорит:

Алар эңиш салсын деп,
Чабандеси женсин деп,
Көк бөрү кылга нулактай,
Көрүнөө аттан эңсин деп.

Пусть они начнут борьбу эниш,

Пусть сильнейший победит.

Словно козленка в игре кокбору.

Перед нами кыргызская поясная борьба куреш, которая имеется и сегодня в культуре кыргызского этноса. Подробно эту борьбу описал советский русский ученый Г.Н. Симаков в книге «Общественные функции киргизских народных развлечений в конце XIX начале XX вв.» [Симаков, 1984: 74].

Таким образом, в эпосе «Манас» из тридцати игр дано описание преимущественно мужских (юношеских) игр, которые развивают навыки воина – силу, ловкость, выносливость, а также гибкость мышления, стратегические навыки.

**Литература**


1. Эпос "Манас" как источник изучения духовной культуры киргизского народа / И. Б. Молдобаев; АН КиргССР, Ин-т истории. - Фрунзе : Илим, 1989. - 148,
2. Сагынбай Орозбак уулу «Манас» эпосу. Фрунзе: Кыргызстан, 1978. – с 2-китеп. – 172-бет.
3. Симаков Г.Н. Общественные функции киргизских народных развлечений в концеXIX–началеXX–вв. – Л.: Наука,1984. – 230 с.
4. Шагапова, Г. Р. Альчики и кости: Древняя евразийская игра / Г. Р. Шагапова // Томский журнал лингвистических и антропологических исследований. – 2020. – № 4(30). – С. 161-175.
5. Юдахин К.К. Русско-кыргызский словарь. – М.: Советская энциклопедия, 1965. – 503 с.


© Абдыкаимов З. М., 2024

УДК 82.512.141

***Байғускаров Б.З.,***
*ӨФһТУ-ның СФ студенты*
*(ғилми ет.: филол. ф.к., доцент Фәтҡуллина Р.Х.),*
*Стәрлетамаҡ ҡ.*

***Байгускаров Б.З.,***
*студент СФ УУНиТ*
*(науч. рук.: к. филол. н.,, доцент Фаткуллина Р.Х.),*
*г. Стерлитамак*

## АЛТАЙ ЭПОСЫ “КАЙ” ҺӘМ БАШҠОРТ ЭПОСЫ “УРАЛ БАТЫР”

## АЛТАЙСКИЙ ЭПОС “КАЙ” И БАШКИРСКИЙ ЭПОС “УРАЛ БАТЫР”

**Аннотация.** В данной статье изучаются сходства и различия в идейно-тематическом содержании, образной системе, поэтике алтайского эпоса “Кай” и башкирского эпоса “Урал-батыр”.

**Ключевые слова**: фольклор тюркских народов, героическийэпос, сюВжет, образная система.

Алтай халыҡ эпосы «Кай» – Алтай төбәгендә барлыҡҡа килгән иң билдәле һәм ҡеүәтле рухи ҡомартҡыларҙың береһе. Был эпос алтай халҡының үҙенсәлекле булмышын һәм мәҙәниәте үҙенсәлектәрен сағылдыра.

Эпостың төп геройы – Кай, ул ҡеүәтле һәм батыр яугир итеп һүрәтләнә. Кай образында беҙ алтай халҡының идеалын, азатлыҡ хаҡында мәңгелек хыялын күрәбеҙ. Эпостың образдар системаһы – Кайҙың ғаиләһе, дуҫтары, дошмандары, аҡһаҡалдар батыр образын асыуҙа ярҙам итә.

Әҫәрҙең сюжет үҙенсәлектәренә килгәндә, үҙәктә – Кайҙың тормошо һәм эшмәкәрлеге. Эпос унын яуызлыҡ менән көрәшен һәм ерҙә яҡшылыҡ урынлаштырыуын һүрәтләй. Кай ҡырағай йәнлектәр һәм яуыз заттар кеүек төрлө йән эйәләре менән көрәшә, халҡын яҡлау һәм үҙенең ысын яҙмышына өлгәшеү өсөн күп һынауҙарҙы еңеп сыға.

Алтай эпосы "Кай" алтай халҡының донъяға ҡарашын кәүҙәләндерә. Унда халыҡтың тәбиғәт көстәренә, тылсымлы донъяға ышаныуҙары сағыла. Тәбиғәт һәм тирә-яҡ мөхит менән бәйле йолалар – эпостың мөһим компоненттары. "Кай" эпосы шулай уҡ алтай йәмғиәте өсөн мөһим булған батырлыҡ, намыҫлылыҡ идеалдарының кәүҙәләнеше булып тора.

"Кай" эпосы алтай халҡы өсөн генә түгел, ә бөтә донъя рухиәте өсөн ҙур әһәмиәткә эйә. Ул алтайҙарҙың тарихи һәм мәҙәни хәтерен һаҡларға, киләһе быуындарға тапшырырға, шулай уҡ башҡаларҙы был халыҡтың мәҙәниәте менән таныштырырға ярҙам итә. Эпос шулай уҡ Себер халыҡтарының мәҙәниәте һәм ышаныуҙары үҙенсәлеген һәм төрлөлөгөн сағылдыра.

"Кай" алтай эпосының төп элементтарының береһе булып тәбиғәт һәм кеше араһындағы бәйләнеш тора. Алтай халҡы һәр ваҡыт тәбиғәт менән тығыҙ бәйләнештә йәшәгән. "Кай" эпосында йыш ҡына сюжет үҫешендә мөһим роль уйнаған һәм кеше менән тәбиғәттең гармониялы йәшәүен һыҙыҡ өҫтөнә алған тауҙар, йылғалар, урмандар һәм башҡа тәбиғәт күренештәре телгә алына.

Шулай уҡ "Кай" эпосында ата-бабаларға һәм аҡһаҡалдарға тәрән ихтирам һүрәтләнә. Алтай мәҙәниәтендә ата-бабаларға хөрмәт төп ҡиммәттәрҙең береһе булып һанала. Ата-бабалар үҙҙәренең аҡылын һәм тормош тәжрибәһен киләсәк быуындарға тапшырыусы изге заттар тип күрһәтелә.

"Кай" эпосының тәрән символик әһәмиәткә эйә булыуын билдәләргә кәрәк. Эпостағы күп кенә ваҡиғалар һәм персонаждар изгелек һәм яуызлыҡ, яҡтылыҡ һәм ҡараңғылыҡ, еңеү һәм еңелеү кеүек мөһим архетип образдарҙы һәм донъяуи ҡараштарҙы сағылдыра. Был символдар тәрән фәлсәфәүи һәм этик идеяларҙы мифологик һүрәтләүҙәр аша еткерергә ярҙам итә.

Һәм, ниһайәт, алтай эпосы "Кай" – йәш быуын өсөн аҡыл сығанағы ул. Кайҙың мажаралары, дошмандар менән көрәштә ҡаһарманлығы халыҡтың батырлыҡ, ғәҙеллек, ихтыяр көсө һәм фиҙаҡәрлек идеяларын еткерә. Әҫәр беҙҙе ҡыйыу булырға һәм ауырлыҡтарға, һынауҙарға ҡарамаҫтан, хаҡ эш өсөн көрәшергә өйрәтә.

Алтай эпосы "Кай" – алтай әҙәбиәтенең иң әһәмиәтле әҫәрҙәренең береһе генә түгел, ә был халыҡтың мәҙәниәте һәм традициялары тураһында ҡиммәтле мәғлүмәт сығанағы. Ул беҙгә алтай мәҙәниәтенең матурлығын һәм аҡылын яҡшыраҡ аңларға һәм баһаларға мөмкинлек бирә, шулай уҡ беҙҙе Кай өлгөһөндә тәрбиәләй.

Алтай эпосын башҡорт эпосы "Урал батыр" менән сағыштырып, шуны билдәләргә мөмкин: улар – ике төрки халыҡтың изге рухи ҡомартҡылары. Героик эпостар үҙ халыҡтарының йолаларын, ғөрөф-ғәҙәттәрен һәм ышаныуҙарын сағылдыра, шулай уҡ үткәндә йәмғиәт өсөн айырым әһәмиәткә эйә булған ҡиммәттәрҙе һәм идеалдарҙы тапшыра.

Беренсе сиратта, ике эпоста ла батырлыҡ һәм ҡаһарманлыҡ символы булған оҡшаш героик образдар тураһында бәйән ителә. Һәр эпос та үҙ геройы исеме менән атала. Ике герой ҙа, ватандаштарының имен тормошон тәьмин итеү өсөн, яуыз көстәр, дошмандар менән көрәшә. Икенсенән, ике эпостың да тарихы һәм символикаһы мөһим әһәмиәткә эйә. Тауҙар, йылғалар, урмандар һәм тәбиғәттең башҡа элементтары атмосфера булдырыуҙа Һәм Алтай һәм Башҡортостан халыҡтарының мәҙәни үҙенсәлектәрен асыуҙа ҙур роль уйнай.

Өсөнсө оҡшашлыҡ – аҡһаҡалдар, ҡарттар образдарының эпос сюжетында мөһим роль уйнауы. Улар батырҙарға кәңәштәрен бирә, изге көрәштәрендә юл күрһәтә.

Әммә был оҡшашлыҡтарҙан тыш, ике эпос араһында айырмалар ҙа бар. Уларҙың береһе – төрлө мәҙәни контекстар. "Кай" алтай мәҙәниәтенең үҙенсәлектәрен сағылдыра. Ә "Урал батыр" эпосында – башҡорт донъяһы. Һәр эпос конкрет халыҡтың менталитетын һәм йәшәү ҡиммәттәрен сағылдыра.

Шулай уҡ ике эпостың структураһында айырмалыҡты билдәләргә кәрәк. Әгәр “Кай” эпосын айырым эпизодтар һәм хикәйәләр серияһы тәшкил итһә, “Урал батыр” эпосы өсөн өҙлөкһөҙ сюжет үҫеше хас.

Йомғаҡлау әйткәндә, алтай эпосы “Кай” һәм башҡорт эпосы “Урал батыр” – төрки халыҡтарының рухи ҡомартҡылары. Улар икеһе лә – бай тарихи һәм мәҙәни сығанаҡ. Героик эпостарҙың оҡшашлығы һәм айырмалыҡтары Рәсәй халыҡтарының күп яҡлылығын, төрлөлөгөн һәм уларҙың мәҙәни мираҫын яҡшыраҡ аңларға ярҙам итә.

© Байғусҡаров Б.З., Фәтҡуллина Р.Х., 2024

УДК 821.512.141

***Вәлиева Э.Р.,***
*М.Аҡмулла ис. БДПУ студенты,*
*Өфө ҡ.*

***Валеева Э. Р.,***
*студент БГПУ им. М. Акмуллы,*
*г. Уфа*

## ТАҢСУЛПАН ҒАРИПОВАНЫҢ “БӨЙРӘКӘЙ” РОМАНЫНДАҒЫ ГЕРОЙҘАРҘА ҠИӘФӘТТЕНӘ ХАС БИЛДӘЛӘРЕН БЕЛДЕРГӘН СИФАТТАРҘЫҢ ҠУЛЛАНЫЛЫШЫ

## ИСПОЛЬЗОВАНИЕ ПРИЛАГАТЕЛЬНЫХ, ОБОЗНАЧАЮЩИХ ХАРАКТЕРНЫЕ ЧЕРТЫ ЛИЦА ГЕРОЕВ РОМАНА ТАНСУЛПАН ГАРИПОВОЙ “БУРЕНУШКА”

**Аннотация.** В статье описаны прилагательные, обозначающие характерные черты лица героев романа Тансулпан Гариповой “Буренушка”.

**Ключевые слова:** прилагательные, черта характера, Т.Гарипова, “Буренушка”, роман, образы, герои, внешний вид.

Башҡорт телендә кешенең ҡиәфәтенә хас билдәләрен белдергән һүҙҙәр күп. Йәнле һөйләштә уларҙы диалектизмдар менән дә байыталар. Нәфис әҙәбиәттә иһә сифаттарҙың лексик мәғәнәһен белдергән бындай һүҙҙәр геройҙарҙың образын байытыуға, уҡыусыға уларҙы күҙ алдына һынландырырға ярҙам итәләр. Таңсулпан Ғарипованың башҡорт халҡының тотош бер быуатлыҡ яҙмышын, тарихын үҙ эсенә алған “Бөйрәкәй” романында ла шулай.

Шәһәрбаныу роле – изге бер зат образы менән сағыштырыла. Һыу буйынан Күкһылыу – Гөлбаныуҙы табып алып ҡайтҡас, ул ситкә күсеп китә. Ун ете генә йәшлек ҡыҙ бала сит баланы тәрбиәләүҙе үҙ өҫтөнә ала. Тамағы ашҡа, өҫтө кейемгә туймай, ауыр эштәрҙә йөрөй. Шуға ла, автор уның тышҡы ҡиәфәтен һүрәтләгәндә хәлһеҙ, ниндәйҙер ауырыуға дусар икәнлеген аңлатырға тырышҡан сифаттарҙы ҡуллана: *Ул арала ишек асылды, унан үҫмер ҡыҙҙар кеүек кенә сираҡлы,* ***аҡһыл*** *сирайлы ҡыҙ килеп инде. Ниндәй намыҫ менән төйәген, йортон, ата-инәһенең йылы ҡосағын, хатта ҡыҙ намыҫын ошо сабыйға алмаштырған, төртмәйенсә лә йығылырға торған* ***сибек*** *был ҡыҙға үҙен, баланың әсәһе мин булам, тип таныштырһын?* (65-се бит).

Барсынбикә-Фәүзиәнең яҙмышы ла аяуһыҙ була. Ул Гөлбаныуҙы тапҡас, һынылыш осоро кисерә. Уның йөҙ-ҡиәфәтендәге үҙгәрештәрҙе түбәндәге сифаттар аша күрергә була:

*Уның ҡаршыһында* ***ап-аҡ*** *сәсле,* ***һап-һары*** *йөҙлө, алашаныҡы төҫлө* ***сығыңҡы*** *яңаҡлы, һүнгән күмерҙәй* ***йәнһеҙ*** *күҙле, урттары эскә батҡан ҡарсыҡ ултыра* (67-се бит).

Кешенең йөҙ төҙөлөшөнә ҡарап, уның холҡон да белергә мөмкин. "Бөйрәкәй" романында ла автор персонаждарын һүрәтләгән саҡта быға ла иғтибар итә. Мәҫәлән, түңәрәк йөҙ ул – ихласлыҡ, асыҡ сырайлылыҡ билдәһе: *Ҡапҡа асырға йүгереп сыҡҡан* ***түңәрәк*** *йөҙлө ҡатынды шундуҡ таныны Әптеләхәт: был бит теге йырҙан уҡытҡан Сәрбиназ апай!* (117-се бит). Ҡаҡса битлеләр, киреһенсә, усал кеше булараҡ һынланалар: Мирхәйҙәровтың ҡара ятыуҙай ялтыр күҙҙәрендә асыу тоҡанып, ҡаҡса бите ризаһыҙлыҡ белдереп тартышып алды (185-се бит).

Таңсулпан Ғарипованың "Бөйрәкәй" романында матурлыҡ символы булараҡ өс быуын ҡатын-ҡыҙ һүрәтләнә: Барсынбикә-Фәүзиә, Күкһылыу-Гөлбаныу һәм Мәҙинә. Әҫәрҙең төйөнләнешендә автор Гөлбаныуҙың һылыулығына иғтибарҙы йүнәлтһә, һуңынан Мәҙинә башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының матурлығын һүрәтләүсе символ булып ҡала. Әлбиттә, портреты тураһында һүҙ барғанда сифаттарҙың түбәндәге лесикаһы ҡулланыла: *Хатта елгә ярылған, ҡаны сырҡабыраҡ торған ирендәре лә үтә* ***ҡупшы,*** *үтә лә үҙенә нык тарта. Йылмайғанда соҡорайған* ***алһыу*** *бите,* ***нескә генә оҙонсараҡ*** *эйәге,* ***дөм ҡара, һөрмәле*** *күҙҙәре, шул бер аҙ* ***ҡыяраҡ,*** *ләкин* ***түп-түңәрәк*** *күҙҙәре өҫтөнә дуғаланып сөйөлгән ҡаштары, эйәк осондағы* ***ҡара*** *миңе – бөтәһе, бөтәһе лә Гөлбаныуҙы хәтерләтә. Биле* ***нескә*** *үҙенең, яурыны* ***тар,*** *елән кейгән ҡуйыны тулып-күпереп тора. Ошондай* ***тал сыбығылай*** *ҡыҙҙа быңдай* ***ҡалҡыу*** *түштәр ҡайҙан барлыҡҡа килгәндер ул?* (128-се бит).

Кешенең тышҡы ҡиәфәте уның йәшен, сәләмәтлеген дә күрһәтә. Кеше осраҡта тешһеҙ булырға мөмкин. Бер йәшкә тиклем балаларҙың теше булмай. Ҡартайғас йәки ниндәйҙер ҡаты ауырыу кисерһә, улар ҡойола. Романдағы Әбүбәкер образындағы герой – ул бер йәшенә етмәгән сабый: *Әбүбәкер шулай йоҡлай-йоҡлай, талсыға-тала имә торғас, бер мәл холҡон үҙгәртергә булып китте: ҡапыл имеүенән туктай ҙа, имсәкте ысҡындыбыраҡ тора, геүләп әсәһенә һүҙ ҡуша, йылмая,* ***тешһеҙ*** *ирендәрен йәйелдереп көлөп ята!* (187-се бит).

"Бөйрәкәй" романында диуана образына ла ҙур урын бирелә. Шәңгәрәйҙең һөйләгәндәренә башҡа геройҙар ышанмаһалар, ҡолаҡ һалмаһалар, урыны менән иҫәргә тиңләп көлөп китһәләр ҙә, ул был донъя асылын нығыраҡ аңлай, кешенең дә кем икәнен үтәнән-үтә күрә. Уны автор һүрәтләгәндә, әлбиттә, тышҡы ҡиәфәте күрмәлекһеҙ булыуын йыш телгә ала: *Шәңгәрәй былай ҙа* ***тыржыҡ*** *танауын асыуҙан һауа етмәгәндәй таржайтып, тороп ултырҙы. Асарға бар! Күп! Һөт – бына! – Ул* ***тыңҡыш*** *муйынына ҡағылды* (193-сө бит).

Таңсулпан Ғарипова үҙенең был әҫәрендә бер тапҡыр ғына телгә алынып киткән персонаждарының да тышҡы ҡиәфәтен һүрәтләүҙе кәрәк тип таба. Улар аша уҡыусыларға ваҡиғаларҙың айышына нығыраҡ төшөнөргә ярҙам итә. Мәҫәлән, военкомдың тышҡы ҡиәфәтен, физик хәлен һүрәтләп, уның Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыуын, ул осорҙа уның кеүек ғәриптәр күп булыуын аңларға мөмкин: *Военком,* ***сандыр*** *кәүҙәле,* ***сулаҡ*** *егет, Ихсанбайҙың ҡиәфәтен күргәс, тиҙерәк сығарып ебәреү яғын ҡараны* (196-сы бит). Ишмөхәмәт образында кеше алдаштырып йөрөгән Ихсанбай ҙа үҙенең зәғифлеген һуғыш ҡорбаны итеп күрһәтә: *Меҫкен Ишмөхәмәт – үҙе* ***зәғиф,*** *бәндәгә бәндә булып ултыра* (221-се бит).

Тышҡы ҡиәфәте йәмһеҙ, күрмәлекһеҙ итеп һүрәтләгән образдар ҙа осрай "Бөйрәкәй" романында: *Хатта уның* ***һөлдәләй ит-ашһыҙ, оҙон*** *буйлы,* ***сығыңҡы*** *бите өсөн* ***үтә бәләкәй*** *уйылған ауыҙы,* ***йоҡа*** *иренле,* ***сомтор*** *танаулы ҡатынын да мөрхәтһенмәй Мәҙинә* (9-сы бит). *Сәбиләһе* ***яшыҡ, йәмһеҙ*** *булһа ла тыныуы ҡайнар, теләге ихлас булды* (245-се бит). Шулай уҡ, геройҙарҙың тышҡы ҡиәфәтен бер-береһенеке менән сағыштырып, антонимлы иштәр итеп тә һүрәтләнә: *Әйүп Мәҙинәнең ҡулын устарына алды, үҙенең ҡара эш күрмәгән* ***йомшаҡ*** *ҡулдарында Мәҙинәнең* ***һөйәлле, ҡытыршы,*** *ләкин* ***ҡайнар*** *усын тойҙо* (255-се бит).

Кешенең физик хәлен белдергән сифаттарҙы “Бөйрәкәй” романында фразеологик берәмектәр ҙә алмаштырып килә. Мәҫәлән, *сиртһәң ҡаны сыҡмалы – һау-сәләмәт* тигәнде белдереп килә: *Мында әле балалы бисәләргә түгел,* ***сиртһәң ҡаны сыҡмалы*** *ҡыҙҙарға кейәү сыҡмай тора* (64-се бит).

Күреүебеҙсә, Таңсулпан Ғарипованың “Бөйрәкәй” романындағы геройҙарҙа ҡиәфәттенә хас билдәләрен белдергән сифаттарҙың ҡулланылышы төрлөсә, төрлө маҡсаттан сығып биреләләр һәм геройҙарҙың образын асыр, ваҡиғаларҙы байытыр өсөн уларҙың әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ ҙур.

**Әҙәбиәт**


1. Башҡорт теле. Юғары уҡыу йорттарының филология факультеты студенттары өсөн дәреслек / Г.Р. Абдуллина, Г.Д. Вәлиева, К.Ғ. Ишбаев (яуаплы мөхәррир) һ.б. – Өфө: Китап, 2012. – 616 бит.
2. Ғарипова Т. Бөйрәкәй: роман-эпопея / Таңсулпан Ғарипова. – Өфө: Китап, 2020. – 720 бит.


©Валеева Э. Р., 2024

УДК 1751

***Гәрәева Р.А.,***
*М. Аҡмулла ис. БДПУ студенты,*
*(ғилми ет.: филол.ф.к., доцент Гәлина Г.Г.),*

*Өфө ҡ.*
***Гареева Р.А.,***
*студент БГПУ им. М.Акмуллы,*
*(научн. рук.: к. филол. н., доцет Галина Г.Г. ),*
*г.Уфа*

## «АЛПАМЫША БАТЫР» ӘКИӘТЕН КВЕСТ-ТЕХНОЛОГИЯҺЫ БУЙЫНСА ӨЙРӘНЕҮ

## ИЗУЧЕНИЕ СКАЗКИ «АЛПАМЫША-БАТЫР» ПО КВЕСТ-ТЕХНОЛОГИИ

**Аннотация.** В статье рассматриваются квест-технологии и их место на уроках башкирской литературы. Даётся понятие «квест». Определяются преимущества использования квестов на уроках.

**Ключевые слова:** квест, башкирская литература, Алпамыша батыр, школьники, этап.

Хәҙерге замана уҡытыу программаһы балаларҙы тыуған телгә өйрәтеүҙә, уларҙы башҡорт әҙәбиәте, фольклоры, сәнғәте менән таныштырыуға тағы ла ҙурыраҡ талаптар ҡуйҙы.

Уҡытыу программаларын үтәү, мәктәптә алынған белемдең тәрән һәм ныҡлы булыуы башлыса уҡытыу-тәрбиә эшенең эффектлығына бәйле. Шуға күрә лә уҡытыусылар, уҡытыу алымдарын камиллаштырып, һәр дәресте тәрбиәүи, тормошсан, ҡыҙыҡлы үткәрергә тырышалар, уҡыусыларҙың фекерләүе үҙ аллы булыуына ирешәләр.

Уйын элементтары башҡорт теле дәрестәрендә электән ук ҡулланылһа ла, һуңғы йылдарҙа уйын технологияһы фәнни яҡтан усеш алды, уның әһәмиәте лә көсәйҙе.

Белем биреү эшмәкәрлеген ойоштороуҙа түбәндәге формалар инә: мәсьәләләрҙе хәл итеү, эксперименттар, интерактив уйындар, квест-технологиялар, һ.б. Был эшмәкәрлек формалары дәрестең төрлө төрҙәрендә лә, айырым компоненттарында ла ҡулланыла ала». [3].

Нимә ул квест? Квест уҡыусыларҙың өйрәнелгән материалға ҡыҙыҡһыныуын дәртләндереү өсөн мауыҡтырғыс уҡыу ысулы. Уҡыу квесты сиктәрендә уҡыусылар төрлө биремдәрҙе, башваткыстарҙы хәл итә, мәғлүмәт эҙләй, бер-береһе менән хеҙмәттәшлек итә һәм алған белемдәрен практикала ҡуллана ала.

Әҙәбиәт методикаһында «әҙәби квест» тигән төшөнсә бар. Ул «уйын жанры, бирелгән сюжет буйынса биремдәрҙе эҙмә-эҙлекле үтәү, өйрәнелгән предметҡа ҡыҙыҡһыныуҙы арттырыуға булышлыҡ итә» [Колодина 2006, с.90].

Квестар һәр ҡатнашыусыға үҙенең белемен һәм оҫталығын күрһәтергә мөмкинлек бирә. Был тикшеренеү оҫталығын яҡшыртыуҙан тыш, уйынсылар араһында мәғлүмәт алмашыуға булышлыҡ итә. Квестар шулай уҡ ярышыу элементын үҙ эсенә ала һәм күнекмәләрҙе, фантазияны, ижади һәләттәрҙе үҫтереүгә булышлыҡ итә.

Квесттарҙың төрлө төрҙәре бар. Икенсе төрлө әйткәндә, бирем төрөнә ҡарап, улар һыҙыҡлы, ҡулсалы һәм штурмлы булырға мөмкин. Ваҡыты буйынса ҡыҫҡа һәм оҙайлы була. [4].

Беҙ үткән материалды тамамлағанда ҡулланырға мөмкин булған һыҙыҡлы квестарҙы ҡараныҡ.

Миҫал итеп 5-се класс уҡыусылары менән үткәрелгән «Алпамыша һәм унық командаһы» ның белем биреү квесын килтерәбеҙ.

Риүәйәт буйынса, квеста ҡатнашыусыларға 2 командаға бүленергә һәм геройға ҡаршылыҡтарҙы еңеп сығырға ярҙам итергә кәрәк. Квест этаптарға (станцияларға) бүленгән. Һәр этапта командаға практик оҫталыҡтарын һәм күнекмәләрен тикшереүгә йүнәлтелгән биремдәр бирелә.

Шулай итеп, *1 станцияла* һәр командаға һорауҙарға яуап бирергә кәрәк (яуаптарҙы ҡағыҙға яҙып ҡуялар). Дөрөҫ яуап 1 балл менән баһалана.

1. Әкиәттең авторы кем?
2. Алпамыша кем ул?
3. Алпамышаға атты алырға кем рөхсәт бирә?
4. Алпамыша ниндәй ат һайлай?
5. Кем ул Айһылыу?
6. Алпамыша батыр ике тапҡыр кемде еңгән?
7. Батшаның нисә ҡыҙы булған?
8. Аждаһаның нисә башы?
9. Ҡарабатыр күпме һыбайлы ебәрә Алпамышаға соҡор ҡаҙыр өсөн?
10. Нисә көн Алпамыша батыр соҡорҙа ята?

*2-се этапта* төшөп ҡалған һүҙҙәрҙе яҙырға кәрәк. Һәр дөрөҫ яуап 0,5 балл менән баһалана.

1. «Атай, миңә бер (…) алып бир, – ти.– Бер батшалыҡта майҙан була икән, шунда (…) барам», – ти.
2. «Ҡартайғанда, исмаһам, берәй (...) ҙа юҡ бит», – тип ҡайғырышҡандар былар.
Әкиәт балаларға тәрбиә биреүҙең мөһим ысулы булып тора. Был әҙәбиәт төрө ярҙамында бала тирә-яҡты ла өйрәнә, күңел аса ла ала. Әкиәт – башланғыс класс уҡыусыларына остаз, ярҙамсы һәм уҡытыусы. Ул кәңәш бирә, хис-тойғоларын белдерә. Башланғыс класс балаларына әкиәттәрҙең йоғонтоһо көнүҙәк һәм мөһим, сөнки әкиәттәр балаларҙың шәхесен һәм донъяға ҡарашын формалаштырыуҙа, уларҙың үҫешенең тәүге этаптарында ҙур роль уйнай. Әкиәттәр күңел асыу материалы ғына түгел, ә балаларҙың фантазияһын, эмоциональ интеллектын, әхлаҡи ҡиммәттәрен үҫтереүгә, шулай уҡ телмәрен һәм фекерләүен әүҙемләштереүгә булышлыҡ иткән педагогик сара булып тора.

Башланғыс мәктәптә әкиәттәрҙе өйрәнеү балаларҙа шулай уҡ мәҙәни аң даирәһен формалаштырыуға, уларҙың ижадилығын, мәғлүмәтте аңлау һәм анализлау һәләтен үҫтереүгә булышлыҡ итә. Бынан тыш, әкиәттәр аша балалар төп әхлаҡи дәрестәрҙе танырға, яҡшылыҡ менән яуызлыҡты айырырға өйрәнә, үҙ ҡиммәттәр системаһын булдыра. Әммә башланғыс класс уҡыусылары өсөн аҡыллы әкиәттәрҙе уларҙың йәш үҙенсәлектәрен, психологик ихтыяждарын һәм үҫешкән һәләттәрен иҫәпкә алып һайларға кәрәк. Әкиәттәрҙең йөкмәткеһе изглекле булыуы, тирә-яҡтағыларға ихтирам өйрәтеүе, үҙ көсөнә һәм мөмкинлектәренә ышанысты тәрбиәләүе, шулай уҡ әхлаҡи ҡиммәттәрҙе һаҡлауы мөһим.

Башҡорт әкиәттәренең башланғыс класс балаларына йоғонтоһон өйрәнеү буйынса айырым хеҙмәттәр юҡ, ләкин халыҡ ижадында әкиәт жанрын өйрәнеүгә күп ғалимдар иғтибар бүлә. Улар араһында Әхмәт Мөхәмәтвәли улы Сөләймәновтың хеҙмәттәре айырым урын алып тора. Фольклор экспедициялары ваҡытында ул боронғо халыҡ әкиәттәрен яҙып ала. Уларҙы йыя, туплай, төркөмләй, анализлай һәм китап рәүешендә баҫтыра. Уның “Башҡорт халыҡ тормош-көнкүреш әкиәттәренең сюжеты” (1988), “Башҡорт көнкүреш әкиәттәре поэтикаһы” (1980), “Әкиәттә-хәҡиҡәт” (1997), “Башҡорт балаларының ҡарһүҙе” (2008), “Башҡорт халыҡ ижады. Әкиәттәр” һ.б. китаптары бар. Шулай уҡ Марат Хәләф улы Минһажетдинов фольклорсы булараҡ әкиәт жанрында ҙур эш башҡарған ғалим. Өс томлыҡ “Башҡорт халыҡ ижады”әкиәттәр йыйынтығын төҙөүсе, “Башҡорт совет әҙәбиәте тарихы” (2-се киҫәк, Өфө, 1966) китабының авторҙашы, бер нисә уҡыу программалары, юғары уҡыу йорттары һәм мәктәптәр өсөн башҡорт әҙәбиәте курсы китаптарының авторҙашы. Шулай уҡ “Башкирская сказка и народные обряды” ғилми эше лә бар.

Шулай уҡ Дмитриев Николай Константин улын да әйтеп үтергә кәрәк. Был ғалим башҡорт фольклористикаһы менән әүҙем шөғөлләнә һәм 1941 йылда уның редакцияһында “Башҡорт халыҡ әкиәттәре” нәшер ителә. Ә. Харисов, М. Сәғитов, Ғ. Хөсәйенов, К. Әхмәтйәнов, В. Әхмәҙиев шулай уҡ башҡорт фольклорын өйрәнеүҙә булышлыҡ итә.

XIX быуатта рус әкиәттәрен йыйыусы Александр Николай улы Афанасьев була. 1846-1849 йылдарҙа ул Мәскәү университетының юридик факультетында уҡый, әммә үҙенең исемен юрист булараҡ түгел, ә рус халыҡ әкиәттәрен баҫтырыусы булараҡ данлай. 1855-1863 йылдарҙа ул һигеҙ йыйынтыҡ баҫтырып сығара, улар рус әкиәт фондының нигеҙен тәшкил итә. Был фонд Иван Александрович Худяков һәм Дмитрий Николаевич Садовников эшмәкәрлеге менән тулылана. Беренсеһе 1860-1862 йылдарҙа ике томда «Бөйөк рус әкиәттәре», ә икенсеһе 1884 йылда «Һамар крайы әкиәттәре һәм риүәйәттәрен» баҫтырып сығара.

XIX быуатта әкиәттәрҙең жанр абруйы А. С. Пушкин тарафынан бығаса булмаған бейеклеккә күтәрелә. Билдәле булыуынса, ул үҙенең ҡараусыһы Арина Родионовнанан ете әкиәт яҙып ала. Шул уҡ быуатта П. П. Ершов, С. Т. Аксаков, М. Е. Салтыков-Щедрин, Л. Н. Толстой авторҙар әкиәттәре донъя күрә.

Шулай уҡ рус әкиәттәрен йыйыусы Владимир Иванович Даль була. Ул шулай уҡ Рәсәй буйлап сәйәхәт итә һәм халыҡтан әкиәттәр йыя. Әммә Афанасьевтан айырмалы рәүештә, Даль әкиәттәр йыйып ҡына ҡалмай, уларҙы өйрәнә лә. Ул әкиәттәрҙең сюжеты һәм персонаждары менән генә түгел, ә уларҙың теле, халыҡ телмәренең үҙенсәлектәре менән дә ҡыҙыҡһына.

Был донъяны ҡыҙыҡлыраҡ иткән, мөғжизәләргә ышанырға ярҙам иткән, фантазияны үҫтергән, хыялланырға өйрәткән авторҙары ла һанап үткеһеҙ. Мәҫәлән: А. Н. Плещеев; Ф. И. Тютчев; А. И. Куприн; А. А. Фет; А. Л. Барто; Д. Н. Мамин-Сибиряк; М. М. Пришвин; И. А. Крылов; Л. Н. Толстой; И. А. Бунин; П. П. Ершов; А. П. Чехов; С. Т. Аксаков; К. Г. Паустовский; М. М. Зощенко; С. В. Михалков; Н. Н. Носов; А. А. Блок; В. Ю. Драгунский; С. Я. Маршак; И.С. Никитин һ.б.

Башҡорт халыҡ әкиәттәре йөкмәткеһе буйынса дүрт төркөмгә бүленә: тылсымлы, көнкүреш, хайуандар һәм батырҙар тураһындағы әкиәттәр.

Хайуандар тураһындағы әкиәттәр боронғо кешеләрҙең тирә-яҡ донъяны үҙҙәренсә күҙ алдына килтереүен сағылдыра. Боронғо кешеләр бөтә донъяны айырылғыһыҙ бер бөтөн итеп күҙ алдына килтергән. Уларҙың ҡарашы буйынса, кешеләр теләһәләр, хайуанға, ҡоштарға һәм, киреһенсә, ҡоштар, хайуандар кешләргә әүерелергә мөмкин булған. Шуға күрә быndай күренеш эпоста ла, әкиәттәрҙә лә йыш осрай.

Хайуандар тураһында әкиәттәр балаларҙы бик күп мөһим нәмәләргә өйрәтә. Улар балаларға фантазия һәм ижади фекерләүҙе үҫтерергә ярҙам итә, шәфҡәтлелек һәм эмпатияға өйрәтә, тирә-яҡ донъяны һәм хайуандарҙы хөрмәт итеүҙең мөһимлеген күрһәтә. Шулай уҡ әкиәттәр аша балалар яҡшылыҡ менән яуызлыҡты айырырға, әхлаҡи һабаҡтарҙы һәм ҡиммәттәрҙе аңларға өйрәнә. Мәҫәлән, “Айыу һәм бал ҡорттары” әкиәте ул бал ашарға теләгән, әммә үҙенең умартаһын һаҡлаған ярһыу бал ҡорттары менән осрашҡан ҡупшы айыу тураһында һөйләй. Әкиәт сағыу әхлаҡи мәғәнәгә эйә һәм бик күп мөһим һабаҡтарҙан тора.

Әкиәттең төп әхлағы шунда: ҡомһоҙлоҡ һәм башҡаларҙың әйберенә ынтылыу кәрәкмәй. Бал-ҡорттарының әйберен алырға маташҡан айыу үҙ ҡомһоҙлоғоноң ҡорбаны була һәм еңелә. Айыу башҡаларҙың мөлкәтен боҙмау һәм ҡағиҙәләрҙе үтәү яҡшыраҡ икәнен аңлай. Шулай итеп, “Айыу һәм бал ҡорттары" әкиәте балалар әҙәбиәтенең иң киткес өлгөһө булып тора. Ул балаларҙы сабырлыҡ, килешеү һәм компромисс табыу, башҡаларҙы хөрмәт итеүгә өйрәтә. Әкиәт шулай уҡ көс һәм тупаҫлыҡтың һәр ваҡыт теләгән һөҙөмтәгә килтермәүен, ә ҡайһы берҙә проблеманы тыныс һәм дуҫтарса хәл итеүҙе эҙләү яҡшыраҡ булыуын күрһәтә. Әкиәттәге бал ҡорттары умарталарын һаҡлау һәм айыу һөжүмен кире ҡағыу өсөн бергәләп эш итә. Был бер-береһенең тырышлығы һәм ярҙамы менән проблемаларҙы еңеп сығырға һәм маҡсаттарға өлгәшергә ярҙам итеүен күрһәтә. Ул эгоизм һәм ҡомһоҙлоҡ бер ҡасан да яҡшы һөҙөмтәләргә килтермәй, һәм үҙ-ара ярҙам итеү тормошта төп ҡиммәттәр булып тороуын аңлата. Шулай уҡ был әкиәтте этиологик әкиәткә индереп була. “Быndай әкиәттәрҙең төп вазифаһы – теге йәки был күренешкә аңлатма биреү. “Ҡаҙҙар ниңә ала булған?” әкиәте, мәҫәлән, ала ҡаҙҙарҙың нисек килеп сығыуы, “Айыу менән бал-ҡорттары” әкиәтендә айыуҙарҙың нисек ҡыҫҡа ҡойроҡло булып ҡалыуы аңлатыла”. [2, 308-се б.]

Башланғыс класс уҡыусыларына, йәнлектәр донъяһын яҡшыраҡ аңлар өсөн, “Ҡуян менән арыҫлан”, “Ишәк, дөйә, төлкө, бүре”, “Төлкө менән бүҙәнә”, “Әтәс батыр”, “Ҡуян менән арыҫлан”, “Хәйләкәр турғай” әкиәттәрен уҡыуы файҙалы булыр. Тағы ла, мәҫәлән, “Йомарт ҡуян” әкиәтендә хайуандар һәм кешеләр менән мөнәсәбәттәре хаҡында һүҙ бара. Уларҙа әхлаҡи мәсьәләләр күтәрелә, ғибрәтле ваҡиғалар һүрәтләнә. "Эт нисек хужа тапҡан?" әкиәтендә лә кешенән дә көслө зат юҡ тип күрһәтелә.

Шулай итеп, дөйөм алғанда, хайуандар тураһындағы әкиәттәр балаларға үҙҙәрен һәм тирә-яҡ донъяны яҡшыраҡ аңларға ярҙам итә.

Киләһе төр – ул батырҙар тураһында әкиәттәр. Батырҙар тураһында әкиәттәр балаларҙы бик күп ҡиммәтле дәрестәргә өйрәтә. Беренсенән, улар хәҡиҡәт һәм ғәҙеллек өсөн көрәштә ҡыйыулыҡ, көс һәм батырлыҡ мөһимлеген күрһәтә. Балалар ауырлыҡтарҙан ҡурҡмаҫҡа һәм үҙ маҡсатына юлға сыҡҡанда ҡаршылыҡтарҙы еңеп сығырға өйрәнә. Икенсенән, батырҙар тураһындағы әкиәттәр әхлаҡ һәм намыҫлылыҡ, дуҫлыҡ, тоғролоҡ, ярҙамсыллыҡ һәм изгелек менән күрһәтелгән. Балалар тирә-яҡтағыларға изгелекле һәм ярҙамсыл булырға, бәләгә тарыусыларға ярҙам итергә һәм үҙ эштәре өсөн яуаплы булырға өйрәнә. Ниһайәт, батырҙар тураһындағы әкиәттәр балаларҙы батырлыҡ һәм ҡаһарманлыҡ, мажара эҙләү, яңы белем һәм күнекмәләр эҙләүгә рухландыра.

Тылсымлы әкиәттәрҙән айырмалы рәүештә, батырҙар тураһындағы әкиәттәр геройы тылсымға таянмай, ә үҙ көсөнә таянып эш итә. "Ҡаһарман Батыр" әкиәтенең геройы, мәҫәлән, йоҡлап ятҡан дейеүҙе сабыуҙы хурлыҡлы тип һанағанлыҡтан, уны йоҡонан уята һәм һуңынан ғына уның менән көрәшкә сыға. Хатта тәү башлап һуғыу сиратын да Ҡаһарман батыр дейеүгә бирә. Дейеү ҡырҡ батман ауырлығы күсәге менән ике тапҡыр батырға һуға, әммә ул янтайып ҡала, ә үҙ сираты еткәс, дейеүҙе йоҙроғо менән генә һуғып үлтергән, ти. Был әкиәт балаларҙы ауырлыҡтар алдында ҡаушап ҡалмау, уның менән күҙмә-күҙ ҡарап көрәшеүгә ҡурҡмаҫҡа өйрәтә.

Батырҙар тураһындағы әкиәттәрҙә йыш ҡына герой бәлә килтереүсе аждаһа, дейеүҙәр менән ҡаршы көрәшә, һыуһыҙ интеккән халыҡҡа һыу бирә, юғалған йәки урланған ҡыҙҙарҙы ҡоллоҡтан ҡотҡара, урланған мал-тыуарҙы эҙләп таба һ.б.

Батырҙар тураһында әкиәттәрҙән “Алпамыша батыр”, “Оморҙаҡ батыр”, “Буҙансы батыр”, “Мең башлы аждаһаны еңгән егет”, “Алпамыша һәм Барсынһылыу”, “Ете ағай-эне һәм апай”, “Акъял батыр” һ.б. әкиәттәрҙе тәҡдим итә алыр инем.

Шулай итеп, батырҙар тураһындағы әкиәттәр балаларҙы тәрбиәләүҙә мөһим роль уйнай, уларға хәҙерге донъяла кәрәкле батырлыҡ, изгелек һәм мажараларға ынтылыш үҫтерергә ярҙам итә.

Өсөнсө төр – ул тылсымлы әкиәттәр. Тылсымлы әкиәттәр балаларҙы төрлө ҡиммәттәргә һәм оҫталыҡҡа өйрәтә. Улар күҙ алдына килтереү һәләтен үҫтерергә, аҡылын киңәйтергә ярҙам итә, балаларҙы донъяны бөтә матурлығы һәм мөғжизәлелеге менән күрергә өйрәтә. Әкиәттәр шулай уҡ балаларҙы изгелеккә, ғәҙеллеккә, толерантлыҡҡа, яҡшылыҡты яуызлыҡтан айыра белеүгә өйрәтә. Мәҫәлән, “Иван Царевич һәм һоро бүре” әкиәте рус халыҡ әкиәттәренең береһе булып тора. Сюжет нигеҙендә герой Иван Царевич тураһында тарих ята, ул яуыз һоро бүре урлаған кәләше Василиса Прекраснаяны эҙләргә китә.

Был әкиәт күп символдар һәм әхлаҡи һабаҡтарҙан тора. Һоро бүре йыш ҡына хәүеф һәм яуызлыҡ менән бәйле, һәм ул ҡаршылыҡты еңеп сығырға кәрәкле бурыс булып тора. Иван Царевич был осраҡта батырлыҡты һәм тәүәккәллекте символлаштыра.

Әкиәт шулай уҡ балаларҙы үҙ-үҙенә ышанырға, ауырлыҡтарҙан ҡурҡмаҫҡа һәм бер нәмәгә ҡарамаҫтан маҡсатыңа барырға өйрәтә. Ул шулай уҡ балаларҙы яҡшылыҡ менән яуызлыҡ, тоғролоҡ менән хыянат араһындағы айырманы аңларға өйрәтә. Тағы ла үҙаллылыҡ һәм инициатива сифаттарын үҫештерә: Иван Царевич кемдеңдер килеүен һәм уның проблемаларын хәл итеүен көтмәй. Ул кәләшен эҙләргә үҙе бара. “Иван Царевич һәм һоро бүре” әкиәте ғәҙеллектең, намыҫлылыҡтың һәм дөрөҫлөк өсөн көрәштең мөһимлеген күрһәтә. Балаларҙы ғәҙел булырға һәм законға ярашлы эш итергә өйрәтә. Был дәрестәр балаларға шәхес булараҡ үҫешергә, үҙ характерын формалаштырырға, әхлаҡи ҡиммәттәрҙе нығытырға һәм тормошта дөрөҫ ҡарарҙар ҡабул итергә өйрәнергә ярҙам итә.

Шундай сифаттарға өйрәткән киләһе әкиәттәрҙе тәҡдим итергә булыр ине: “Һунарсы Байғужа”, “Ҡояшлы ҡыҙ”, “Серле йөҙөк”, “Морозко”, “Волшебное кольцо”, “Василиса Премудрая”, “Василиса Прекрасная”, Жар-птица и Василиса-царевна” «По щучьему велению» һ. б.

Шулай итеп, тылсымлы әкиәттәр балаларҙы үҙ-үҙҙәренә ышанырға, бар ауырлыҡтарҙы еңеп сығырға, үҙ өмөттәрен юғалтмаҫҡа һәм һәр ваҡыт хәлдән сығыу юлын эҙләргә өйрәтә.

Һуңғы әкиәт төрө – ул тормош-көнкүреш әкиәттәре. "Тормош-көнкүреш әкиәттәренә кинәйәлек, мәрәкәлек (юмор, сатира). Ошо яҡтан ҡарағанда, улар көләмәстәр, көлдөрөктәр, ымһындырыҡтар менән ҡәрҙәш" – ти Әхмәт Сөләймәнов үҙенең "Әкиәттә-хәҡиҡәт" хеҙмәтендә. [3, 8-се б.] Тормош-көнкүреш әкиәттәре ғәҙәттә эшһөйәр һәм оҫта булырға кәрәк тигән фекерҙе үҙ эсенә ала. Бындай кешеләр барыһын да эшләй. Ә был әкиәттәрҙә ялҡауҙарҙы ғәҙәттә мыҫҡыл итәләр, һәм улар бер нәмәһеҙ ҡала. Мәҫәлән, көнкүреш әкиәттәрендә тиҫкәре образы булып хужалар тора . Улар ғәҙәттә ҡомһоҙ һәм ялҡау булып күрһәтелә, ә был сифаттар һәр ваҡыт кешеләргә оҡшамай. Шулай итеп әйткәндә, тормош-көнкүреш әкиәте балаларҙы алдамаҫҡа, ҡомһоҙланмаҫҡа, үҙ халҡыңды хөрмәт итергә өйрәтә.

Мәҫәлән, "Балтанан бутҡа" әкиәтендә ас һалдаттың бер аҙ хәйләкәрлек һәм зирәклек ярҙамында ҡомһоҙ ҡарсыҡтың бутҡаһын ашауы тураһында һөйләнелә. Һаран ҡарсыҡ, ризығын ҡыҙғанып, һалдатты һыйларға теләмәй, ләкин һалдат уны былай итеп өйрәтергә ҡарар итә. Һалдат ҡарсыҡты унда мөғжизәле балтаһы барлығына һәм унан тәмле ризыҡ бешерергә мөмкин булыуына ышандыра. Ул, ҡарсыҡтан бер аҙ ярма, тоҙ һәм май һорап, балтанан бутҡа бешергән кеүек ҡылана. Ҡарсыҡ «бер низән дә» шундай тәмле бутҡа килеп сығыуына шатлана һәм һалдатты ашата. "Балтанан бутҡа" әкиәтенең төп идеяһы шунда: ауыр хәлдәрҙә һәр ваҡыт тапҡырлыҡ һәм аҡыллылыҡ ярҙам итә. Әкиәт балаларҙы көнкүрештә оҫталыҡ һәм уйлап табыусанлыҡ менән ҡуллана белеүгә өйрәтә. Был һалдаттың аҡыллылығы һәм үҙенең уйлап сығарыуы арҡаһында ас ҡалмауы миҫалында күренә. Был әкиәттә тағы бер аҡыл – ҡомһоҙ, һаран кеше ике тапҡырға күберәк түләй. Ҡарсыҡ һалдатты ашатып ҡына ҡалмай, балтаһын да юғалта.

Шулай уҡ балаларға тормошто яҡшыраҡ аңлар өсөн башҡорт әкиәттәренән "Йомарт ҡуян", "Етем төлкө", "Ҡәмән менән Сәмән, картуф сәскән сәлмән", "Алдар менән Ямар", "Аҡыллы ҡарт менән иҫәр батша", рус әкиәттәренән "Глупая барыня", "У страха глаза велики", "Чудесные лапоточки", "Стёклышко", "Вершки и корешки", "Пастушья дудочка", "Дочь-семилетка", "Солдат и пельмени" уҡыу файҙалы булыр ине.

Шулай итеп, тормош-көнкүреш әкиәттәре балаларға дөрөҫ һәм дөрөҫ булмаған тәртипте аңларға ярҙам итә, уларҙа характер формалаштыра, яуаплы һәм изге күңелле кешеләр булып үҫтерергә ярҙам итә.

Дөйөмләштереп әйткәндә, әкиәттәр башланғыс класс балаларының үҫешенә ҙур йоғонто яһай. Улар балаларҙа күҙ алдына килтереү һәләте, фантазия һәм ижади фекерләүҙе үҫтерергә ярҙам итә. Әкиәттәрҙә йыш ҡына әхлаҡи дәрестәр һәм ҡиммәттәр бар, уларҙы балалар үҙләштерә ала, мәҫәлән, дуҫлыҡ, башҡалар тураһында хәстәрлек, эшһөйәрлек һ. б. Әкиәттәрҙе өйрәнеү уҡыусыларҙың әҙәбиәтте өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныуын һәм мотивацияһын арттыра. Әкиәт үҙ еренә һәм халҡына һөйөү тәрбиәләй. Ул башланғыс мәктәп уҡыусыларының коммуникатив сифаттарын формалаштыра.

Ғәҙәттә, бала саҡта балаларға әкиәт уҡыған булһалар, улар киләсәктә изге күңелле, хәстәрлекле, эшһөйәр, ярҙамсыл, мәрхәмәтле булып үҫәләр, сөнки әкиәт геройҙарынан өлгө, үрнәк алалар. Ә әкиәт геройҙары бала өсөн яҡшылыҡ һәм яманлыҡ, мөхәббәт һәм нәфрәт, хәстәрле һәм дуҫлыҡ һәм башҡа тураһында төшөнсәләрҙең формаһы, образы булып тора.

Балаларға бигерәк тә хәҙергә заманда әкиәт уҡыу мөһим. Хәҙерге ваҡытта, телевизорҙар, компьютерҙар, планшеттар, телефондар ваҡытында, беҙ йыш ҡына баланы фантазиянан мәхрүм итәбеҙ, уға үҙенә күҙ алдына һүрәт төшөрөү мөмкинлеген бирмәйбеҙ. Әкиәтте тыңлағанда бала үҙе ошо хәл-ваҡиғаларҙы күҙ алдына килтерә, геройҙарҙы үҙе уйлап таба, уларҙың тышҡы ҡиәфәтен, бөтә нәмә булған мөхитте күҙ алдына килтерә. Әкиәт нимә эшләргә ярамағанды, яҡшыны һәм насарҙы айырыуға өйрәтә. Был бала кешегә бик кәрәк. Ул был һабаҡты бала сағында уҡ үҙләштерә һәм ғүмер буйы хәтерендә һаҡлай.

Шуның өсөн дә ата-әсәй балаларға күберәк әкиәт уҡырға тейеш, сөнки әкиәтһеҙ бала мөғжизәле донъянан мәхрүм ителәсәк. Шулай уҡ әкиәт баланың фантазияһын уята, матурлыҡ һәм насарлыҡ, изгелек һәм яуызлыҡ өлгөләрен бирә. Әкиәттәр аша балалар уйлап сығарылған геройҙарға шәфҡәтлек һәм йәлләү тойғоларын күрһәтә башлай.

**Әҙәбиәт**


1. Галин С. Башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижады – Өфө, Китап, 2004. – 392 бит.
2. Галин С. Тел асҡысы халыҡта. Башҡорт фольклорының аңлатмалы һүҙлеге. Төҙәтелгән һәм тулыландырылған 2-се баҫмаһы. – Өфө: Башҡортостан “Китап” нәшриәте, 1999. – 328 бит.
3. Сөләймәнов Ә. Әкиәттә хәҡиҡәт: Башҡорт көнкүреш әкиәттәренең жанр составы, сюжет төрлөлөгө, тормош ерлеге. – Өфө: Башҡортостан “Китап” нәшриәте, 1997. – 400 бит.
4. Башҡорт халыҡ ижады. Сатирик һәм юмористик әкиәттәр. Бишенсе китап. Өфө, Башҡортостан китап нәшриәте, 1983. – 392 бит.
5. Ғалимдың рухи һәм фәнни мираҫы, 2014 г. URL: https://bash.bashgazet.ru/obshestvo/13157-alimdy-ruhi-m-fnni-miray.html
6. Әкиәттәрҙе өйрәтеүҙә тәнҡитле фекерләүҙе үҫтереү технологияһын ҡулланыу, 2022 г. https://multiurok.ru/files/ki-tt-rze-oir-teuz-t-nkitle-fekerl-uze-uster


© Сафина Я.И., 2024

УДК 821.512.141


***Сафиуллина Л.И.,***
*М.Аҡмулла ис. БДПУ студенты*
*(ғилми ет.: филол. ф. к., доцент Ғәлина Ғ.Ғ.),*
*Өфө ҡ.*

***Сафиуллина Л.И.,***
*студентка БГПУ им. М. Акмуллы*
*(научн. рук: к. филол. н., доцент Галина Г.Г.),*
*г. Уфа*


## БАШҠОРТ ӘҘӘБИӘТЕ ДӘРЕСТӘРЕНДӘ Ә.ТАҺИРОВАНЫҢ СОНЕТТАРЫН ӨЙРӘНЕҮ

## ИЗУЧЕНИЕ СОНЕТОВ А.ТАГИРОВОЙ НА УРОКЕ БАШКИРСКОЙ ЛИТЕРАТУРЫ

**Аннотация.** В данной статье рассматривается изучение жанра сонет на примере поэззии А.Тагировой на уроках башкирской литературы. Сонеты Анисы Тагировой разноплановые и по тематике, и по идейно-содержательному аспекту, что способствует духовному развитию и развитию речи.

**Ключевые слова:** литература, сонет, рифма, духовное богатство, лирика.

Бөгөнгө көндә башҡорт әҙәбиәте дәрестәрендә, дәрестән тыш эшмәкәрлектә төрлө жанрҙа яҙылған әҫәрҙәрҙе өйрәнеү, уларҙы анализлау мөһим. Башҡорт әҙәбиәте уҡыусыларҙың рухи байлығын арттырыу, телмәрен, фекерләү ҡеүәһен үҫтереү өсөн төрлө планда яҙылған әҫәрҙәр менән бик бай.

Мәктәптә башҡорт поэззияһын өйрәнгәндә сонет жанрына иғтибар биреү мөһим. Лирик әҫәрҙәрҙә, шулай иҫәптән сонеттарҙа, мөхәббәт лирикаһы ла ,сәйәси һәм ижтимағи проблемалар ҙа, фәлсәфәүи төшөнсәләр ҙа сағылыш таба. Һөҙөмтәлә “лирик геройҙың

кисерештәре аша беҙ үҙебеҙҙе уратып алған тормошто күҙ алдына килтерәбеҙ, уның хаҡында белемебеҙҙе киңәйтәбеҙ” [Башҡорт әҙәбиәте тарихы, 1993: 114]. Сонет жанры шағирә Әнисә Таһированың ижадында мөһим урын алып тора; уның биш тиҫтәгә яҡын төрлө теманы яҡтыртҡан сонеты барлығы билдәле.

Әнисә Таһированы һүҙҙәрҙән өҫтөн торған, үҙ асылына хыянат итмәгән шағирә итеп беләләр башҡорт әҙәбиәтендә. Сонет жанрына бер тотонғас та, ул артҡа сигенмәй. Алдына ҡуйған маҡсатына хыянат итмәйенсә, яңы жанр өҫтөндә эҙләнеүҙән, ижад итеүҙән туҡтамай. Аяҡ салыусылар булыуына ҡарамаҫтан, Ә. Таһирова һәр ваҡыт үҙе булып ҡала килә. “Башым эйәм” сонетында ошо хаҡта әйтелә һәм үткән быуаттың утыҙынсы йылдарында был жанрҙы үҫтерергә булышлыҡ итеүсе Яҡуп Ҡолмойҙо аҡһаҡал образына ҡуйып, уға рәхмәтен белдерә:

*“Гонаһым” ҙур – һаман баш бирмәнем,*
*Алмашына ҡуҡыр “батшалар”.*
*Бөгөн һинең алда башым эйәм,*
*Сонет тажын кейгән аҡһаҡал.*

Сонет жанрына хас, Әнисә Таһированың Яҡуп Ҡолмойға арналған “Башым эйәм” сонетының һуңғы ике строфаһында лирик геройҙың төп әйтергә теләгән фекере әйтелә төшә. Унда һүҙ менән эш итә белгән, уның ҡөҙрәтен торған ҡәләм әһелдәре – шағирҙарға һүҙҙән һәйкәл ҡоя, улар алдында баш эйгәнен белдереү менән бергә, шағир, яҙыусылар кеүек түрә, власть кешеләренең үҙ ваҡытында хаким итеү көсө булһа ла, халыҡ күңелендә, тарихта урын алмауҙары хаҡында ла әйтеп китә лирик герой:

*Батшаларҙың тажы өс көнлөк,*
*Ысын шағир тажы ғүмерлек.*

Башҡорт әҙәбиәте дәрестәрендә Ә. Таһированың “Баш эйәм” сонеты миҫалында ихтирамлыҡ, изгелек, яуызлыҡ кеүек фәлсәфәүи төшөнсәләрҙе өйрәнергә була.

Әнисә Таһирова башҡорт әҙәбиәтендә сонет жанрына нигеҙ һалыусыларҙың береһе Яҡуп Ҡолмойға айырым сонет ижад итеү менән бергә, был жанрҙың үҙенә лә мәҙхиә йырлаған әҫәре бар. “Шиғырҙарҙың да шиғыры...” тип атала ул. Тәүге строфала уҡ шағирға шиғыр яҙыр өсөн айырым бер һәләте булырға кәрәклеге хаҡында еткерә лирик герой иң тәү сиратта:.

*Шиғырҙарҙың да шиғыры,*
*Моңдарҙың да моңо – сонет.*
*Шағир уны ижад итә*
*Илаһиәт нурын алып.*

Алтын эҙләгән ваҡытта күпме тау-таш аҡтарырға, таш-ҡом араһынан алтын йыуып сығарыр өсөн күпме көс, ваҡыт талапителһә, шиғыр, унан бигерәк тә сонет ижад итер өсөн кәрәкле һүҙҙәрҙе табырға һәм уларҙы бер епкә теҙеп ижад итеү талап ителә. Әнисә Таһированың сонетҡа дан йырлаған әҫәренең икенсе строфаһында ла ошо хаҡта әйтә лирик герой:

*Бик йыш ҡом-таш күмеп китә*
*Шиғыр – аҫылташтың йәмен.*
*Сонет – ебәк епкә теҙгән,*
*Балҡып торған аҫыл мәрйен.*

Шиғырҙа күпселеген ер, халыҡ яҙмышы тураһында бәйән ителһә, уның изгелеге, ҡәҙерле булыуы тураһында йырланһа, сонетта икенсе төрлөрәк уйларға, һүҙҙәр менән уйнарға, уны бар тулылығында уҡыусыға еткерә белергә кәрәк. Әнисә Таһированың “Шиғырҙарҙың да шиғыры...” тип аталған сонетының өсөнсө строфаһында ла сонет жанрын яҙыр өсөн юғары көскә, һәләткә эйә булырға кәрәклеге хаҡында әйтелә:

*Шиғыр беҙгә бүләк итә*
*Йәнгә һеңгән ерем ҡотон.*
*Сонетта бар тылсым көсө*
*Ерҙең, күктең һәм дә уттың.*

Әнисә Таһированың был сонетының да иң аҙаҡҡы ике юлында лирик геройҙың әйтергә теләгән төп фекере уҡыусыһына әйтелә. Шиғыр менән сонет жанры сағыштырылып, икенсе жанрға нығыраҡ өҫтөнлөк биргәнлеген белдерә лирик герой:

*Шиғыр – моңдоң аҫылташы.*

*Сонет – аҫылташтар шаһы.*

Хәҙерге башҡорт әҙәбиәтенең һәр бер жанрына ла тәрән психологизм менән һуғарылған әҫәрҙәр үтеп инде. Кешенең күңел донъяһын, уйҙарын өйрәнгән һәм уҡыусыһының күңелен ыңғайына имләгән был алымды замана уҡыусыһы ла йылы ҡабул итте. Әнисә Таһированың ижадында сонет жанрында психологик сонет барлығы ла билдәле. “Һин киләһең урман һуҡмағынан...” тип атала ул.

Кеше үҙ асылында тәбиғәт менән бер бөтөн. Ҡалын, хәтфә урмандар һәм йылғашишмәләр уны туйындырыусы ғына түгел, ә йәнен имләүсе лә. Тәбиғәт менән икәүҙән-икәү ҡалыу, ерҙең йылыһын табандарың менән тойоу, аяҙ күк йөҙөнә бер ниндәй борсолоуһыҙ уйҙарһыҙ ҡарап ятыу – үҙе үк бер тынысландырыу, психологтар әйткәнсә медитация алымдарының иң ҡулайһылы. Сөнки хәҙерге заманда кеше тормош ығы-зығыһынан, бер туҡтауһыҙ еткерелеп торған кәрәккән дә, кәрәкмәгән дә мәғлүмәттән арыған, йонсоған. Үҙ урыныңды табыр, тормошоңдо көйләп, яйға һалып ебәрер өсөн бер яңғыҙың, тәбиғәт менән икәүҙән-икәү генә булып алырға кәрәк. Әнисә Таһированың “Һин киләһең урман һуҡмағынан...” тип аталған сонеты тап шул турала. Күпмелер ваҡытҡа бар уйҙарынан, проблемаларынан арынып тороп, үҙ-үҙе, тәбиғәт менән ҡалған кешенең бушаныуҙарын бәйән итә ул. Хәҙерге заманда уҡыусылар менән башҡорт теле дәрестәрендә ошо эстәлеге бай булған сонетты өйрәнеү, анализлау актуаль һәм урынлы.

Дөйөм алғанда, Әнисә Таһирова ижады аша башҡорт әҙәбиәтендә сонет жанры яңырыу, үҙгәреү осорон кисереүен ныҡлап күрергә мөмкин. Автор гүзәл зат булһа ла, ил алдындағы проблемаларҙы уртаға ярып һалып һөйләшеүҙе хуп күреүе менән уның Рәми Ғариповтарға алмашсы булып килеүен аңларға мөмкин.

“Хәҙерге башҡорт шиғриәтендә ике быуат араһында һәм яңы быуат башында сонет жанры бер аҙ ләүкеп алды. Айырыуса Муса Ғәли менән Әнисә Таһированың сонеттарында милли тематика ғына түгел, был жанрҙың милли поэтик үҙенсәлектәре лә сағылды. Башҡорт сонетының үҙгәрәк рифмалашыу тәртибе, яңыраҡ шиғри ҡалыптары барлыҡҡа килде” [Хөсәйенов, 2006: 100], - тигән ҡылыҡһырлама бирә Ғ. Хөсәйенов хәҙерге башҡорт шиғриәтендә сонет жанрында ижад итеүсе ижадсыларҙың ҙур баһалап. Ә.Таһированың сонеттары милли ерлекле, моңло, йөкмәткеһе яғынан бай. Уның сонеттарын юғары кластарҙа уҡыусыларға фәлсәфәүи төшөнсәләрҙе тулыраҡ аңларға, рухи байлыҡты арттырырға ярҙам итә. Шулай уҡ ритм тойғоһон үҫтерер өсөн сонеттарҙы ҡулланыу бик уңышлы алым булып тора. Сонеттарҙы мәктәптә өйрәнеүҙе дөрөҫ ойоштороу уҡыусыларҙың ҡарашы формалашыуына, идея яғынан сынығыуына килтерә.

**Әҙәбиәт**


1. Башҡорт әҙәбиәте тарихы. Алты томда. 5 том. Башҡорт Совет әҙәбиәте (1956 – 1965 йылдар). – Өфө: Китап, 1993. – 598 бит.
2. Башҡорт шиғриәте антологияһы. Боронғонан алып XX быуат аҙағына тиклемге осор. – Өфө: Китап, 2001. – 816 бит.
3. Белинский В. Г. Избранные педагогические сочинения. М., 1948. – 199 бит.
4. Баһауетдинова М. И., Йәғәфәрова Г. Н. Башҡорт теле һәм әҙәбиәтен заманса уҡытыу. - Өфө: Китап, 2009. – 176 бит.
5. Иҙелбаев М. Х. Әҙәбиәт уҡытыу методикаһы. Юғары уҡыу йорттарының филология факультеты студенттары өсөн дәреслек. – Өфө: БДУ-ның РНБ, 2011. – 210 бит.
6. Хөсәйенов Ғ.Б. Башҡорт әҙәбиәтенең поэтикаһы. Беренсе киҫәк. Теоретик поэтика / Ғ.Б. Хөсәйенов. – Өфө: Ғилем, 2006. – 403 бит.


© Сафиуллина Л.И., 2024

УДК 308

***Сийдалина К.С.,***
*студент БГПУ им. М. Акмуллы*
*(науч. рук.: канд. ист.н., доцент Шагапова Г.Р.),*
*г.Уфа*

# ВЛАДЕНИЕ ЯЗЫКОМ У КАЗАХОВ ОРЕНБУРГСКОЙ ОБЛАСТИ

**Аннотация.** В статье рассматривается нынешнее состояние казахского языка среди казахского населения Оренбургской области России. Исследуются факторы, влияющие на использование языка, его приобретение и сохранение, и дается представление о социолингвистической ситуации казахского меньшинства в регионе. Выявляется степень владения казахским языком казахов Оренбургской области. В статье делается вывод, что, хотя казахский язык остается важной частью казахской идентичности в Оренбургской области, его сохранение сталкивается со значительными проблемами. Утверждается необходимость языкового планирования и активизации усилий по популяризации использования казахского языка и обеспечению его жизнеспособности в будущем.

**Ключевые слова:** казахский язык, Оренбургская область, знание языка, сохранение языка.

Казахи являются тюркоязычным народом, жителями и основным населением Казахстана, потомками древнетюркских племен-аргынов, карлуков и кипчаков. Слово «қазақ» по некоторым сведениям появилось давно и в тюрко-арабском словаре еще 1245 г. означало «кочевник» или «свободный». Сам казахский этнос сложился в XV в. после объединения монголов и тюрков в Казахское ханство. [Шушаева, 2022: 291].

Процесс сложения казахского этноса традиционно рассматривается с учетом оформления специфической этносоциальной структуры, получившей название жузы. В основе разделения казахского средневекового социума на три жуза (XVI в.) находились многовековые традиции кочевания казахских племен в строго определенном территориальном ареале. Каждый жуз (Старший, Средний, Младший) объединял в своем составе роды и племена и соответственно имел свою территорию кочевания. Младший жуз, в свою очередь, состоял из нескольких племенных объединений (Байулы, Алимулы и Жетыру) и охватывал современную территорию западного и юго-западного Казахстана. [Хабижанова, 2020: 161].

Казахи вели кочевой образ жизни. Основными средствами передвижения были лошади, быки и верблюды. Притязания правителей Джунгарского государства вынудили Абулхаир-хана, кочевавшего на левобережье Яика, обратиться в 1730 г. к русскому правительству с просьбой принять казахов в подданство России. [Герасименко, Святоха, Филимонова, 2015: 23].

Казахский язык вместе с ногайским и каракалпакским языками входит в кыпчакско-ногайскую подгруппу кыпчакской группы тюркских языков алтайской языковой семьи. Казахский язык – это язык казахского народа; сегодня он также является официальным языком Республики Казахстан (РК). Знания об этом языке получены в ходе развития казахской лингвистической традиции, складывающейся на протяжении 150-200 лет, начиная со второй половины XIX в. [Куталмыш, 2019: 31].

Этническое самосознание российских казахов определялось также родоплеменной принадлежностью, которая в советское время носила номинальный характер и по форме являлась исторической традицией. В целом казахи Российской Федерации связаны одним эндогамным кругом и практически не подверглись этнической модификации. Это обусловлено устойчивым сохранением национальной специфики в материальной и духовной культуре казахского населения в иноэтническом окружении. Казахи России всегда осознавали себя как часть всего казахского народа. [Ермекбай, 2018: 100].

По данным Росстат, количество казахов в РФ и их процентные составляющие среди всех этносов согласно переписям населения России.

| № | Год | Численность казахов в РФ | Процентная составляющая |
|---|---|---|---|
| 1 | 1989 | 635,865 тыс. человек | 0,43% |
| 2 | 2002 | 653,962 тыс. человек | 0,45% |
| 3 | 2010 | 647,732 тыс. человек | 0,45% |
| 4 | 2020 | 591,970 тыс. человек | 0,40% |

В России за 10 лет (2010 - 2020 гг.) численность казахов уменьшилась на 55,762 тыс. человек или на 8,61%.

В настоящее время казахское население проживает и в граничащих с Казахстаном регионах России, Китая, Узбекистана, Туркмении, Киргизии. В России казахи являются десятым по численности народом Российской Федерации, согласно переписи населения 2020 г. их численность составляет 591,970 тыс. человек. Большинство казахов, проживающих на территории РФ, разместилось в Астраханской, Волгоградской, Саратовской, Самарской, Оренбургской, Челябинской, Курганской, Тюменской, Омской, Новосибирской областях, Алтайском крае и республике Алтай. Самая многочисленная казахская диаспора на сегодняшний день – 107734 человек – проживает в Оренбургской области. [Шушаева, 2022: 291].

В России далеко не все понимают, что казахи – коренные жители российско-казахстанского пограничья. Сложность осознания этого факта обусловлена спецификой традиционного жизнеобеспечения казахов. Они появлялись на этих территориях в летнее время – приходили сюда на свои летние стоянки вдоль небольших рек, таких, как, например, Илек, Джарлинка, Киима в Оренбургской области. Вдоль этих рек находятся древние родовые кладбища казахов. На зиму же казахи уходили на территорию современного Казахстана. А центрами притяжения казахской кочевой округи были города Оренбург, Актюбинск, Уральск. Такой ритм передвижения был органичным для казахов, пока у них сохранялся кочевой хозяйственный тип жизнедеятельности. С изменением же образа жизни в XX веке – с переходом кочевников на оседлость в результате политики форсированной седентаризации и коллективизации и, как следствие, с распространением оседлого животноводства и зерноводства, а в последующие годы с освоением целины и созданием агропромышленных комплексов – естественным образом ушла в прошлое и перекочевка. Ее наследие – распыленность близких родственников в ареале прежнего кочевья. Установление границы разделило этих людей и на межгосударственном уровне. [Ларина, Наумова, 2006: 35].

Казахи проживают во всех без исключения областях, автономных республиках и автономных округах РФ. Районами их компактного проживания являются Астраханская, Оренбургская, Омская, Саратовская, Волгоградская, Челябинская, Курганская области, Алтайский край и Республика Алтай. Казахи этих территорий не причисляют себя к диаспоре, в отличие от казахов Москвы, Санкт-Петербурга. Они живут на землях своих предков, являются коренным населением, сохранили традиционный уклад жизни. В этом - специфика казахов России в отличие от других народов России, например, корейцев, немцев, турок и других. И в этом – общность истории казахов России с историей казахов Китая и Узбекистана. Однако ни в одном регионе, имеющего выход на Казахстан, казахи не представляют этнического большинства. Так, доля казахов от общего населения Оренбургской обл. составляет 5,92%. По численности казахского населения Оренбургская обл. занимает второе место после Астраханской обл. РФ. [Балтабаева, 2016: 48-49].

Оренбуржье – один из самых привлекательных и благоприятных регионов в плане экономического развития и социально-политической, межнациональной стабильности. Географическая особенность Оренбургской области связана с тем, что на северо-западе проходит граница с Республикой Татарстан, на севере – с Республикой Башкортостан, на востоке и юге – с Республикой Казахстан. Формирование народонаселения Оренбуржья

проходило в условиях активных миграций населения извне и непрерывных этнокультурных контактов. Оренбург, наряду с Казанью, стал культурным центром российских мусульман, в том числе – первой столицей советского Казахстана. Сегодня в Оренбурге функционирует уникальный культурный комплекс «Национальная деревня». Его главное предназначение – дать возможность поближе узнать культуру, нравы и обычаи народов области. В августе 2007 г. в рамках Дней Актюбинской обл. в Оренбуржье состоялась церемония открытия казахского подворья. Казахи в Оренбургской обл. являются третьим этносом после русских (1 519 525 чел., 74,74%) и татар (151 492 чел., 7,45%). Среди тюркских и мусульманских народов Оренбуржья казахи занимают второе место после татар. Среди казахов области лица моложе трудоспособного возраста составляют 21,77%, трудоспособного – 66,53% и старше трудоспособного – 11,70%). [Балтабаева, 2016: 49].

В среде российских казахов начинается процесс пробуждения этнического самосознания. Так, в Российской Федерации традиционно проводятся мероприятия, направленные на возрождение казахской культуры. Казахские общественные объединения играют огромную роль в развитии образования, сохранении традиций, обычаев казахов, проживающих в Оренбуржье. С момента образования общества «Казах теле» была поставлена задача удовлетворения запросов казахов Оренбурга, касающихся изучения языка, традиций, истории народа. Целью создания и деятельности общественной организации «Акжайык» явилось:

1) возрождение и дальнейшее развитие казахского языка, старинных национальных обычаев, традиций, духовного наследия;

2) содействие в изучении казахского языка в общеобразовательных школах и других учебных заведениях народного образования в различных формах: кружки, факультативы, участие в проведении ежегодных национальных праздников. [Шушаева, 2022: 292].

В числе российских казахских объединений, известных своей деятельностью, можно отметить казахскую региональную НКА (г. Москва); казахское общество «Ата-Мекен» (г. Санкт-Петербург); общество «Казахстан» (г. Казань, Республика Татарстан); культурный центр «Жерлестер» (г. Элиста, Республика Калмыкия); Ассоциацию казахов Оренбуржья (г. Оренбург); областное общество казахской культуры и языка «Жолдастық» (г. Астрахань); областное общество казахов «Достық» (г. Тюмень); Ассоциацию поволжских казахов (г. Саратов); казахский культурный центр «Арман» (г. Красный Кут, Саратовская область); городскую культурно-просветительскую организацию казахов «Үркер» (г. Орск, Оренбургская область); клуб «Самал» при Центре досуга (г. Палласовка, Волгоградская область) и др. В настоящее время российские казахи проводят различные мероприятия, посвященные культурно-просветительной и научной пропаганде казахских традиций и обычаев в контексте общемировой человеческой цивилизации. Вместе с тем российских казахов интересуют проблемы, связанные с созданием условий для изучения казахского языка, организации приема телевизионных передач из Казахстана на казахском языке по российским каналам, с развитием культурных и деловых связей, приграничной торговли, вопросами двойного гражданства, упрощения порядка въезда и выезда отдельных категорий граждан на территории государств-соседей, подготовки кадров и др. [Ермекбай, 2018: 102-103].

По данным Всероссийской переписи населения 2020 г. в России, численность лиц, владеющих казахским языком, составляет 265,7 тысяч человек или 0,2 %. Из них используют его в повседневной жизни – 188,5 тысяч человек – 0,14%. Отношение числа использующих в быту и повседневной жизни к числу владеющих составляет 71%. Согласно данным Росстат за 2020 г., численность лиц, владеющих казахским языком в Оренбургской области, составляет 38,046 тысяч человек. Из них используют его в повседневной жизни –28,036 тысяч человек.

Основной этнокультурной проблемой российских казахов можно считать проблему родного (казахского) языка. Отсутствие полноценной образовательной вертикали на казахском языке, языковая ассимиляция – важнейшие показатели ухудшения качественной характеристики казахского населения во всех регионах России. Казахский язык катастрофически уменьшил свои образовательные и коммуникативные функции. Язык как часть культуры вытеснен в бытовую сферу и, в конечном итоге, утрачен молодым поколением. Казахский язык теряется быстрее, чем этническая самоидентификация казахов в инонациональной, поликультурной и поликонфессиональной среде [Балтабаева, 2016: 52-53].

Казахи Оренбуржья, как и другие народы края, настроены на позитивный культурный диалог и в этом большая заслуга местных государственных органов и национально-культурных автономий. Тем не менее, не теряют своей актуальности вопросы удовлетворения их культурных, в том числе языковых, запросов, дальнейшего укрепления взаимопонимания и межэтнической стабильности, тем более в приграничной зоне, в условиях активной миграции населения [Балтабаева, 2016: 54].

**Литература**

1. Шушаева А.С. Сохранение культурного наследия казахского народа в Оренбуржье // Научное обозрение: Актуальные вопросы теории и практики: сборник статей II Международной научно-практической конференции. – Пенза: МЦНС «Наука и Просвещение». – 2022. – С. 291-292.

2. Этногеографический атлас Оренбургской области / Т.И. Герасименко, Н.Ю. Святоха, И.Ю. Филимонова; Этнографическая комиссия русского географического общества, Оренбургский государственный университет, Оренбургское отделение русского географического общества. – Оренбург, 2015. – 80 с.

3. Хабижанова Г.Б. К истории формирования казахских племен объединения Байулы // Томский журнал лингвистических и антропологических исследований. – 2020. – №3 (29). – С. 161-169.

4. Куталмыш С.Л. Казахская лингвистическая традиция: исторический аспект // Вестник Томского государственного педагогического университета. – 2019. – № 5 (202). – С. 31-37.

5. Ермекбай Ж.А. Казахи России в прошлом и настоящем // Известия Иркутского государственного университета. Серия История. – 2018. – Т. 25. – С. 97-105.

6. Ларина Е.И., Наумова О.Б. Миграция казахов в западной части российско-казахстанского пограничья // Вестник Евразии. – 2006. – № 4., С. 32-48.

7. Балтабаева К.Н. Казахи Оренбургской области (по данным переписи 2010 года) // Казахи Евразии: история и культура. сборник научных трудов международной научно-практической конференции, посвященной 300-летию города Омска и 150-летию со дня рождения А.Н. Букейханова; Региональной общественной организации «Сибирский центр казахской культуры «Мөлдір». Гл. ред. Н. А. Томилов ; отв. ред.: Ш. К. Ахметова, А. А. Ильина, И. В. Толпеко. – 2016. –С. 47-54.

© Сийдалина К.С., 2024

УДК 821.512.141

***Өмөтҡужина Ә.Р.,***
*ӨФҺТУ СИ (Ф) студенты*
*(ғилми ет.: филол.ф.к., доцент Сәмерханова Г.Х.),*
*Сибай ҡ.*
***Уметкужина А.Р.,***
*студент СИ (Ф) УУНиТ*
*(науч. рук.: к.филол.н., доцент Самирханова Г.Х.),*
*г.Сибай*

# СӘСӘНИӘ ИЛСИӘ ҠАСИМОВА-ЯҢЫБАЕВА ИЖАДЫ

# ТВОРЧЕСТВО СЭСЭНИИ ИЛЬСИИ КАСИМОВОЙ-ЯНЫБАЕВОЙ

**Аннотация.** Статья посвящена изучению творчества сэсэнии Ильсии Касимовой-Яныбаевой. Она, продолжая традиции известных башкирских сэсэнов, создает свои кубаиры, насихаты и баиты на самые злободневные проблемы современности. Лейтмотивом ее творчества являются идеи сохранения родного языка, воспитания любви к Родине, бережного отношения к природе родного края и духовному наследию прошлых лет.

**Ключевые слова:** словесное искусство, башкирский фольклор, башкирская изустная литература, сэсэн, поэт-импровизатор.

Сығышы менән йәмле Әбйәлил районынан булған һүҙ оҫталары бик күп – Шафиҡ Әминев-Тамъяни, Байыҡ сәсән, Ишмөхәмәт Мырҙаҡаев, Бейеш батыр, Хәнифә Әүбәкирова, Гөлнур Мамлеева, Вәсилә Садиҡова, Фатима Һибәтова, Мәфтуха Мусина, Мәүҙиға Баймөхәмәтова, Гөлсәсәк Зәйнуллина, Гөлнара Нүрғәлиева, Илсиә Ҡасимова һ.б. Төрлө быуаттарҙа, төрлө йылдарҙа ижад итеүсе был һүҙ оҫталары халҡыбыҙҙың һүҙ сәнғәте үҫешенә тос өлөш индергән.

Хәҙерге ваҡытта сәсәнселек мәктәбен үҫтереүсе һүҙ оҫталарының береһе – шағирә, прозаик, сәсәниә булараҡ танылыу яулаған Илсиә Малыбай ҡыҙы Ҡасимова-Яңыбаева. Ул 1959 йылдың 12 ноябрендә Әбйәлил районының Хәмит ауылында тыуған. Тапҡыр телле әсәһе, йор һүҙле өләсәйҙәренең мәҡәл-әйтемдәр, һамаҡтар ҡушып һөйләшкәндәрен тыңлап үҫкән ҡыҙ үҙе лә бәләкәйҙән ижад менән шөғөлләнә башлай. Үҙе ижад иткән ҡобайырҙары, шиғырҙары менән төрлө конкурстарҙа, йыйындарҙа сығыш яһай. Айҙар Байыҡ сәсән, Салауат батыр, М. Аҡмулла, Ишмөхәмәт Мырҙаҡаев хөрмәтенә ойошторолған сәсәндәр бәйгеләрендә, “Башҡорт Википедияһына – 18 йәш” исемле сәсәндәр әйтешендә, Башҡортостандың көнъяҡ-көнсығыш сәсәндәр бәйгеһендә һәм башҡа ярыштарҙа ҡатнашып юғары баһаларға лайыҡ була.

Илсиә Ҡасимова-Яңыбаева үҙенең ҡобайырҙарында төрлө темаларҙы яҡтырта, замандың актуаль проблемаларын күтәрә. Мәҫәлән, “Көслө ҡорал – туған тел” ҡобайырында ул туған телде һаҡлау, уны киләсәк быуынға еткереү проблемаһын күтәрә. Әҫәрҙә Шафиҡ Әминев-Тамъяни һәм Шәғәле Шаҡман кеүек арҙаҡлы шәхестәрҙең исеме телгә алына. Автор уларҙың рухына тап төшөрмәҫкә саҡыра, илде һаҡлап ҡалыуҙа телдең төп ҡорал булыуын билдәләй:

Көйөнәлер Шәғәле
Бошоналыр Шәғәле:
Нисә быуат үтһә лә,
Шул уҡ илдең әхүәле.
Әй, башҡортом шуны бел;
Көслө ҡорал туған тел;
Мең һаҙаҡка торошло,
Ишле ҡорал – туған тел.
Көрәшәбеҙ тиһәгеҙ
Тыуып-үҫкән ил өсөн,
Йәлләмәй йән-тән көсөн,
Көрәшегеҙ тел өсөн.

Сәсәниәнең туған телде һаҡлау проблемаһына яҙылған тағы бер әҫәре – “Айгөл Муллағәләмоваға (Таулыбикәгә) яуап”. Әҫәрҙә бала күңелендә телгә һөйөү тәрбиәләү – һәр әсәнең изге бурысы тигән фекер үткәрелә:

Телегеҙҙе һөйһәгеҙ,
Балаң да һөйөр телен.
Ташламаҫ тыуған илен.

Сәсәниә әйтеш барышындағы яуабында телдең киләсәген һәр кем ҡурсаларға бурыслы булыуын һыҙыҡ өҫтөнә ала:

Батыр башҡорт ҡына түгел,
Аңлы башҡорттар кәрәк.
Һәр башҡорттоң күкрәгендә
“Телем” – тип типһен йөрәк.

Илсиә Ҡасимова-Яңыбаева әҫәрҙәре араһында яҡташы Советтар Союзы геройы, генерал-майор Таһир Таип улы Кусимовҡа арнап яҙылған ҡобайыр бар. Әҫәрҙә башта ауыр һуғыш йылдары тасуирлана, артабан башҡорт батырҙарының ҡаһарманлығы һүрәтләнә:

Илде бирмәк, йән биргән
Тигән башҡорт батыры
Иленә яу килгәндә
Башҡорт баҫып ятырмы лау,
Батыр ҡасып ятырмы?

Ҡобайырҙа генерал Миңлеғәле Шайморатов, Таһир Кусимов образдары аша башҡорт яугирҙары ҡылыҡһырлана:

“Батырмын” – тип ҡысҡырмаған,
“Еңдем” – тип оран һалмаған,
Бер яуҙан да ҡалмаған
Башҡорт булмай кем булһын?
Башҡортҡа тиң кем булһын?

Башҡорт батырҙарының данын киләсәк быуындарға еткереү – сәсәндәр, һүҙ оҫталарының бурысы тигән фекер үткәрелә әҫәрҙә.

Илсиә Ҡасимова-Яңыбаеваның ижадында нәсихәттәр ҙә ҙур урын алып тора. Ул үҙенең нәсихәттәрендә тел, ил һәм милләт яҙмышы мәсьәләләрен күтәрә. Нәсихәттәренең береһе “Тел – бүләгем” тип атала. Бында ул кешеләрҙе әҙәпле, тәртипле, Хоҙайға рәхмәтле булырға өндәй. Ауыз-тел ижадсыһының киләсәк быуынға еткерер бер бүләге бар, ул да булһа – тел.

Илсиә Ҡасимова-Яңыбаеваның ижадында бәйет жанрында яҙылған әҫәрҙәр ҙә бик күп. Уларҙың береһе билдәле фольклорсы-ғалим, филология фәндәре докторы, профессор Әхмәт Мөхәмәтвәли улы Сөләймәновҡа бағышланған. Бәйеттә автор уны “халҡыбыҙ тарихын яҡлаусы атай”, “сағыу һәм һүнмәҫ йондоҙ” тип атай:

Ҡурсаусыһы китте ил-йортоноң
Умыртҡаһы һынды башҡортомдоң.
Сағыу йондоҙ булып балҡыны ла,
Һүнмәҫ йондоҙ булып атылды ла.

Илсиә Малыбай ҡыҙы ауыҙ-тел ижады шиғриәтендә электән һаҡланған поэтик үлсәмдәр менән яҡшы эш итә. Уның әҫәрҙәре күбеһенсә ете ижекле юлдар менән яҙылған. Бындай үлсәм менән яҙылған әҫәрҙәр көйләп әйтеү һәм хәтерҙә ҡалдырыу өсөн уңайлы.

Илсиә Ҡасимова-Яңыбаева үҙенең ижады аша тарихи үткәнебеҙҙе, билдәле шәхестәребеҙҙе, ғөрөф-ғәҙәттәребеҙҙе, матур йолаларыбыҙҙы онотмаҫҡа өндәй. Ата-бабаларҙың тарихын, көнкүреш әйберҙәрен һәм кәсептәрен күрһәтеп һөйләү өсөн үҙенең шәхси музейын да булдырған. “Тыуған еребеҙҙе, тәбиғәтебеҙҙе һаҡлап ҡалһаҡ, телебеҙҙе, тарихыбыҙҙы белһәк, асылыбыҙҙы юғалтыу ҡурҡынысы булмаҫ ине,” – тигән фекерҙә Илсиә Малыбай ҡыҙы. Әбйәлилдең ҡуйы урмандарға, бейек тауҙарға бай Хәмит ауылында йәшәп, ижад итеүсе йор һәм тапҡыр һүҙле сәсәниәнең хеҙмәттәре бушҡа булмаҫ, уның ижад емештәре халыҡ телендә яңғырар һәм музейында булған киләсәк быуын үҙ тарихтарын яҡшы белер һәм һаҡлап ҡалыр тигән ышаныстабыҙ.

**Әҙәбиәт**

1. Хәсәнов Д.Х., Сәмерханова Г.Х. Ҡобайырҙарҙың тәрбиәүи әһәмиәте // Неделя науки – 2022. Материалы Всероссийской научно-практической конференции. – Сибай, 2022. – С. 289-290.

© Умуткужина А.Р., Самирханова Г.Х., 2024

УДК 81

***Фазылова Р.Р.,***
*М.Аҡмулла ис. БДПУ студенты*
*(ғилми ет.: филол. ф. к., доцент Рәхимова Э.Ф.),*
*Өфө ҡ.*
***Фазылова Р.Р.,***
*студент БГПУ им. М. Акмуллы*
*(науч. рук.: к. филол. н., доцент Рахимова Э.Ф.),*
*г.Уфа*

## З. БИИШЕВА ИЖАДЫНДА СИНОНИМДАР

## СИНОНИМЫ В ТВОРЧЕСТВЕ З. БИИШЕВОЙ

**Аннотация.** Статья посвящена изучению синонимов. В качестве примера были рассмотрены синонимы из рассказа Зайнаб Биишевой. Также делается вывод о специфике синонимов и их роли в нашей речи.

**Ключевые слова: с**инонимы, творчество, рассказ, нравственность, специфика.

Синонимдар һүҙе грек теленән алынған, ул “исемдәш, бер исемдәге» тигән мәғәнәне аңлата. Синонимдар тип телмәрҙең бер өлөшөнә ҡараған һүҙҙәр атала, уларҙың мәғәнәләре тулыһынса йәки өлөшләтә тап килә. Текста һәм телмәрҙә синонимдар бер үк грамматик һәм синтаксик функция үтәй. Уларҙың төп тәғәйелеше – телмәрҙе байыту, унық төрләлөгөн, сағыулығын арттырыу. Синонимлыҡтың нигеҙендә ысынбарлыҡтағы бер үк күренештәрҙе, әйберҙәрҙе төрлө һүҙҙәр менән атау, бер ук төшөнсәне төрлөсә яҡлап асыла. Синонимдарҙың төп функцияһы – аныҡлау, дөрөҫләү, тип аҙа Р.А. Будагов.[Ураҡсин, 1985: 5] Синонимдарҙың үҙенсәлеге шунда ла, хатта бер үк мәғәнәгә эйә булһалар ҙа, улар экспрессияһы, ҡулланылышы, шулай уҡ теге йәки был стильгә беркетелгәнлеге буйынса айырыла.

Синонимлыҡ күренеше телдең һүҙ һәм фразеологик берәмектәр системаһында, грамматик формаларында, синтаксик бәйләнештәрендә сағыла, йәғни ул телдең бөтә ҡоролошона, кимәлдәренә хас. Ошонан сығып, уларҙы төп өс төркөмгә бүләләр: лекси кофразеологик синонимдар, морфологик синонимдар һәм синтаксик синонимдар,

Синонимдар ул төрлө яңғыраған, әммә мәғәнәһе буйынса яҡын булған һүҙҙәр . Синонимдарҙың был билдәләмәһе 19 быуат аҙағында барлыкҡа килә һәм беҙҙең көндәргә тиклем һаҡланып ҡалған. А.М. Земский, С.Е. Крючков, М. В. Светлаев, А.М. Финкель, Н.М. Баженов, А.Е.Ефимов, һәм башҡа төрлө ғалимдар былдай фекеҙә торалар [Брагина, 1986: 110]. Рус теленең лексик синонимдарын өйрәнеү 300 йыл тиерлек алып барыла. Синонимдарҙың беренсе рус һүҙлеге булып Д.И. Фонвизиндың «Рәсәй ҡатламы Тәжрибәһе» (1783) тора. Һүҙлек үҙе Аббат Жирарҙың француз «Синонимдар Һүҙлеге» нигеҙендә яҙылған. Был һүҙлек сәйәси сатира булып тора, шуға күрә был һүҙлектәр өсөн ғәҙәти түгел.

Башҡорт теле, башҡа телдәр кеүек үк, төрлө синонимдарға бай. Башҡорт синонимдарын өйрәнеү һүҙлек запасын, телде аңлауҙы һәм һүҙҙәрҙең мәғәнәһенең нескә төҫтәрен яҡшыртырға мөмкинлек бирә. Әммә, башҡорт теленең синонимик байлығы бөтә тулылығы менән өйрәнелеп бөтмәгән әле. Шуға күрә был өлкәлә айырым мәҡәләләр һәм дәреслектәрҙә бирелгән бүлектәрҙән тыш тикшеренеүҙәр үткәрелгәне юҡ. Синонимдарҙың тәүге ҡыҫҡаса һүҙлеге 1966 йылда баҫылып сыҡҡан ине. Ул һүҙлеккә 500-гә яҡын ояға

ҡараған 2 мең синоним алынған. һүҙҙәрҙе туплау, синонимик ояларҙы теүәлләү, эше дауам ителә килде, шуның өсөн дә был баҫма тәүгеһенән күләме һәм эшләнеше яғынан нык ҡына айырылып ҡалған. Бөгөнгө көндә башҡорт ғалимдарынан З.Г. Ураҡсиндың "Башҡорт теленең синонимдар һүҙлеге» һәм М.Ғ. Усманованың «Башҡортса-русса синонимдар һүҙлеге» синонимдар һүҙлектәре һаҡланып ҡалған.

Синонимдарҙың бер нисә актуальлеге беҙҙең көнгә тиклем һаҡланған:

1. Һүҙлек запасын байытыу. Синонимдарҙы белеү бер үк мәғәнәне белдереү өсөн яңы һүҙҙәр табырға мөмкинлек бирә, был телмәрҙең төрлөлөгөнә һәм һүҙлек запасын байытыуға булышлыҡ итә.

2. Тел һығылмалылығын арттырыу. Төрлө синонимдарҙы белеү текстар төҙөгәндә йәки башҡа кешеләр менән аралашыуҙа аныҡыраҡ һәм сағыуыраҡ һүҙҙәр һайларға мөмкинлек бирә.

3. Яҙыу оҫталығын яҡшыртыу. Синонимдарҙы белеү тексты ҡабатлауҙан ҡасырға һәм уны уҡыусы өсөн төрлөсә һәм ҡыҙыҡлыраҡ итергә ярҙам итә

Синонимдарҙы ҡулланыу аралашыуҙа һәм яҙыуҙа мөһим күнекмә булып тора, ул беҙгә аралашыуҙа һөҙөмтәлерәк һәм грамоталыраҡ булырға ярҙам итә. Шулай итеп, синонимдарҙы өйрәнеү тел күнекмәләрен үҫтереүҙең мөһим аспекты булып тора һәм тормоштоң төрлө өлкәләрендә телде сифатлыраҡ ҡулланыуға булышлыҡ итә.

Башҡорт синонимдары, башҡа телдәрҙәге синонимдар кеүек үк, үҙенсәлектәре менән айырылып тора. Башҡорт синонимдарының төп һыҙаттары:

- Байлыҡ һәм төрлөлөк. Башҡорт теле киң һүҙлек запасына эйә, был уға күп һүҙҙәр һәм төшөнсәләр өсөн күп һанлы синонимдарға эйә булырға мөмкинлек бирә.

- Төбәк үҙенсәлеге. Башҡорт телендә синонимдар билдәле бер төбәктәрҙә йәки халыҡтың билдәле бер төркөмдәре араһында ғына ҡулланыла.

- Тел төрлөлөгөн һаҡлау. Телдә синонимдарҙың булыуы уның төрлөлөгөнә булышлыҡ итә һәм әйтемдең контексына, маҡсатына ҡарап, иң ҡулай һүҙҙәрҙе һайларға мөмкинлек бирә.

- Тарихи аспекттары. Ҡайһы бер башҡорт синонимдары халыҡ тарихында йәки традицияларында барлыҡҡа килеүе мөмкин, уларҙың үҙенсәлектәрен һәм уникаль үҙенсәлектәрен сағылдыра.

- Фонетик үҙенсәлектәре. Башҡорт синонимдары шулай уҡ бер-береһенән яңғырашы, фонетик структураһы йәки баҫымлылығы менән айырылып торорға мөмкин, был уларҙы был телгә хас һәм уникаль итә.

Яҙыусылар өсөн лексик синонимдарҙы ҡулланыу иң ҡатмарлы проблемаларҙың береһе: сөнки шағирҙарҙың «һүҙ ғазаптары» ғәҙәттә тоторға мөмкин булмаған, ҡасып барған синонимды эҙләүҙә. Синоним сараларҙы һайлап алғанда һүҙ рәссамдарының ныҡышмалы хеҙмәте тураһында, уларҙың ҡулъяҙмаларының ҡара варианттары буйынса фекер йөрөтөргә мөмкин. Уларҙа күп кенә алмаштырыуҙар һәм авторҙар яҙылғанды күп тапҡыр һыҙып ташлауҙар, аныҡыраҡ һүҙ һайлауҙар күҙәтелә. Синонимдарҙы асыҡ ҡулланыу рәссамдарға ҙур стилистик мөмкинлектәр бирә. Эмоциональ телмәрҙә синонимдарҙы яҙыу билдәне, ғәмәлде көсәйтеүгә хеҙмәт итә.

Беҙҙең көндәрҙә күп кенә авторҙарҙың әҫәрҙәрндә синонидар күҙәтелә. Зәйнәб Биишеваның мәктәп программалары курсына ингән әҫәрҙәре шиғрилек менән генә түгел, ә сағыулыҡ, эмоциональ һәм шундай ғәжәп тәьҫир көсө менән дә характерлана. Был айырым башҡорт теле тураһында һөйләргә мөмкинлек бирә. Зәйнәб Биишева үҙенең китаптарында төрлө нәмәләр тураһында һөйләй: бала сағы, тыуған яҡ тәбиғәтенең матурлығы, изгелек һәм яуызлыҡ, ғәҙеллек һәм тигеҙһеҙлек тураһында. Ул балалар өсөн бик күп һәм бик теләп яҙа. Ләкин билдәле яҙыусының әҫәрҙәрендә синонимдар өйрәнелеп бөтөлмәгән. Шуның өсөн, миҫал итеп Зәйнәб Биишеваның ижадынан «Далала таң" хикәйәһән һәм "Онотолмаҫ йәшлек" шиғырын алайыҡ, сөнки бында синонимдар бик күп күрһәтелә.

З. Биишева әҫәрҙәрендә синонимдар үҙ-ара мәғәнәләш булғандары өсөн ҡулланыла һәм бында уларҙың мәғәнә нескәлектәре аша тасуирлыҡты арттырыу маҡсатында бирелә. Мәҫәлән:

1. Күпте күргән, бик күпте кисергән мал дала ул. Был һөйләмдә кисереү һәм күреү синоним һүҙҙәр [Биишева, 2009: 154] Кисереү, күреү күсмә мәғәнәһендә баштан үткәреү аңлата. Ә ысын мәғендә яҙмышҡа төшөү, татып ҡарау (ҡайғы, шатлыҡ,, бәхетһеҙлек һ.б.) тигәнде аңлата [Башҡортса-русса синонимдар, 2011: 45].

2. Курсанттар ҙа Ирьегеттең сикһеҙ ҡыйыулыҡ һәм бөткөһөҙ бәхет менән балҡыған йөҙөнә, ҡапыл ҡыҙарынып, ҡыйыуһыҙланып ҡалған Алмаҡайҙың йәшле күҙҙәренә ҡарап был һүҙҙең дөрөҫлөгөнә ышандылар [Биишева, 2009: 153]. Был һөйләмдә З.Биишева беҙгә ике пар синоним күрһәтә. Беренсеһе пар: сикһеҙ һәм бөткөһөҙ синоним һүҙҙәр. Был һүҙҙәрҙең мәғәнәһе: башлағысы һәм аҙағы булмаған тигәнде аңлата. Ә икесе пар синонимдар ул: ҡыҙарынып , ҡыйыуһыҙланып . Был һүҙҙәр берәй нәмәнән ҡурҡыуҙы йәки борсолоҙы аңлата. Ошо һөйләм нигеҙендә З.Бишеева синономдарҙы ҡулланып уҡыусыларға хәл-ваҡиғаның ни тиклем тәьҫир итеүен күрһәтеүгә өлгәшкән.

Синонимдар телмәрҙе төрлөләндерергә, бер үк һүҙҙәрҙе ҡулланыуҙан ҡасырға мөмкинлек бирә. Әммә, З.Биишева ҡабатланған һүҙҙе уның синонимы менән механик рәүештә алмаштырмай, ә ҡулланылған һүҙҙәрҙең мәғәнәүи һәм экспрессив төҫтәрен иҫәпкә алырға тырышҡан. Мәҫәлән:

5.Улар таң нурына мансылып, яҙ тыны бөркөп ятҡан далаға текләп тынып ҡалдылар, һабан турғайҙары сырылдап күккә, һауаға күтәрелде.[ Биишева, 2009: 158] Был һөйләмдә күккә, һауға синоним һүҙҙәр. Ерҙе уратҡан көмбәҙ кеүек һауа һәм аралыҡ. Күк киң ҡулланылышлы.

6. Беҙгә иркен дала, киң майҙан кәрәк.[Биишева,2009: 156] Киң, иркен – ҙур майҙанға йәйелгән, һыйышлы. Иркен– тығыҙ түгел [Ураҡсин,1985: 65].

З. Биишеваның хикәйәһедә төрлө төркөмдәрҙең синонимдары киң урын ала, улар беҙҙең телмәрҙе төрлөләндерергә, предметтар, ысынбарлыҡ күренештәре тураһында күҙаллауҙарҙы аныҡларға, тулыландырырға, уларҙы төрлөсә һүрәтләргә ярҙам итә

Шулай уҡ шиғыр өҙөгөнән миҫал:

Ҡайҙа ҡалды күңел ҡанатланған
Тәүге һөйөү,
Тәүге тулҡыныу.
Эстән әкрен генә йырлай-мөңрәй,
Уны һағыныу, уны юҡһыныу [ Биишева, 2009: 67].

Был шиғыр юлдарында һөйөү, тулҡыныу синонимдар һүҙҙәре градация тыуҙыра, сөнки уларҙың һәр береһе алдағыһының мәғәнәһен көсәйтә. Шулай уҡ был шиғырҙа автор бер һүҙҙе икенсеһенә аныҡлап, бер нисә синоним һүҙҙе бергә ҡулланып, нескә мәғәнәүи төҫтәрҙе уҡыусыларға белдерергә тырышҡан. Һағыныу, юҡһыныу синоним һүҙҙәре был шиғыр юлдарын аныҡыраҡ күрһәтелә. Шулай итеп, З.Биишева синонимдарҙы ҡулланып, мәлдең фекерен һәм күҙаллауын сағыуыраҡ тапшыра. Ул был һүҙҙәрҙе ҡуллана сөнки синонимдар фекерҙәрҙе образлыраҡ белдерә. Был шиғыр нигеҙендә һығымта яһарға мөмкин:синонимдар телмәрҙе төрлөсә генә түгел, ә билдәле бер мәғәнә лә индерә, һәм автор биргән фекерҙе сағыуыраҡ итеп күрһәтә

Синонимия стилик саралаҙы стилистик һайлап алыуҙың киң мөмкинлектәрен булдыра, әммә теүәл һүҙҙе эҙләү ҙур хеҙмәт талап итә. Ҡайһы берҙә синонимдарҙың нимә менән айырылып тороуын, уларҙың ниндәй мәғәнәле йәки эмоциональ экспрессив төҫтәрҙе сағылдырыуын билдәләү еңел түгел. Һәм бер нисә һүҙ араһынан берҙән-бер дөрөҫ, кәрәкле нәмәне һайлап алыу ғына түгел. Туған телдең синонимдар байлығына эйә булмайынса, телмәрҙе сағыу итергә мөмкин түгел Һүҙлектең ярлылығы һүҙҙәрҙең йыш ҡабатланыуына, тавтологияға, һүҙҙәрҙең мәғәнәһен иҫәпкә алмайынса ҡулланылыуына килтергә мөмкин.

Ғөмүмән әйткәндә, башҡорт синонимдарын үҫтереү һәм өйрәнеү башҡорт халҡының мәҙәниәтен һәм телен һаҡлауҙа һәм үҫтереүҙә мөһим роль уйнай. Шуны иҫтә тотоу мөһим: тел – халыҡтың мәҙәни мираҫының бер өлөшө, һәм уның үҫеше, һаҡланыуы этностың үҙ-үҙен таныуы һәм һаҡлау өсөн ҙур әһәмиәткә эйә.

Синонимдар тормошобоҙҙа мөһим роль уйнай, сөнки беҙгә телмәрҙә анығыраҡ һәм төрлөрәк булырға ярҙам итә. Улар беҙҙең һүҙлек запасын байыта, аралашыу күнекмәләрен яҡшырта һәм беҙгә фекерҙәребеҙҙе һәм тойғоларыбыҙҙы анығыраҡ һәм теүәлрәк белдерергә мөмкинлек бирә. Синонимдар ярҙамында беҙ телмәрҙә монотонлыҡтан ҡаса алабыҙ, уны йәнлерәк һәм ҡыҙыҡлыраҡ итә алабыҙ. Улар шулай уҡ беҙгә һүҙ һайлауҙа ижади булырға ярҙам итә һәм фекерләүҙе дәртләндереп тора.

**Әҙәбиәт**


1.Башҡортса-русса синонимдар һүҙлеге. Башкирско-русский словарь синонимов / төҙ. М. Ғ. Усманова. – Өфө: Китап, 2011. – 264 б.

2. Брагина, А. Әҙәби телдә синонимдар. – М., 1986

3. Зайнаб Биишева. Избранное / Сост. Л. Г. Гималова. – Уфа: Кита Уфа: Китап, 2009 – 384 с.

4. Ураҡсин З.Ғ. Башҡорт теленең синонимдар һүҙлеге. Т. М. Ғарипов редакцияһында. – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1985 й.– 164 б.


© Фазылова Р.Р., 2024

УДК 821.512.141


***Фәхриева Ә.Р.,***
*М.Аҡмулла ис. БДПУ студенты*
*(ғилми ет.:филол. ф. к., доцент Рәхимова Э.Ф.)*
*Өфө ҡ.*

***Фахриева А.Р.,***
*студент БГПУ им. М. Акмуллы*
*(науч. ру: к.филол.н., доцент Рахимова Э.Ф.)*
*г. Уфа*


## Д. БҮЛӘКОВТЫҢ “ТЫҠРЫҠ БАШЫ – БЕҘҘЕҢ БИЛӘМӘ” ПОВЕСЫНДА ДУҪЛЫҠ ТЕМАҺЫ

## ТЕМА ДРУЖБЫ В ПОВЕСТИ Д. БУЛЯКОВА «НАЧАЛО ПЕРЕУЛКА – НАША ТЕРРИТОРИЯ»

**Аннотация.** В статье рассматривается тема дружбы на примере произведения Д. Булякокова “Тыҡрыҡ башы – беҙҙең биләмә”, показывается роль повести в деле воспитания нравственных и эстетических качеств учащихся.

**Ключевые слова:** дружба, личность, воспитание, произведение “Тыҡрыҡ башы – беҙҙең биләмә”, Д. Буляков.

Дуҫлыҡ, мөхәббәт темалары мәңгелек темаларҙың береһе һанала. Һәр осорҙа улар төрлөсә асылһа, һүрәтләнһә лә, кешелек донъяһындағы мәңгелек ҡиммәттәргә дан йырлай. Әҙәби әҫәрҙәрҙә, мәҫәлән, дуҫлыҡ темаһына ҡағылышлы ваҡиғалар аша уҡыусы үҙенең дуҫтарына ҡарата мөнәсәбәтен ыңғай яҡҡа үҙгәртеп ебәрергә, һабаҡ алырға мөмкин. Динис Бүләковтың “Тыҡрыҡ башы – беҙҙең биләмә” повесында дуҫлыҡҡа, берҙәмлеккә дан йырлана.

Әтәс тыҡрығында йәшәгән ололар ғына түгел, ә бала-сағалар ҙа берҙәм, дуҫтар. Быны Оло урам малайҙарына күмәкләшеп ҡаршы тороуҙарында, ҡапыл ғына бер-бер хәл

килеп сығып, тиҙ генә йыйылырға, берләшергә кәрәк булһа, бер тапҡыр әсе итеп һыҙғырып ебәреү ҙә етеүе хаҡында һүрәтләнгән ваҡиғалар аша бының, ысынлап та, шулай икәнлегенә төшөнәһең. Әҫәрҙең төп геройы Аҡбулаттың дуҫтарына, яңы таныштарына ҡарата булған мөнәсәбәтенән дә дуҫлыҡ тигән изге төшөнсәгә бер ваҡытта ла тап төшөрөргә ярамағанлығын аңлайһың.

Аҡбулаттың Ҡарасура исемле овчаркаһы бар. Аҡбулат әлегә балалығы менән иптәштәре араһында көнсөлдәре, яуыз уйлылары булыуын аңлай, айыры белмәһә лә, тап ошо аҡыллы эт уларға ҡарата мөнәсәбәте аша уларҙың нисек булыуын аңғартып тора. Мәҫәлән, шаҙра Шәймарҙан повеста кире герой булараҡ аныҡ ҡына һүрәтләнмәһә лә, антагонистик образ булыуына төшөнөргә мөмкин. Ҡарасура уны күрһә, тынысһыҙлана, уға өрөргә керешә. Шулай итеп, үҫмер малайға ҡарата ул үҙенең фекерен белдерә.

Көнсөллөк насар сифат. Ул кешелә булһа, бала сағынан уҡ һиҙелә. Шәйҙарман да шундайҙарҙан. Аҡбулатҡа атаһы етенсе класты тамамлауына мотоцикл алып бирергә вәғәҙә бирә. Бының хаҡында Аҡбулат дуҫтарына әйткәс, иң беренсе ул асыуынан шартларҙай була. Етмәһә, Аҡбулат менән һуңғы арала дуҫлыҡтары ла ҡаҡшап тора. Зирәк үҫмер быны һиҙмәй ҡалмай. Шуға ла, бер урам малайҙары араһындағы аңлашмаусанлыҡтарға нөктә ҡуйыр өсөн былай ти: *“Атайым мотоцикл алып бирһә, һәр берегеҙгә йөрөп ҡарарға рөхсәт итәм. Беҙ – Әтәс тыҡрығы егеттәре, шулай бит? Бына, моғайын. Шәймарҙан дуҫ, һинән башларбыҙ әле...”* (109-сы бит). Д. Бүләков та төп геройының фекерен йөпләй һәм: *“Кешегә күп кәрәкме ни инде. Тыҡрыҡ малайҙары яңынан татыулашты, яңынан берләште. Шаҙра Шәймарҙандың да ауыҙы йырылды. Айырыуса уны беренсе атауы күңеленә ҡаймаҡтай яғылды. Хәҙер инде тиҙҙән магазинға ҡайтасаҡ мотоциклды бөтәһе бергә көтә ине”* (109-сы бит), – ти, уҡыусыларын дуҫлыҡтың ҡәҙерен белергә саҡырып.

Кешенең йөҙөнән алмау, башҡалар алдында йөҙөн йыртмау кеүек сифаттар ҙа кешелә холҡоноң матурлығын күрһәтә. Аҡбулат Шәйҙарман ни өсөн үҙенә асыу һаҡлауын мотоцикл алыу тураһында хәбәр иткәнсе үк яҡшы төшөнә. Ғәҙәттә, дуҫтар араһында үҙен хужа итеп тойоусы, үҙ артынан эйәртеүсе башлыҡ була. Әгәр ҙә, ул быны үҙ файҙаһына атҡара икән, тимәк, бер көн килеп дуҫтар араһында низағ сығыуын көт тә тор. Аҡбулаттарҙан бер класҡа юғары уҡыған Шәймарҙан үҙен башлыҡ итеп тоя. Тубы тәгәрләп китһә лә, ул башҡаларҙы уның артынан ебәрә. Бер мәл сират Аҡбулатҡа ла етә. Урамдаш үҫмерҙең был ҡылығын Аҡбулат өнәп етмәһә лә, ҡысҡырып әйтеп, йәмһеҙләшеп тормай. Ул дуҫын көрәшергә саҡыра. Кем еңелә – шул туп артынан йүгерә. *“Аҡбулат белә: Әтәс тыҡрығы малайҙары үҙ-ара һис ваҡытта ла талашырға, тәмһеҙләшергә тейеш түгел. Был элек-электән килгән яҙылмаған закон. Шуға бик аҡыллы хәл итте мәсьәләне”* (86-сы бит), – тиелә уның дуҫлыҡтың ҡәҙерен белеүен күрһәтеп.

Шәймарҙан кәүҙәгә лә, йәшкә лә ҙурыраҡ булһа ла, көс яғы самалы. Ялҡауыраҡ булғас, сыныҡмаған. Ә Аҡбулат самбо түңәрәгенә йөрөй, өйҙә лә һәр ваҡыт ярҙамлашып торғас, ҡатҡылланған. Өс тапҡыр көрәшкән саҡта башта Аҡбулат тәүҙә еңелгән була. Һуңынан Шәймарҙанға үҙе лә төшөп ҡалғандарҙан түгеллеген иҫбатлай. Өсөнсө тапҡыр ул юрамал, хужа булып маташҡан дуҫын, биленән көрмәкләшеп йөрөтөп арыта, хәлһеҙләтә. Үҙенең көсө самалы икәнлегенә төшөнгән Шәймарҙан асыҡтан-асыҡ үҙенең еңелгәнлеген әйтмәһә лә, шым ғына туп артынан үҙе китә. Был юлы ла повеста автор төп геройының был ҡыланышын юғары баһалай. *“Аҡбулат шунда Шәймарҙанды йығып һалмағанынан ҡыуанып бөтә алманы. Был килеш, исмаһам, улар элеккесә дуҫ ҡалдылар, Әтәс тыҡрығы егеттәренә һис боҙолошорға ярамай”* (87-се бит), – тиелә.

Динис Бүләковтың “Тыҡрыҡ башы – беҙҙең биләмә” повесының төп геройы дуҫтарына ғына түгел, үҙен, уның иптәштәрен, бер туған ҡустыһын туҡмарға теләгән Оло урам малайҙарына ҡарата ла мәрхәмәтле. Антагонистик герой булараҡ һүрәтләнгән Ильяс образы сюжет һыҙығында йыш һынлана. Башта ул аҡсаға Ҡарабулатты туҡмарға уйлай, һуңынан Аҡбулаттарҙың өйөн баҫып керә, заправка асылғас та был ике ҡапма-ҡаршы итеп һүрәтләнгән ике герой йыш осраша һәм сиселештә икеһе бергә дауаханаға эләгә. Автор

уны нисек кенә кире ҡылыҡтары аша насар герой итеп һүрәтләргә тырышһа ла, Аҡбулат унын изге күңелле, әммә яңылыш аҙымға баҫыуын аңлай, һиҙенә. Был шулай булып сыға ла. Баҡһаң, унын әсәһе ҡаты ауырый. Атаһы ул сирләй башлағас, уларҙы ташлап сығып китә. Ильясҡа һеңлеһе менән әсәһен алмашлап ҡарарға һәм үҙҙәрен йәшәтергә аҡса ла табырға тура килә икән. Оло урамда йәшәгән Бәкер – Баҡыр, Вәрис – Барбаристарҙың Әтәс тыҡрығы малайҙарына көсө етмәгәс, Ильяс – Ильяға аҡса биреп үстәрен алырға уйлайҙар. Шул арҡала Ильяс үҙен кире герой итеп күрһәтергә мәжбүр була.

“Тыҡрыҡ башы – беҙҙең биләмә” повесының сюжет һыҙығының башынан аҙағына тиклем тиерлек үҫмер малайҙарҙың һуғышыуҙары, ике урамда үҫеп килгән балаларҙың бер-береһенә этләшеүҙәре һүрәтләнә. Нилектән, ни өсөн килеп сығыуын, Ильяс Аҡбулаттарҙың йортона баҫып кергәс, әҫәрҙең төп геройы аңлатып бирә. *“Уйлама, Әтәс тыҡрығында һуғыш сукмарҙары, әшәке кешеләр йәшәй икән тип. Төптө дөрөҫ түгел, беҙҙең тыҡрыҡ малайҙары бик татыу, дуҫ йәшәй беләә. Беҙ ситтән бер кемгә лә теймәйбеҙ. Ә инде маһайған оло урам әтрәгәләмдәре ҡыйырһытһа беҙҙе... – Аҡбулат туҡтап, тәрән итеп һулыш алды. – Ул ваҡытта инде аяу көтмә. Бына һине лә яллағандар бит. Аҡсағалыр, моғайын”* (104-се бит), – ти ул. Үҫмерлек ҡорона кереп кенә килгән кеше булһа ла, дөрөҫ фекер йөрөтөүе, аңлатып әйтә белеүе был геройҙы йәнә яҡшы яҡтан асырға булышлыҡ итә. Ысынлап та, дошманға үҙ ҡоралы менән яуап биргәндә генә, ул үҙенең яуызлығына төшөнәсәк.

Дөйөм алғанда, Динис Бүләковтың “Тыҡрыҡ башы – беҙҙең биләмә” повесы һәр осор өсөн актуаль әҫәр булып ҡала. Унда дуҫлыҡҡа, берҙәмлеккә мәҙхиә йырлана.

**Әҙәбиәт**


1. Башҡорт әҙәбиәте тарихы. 6 томда. 6 том. Хәҙерге әҙәбиәт (1966 – 1994 йылдар). – Өфө: Китап, 1996. – 710 бит.
2. Бүләков Д. Зәңгәр офоҡтар: повестар / Динис Бүләков. – Өфө: Китап, 2019. – 336 бит.
3. Динис Бүләков хаҡында иҫтәлектәр. – Өфө: Китап, 2007. – 240 бит.
4. Әхмәтйәнов К. Ә. Әҙәбиәт теорияһы. – Үҙгәрешле 4-се баҫма. – Өфө: Китап, 2018. – 392 бит.



©Фахриев А.Р., 2024



УДК 37.091.3



***Хазиева Г.З.,***
*М.Аҡмулла ис. БДПУ студенты,*
*Өфө ҡ*
.
***Хазиева Г.З.,***
*студент БГПУ им. М. Акмуллы,*
*г. Уфа*


## РОЛЬ ПРОИЗВЕДЕНИЙ НУГМАН МУСИНА В ФОРМИРОВАНИИ ЭКОЛОГИЧЕСКИХ КОМПЕТЕНЦИЙ У ОБУЧАЮЩИХСЯ

## УҠЫУСЫЛАРҘА ЭКОЛОГИК КОМПЕТЕНЦИЯЛАРҘЫ ФОРМАЛАШТЫРЫУҘА НОҒМАН МУСИН ӘҪӘРҘӘРЕ


**Аннотация.** В статье рассматривается роль произведений Н.Мусина в экологическом воспитании обучающихся, а также описаны ведущие функции литературных пейзажей в дилогии “Вечный лес”.



**Ключевые слова:** экологическое воспитание, пейзаж, Нугман Мусин, обучающиеся.

Экологик белемде пропагандалау балалар баҡсаларында, дөйөм белем биреү мәктәптәрендә, махсус урта һәм юғары уҡыу йорттарында тәрбиәнең айырылғыһыҙ өлөшөнә әйләнә бара.

Грек теленән ингән «экология» һүҙе кешене әйләндереп алған мөхит, «йорт» тигәнде аңлата. Шуға күрә, “йортобоҙ” тураһындағы дөйөм белемде туплауҙы бала саҡтан уҡ башларға кәрәк. Ер, урман, йылға, таҙа һауа, үҫемлектәр һәм хайуандар донъяһы тураһында һаҡсыл ҡараш – бөтәбеҙҙең дә ҡанға һеңгән иң кәрәкле эшебеҙ. Беҙ үҙебеҙҙең еребеҙҙе хәҙерге һәм киләсәк быуын кешеләре өсөн һаҡларға һәм матурлай белергә өйрәнергә тейешбеҙ. Бына ни өсөн мәктәптәрҙә һәм башҡа төрлө уҡыу йорттарында уҡыусыларҙа әйләнә-тирә күренештәргә ҡарата күҙәтеүсәнлек, иғтибарлылыҡ тәрбиәләргә, баланы кесе йәштән үк тәбиғәттең серҙәренә төшөндөрә башларға кәрәк. Шулай эшләгәндә генә бала күңелендә тирә-яҡ мөхит менән ҡыҙыҡһыныу тыуа, әкренләп, тәбиғәттәге матурлыҡты күрә һәм аңлай белергә өйрәнә. Был иһә, уларҙа тәбиғәт байлыҡтарына һаҡсыллыҡ сифаттары ла тәрбиәләй.

Тәүҙә нимә ул компетентлыҡ һәм компетенция, шул төшөнсәләргә аңлатма биреп китәйек.

Компетентлыҡ тип шәхестең формалашҡан – интегратив сифатын аңлайҙар, ул уның реаль тормош ситуацияларында, эшмәкәрлектең төрлө өлкәләрендә, белем, уҡыу һәм тормош тәжрибәһен файҙаланыу нигеҙендә һәм үҙләштерелгән ҡиммәттәр системаһына ярашлы килеп тыуған проблемаларҙы һәм типик мәсьәләләрҙе хәл итеү һәләтен билдәләй. Компетентлыҡ, шулай итеп, кәрәкле компетенциялар исемлеген үҙ эсенә алған интеграль киңерәк төшөнсә.

Компетенция тип билдәле бер эшмәкәрлекте һөҙөмтәле башҡарыуҙы тәьмин иткән дөйөмләштерелгән ысулдар комплексын әйтәләр.

Д. С. Ермаков фекеренсә, экологик компетентлыҡты формалаштырыу – ул уҡыусыларҙың теоретик – белем, практик күнекмәләр, экологик ҡиммәттәрҙе үҙләштереү, шәхси һәм социаль әһәмиәтле уҡыу экологик эшмәкәрлеге барышында экологик мәғәнәгә эйә булыу һәм ошо нигеҙҙә экологик проблемаларҙы хәл итеү тәжрибәһен алыу маҡсатлы процесы [Ермаков, 2009: 14].

Дөйөм белем биреү системаһында экологик белем биреү концепцияһында, шулай уҡ Башҡортостан Республикаһы мәғарифты үҫтереү программаһында экологик белем һәм тәрбиә биреү мәсьәләләре төп урындарҙың береһен алып тора [Концепция, 2022]

Экологик тәрбиә баланың ғаиләһендә бала тыуған минуттан уҡ башланырға тейеш. Баланың экологик аңы ата-әсәнең тирә-яҡ мөхиткә мөнәсәбәтен күреп, ғаиләлә формалаша башлай. Балалар баҡсаһында бәләкәстәр матурлыҡҡа һоҡланырға өйрәнәләр. Мәктәптә уҡыусылар “Химия”, “Биология”, “География” фәндәре аша тәбиғәт донъяһы менән таныша. Был дәрестәрҙә уҡыусылар тәбиғәтте фәнни нигеҙҙә өйрәнһә, туған әҙәбиәт дәрестәрендә йәнле тасуирлауҙар, художестволы образдар аша тәбиғәт һәм кеше гармонияһына ылығалар. Башҡорт халыҡ эпостарында Тыуған ил, ер – һыу ҡәҙерен белеү идеяһы – үҙәк проблема. Ошо уҡ проблема бөгөнгө көн әҙәбиәтебеҙҙең дә арҡа һөйәген тәшкил итә.

“Зәңгәрһыу хикәйәттәре”нән 6-сы кластың дәреслек-хрестоматияһында “Шишмәләр мәңгелек була”, “Йәнебәк түше”, “Военрук Фәтхи” бүлектәре һәм Зәңгәрһыу васыяты бирелгән. Тәүге бүлектә Бурантау, Зәңгәрһыу исемдәренең килеп сығышы, шишмәләрҙең барлыҡҡа килеүе һәм йәшәү көсөнә аңлатма бирелә.”Йәнебәк түше” бүлегендә граждандар һуғышы осорондағы бер ваҡиға тасуирлана һәм батырҙарҙың исемен мәңгеләштереү өлгөһө бирелә.”Военрук Фәтхи” бүлегендә Бөйөк Ватан һуғышы һалдаты Фәтхиҙең һүҙ менән генә түгел, үҙенең ҡылығы менән дә патриотик тәрбиә биреүе тасуирлана. Әкиәттәрҙәгесә, Зәңгәрһыуҙың телгә килеп фәһемле тарихтар һөйләүе әҫәрҙең төп идеяһын сағылдыра.

“Йыртҡыс тиреһе” повесынан 8-се класс уҡыусыһына тәкдим ителгән өҙөктә тормошобоҙҙағы һуңғы йылдарҙа үҫеш алған аҡса ҡоло булыу, “ҡул-ҡулды йыуа”тигән

принциптың нығыныуы кешене рух ҡоллоғона, күңел ярлылығына килтереүе һүрәтләнә. Намыҫлылыҡты, кешелеклелекте, рухи азатлыҡты атаһынан мираҫ итеп алып, ғүмере буйы уға тоғро ҡалған Һолтанбай улына университетҡа уҡырға инергә ярҙам итеү өсөн намыҫын аша атлай һәм шул юлда ҡорбан була. Уға ярҙам итергә ышандырып, айыу тиреһе һораған леспромхоз директоры Булашов яралы Һолтанбайҙы дауаханаға илтеү өсөн машинаһын да бирмәй, шул арҡала Һолтанбай үлә. Тәбиғәт балаһына тәбиғәт үҙе яза бирә. Был әҫәр йәмғиәтебеҙҙәге тағы бер тиҫкәре яҡты фаш итә.

6-сы класта өйрәнелгән "Зәңгәрһыу хикәйәттәре" һыу сығанаҡтарының көсөн һәм мөһимлеген, тау-урман, йылға-күл атамалары, уларҙың аңлатҡан мәғәнәһе, килеп сығышы (этимологияһы) хаҡында мәғлүмәт биреү аша балаларға экологик планда һәм патриотик тәрбиә биреү өсөн бик әһәмиәтле.

"Зәңгәрһыу" хикәйәттәрендә һүҙ барған хәл-ваҡиғалар ер-һыу атамалары менән бәйле. Ә ер-һыу атамалары халыҡ күңелендә легенда рәүешендә һаҡланыусан була. Шуға күрә материалды сәғәттәргә бүлгәндә беренсе дәресте киңерәк масштабта алып, тыуған яҡтың ер-һыу атамаларына бағышларға мөмкин. "Шишмәләр мәңгелек була" тигән бүлекте әҙәби уҡыу дәресе итеп үткәрергә кәрәк. Түбән һәм урта клас уҡыусылары өсөн әҫәрҙе уҡып өйрәнеү еңелерәк.

Әҫәрҙе уҡый башлағансы инеш әңгәмәлә уҡыусыларҙы тәбиғәт донъяһына "алып керергә" кәрәк. "Башҡортостан" гәзитендә баҫылып сыҡҡан түбәндәге өҙөктө уҡып китеү Балаларҙа тыуған тәбиғәтебеҙ менән ғорурланыу тойғоһо уятыр: Башҡортостанды юҡҡа ғына "Икенсе Швейцария" тимәйҙәрҙер. Уның тәбиғәте иҫ киткес матур. Боронғо ата-бабаларыбыҙ Ер шарының , бәлки, иң матур бер урынын һайлап, төбәк итеп ултырған. Ысынлап та, Башҡортостан тәбиғәте, тәбиғәт биргән байлыҡтары яғынын күптәрҙең күҙен ҡыҙҙырған, уның уңдырышлы иркен ерҙәренә юҡҡамы ни сит-яттар алдап-йолдап, ҡурҡытып, көсләшеп килептулғандар. Килгән-киткән сит ил ҡунаҡтары, туристары әле лә маҡтайҙар, һоҡланалар беҙҙең Башҡортостан тәбиғәтенә.

Мәҫәлән, компьютер экранында Башҡортостан тәбиғәте күренештәре, тыуған яҡ, урман-һыуҙар тураһында шиғыр өҙөктәре, йырҙар менән слайдтар күрһәтелә. Тыуған ауыл, йылға - күлдәрҙең атамалары тураһында легендалар һөйләтелә (ошонда уҡ хикәйәт жанры тураһында белешмә биреп китергә мөмкин). Экскурсияларҙан һуң күңелдә һаҡланған тәьҫораттар һөйләтелә. Шунан һуң балаларҙың иғтибарын Н. Мусиндың портреты, "Н. Мусин – тәбиғәт йырсыһы" тип яҙылған плакат эленгән таҡтаға йүнәлтәһең.

Тәбиғәттең беҙҙең ярҙамға мохтаж булып, миһырбанлыҡ көтөп, үҙен һаҡлап, үлемдән ҡотҡарып алып ҡалыуыбыҙҙы үтенеп, ялбарып, беҙгә мөлдөрәп ҡараған саҡтары ла була. Әгәр кешеләр тәбиғәтте аңламайҙар, һаҡламайҙар икән, ул саҡта тәбиғәт кешеләргә язаһын да бирә ала. Тәбиғәт - ул Ерҙең әсәһе, уның хөкөмө әсә хөкөмөнә тиң икәнде төшөндөрөргә кәрәк.

Башҡорт халҡының тәбиғәткә, уның үҫемлектәренә, хайуандарына ҡарата ихтирамлы, миһырбанлы ҡарашы, һаҡсыл мөнәсәбәте Уралдың хозур тәбиғәтенең - уның тәбиғи байлыҡтары, һоҡланғыс йылға –күлдәре, серле мәмерйәләренең - һаҡланыуына килтергән. Юҡҡамы ни урмандарының аяуһыҙ киҫелеүенә, тау-таштарының рәхимһеҙ аҡтарылыуына сыҙамай, күп мәртәбәләр ҡаршылыҡ күрһәткән, яуҙарға сыҡҡан башҡорт.

Тәбиғәтте ҡырыу, уға һөжүм итеү, уның менән иҫәпләшмәү факттары беҙҙең бөгөнгө тормошобоҙҙа күп хәҙер: улар бысранған һыулы йылғалар, таҙартылмаған күл-шишмәләр, төҙәтелмәгән юлдар, ҡыр ҡылған урман, әрәмәлектәр, урынһыҙға киптерелгән һаҙлыҡтар, һөрөп, ташландыҡ хәлгә ҡалған туғайҙар, ағыулы-газлы ҡалалар, завод-фабрикалар һәм башҡа бик күп күренештәр. Ошоларҙың һөҙөмтәһе булып ауырыу кешеләр, зәғиф балалар, хатта хайуандарҙың тыуыуы, ҡасандыр күркәм, күпереп торған тәбиғәттең йәмһеҙләнә барыуы, йылға-күлдәҙең һайығыуы, шишмәләрҙең ҡороуы өҫтәлә. Йылға-күлдәрҙә рәхәтләнеп һыу инергә ярамауы, сарсағанда ятып һыу эсеп булмауы фажиғәнең бик алыҫта тормауына ишара түгелме? Емеш ағастарының ҡырылыуы, сәскәләрҙең һирәгәйеүе, умарта ҡорттарының ауырыуы ла күҙәтелә хәҙер.

Тирә-яғыбыҙҙа ошондай хәлдәргә осраған ваҡытта тәбиғәткә ярҙам итеү хаҡында, балаларға төшөндөрөп, кәрәкле урындарҙы күрһәтеү, көстәре етерҙәй эштәргә йәлеп итеү урынлы.


**ӘҘӘБИӘТ**

1. Ермаков Д.С. Педагогическая концепция формирования экологиче- ской компетентности учащихся: Автореф. Дисс. докт. пед. наук: – Москва, 2009. – 38 с.
2. Концепция экологического образования в системе общего образования. Одобрена решением федерального учебно-методического объединения по общему образованию, протокол от 29 апреля 2022 г. № 2/22.


©Хазиева Г.З.,2024

УДК 81


***Халиҡова А.Н.,***
*М.Аҡмулла ис. БДПУ студенты*
*(ғилми ет.: филол.ф.к., доцент Рәхимова Э.Ф.),*
*Өфө ҡ.*

***Халикова А.Н.,***
*студент БГПУ им. М. Акмуллы,*
*(науч. рук.: к.филол.н., доцент Рахимова Э.Ф.)*
*г.Уфа*


# САЛАУАТ РАЙОНЫ ЛАҒЫР АУЫЛЫНЫҢ ТОПОНИМИКАҺЫ

# ТОПОНИМИКА ДЕРЕВНИ ЛАГЕРОВО САЛАВАТСКОГО РАЙОНА


**Аннотация.** В статье рассматриваются топонимы Салаватского района Республики Башкортостан, описывается их историческое, местное, народное значение. Автор дает объяснение происхождения некоторых названий гор, рек.



**Ключевые слова:** Салават Юлаев, деревня Лагерево, гора, Салаватский район, Урал тау, река Ай.


Халыҡ араһында йылғалар, тауҙар, күлдәр тураһында күп легендалар йөрөй. Улар борондан алып телдән телгә күсеп килгән традиция булып тора. Хәҙерге быуын балаларына был мәғлүмәт берҙә ҡыҙыҡһындырмай, шуға күрә был мәҡәлә аша мәктәп балаларына ер-һыу атамаларының әһәмиәтен белдерергә теләйбеҙ.

Эшебеҙҙең маҡсаты булып Салауат районының йылға һәм тау атамаларының килеп сығышын өйрәнеү тора.

Салауат районы Башҡортостандың төньяҡ-көнсығыш өлөшөндә урынлашҡан, көньяҡта Силәбе өлкәһе менән сиктәш. Территорияһының төп өлөшө Йүрүҙән һәм Әй йылғалары һыу айырғысында тора. Райондың исеме Тәкәй ауылында тыуған (хәҙерге ваҡытта һаҡланып ҡалмаған) Башҡорт халҡының милли геройы Салауат Юлаев хөрмәтенә аталған.

Беҙҙе бөтә ғүмеребеҙ дауамында төрлө географик атамалар оҙатып бара. Һәр бер өлкәнең йәки крайҙың, ҡаланың, ҡасабаның, ауылдың һәм ер-һыуҙың исемдәре бар. Улар һәр бер урынға бәйле. Шулай итеп, нимә ул топономия һәм топонимика? Был тамырҙың тағы бер термины бар, ул топоним. *«Грек телендә топос – «урын» һәм онома «исем» тигәнде аңлата»* – тип яҙыла Рәшит Шәкүрҙең «Исемдәрҙә – ил тарихы. Тикшеренеуҙәр, мәҡәләләр» китабында [Шәкүр, 1993: 1]. Тимәк, топоним – ул урын исеме, топонимия – илдең, райондың, өлкәнең географик атамалар йыйылмаһы, ә ошоларҙың бөтәһен дә өйрәнеү топонимика фәне тип атала.

Лағыр ауылы Башҡортостан Республикаһының төньяҡ-көнсығышында, Салауат районында, урынлашҡан. Уның килеп сығышы 1752 йылда немец картографтары менән

билдәләнә. Ни өсөн ауылдың исеме *«Лағыр»* тип аталған? Уның тураһында бер факт бар: Салауат Юлаев Ырымбурҙан ҡайтҡас, ғәскәр йыйыуға тотона. Ошо маҡсат менән ул аҙ һанлы ғәскәр менән килә һәм йәш яугирҙәр хәрби эшкә өйрәтелгән ауыл эргәһендә лагерға урынлаша. Салауат башҡорттарҙы үҙенең ғәскәре сафына ҡушылырға саҡыра. Тирә-яҡ ауылдарҙан башҡорттар йәш полковник Салауатҡа ағыла башлай. Ваҡыт үтеү менән, Салауат үҙенең ғәскәре менән Әй йылғаһы буйлап түбәнгә табан хәрәкәт итә. Шунан бирле ауыл *Лағыр* тип атала башлай, «хәрби лагерь урынлашҡан урын» тигәнде аңлата. Был факты башҡорт шағиры, тел һәм әҙәбиәт белгесе, публицист Рәшит Шәкүр үҙенең «Истоки духовности: Исследования. Публицистика» тигән китабында Лағыр ауылының атамаһының барлыҡҡа килеүе тураһында шундай уҡ фекерҙә тора: *«Наименование Лагыр возникло от слова лагыр (русское лагерь, заимствованное башкирами). По преданию, в окрестностях деревни располагалось войско Салавата, образовав своего рода военный лагерь»* [Шакур Рашит, 2009: 5]

Ауылды матур тауҙар, урмандар, күлдәр, йырындар, йылғалар уратып алған. Уларҙың береһе ауылдың һул ярында урынлашҡан Әй йылғаһы. Әй – Силәбе өлкәһе һәм Башҡортостан Республикаһы биләмәләре буйлап Урал тауҙары араһынан, республикабыҙҙың Ҡыйғы, Салауат, Дыуан, Мәсетле райондары аша үтә. Уның киңлеге 549 километр. Рәшит Шәкүр «Ерҙең тере хәтере: топонимика серҙәре. Мәҡәләләр, тикшеренеүҙәр» китабында Әй исеменең килеп сығышы тураһында ике версия билдәләй: *«Беренсеһе: Әй башҡортса ай һүҙенән, йәғни «яҡты», «ай кеүек гүзәл» тигәнде белдерә. Икенсеһе: Әй гидронимы ырыу тамғаһы ярым ай булған әй йәки әйле/әйҙе башҡорт ырыу-ҡәбилә берләшмәһе атамаһынын алынған»* [Шәкүр, 2020: 4]. Борондан башҡорттар йылға яғында йәшәгәндәр. Шул яҡтан ҡараһаҡ, беренсе версия буйынса йылға исеменең килеп сығышы тап килә, аҙаҡ инде Әй йылғаһы эргәһендә йәшәгән халыҡ Әйле ырыу-ҡәбиләһе булған.

Әй йылғаһының уң ярында *Күҫтәртау тауы* урынлашҡан. Исеме рус телендәге «кустарь» һүҙенән килеп сыҡҡан. XVII быуатта урыҫ хөкүмәте, башҡорттарҙың яңы сыуалыштарын булдырмау өсөн, башҡорттарға тимерлек тотоуҙы, ҡорал һәм дары эшләүҙе тыйған. Әммә башҡорттар йәшерен рәүештә тыйылған һөнәр менән шөғөлләнә. Тимерлектәрҙең береһе Күҫтәртау тауы түбәһендә, ҡуйы урманда урынлашҡан. Легендаға ярашлы, тау түбәһендә ҡуйы урманда бер башҡорт тимерлек тотҡан, ҡорал һәм дары яһаған. Оҫта тимерсегә халыҡ Күҫтәр-хазрәт тигән исем бирә. Был уның оҫта ғына түгел, ә уҡымышлы ла булыуын күрһәтә, һәм, күрәһең, ул үҙ һөнәрен өйрәнергә теләгәндәрҙе уҡытҡан. Шул ваҡыттан алып тау Күҫтәртау (гора кустарь) тип йөрөтөлә.

Ауылға көньяҡтан ингән ерҙә ҙур таш ята, халыҡ уны «Оло таш» тип йөрөтә. Борон-борондан күпләп ҡолдарҙы сылбырлап Себергә ҡыуып ебәрәләр. Риүәйәттәр буйынса, Ҡараһаҡал ихтилалы ваҡытында, тотолған арестанттар конвойҙарға ташланған, уларҙы ҡоралһыҙландырып, ҡасырға маташҡандар. Тик тырышлыҡ уңышһыҙ булып сыға. Арестанттарҙы конвойҙар урында уҡ ҡырып бөтөрә һәм ошонда уҡ тәрән соҡор ҡаҙып, үлгәндәрҙең һәм ҡаты яраланғандарҙың кәүҙәләрен терелэй ерләйҙәр, дөйөм ҡәбер өҫтөнә ҙур таш менән баҫалар, һуңынан халыҡ уны «Оло таш» тип атай. "Кеше ҡаны йылға булып аҡҡан" – боронғо заманда тарихтың был фажиғәле бите тураһында һөйләгәндәр. Бөгөнгө көнгә тиклем Лағырҙа йәшәүселәр Оло таш ятҡан урынды "яҡшы түгел" тип иҫәпләйҙәр. Унда төндә кешеләрҙең ыңғырашыуы, аттарҙың йөрөгәне, юлға шаҡшы көстәр сығыуы тураһында һөйләйҙәр.

Шулай итеп, Салауат районының топонимдары үҙенсәлекле урын алып тора. Хәҙерге ваҡытта уларға күберәк иғтибар итергә кәрәк. Шуға күрә был теманы мәктәп балаларына күрһәтеп, таныштырып үтергә бик тә файҙалы буласаҡ.

**Әҙәбиәт**


1. Шәкүр Р. Исемдәрҙә – ил тарихы. Тикшеренеүҙәр, мәҡәләләр. – Өфө:

Башҡортостан «Китап» нәшриәте, 1993. – 256 бит.
2. Шәкүр Р. Ерҙең хәтер китабы. Фәнни-художестволы очерктар һәм мәҡәләләр. – Өфө: Башҡортостан «Китап» нәшриәте, 1984. – 168 бит.
3. Камалов А.А., Камало Ф.У. Атайсал. – Уфа: Башкирское издательство «Китап», 2001. – 544 с.
4. Шәкүр Р. Ерҙең тере хәтере: топонимика серҙәре. Мәҡәләләр, тикшеренеүҙәр. – Өфө: Информреклама, 2020. – 382 бит.
5. Шакур Рашит. Истоки духовности: Исследования. Публицистика / Р. Шакур. – Уфа: Гилем, 2009. – 520 с.

© Халикова А.Н., 2024

УДК 811.512.141

***Хәсәнова Э.Р.,***
*М.Аҡмулла ис. БДПУ студенты*
*(ғилми ет.; филол. ф. к., доцент Толомбаев В.З.),*
*Өфө ҡ.*

***Хасанова Э.Р.,***
*студент БГПУ им. М. Акмуллы*
*(науч. рук.: к. филол. н., доцент Тулумбаев В.З.),*
*г. Уфа*

## ТАҢСУЛПАН ҒАРИПОВАНЫҢ “БӨЙРӘКӘЙ” РОМАНЫНДА ХИС-ТОЙҒО ҠЫЛЫМДАРЫНЫҢ МОРФОЛОГИК ҮҘЕНСӘЛЕКТӘРЕ

## МОРФОЛОГИЧЕСКИЕ ОСОБЕННОСТИ ГЛАГОЛОВ ЧУВСТВ В РОМАНЕ Т.ГАРИПОВОЙ «БУРЕНУШКА»

**Аннотация.** В данной статье рассматривается морфологические особеннности глаголов чуственного восприятия на примере произведения Т.Гариповой “Буренушка”. Глубина и емкость текста произведения во многом зависят от чувства стиля, эрудиции и манеры письма писателя. Использование всевозможных морфологических форм глагола в произведении отражает богатство языка и чувство стиля автора.

**Ключевые слова:** язык, глагол, стиль, текст, морфология, культура речи.

Хәҙерге заманда башҡорт теленең байлығы донъя күргән художестволы әҫәрҙәрҙә бик асыҡ сағыла. Төрлө жанрҙа яҙылған әҫәрҙәрҙең телен өйрәнеү, анализлау, туған әҙәбиәтте фәнни яҡтан ентекле өйрәнеү ҙур әһәмиәткә эйә. Ж.Ғ.Кейекбаев билдәләүе буйынса, тел һәм стиль яҙыусының иң беренсе ҡоралы һанала. Яҙыу манераһы, йәғни теле, стиле яғынан оҫта булған яҙыусының әҫәре, ғәҙәттә, еңел һәм яратып уҡыла, ныҡ иҫтә ҡала. Яҙыусының стиль оҫталығын, теленең байлығын күрһәтә белеүе уның тел мәҙәниәтенең, эрудицияһының киңлеге менән тығыҙ бәйләнгән.

Таңсулпан Ғарипованың “Бөйрәкәй” романы башҡорт прозаһында яңы күренеш булараҡ иғтибарға лайыҡ. Яҙыусының тел байлығын, стиль маһирлығын, халыҡтың ауыҙ-тел өлгөләрен уңышлы ҡулланыуын билдәләп үтеү мөһим. Художестволы әҫәрҙең кеше күңеленә тәьҫир итеү ҡеүәһе шул стиль маһирлығынан килә. Был ғилми статьяла “Бөйрәкәй” романының хис-тойғоно белдергән ҡылымдарҙың морфологик үҙенсәлектәрен асыҡланык.

Ҡылым – хәҙерге башҡорт телендә семантик һәм функциональ планда иң ҡатмарлы һәм иң ныҡ үҫешкән, морфологик категорияларға ифрат бай булған һүҙ төркөмө. Һөйкәлеш һәм төркөмсә формалары ҡылымдың төп морфологик категориялары булараҡ айырым урын тота, шуға ла уларға айырым туҡталып китергә

булдыҡ. Йәғни, Таңсулпан Ғарипованың “Бөйрәкәй” романындағы хис-тойғо ҡылымдарының морфологик үҙенсәлектәрен билдәләп үттек.

**Сифат ҡылым.** Был ҡылым төркөмсәһе сифат менән ҡылымдың үҙенсәлегенә эйә, шунлыҡтан ул сифат ҡылым тип йөрөтөлә. Сифат ҡылымдар һөйләмдә күберәк исем алдында аныҡлаусы ролен башҡара. Миҫалдар: *Мин һуғыш яланынан яралыларҙы, **ташыусы**, ирҙәре өсөн **эшләүсе**, балаларына ҡанын **биреүсе**, ирҙәре артынан Себер юлдары буйлап **китеүсе** ҡатын-ҡыҙҙарҙың батырлыҡтары, тураһында күп беләм.* Исемләшкән сифат ҡылымдар һөйләмдең эйәһе булып килә. Миҫалдар: *Тыуған илен **һөйөүсөләр** тәүгеләрҙән булып яуға китте .* Йәнә сифат ҡылымдар һөйләмдең хәбәре вазифаһын үтәй. Миҫалдар: *Улдары тыуған һайын **шатланған** булды Саяф. Башта Зарифа уны **яратҡан** кеүек ине.* Тағы сифат ҡылымдар һөйләмдә тултырыусы ролен башҡара. Мәҫәлән: *Һарыайғыр үҙенә һөйөү менән **ҡарағандарҙы**, үҙен **аңлағандарҙы** ғына ярата.*

**Хәл ҡылым.** Хәл ҡылым өс заманда ҡулланыла. Үткән заман хәл ҡылым һөйләмдә ваҡыт хәле йәки ваҡыт һөйләмдең хәбәре вазифаһын үтәй. Миҫалдар: ***Аптырағас,*** *Шәңгәрәй йоҡлап йөрөгәп мунса ишеген төрттө – асылманы. Тормош, **ҡаҡҡылай торғас**, уны шулай бөтмөр, сая яһағандыр инде.* Хәҙерге заман хәл ҡылым һөйләмдә рәүеш хәле булып килә. Миҫалдар: *Следователь ҡатындың ниндәй йомош менән килеүе хаҡында **ҡыҙыҡһынып** та өлгөрмәгән ҡатын, һөйләшергә кеше табылыуға **шатланып,** тәтелдәй бирҙе.* Киләсәк заман хәл ҡылым һөйләмдә ваҡыт хәле, дәрәжә-күләм хәле, сағыштырыу һөйләмдең, дәрәжә-күләм һөйләмдең хәбәрҙәре ролен башҡара. Миҫалдар: *Ана, ул урманда **арығансы** йүгереп, йәнлектәр менән уҙышып, арып йоҡлап ята. Юҡ менән **баш ҡатырғансы,** ана, бәйләмеңде ал, үҙеңә бирнәлек әҙерлә. Йөрәк **янғансы,** тән янһын!*

**Исем ҡылым.** Был ҡылым төркөмсәһендә исемдең дә, ҡылымдың да үҙенсәлеге бар. Исем ҡылым һөйләмдә эйә ролен башҡара. Миҫалдар: *Зал буйлап тулҡын-тулҡын шыбырлашыу, кинәйәле **көлөү** үтте. Шул танауға танау рәүешен бирерҙәй нескәлектәрҙе башҡарып тормай йәбештерелгән оролай танауға, иренһеҙ генә уймаҡтай ауыҙға **көлөү** бер ҙә килешмәй.* Тағы исем ҡылым һөйләмдә хәбәр булып килә. Миҫалдар: *Ил менән идара итеү өсөн яңы идея – теоретик нигеҙ – кәрәк **булыуы** көн кеүек асыҡ.* Йәнә исем ҡылым һөйләмдә аныҡлаусы вазифаһын үтәй. Был осраҡта исем ҡылым менән аныҡлаусы һүҙ араһында “кеүек” бәйләүесе ҡулланыла, ул аныҡлаусы составына инә. Мәҫәлән: ***Көлөү,*** *мөләйем **йылмайыу** кеүек сифаттар Гөлбаныуға бер ваҡытта ла хас булманы. Шулай уҡ* исем ҡылым һөйләмдә тултырыусы ролен башҡара. Миҫалдар: *Мәҙинә **көлөүҙән** саҡ тыйылып, ҡыҙҙарының өҫтөнә юрғанды рәтләштереп япты.*

**Уртаҡ ҡылым**. Уртаҡ ҡылым һөйләмдә хәбәр ролен башҡара. Бындай һөйләмдәр күберәк өндәү, бойороҡ һөйләмдәр йәки һорау һөйләм формаһында ҡулланыла. Миҫалдар: *Кем менән ҡараланған, шуның менән **аҡланырға** тейеш ул! Нисек кенә итеп баланың туңған күңелен **иретергә,** уны изгелеккә, яҡшылыҡҡа **инандырырға**?* Йәнә уртаҡ ҡылым һәйләмдә тултырыусы булып килә. Миҫал: *Береһе уны алға әйҙәне, икенсеһе артҡа этәрҙе, һәр ваҡыт **икеләнергә, боҫорға, ҡасырға** мәжбүр итте.* Ҡайһы бер осраҡтарҙа ҡәҙимге уртаҡ ҡылым һәм -маҡ, -мәк ялғаулы уртаҡ ҡылым «кәрәк» һүҙе менән йәнәшә килеп, ҡушма хәбәр хасил була. Миҫалдар: *Атаң **булырға кәрәк** әле, маңҡа! **Ашығырға кәрәк, туҡтатырға** кәрәк Гөлбаныуҙы!* Йәнә уртаҡ ҡылым «мөмкин» йәки «мөмкинме һуң» һүҙҙәре менән йәнәшә тороп ҡушма хәбәр барлыҡҡа килтерә. Миҫалдар: *Миңә ҡарарға, **һоҡланырға мөмкин**. Һеҙгә Роберт тип **өндәшергә мөмкин.*** Тағы уртаҡ ҡылым «ярамай» һүҙе менән йәнәшә ҡулланыла, улар бергә ҡушма хәбәрҙе тәшкил итә. Миҫалдар: *Ай әттәгенәһе... **шаяртырға ла ярамай.** Уға һуғыштан ҡайтҡаны бирле ҡаныҡҡан Мирхәйҙәров алдында һис һыр **бирергә ярамай.*** Быларҙан тыш, уртаҡ ҡылым «була», «ине», «итте» ярҙамлыҡ ҡылымдары менән йәнәшә килә. Миҫал. *Амин, шулай булһын, – тине*

***йыуырға була*** *мәйетте уратып алған ҡатындар.* Уртаҡ ҡылым «тейеш» һүҙе алдынан ҡулланыла, улар ҡушма хәбәрҙе барлыҡҡа килтерә. Мәҫәлән: *Һәр ғаиләнең үҙенең талсыҡҡан күңеленә ял алырға, көс йыйырға ҡайтыр урыны* ***булырға тейеш.*** Ахыр сиктә, уртаҡ ҡылым «тура килде», «тура килә» һәм «тура киләсәк» һүҙҙәре менән йәнәшә бирелә, улар менән бергә ҡушма хәбәр хасил була. Миҫал. *Ҡайһы саҡ бөтәһен дә уҙҙырып та ебәрә, тик гел түгел: бында өс-дүрт йәштән шөғөлләнгәндәр уҡый, Көнһылыуға шуға* ***ауырға тура килә.***

Икенсе мөһим морфологик категория – һөйкәлеш категорияһы. Ҡылым һөйкәлештәре эш-хәрәкәттең ысынбарлыҡҡа булған мөнәсәбәтен белдерә.

Хәбәр һөйкәлеше заман менән үҙгәрә. Үткән заман хәбәр һөйкәлеше һөйләү, һөйләшеү мәленә тиклем булған, башҡарылған эш-хәрәкәт, процесты белдерә. Миҫалдар: 1. *Күпме ваҡыт хәсрәтен эсенә* ***йомоп йәшәгәндән һуң****, инде килеп эсен бушатырҙай тере йән, үҙе кеүек бәхетһеҙ бер байғош осрағанына ҡыуана-ҡыуана һөйләне бит ул.* Ҡайһы бер осраҡтарҙа юҡлыҡ формаһындағы хәбәр һөйкәлеше барлыҡ мәғәнәһен аңлата. Мәҫәлән: *Сәмиғуллин* ***аптырап****, Флориданы ошо ете йыл эсендә ниндәй генә докторҙарға күрһәтмәне лә, ҡайһы ғына санаторийға йөрөтмәне.*

Хәҙерге заман хәбәр һөйкәлеше һөйләү, һөйләшеү мәлендә булып торған, башҡарылыусы йәки оҙайлы, дауамлы эш-хәрәкәтте, процесты аңлата. Миҫалдар*: Көнһылыуҙың ҡатын-ҡыҙ буларак үҙ ырыҫына тап төшәрмәй йәшәүендә үҙенең дә өлөшө булғанға* ***ҡыуана*** *ул хәҙер. Ә бына Мәҙинә бары тик мал балаларын ғына* ***ярата.*** *Камалетдинов райком бинаһында эш сәғәте бөткәс, ығы-зығы баҫылғас яңғыҙ ҡалырға* ***ярата.***

Контексҡа ҡарап, киләсәк заман формаһындағы хәбәр һөйкәлеше хәҙерге заман ролен башҡарырға мөмкин. Мәҫәлән: *Фәүзиә ҡарсыҡ кеше менән һүҙгә* ***килешмәҫ,*** *ғәйбәт* ***һөйләмәҫ,*** *берәүҙе лә* ***тикшермәҫ.***

Киләсәк заман хәбәр һөйкәлеше һөйләү, һөйләшеү моментынан һуң буласаҡ, башҡарыласаҡ эш-хәрәкәтте, процесты белдерә. Миҫалдар: *Атаһы ҡайтмаһа,* ***ҡурҡыр ҙа****, ҡустыларын уйлап* ***ҡайғырыр ҙа*** *Мәҙинә...* ***Илаясаҡ...*** *Илар көнө алда уның! Бала мыҡырлай,* ***иларға самалай башлағас,*** *Камилла йоҡо бүлмәһенә атлығырға иткәйне, Ҡыҙрасов алдан өлгөрҙө.*

Ҡайһы бер осраҡтарҙа киләсәк заман хәбәр һөйкәлеше исемде асыҡлап, аныҡлаусы булып килә. Миҫалдар: *Өмәгә һайлап ҡына, көндөҙ ҡулынан эш* ***килер****, кисен табын ҡәҙерен* ***белер*** *кешеләрҙе генә саҡыралар. Үҙегеҙҙең балаларығыҙҙы* ***йөрөр*** *ерҙән,* ***эсер*** *һыуҙан,* ***аулар*** *кейектән,* ***һоҡланыр*** *сәхрәләрҙән мәхрум итәһегеҙ?*

**Бойороҡ һөйкәлеше.** Бойороҡ һөйкәлеше берәй эш-хәрәкәтте башҡарырға йәки башҡармаҫҡа ҡушыуҙы, бойороуҙы аңлата. Бойороҡ һөйкәлешенең беренсе заты теләкте белдерә, сөнки һөйләүсе үҙенә-үҙе бойора алмай. Миҫалдар: ***Аптырама****, балам, тереклектең барыһын да аллаһы тәғәлә яратҡан. Ә һин* ***ҡурҡма,*** *ос!* ***Илама,*** *килен. Тәҡдирҙән үтеп, бер ни эшләп булмай.* ***Илама...*** *Мин... иң бәхетле кеше. Мине донъялағы иң һылыу, иң аҡыллы ҡатын яратты...*

Бойороҡ һөйкәлешенең икенсе зат күплек формаһы нигеҙ ҡылымға -ғыҙ, -геҙ, -ғоҙ, -гөҙ, йәки -ығыҙ, -егеҙ, -оғоҙ, -өгө ялғауҙарын ҡушыу юлы менән яһала. Миҫалдар: *Малайҙы* ***рәнйетмәгеҙ,*** *тамағынан* ***тартмағыҙ,*** *яҡшы мөғәлләмә* ***булығыҙ****. Һы... Тыңлайым, иптәш генерал-полковник. Ни* ***бойораһығыҙ****?*

Өсөнсө зат бойороҡ һөйкәлеше нигеҙ ҡылымға -һын, -һен йәки -һон, -һөн ялғауҙары ҡушып яһала. Һөйләмдә башлыса хәбәр функцияһын башҡара. Миҫалдар*: Хашим үҙенең һалҡын ирендәрен ҡыҙының янып барған маңлайына терәне: ҡыҙы* ***һауыҡһын****, ҡыҙы* ***бәхетле булһын*** *өсөн ул үҙ йәнен дә уйлап та тормай бирер ине. Ҡарғыш* ***тапмаһын*** *уны, юлы* ***яҙлыҡһын...*** Күплектә -дар, -дәр ялғауҙары ҡушыла. *Миҫалдар:* ***Әрләһендәр! Туҡмаһындар! Типкеләһендәр! Милиция саҡырһындар!*** *Ихсанбайҙың улын күрмәй хәле юҡ.*

**Шарт һөйкәлеше.** Шарт һөйкәлеше берәй эш-хәрәкәттең башҡарылыуы өсөн икенсе эш-хәрәкәттең шарт булыуын аңлата. Миҫалдар:

*Ихсанбай **гәйепле булһа ла**, исемлеккә Гөлбаныуҙы индереүе менән генә ғәйепле. Тыумәрәстең дә йөрәге, әгәр **бераү булһа**, ярылыр ине, юк шул: унда өс йөрәк, өс йән.* Мәғәнә яғынан шарт һөйкәлеше ике төргә бүленә: 1. Реаль шарт, йәғни тормошҡа ашырлыҡ эш-хәрәкәт, процесс. Мәҫәлән: *Сарсауына сыҙай алмай, шырлыҡ **йырып булһа ла**, оҙон кисеүгә һыу эсергә төштө. Сибәғәт-Диңгеҙхан ҡартая белеп ҡартайып, үҙ **аҡылында булһа**, уның башы был саҡлы буталыр инеме?*

2. Ирреаль шарт, йәғни тормошҡа ашмай торған, теләктәге, хыялдағы эш-хәрәкәт, процесс. Мәҫәлән*: Их, ошо ҡоштар, хайуандар донъяһы шикелле бер яҡлы, бер ҡатлы ғына **булһа** икән тормошоң... Күңел йылытырлыҡ бер генә мөрйә **булһасы.** Их! Ошолар миндә **булһасы!***

Шарт һөйкәлешенең өс заман формаһы бар. Әгәр һөйләүсе йәки яҙыусы шартлыҡ мәғәнәһен көсәйтергә булһа, фразаның башында «әгәр, әгәр ҙә» теркәүесе ҡулланыла. Миҫалдар: ***Әгәр ҙә** инде хәл-вакиғалар Ихсанбай уйлағанса шыма **барып сыҡһа**, юғиһә, бит каҙалалар! **Әгәр** улар **табылмаһа,** Мәҙинә бахыр ҡалайҙар итер ҙә, Хашим байғош нисек күтәрер был ҡайғыны?*

**Теләк һөйкәлеше.** Теләк һөйкәлеше һөйләүсенең берәй эш-хәрәкәтте башҡарырға теләге, ниәте барлығын аңлата. Ул *-ғы, -ге, -ғо, -гө* һәм *-ҡы, -ке, -ҡо, -кө* ялғаулы ҡылым эргәһенә «килә» ҡылымын ҡуйыу менән яһала. Миҫалдар: *Ҡайһы саҡ Ихсанбайҙың шул мәйеттәрҙе асып, бөтә донъяға һөрән **һалғыһы,** тамағы ярылғанса **ҡысҡырғыһы килә.***

Теләк һөйкәлешенең икенсе формаһы нигеҙ ҡылымға *-маҡсы, -мәксе* ялғауҙарын ҡушыу юлы менән яһала. Был ҡылым «була» менән дә бергә ҡулланыла ала. Миҫалдар: *Һөйөнсө **алмаҡсымын**! Был афәт уның берҙән-бер ҡыҙын **йотмаҡсымы?** Рауза, телен көскә әйләндереп, ниҙер **һорашмаҡсы булды.***

Теләк һөйкәлешенең өсөнсө формаһы шарт һөйкәлешенә *-сы, -се* киҫәксәләрен ҡушыу юлы менән яһала. Миҫалдар: *Эх, Мәҙинә...һис юғы шаярып ҡына булһа ла, бер йылы һүҙ **әйтһәңсе,** йөрәкте иретерлек итеп бер **ҡараһаңсы.** Гөлбаныуы ла тере **булһасы,** күңелем һөйөнөс менән **тулһасы.***

Теләк һөйкәлешенең дүртенсе формаһы шарт һөйкәлеше менән «ине» ярҙамлыҡ ҡылымдан яһала. Миҫалдар: *Әсәһе иҫән булһа, Мәҙинә, әлбиттә, тартынмай һорар ине, юҡ шул һәм булмаясаҡ. Ах, исмаһам, атаһы өйҙә юҡ, ул ниндәй кәңәш бирер ине икән?*

Теләк һөйкәлешенең бишенсе формаһы уртаҡ ҡылым менән өсөнсө зат бойороҡ һөйкәлешенән яһала. Мәҫәлән: *Уртаҡ шатлыҡтар, оло бәхет, татыулыҡ менән тыныс күк аҫтында **йәшәргә булһын.***

Дөйөм алғанда, хәҙерге башҡорт телендә эмоционаллек категорияһын реалләштереүсе бик күп лексик һәм лексик-грамматик саралар бар. Был йәһәттән “Бөйрәкәй” романында ҡылым формалары айырым урын тота. Ҡылым формалары аралашыу процессында һөйләүсенең эш-хәлдәргә, хәл-ваҡиғаларға, башҡа шәхестәрҙең булмышына, уларҙың эшмәкәрлегенә ҡарата һөйләүсенең төрлө субъектив кисерештәрен, эмоцияларын, хис-тойғоларын белдерә. Һөйкәлеш һәм төркөмсә формалары ҡылымдың төп морфологик категориялары булараҡ айырым урын алып тора. Сифат, исем, хәл, уртаҡ ҡылымдарға Таңсулпан Ғарипованың “Бөйрәкәй” романынан хис-тойғо ҡылымдарына миҫалдар таптыҡ, уларҙың зат, һан менән үҙгәрешен күрһәттек. Шулай уҡ һөйкәлештәргә айырым баҫым яһаныҡ. Һөйкәлештәр ярҙамында һөйләүсе күҙлегенән эш-хәлдәрҙең, ваҡиғаларҙың реаль булыуы һәм реаль булмауы мөмкин, йәки берәй эш-хәлдең үтәлеше хаҡында тик хыял ғына итергә мөмкин, йә булмаһа, берәй эш-хәлдең үтәлеүе, башҡарылыуы өсөн икенсе бер шарттың булыуы кәрәк.

**Әҙәбиәт**

1. Сәйетбатталов Ғ.Ғ. 3 том. Стилистика. – Өфө: Китап, 2007. – 440 бит.
2. Зәйнуллин М.В. Хәҙерге башҡорт теле. Морфология. – Өфө, 2002.
3. Аҙнабаев Ә.М. Псәнчин В.Ш. Башҡорт теленең тарихи морфологияһы. – Өфө, 1976.
4. Ғарипова Т.Х. Бөйрәкәй. – Өфө: Китап, 2006. 768 бит.

© Хәсәнова Э.Р., 2024

## СОДЕРЖАНИЕ


***Ғүмәрова Р. Ш.*** 3
ИЗГЕ БӨРЙӘН ЕРЕНЕҢ ДАНЛЫ УЛЫ ӘХМӘТ СӨЛӘЙМӘНОВ ХЕҘМӘТЕ МӘҢГЕЛЕК
(Будут вечными труды славного сына священной бурзянской земли Ахмета Сулейманова)

**БӨРЙӘН, БЕЛОРЕТ ҺӘМ САЛАУАТ РАЙОНДАРЫ МУНИЦИПАЛЬ ДӨЙӨМ БЕЛЕМ БИРЕҮ МӘКТӘПТӘРЕ УҠЫТЫУСЫЛАРЫНЫҢ СЫҒЫШТАРЫ**

**ВЫСТУПЛЕНИЯ УЧИТЕЛЕЙ МУНИЦИПАЛЬНЫХ ОБЩЕОБРАЗОВАТЕЛЬНЫХ ШКОЛ БУРЗЯНСКОГО, БЕЛОРЕЦКОГО, САЛАВАТСКОГО РАЙОНОВ**

***Баязитова Р.Р.*** 7
«ИЛ ҺАҠЛАҒАН ИР ӨСӨН, ТАТЛЫНАН ТАТЛЫ НИ ТАТЛЫ?» (ӘХМӘТ СӨЛӘЙМӘНОВТЫҢ “ҺӘР МӨҒЖИЗӘ – МИҢӘ ХӘҠИҠӘТ” ЙЫЙЫНТЫҒЫН УҠЫҒАС)
(«Для мужчины, охранителя иля, что слаще сладкого?» (После прочтения сборника Ахмета Сулейманова «Каждое чудо – мне истина»)

***Ғәбделхаева З.Ғ.*** 8
“ҠОРҠОТ АТА КИТАБЫ” ДАСТАНЫ ГЕРОЙҘАРЫН ӨЙРӘНЕҮ АША БАЛАЛАРҘА ИЗГЕЛЕКЛЕЛЕК СИФАТТАРЫН ТӘРБИӘЛӘҮ: ӘХМӘТ СӨЛӘЙМӘНОВ ТӘРЖЕМӘҺЕ МИҪАЛЫНДА (7 КЛАСТАР ӨСӨН КЛАСТАН ТЫШ ДӘРЕС ӨЛГӨҺӨ)
(Воспитание в детях качества доброты при изучении героев дастана «Книга моего Деда Коркута»: на примере перевода Ахмета Сулейманова (образец внеклассного урока для 7 класса)

***Ишбулдина А.И.*** 12
“УРАЛ БАТЫР” ЭПОСЫНДА ҒАИЛӘ ҠИММӘТТӘРЕ
(Семейные ценности в эпосе «Урал-батыр»)

***Ҡаһарманова С.М.*** 14
БАШҠОРТ ХАЛЫҠ ЭПОСЫ “УРАЛ БАТЫР” ҺӘМ ҺАНДАР (6-СЫ КЛАСТА БАШҠОРТ ТЕЛЕНӘН ДӘРЕС ӨЛГӨҺӨ)
(Башкирский народный эпос «Урал-батыр» и числа (образец урока башкирского языка для 6 класса)

***Кинйәбулатова Ф.Ф.*** 19
“УРАЛ БАТЫР” ЭПОСЫНДА МӘҢГЕЛЕК ТЕМАЛАРҘЫҢ БИРЕЛЕШЕ (9-СЫ КЛАСТА ТУҒАН ӘҘӘБИӘТЕНӘН ДӘРЕС ӨЛГӨҺӨ)
Отражение темы вечности в эпосе «Урал-батыр» (образец урока по родной литературе в 9 классе)

***Мырҙабулатова Г.Ә.*** 26
УҠЫТЫУСЫЛАР ӨСӨН ҠУЛЛАНМА БУЛАРАҠ КҮРЕНЕКЛЕ ҒАЛИМ-ФОЛЬКЛОРСЫ ӘХМӘТ СӨЛӘЙМӘНОВТЫҢ
ЮБИЛЕЙ КИСӘҺЕ

(Юбилейный вечер известного ученого-фольклориста Ахмета Сулейманова как руководство для учителей)

*Сәйәхова С. .Ғ.* 28
ТУҒАН ТЕЛ ҺӘМ ӘҘӘБИӘТ ДӘРЕСТӘРЕНДӘ ЭТНО-МӘҘӘНИТ КОМПЕТЕНЦИЯҺЫН ФОРМАЛАШТЫРЫУ ҺӘМ ҮҪТЕРЕҮ
(Формирование и развитие этнокультурной компетенции на уроках баушкирского языка и литературы)

*Хисаметдинова А.А.* 30
ӘХМӘТ СӨЛӘЙМӘНОВТЫҢ ИЖАД ШИШМӘҺЕ: КЛАСТАН ТЫШ ДӘРЕС ҠУЛЛАНМАҺЫ БУЛАРАҠ
(Творческие истоки Ахмета Сулейманова: как руководство внеклассного урока)

**МУНИЦИПАЛЬ ДӨЙӨМ БЕЛЕМ БИРЕҮ МӘКТӘП УҠЫУСЫЛАРЫ СЫҒЫШТАРЫ**

**ВЫСТУПЛЕНИЯ ОБУЧАЮЩИХСЯ МУНИЦИПАЛЬНЫХ ОБЩЕОБРАЗОВАТЕЛЬНЫХ ШКОЛ**

*Алтынбаева А., Мурзабулатова Г.А.* 36
ӘХМӘТ СӨЛӘЙМӘНОВТЫҢ ХАЛЫҠ ИЖАДЫ БУЙЫНСА ТИКШЕРЕНЕҮҘӘРЕ ҺӘМ ФОЛЬКЛОРҘЫ ҺАҠЛЫУ МӨҺИМЛЕГЕ ХАҠЫНДА
(Об исследованиях Ахмета Сулейманов по народному творчетву и важности сохранения фольклора)

*Әйүпова Л., Истәкова Р.Ә.* 37
ТАҠМАҠ – ҺҮҘ ҺӘМ ЮМОР БАЙЛЫҒЫ (ТАҠМАҠСЫ ШӘМСЕНИСА ӨЛӘСӘЙЕМ)
(В такмаках богатство юмора (такмаксы бабушка Шамсиниса)

*Ишбулатова Л., Баязитова Р.Р.* 41
«УРАЛ БАТЫР» ЭПОСЫНДА САҒЫШТЫРЫУҘАРҘЫҢ БИРЕЛЕШЕ
(Сравнения в эпосе «Урал-батыр»)

*Ишкинина Р., Әхмәтова Н.А.* 44
ДАНЛЫ БӨРЙӘНДЕҢ ДАНЛЫ УЛЫ
(Славный сын славной земли бурзянской)

*Мирасов Л.А., Хисаметдинова Ә.Ә* 49
ӘХМӘТ СӨЛӘЙМӘНОВ ХЕҘМӘТЕНДӘ КӨЛДӨРӨКТӘРҘЕҢ ҮҘЕНСӘЛЕГЕ
(Особенности небылиц в трудах Ахмета Сулейманова)

*Мостафин З., Гәбделхаева З.Г.* 52
УЙЫНДАРҘА – ТОРМОШ БАШЫ (БАЛАЛАР ФОЛЬКЛОРЫ)
(В играх – начало жизни (Детский фольклор)

*Сәғитов Ә., Яхина Л.Ф.* 56
**ӘХМӘТ СӘСӘН ЗАТЫНА ТОҒРОЛОҠ: ФОЛЬКЛОРҘЫ ӨЙРӘНЕҮҘӘ МИНЕҢ ҒАИЛӘМДЕҢ ӨЛӨШӨ**
(Преданность роду Ахмет-сэсэна: вклад моей семьи в изучение фольклора)

*Сәғитова Г., Сәғитова Р.Г.* 58
**«УРАЛ БАТЫР» ЭПОСЫНДА БАТЫР ОБРАЗЫ**
(Образ батыра в эпосе «Урал-батыр»)

*Сәйетбатталов З., Ишбулатова М.Ш.* 60
ХАЛҠЫБЫҘ АҠЫЛЫ – “УРАЛ БАТЫР” ЭПОСЫНДА: ЭСӘР ҺЫУ – МӘҢГЕЛЕК ЙӘШӘҮ СИМВОЛЫ
(Народная мудрость в эпосе “Урал-батыр”: питьевая вода – символ вечности )

*Солтанова З., Кинйәбулатова Ф.Ф.* 63
“УРАЛ БАТЫР” ЭПОСЫНДА ҒАИЛӘ ПРОБЛЕМАҺЫ
(Проблема семьи в эпосе “Урал-батыр”)

*Усманова Ә., Үтәбаева А.Р.* 64
СӨЛӘЙМӘНОВТАР ҒАИЛӘҺЕ ҠУЛЛАНҒАН КӨНКҮРЕШ ӘЙБЕРҘӘР ҺӘМ МОНАЯТТАР
(Предметы быта и утварь семьи Сулеймановых)

*Үтәбаева Л., Ҡаһарманова С.М.* 67
“УРАЛ-БАТЫР” ЭПОСЫНДА ТӘБИҒӘТТЕ ҺАҠЛАУ ТЕМАҺЫ
(Тема охраны природы в эпосе «Урал-батыр»)

*Үтәбаева Н., Сәйфитдинова Л.Ғ.,* 68
«УЙЫН ҒЫНА ТҮГЕЛ БИТ УЛ...»
(«Это ведь не только игра…»)

*Хәлиуллина А., Үтәбаева А.Р.* 74
ӘХМӘТ СӨЛӘЙМӘНОВ ҺӘМ УНЫҢ КЕСЕ ВАТАНЫ
(Ахмет Сулейманов и его малая родина)

*Язаголова З., Язаголова М.Т.* 76
ӘХМӘТ СӨЛӘЙМӘНОВТЫҢ БАШҠОРТ БАЛАЛАР УЙЫН ФОЛЬКЛОРЫНА ИНДЕРГӘН ӨЛӨШӨ
(Вклад Ахмета Сулейманова в башкирский детский игровой фольклор)
*Йәрмөхәмәтова Г., Мырҙабулатова Г.Ә.* 81
«УРАЛ БАТЫР» ЭПОСЫНДА ТӘРБИӘ НИГЕҘҘӘРЕ
(Основы воспитания в эпосе «Урал-батыр»)

**ФӘННИ СМЕНА.**
**БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫ ЮҒАРЫ УҠЫУ ЙОРТТАРЫ СТУДЕНТТАРЫ ТИКШЕРЕНЕҮҘӘРЕНДӘ ФОЛЬКЛОРҘЫ ӨЙРӘНЕҮ**

**НАУЧНАЯ СМЕНА.**
**ИЗУЧЕНИЕ ФОЛЬКЛОРА В ИССЛЕДОВАНИЯХ СТУДЕНТОВ ВУЗОВ РЕСПУБЛИКИ БАШКОРТОСТАН**

*Абдрахманова З.Р.* 84
ПОЛИЛИНГВАЛЬ БЕЛЕМ БИРЕҮ ОЙОШМАЛАРЫНДА ФРАЗЕОЛОГИЯНЫ ӨЙРӘНЕҮГӘ МЕТОДИК ТӘҠДИМДӘР
(Методические рекомендации для полилингвальных образовательных организаций)

*Абдулова Л.А.* 86

КОСМОГОНИЧЕСКИЕ ВОЗЗРЕНИЯ ДРЕВНИХ БАШКИР В ЭПОСЕ «АКБУЗАТ»

*Абдыкаимов З.* 89
НАРОДНЫЕ ИГРЫ В ЭПОСЕ «МАНАС»

*Байгускаров Б.З.* 91
АЛТАЙ ЭПОСЫ “КАЙ” ҺӘМ БАШҠОРТ ЭПОСЫ “УРАЛ БАТЫР”
(Алтайский эпос “Кай” и башкирский эпос “Урал-батыр”)

*Вәлиева Э.Р.* 93
ТАҢСУЛПАН ҒАРИПОВАНЫҢ “БӨЙРӘКӘЙ” РОМАНЫНДАҒЫ ГЕРОЙҘАРҘА ҠИӘФӘТТЕНӘ ХАС БИЛДӘЛӘРЕН БЕЛДЕРГӘН СИФАТТАРҘЫҢ ҠУЛЛАНЫЛЫШЫ
(Использование прилагательных, обозначающих характерные черты лица героев романа Тансулпан Гариповой “Буренушка”)

*Гәрәева Р.А.* 95
«АЛПАМЫША БАТЫР» ӘКИӘТЕН КВЕСТ-ТЕХНОЛОГИЯҺЫ БУЙЫНСА ӨЙРӘНЕҮ
(Изучение сказки «Алпамыша-батыр» по квест-технологии)

*Дуйшебаева А.* 97
СОПОСТАВИТЕЛЬНЫЙ АНАЛИЗ ФОНЕТИЧЕСКОЙ СИСТЕМЫ КЫРГЫЗСКОГО И БАШКИРСКОГО ЯЗЫКОВ: ГЛАСНЫЕ И СОГЛАСНЫЕ ЗВУКИ

*Ҡотлобаева А.Р.* 100
ШӘМСЕТДИН ЗӘКИ ИЖАДЫНЫҢ БӨГӨНГӨ КӨНДӘГЕ АКТУАЛЛЕГЕ
(Актуальность творчества Шамситдина Заки сегодня)

*Латыпова А.М.* 103
ИСТОРИЯ СОЗДАНИЯ ТАНЦА «ТАРХАНЫ»

*Назаркулов Т.Т.* 106
СРАВНИТЕЛЬНАЯ ГРАММАТИКА БАШКИРСКОГО И КЫРГЫЗСКОГО ЯЗЫКОВ: ГЛАГОЛЫ ИЗЪЯВИТЕЛЬНОГО НАКЛОНЕНИЯ

*Нурисламов И.М.* 108
ОБРАЗ МАТРОСОВА В БАШКИРСКОЙ ЛИТЕРАТУРЕ

*Нурдәүләтова А.Ә., Сәмерханова Г.Х.* 111
ХӘҘЕРГЕ БАШҠОРТ ШИҒРИӘТЕНДӘ ИНВЕРСИЯ ҺӘМ УНЫҢ ХУДОЖЕСТВОЛЫ МӨМКИНЛЕКТӘРЕ
(Инверсия и ее художественные возможности в современной башкирской поэзии)

*Сафина Я.И.* 113
ӘКИӘТТӘРҘЕҢ БАШЛАНҒЫС КЛАСС БАЛАЛАРЫНА ЙОҒОНТОҺО
(Влияние сказок на детей начальных классов)

*Сафиуллина Л.И.* 118
БАШҠОРТ ӘҘӘБИӘТЕ ДӘРЕСТӘРЕНДӘ Ә.ТАҺИРОВАНЫҢ СОНЕТТАРЫН

ӨЙРӘНЕҮ
(Изучение сонетов А.Тагировой на уроке башкирской литературы)

***Сийдалина К.С.*** 121
ВЛАДЕНИЕ ЯЗЫКОМ У КАЗАХОВ ОРЕНБУРГСКОЙ ОБЛАСТИ

***Өмөтҡужина Ә.Р.*** 124
СӘСӘНИӘ ИЛСИӘ ҠАСИМОВА-ЯҢЫБАЕВА ИЖАДЫ
(Творчество сэсэнии Ильсии Касимовой-Яныбаевой)

***Фазылова Р.Р.*** 127
З. БИИШЕВА ИЖАДЫНДА СИНОНИМДАР
(Синонимы в творчестве З. Биишевой)

***Фәхриева Ә.Р.*** 130
Д. БҮЛӘКОВТЫҢ “ТЫҠРЫҠ БАШЫ – БЕҘҘЕҢ БИЛӘМӘ” ПОВЕСЫНДА ДУҪЛЫҠ ТЕМАҺЫ
(Тема дружбы в повести Д. Булякова «Начало переулка – наша территория»)

***Хазиева Г.З.*** 132
УҠЫУСЫЛАРҘА ЭКОЛОГИК КОМПЕТЕНЦИЯЛАРҘЫ ФОРМАЛАШТЫРЫУҘА НОҒМАН МУСИН ӘҪӘРҘӘРЕ
(Роль произведений нугман мусина в формировании экологических компетенций у обучающихся)

***Халикова А.Н.*** 135
САЛАУАТ РАЙОНЫ ЛАҒЫР АУЫЛЫНЫҢ ТОПОНИМИКАҺЫ
(Топонимика деревни Лагерово Салаватского района)

***Хәсәнова Э.Р.*** 137
ТАҢСУЛПАН ҒАРИПОВАНЫҢ “БӨЙРӘКӘЙ” РОМАНЫНДА ХИС-ТОЙҒО ҠЫЛЫМДАРЫНЫҢ МОРФОЛОГИК ҮҘЕНСӘЛЕКТӘРЕ
(Морфологические особенности глаголов чувств в романе Т. Гариповой «Буренушка»)

*Научное издание*

# ФОЛЬКЛОР И ФОЛЬКЛОРИСТИКА XXI В.: АКТУАЛЬНЫЕ НАПРАВЛЕНИЯ И ПЕРСПЕКТИВЫ ИССЛЕДОВАТЕЛЬСКИХ ПРАКТИК

**Материалы III Международной научно-практической конференции, посвященной 85-летию профессора А.М. Сулейманова**

(8 июня 2024 г., Уфа)

**Часть 2**

Подписано в печать 11.08.2024
Формат 60Х84/16. Компьютерный набор. Гарнитура Times New Roman.
Усл. печ. л. – 9,2 Уч.-изд.л. – 9,0
Электронное издание Заказ № 80